# ТЫЛСЫМЛЫ БАШҠОРТ ТЕЛЕ

Урта дөйөм белем биреү ойошмаларында башҡорт телен өйрәнеү буйынса методик эшкәртмәләр

Ишембай – 2021

УДК
ББК
С

**Тылсымлы башҡорт теле:** урта дөйөм белем биреү ойошмаларында эшләгән башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының башҡорт телен туған тел булараҡ өйрәтеү буйынса методик эшкәртмәләре йыйынтығы – Өфө, «Самрау» нәшриәте, 2021. – 192 бит.

С

Был йыйынтыҡҡа Башҡортостан Республикаһы Башлығының дәүләт телдәрен һәм Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәрен һаҡлауға һәм үҫтереүгә йүнәлтелгән гранты сиктәрендә Башҡортостан Республикаһының Мәғариф һәм фән министрлығы, Башҡортостан Республикаһының башҡорт, рус (туған) һәм башҡа туған телдәр һәм әҙәбиәте уҡытыусылары Ассоциацияһы, Башҡортостан Республикаһының мәғарифты үҫтереү институты, Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды, «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналы менән берлектә үткәрелгән «Педагогик оҫталыҡ мәктәбе» конкурсында ҡатнашҡан урта дөйөм белем белем биреү учреждениелары башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының алдынғы методик эшкәртмәләре индерелде.

УДК
ББК

***Абдуллина Айгөл Халит ҡыҙы,***
*Учалы районы Сәфәр урта мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы*

# Туған телде һайлау осоронда башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡыуға ылыҡтырыу алымдары

### Инеш һүҙ

21 быуат башы афәте – уҡыусыларҙың ата-әсәләре, тиҫтерҙәре менән рус телендә аралашыуы милли үҙаң, рух, мәҙәниәт, тарих кеүек бөйөк төшөнсәләрҙең төҫһеҙләнеүенә килтергәйне. Өҫтәүенә, туған телде һайлау сәйәсәте башланыуы беҙҙе, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларын, уйланырға мәжбүр итте. Замана балаларын телде өйрәнеүгә нисек ҡыҙыҡһыныу уятырға? Уҡыусылар ғына түгел, уларҙың ата-әсәләренә лә туған башҡорт телебеҙҙең бала тәрбиәләүҙә, рух ныҡлығын үҫтереүҙә төп роль уйнауын нисек еткерергә?

### Актуаллек

Бөгөнгө көндә актуаль булған ошо һорауҙарға яуап эҙләү һәм үҙ тәжрибәмдән отошло алымдар тәҡдим итеү маҡсаты менән, педагогик оҫталыҡ темаһын «Туған телде һайлау осоронда башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡыуға ылыҡтырыу алымдары» тип атаным.

Ҡыуанысҡа ҡаршы, һуңғы бер нисә йылда йәмғиәт һәм етәкселәр яғынан башҡорт теленә ҡараш күпкә яҡшырҙы:

1) Милләтебеҙҙе һаҡлап ҡалыу, артабан үҫтереү буйынса мөһим ҡарарҙар ҡабул ителде,

2) Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының съезы үткәрелде,

3) Бөтә Донъя Ҡоролтайы йыйылды;

4) Донъя фольклориадаһы үткәреү планлаштырылды,

5) 2020 йыл – Башҡорт теле йылы итеп иғлан ителде,

6) мәктәптәр полилингваль йүнәлеш алды.

Был оло эштәр яңы өмөттәр генә уятып ҡалмай, беҙгә, киләсәк быуынды тәрбиәләүсе башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларына, яңы бурыстар ҙа өҫтәй.

### Бурыстар

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһының төп бурысы – замана уҡыусыларын башҡортса дөрөҫ һөйләшергә, уҡырға һәм яҙырға, фекерләргә өйрәтеү менән бергә, уларҙа әҙәп-әхлаҡ, милли рух, милли үҙаң, ҡатмарлы тормош шарттарында юғалып ҡалмай йәмғиәттә үҙ урынын таба белгән конкурентлы шәхес тәрбиәләү.

### Маҡсат

Шулай итеп, минең маҡсатым – полилингваль уҡытыу шарттарында башҡорт теле һәм әҙәбиәте, кластан тыш дәрестәрендә уҡыусыларҙы ылыҡтырырҙай отошло традицион һәм заманса технологияларҙы практикала ҡулланып эшләү.

### Көтөлгән һөҙөмтәләр

Уҡыу-уҡытыу процесында дәрестә һәм кластан тыш сараларҙа уңышлы традицион һәм заманса технологияларҙы ҡулланып эшләгәндә уҡыусыларҙа үҙ аллы логик фекерләй белеү киңәйер, телмәр оҫталығы асылыр, белем алыуға ынтылыш тыуыр, уҡыу сифаты күтәрелер, тип уйлайым.

### Төп өлөш

Проблемалы уҡытыу технологиялары.

Төрлө алымдар ҡулланғанда Федераль дәүләт белем биреү стандарттарын, башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә уның талаптарының үтәлешен дә күҙ уңынан ситкә ебәрергә ярамай. Уҡытыусы йүнәлеше менән уҡыусы үҙе индәйҙер асыштар илтергә тейеш. Был йәһәттән тел һәм әҙәбиәт дәрестәрендә «кейс» технологияһын әүҙем ҡулланам.

«Кейс» һүҙенең мәғәнәһен тулыраҡ аңлар өсөн, һүҙлеккә мөрәжәғәт итәйек: «кейс» – инглиз теленән ингән һүҙ, һәм ул ике мәғәнә йөрөтә. Беренсеһе: Эш ҡағыҙҙар һалыу өсөн ҙур булмаған



сумаҙан. Икенсеһе: Кейс – «казус», тормошта булған осраҡ, хәл; теорияны практика менән бәйләү. Үҙеңдең тәжрибәңдә осраған проблеманы. ситуацияны өйрәнеү, тикшереү һәм хәл итеү юлдарын тәҡдим итеү.

Кейс-методҡа 1870 йылдарҙа Гарвард хоҡуҡ мәктәбе нигеҙ һалған. Ә бизнес өлкәһендә ул 1920 йылдарҙа нығынып киткән. Ғалимдар төптән тикшереү эше алып барған, фәнни китаптар, дәреслектәр, кейс тупламалары баҫып сығарған һәм семинарҙар үткәргән.

Иң күп кейсты Гарвард профессоры Крис Кристенсен яҙған. Уның эше 100-ҙән ашҡан, һәм «Кейс методын өйрәтеүселәрҙең чемпионы» тип һанала. Күләме буйынса иң ҙур кейс та Гарвард мәктәбендә – ул яҙыу, һүрәт һәм ҡушымталары менән бергә 35 биткә яҡын.

Бөгөнгө көндә кейс-методы бар өлкәләрҙә лә осрай: экономика, маркетинг, юриспруденция, медицина һ. б. Табиптар кейсты көндәлек ауырыуға диагноз ҡуйған һәм дауалау юлын тәҡдим иткән ваҡытта эшләй. Юрист булған факттарға нигеҙләнеп клиентҡа хәл итеү юлдарын таба. Менеджер бизнес төҙөүҙең барлыҡ этаптарынды ла кейс эшләүгә мөрәжәғәт итә. Тимәк «кейсты» эшләүҙең маҡсаты – ул тәҡдим ителгән хәлде, проблеманы анализлау һәм үтәлеү юлдарын тәҡдим итеү, эҙләп табыу, һығымта яһау.

Сағыштырмаса күптән түгел, үткән быуаттың 90-сы йылдарында, был метод Рәсәйҙә БЕЛЕМ БИРЕҮ өлкәһендә лә, һөҙөмтәле технологияларҙың береһе булып, киң ҡулланылыш тапты.

Кейс метод нимәһе менән ҡулайлы һуң?

- Уҡыусыларҙың әүҙем уҡыу-эҙләнеү эшмәкәрлеге.
- Проблеманы берҙәм хәл итеү мөмкинселеге.
- Үҙ аллы эште йомғаҡлау һәм реаль тормош менән бәйләп фекерләү һәм лидерлыҡ һәләттәрен үҫтереү.
- Әҙер белемгә генә нигеҙләнмәй, үҙ белемеңде үҫтереү өҫтөндә эш алып барыу.

Бында инде «Барлыҡ Германия уҡытыусылары ойошмаһын» етәкләгән, уҡытыусыларҙың уҡытыусы, педагог Адольф Дистервегтың һүҙҙәренә иғтибар итегеҙ! «Насар уҡытыусы әҙер хәҡиҡәт-

те бирә, ә яҡшы уҡытыусы уны эҙләргә өйрәтә», – ти. Кейс методының актуаллеге нәҡ ошо Адольф Дистервегтың афоризмында бирелгән дә инде.

Кейс нимәләрҙән тора? Уның ҡоролошо:

1. Ситуация (проблема, реаль тормоштан бер ваҡиға)
2. Яҙма текстағы һүҙ йәки фразаның мәғәнәһенә төшөнөү өсөн кәрәк булған бер бөтөн өҙөк. Ул ябай текст булыуы ла, хикәйә повесть, роман йә булмаһа бер генә һөйләм дә була ала.
3. Ситуациялағы хәлдең йәки ундағы образдарҙың үҙенсәлеге.
4. Был ситуацияны асыу өсөн деталдәр
5. Кейс менән эшләү өсөн һорауҙар һәм эштәр.
6. Ҡушымталар.

Кейсты индивидуаль һәм төркөм менән дә эшләп була. Ҡыҫҡа һәм оҙон ваҡытта эшләнгән кейстарға ла бүленеш бар.

Мин дә был методты үҙ дәресемдә ҡулланам. Сөнки бөгөнгө әҙәбиәт дәрестәрен биреүҙең иң ҙур проблемаларының береһе, минеңсә, – замана уҡыусылары художестволы китапты ҡулдарына бик һирәк ала. Ә кейс методы бөгөнгө интернет балаларын үҙ аллы белем алырға өндәй, компьютерҙы файҙалы ҡулланып, фекерләү ҡеүәһен үҫтерә, уйланырға мәжбүр итә. Был методты яңы теманы башлау алдынан йәки бүлекте йомғаҡлау ваҡытында ҡулланыу отошлораҡ!

Дәрестә нисек ҡулланыуым тураһында һөйләп үтәйем:

Миҫал өсөн кейстар:

1. Мостай Кәримдең «Айгөл иле» әҫәрендә Айгөлдөң ҡарары дөрөҫмө?
2. Мостай Кәримдең «Ярлыҡау» повесындағы Любомир Зух яҙмышы бөгөнгө ҡараш менән нисек хәл ителер ине?
3. Мостай Кәримдең «Ярлыҡау» повесында «фонарь» образы артыҡмы?
4. Хәйҙәр Тапаҡовтың «Бибинур «улуәсәй» хикәйәһен уҡығандан һуң уйланыуҙар: ауылда йәшәүе яҡшыраҡмы, әллә ҡалаламы?
5. Бөгөнгө көндә йәшәүҙең төп ҡиммәттәре нимәлә? Ғәлимов Сәләмдең «Бала» поэмаһындағы Сәйҙел һәм Әрштттең ҡарашы актуалме?



6. Тәскирә Даянованың «Ышан, урман» повесында Урман ышандымы?
7. Мостай Кәримдең «Өс таған» повесының «Бөркөтлө» бүлеге ауылдың күркәмлеген тасуирлауҙан башлана. Килгән ҡунаҡтарға үҙ ауылығыҙ буйлап виртуаль экскурсия яһарға кәрәк.
8. Башҡорт әҙәбиәтендә ат образы ингән әҫәрҙәр. (Фәнни-эҙләнеү)
9. Мостай Кәримдең «Беҙҙең өйҙөң йәме» һәм Айгиз Баймөхәмәтовтың «Ҡалдырма, әсәй!» повестарында ниндәй уртаҡлыҡ һәм ҡапма-ҡаршылыҡ бар?
10. Талха Ғиниәтуллиндың «Миҙал» хикәйәһенең идеяһын билдәләүҙә художестволы деталдәрҙең роле» һ. б

1-се кейс төҙөлөшө: Хәйҙәр Тапаҡовтың «Бибинур улуәсәй» исемле хикәйәһен уҡығандан һуң ошо кейсты хәл итергә кәрәк. «Ни өсөн күптәр ҡалала йәшәүҙе өҫтөн күрә?» Төркөмдәргә бүленеп эшләү.

1. Хикәйә эстәлеге.
2. Автор тураһында мәғлүмәт.
3. Интернет статистикаһы. Урбанизация күренеше.
4. Беҙ йәшәгән ауылдың инфраструктураһы (йәшәү шарты)

Кейс методы әҫәргә анализ эшләгәндә лә ҡулайлы.

2-се кейс төҙөлөшө: Талха Ғиниәтуллиндың «Миҙал» хикәйәһенең идеяһын билдәләүҙә художестволы деталдәрҙең роле».

1. Хикәйә һалына.
2. Авторҙың биографияһы һалына.
3. Бөгөнгө ветерандарҙың хәле. Статистика (ауылдан, райондан, Башҡортостандан нисә кеше ҡатнашҡан, күпмеһе ҡайтҡан)
4. Ауылыбыҙҙан сыҡҡан герой тураһында мәғлүмәт һалына.
5. Ниндәй миҙалдар бар?
6. Мәктәп музейы эше тураһында мәғлүмәт
7. Художестволы деталдәр. Тормош-көнкүреш деталдәр: торлаҡ, пейзаж, портрет, йыһазландырыу, аш-һыу, йола, ғәҙәт һ. б.
8. Һорауҙар:

– Вәлиәхмәт ҡарттың һуғышта яраланып ҡайтҡандан һуң ауылдағы тормошо нисек? (Йыһазландырыу, торлаҡ хәле)

– Вәлиәхмәт ҡарт Еңеү байрамы алдынан нимә тураһында хыяллана? (Вәлиәхмәттең портреты)

– Үлгәндән һуң Вәлиәхмәт ҡарт миҙалын ҡулына ҡыҫып тотҡан эпизод нимә тураһында һөйләй?

– Мәктәп, уҡыусылар, ауыл советы ветерандарға ниндәй ярҙам күрһәтә?

– Һеҙҙең ғаиләгеҙҙән (шәжәрәгеҙҙә) һуғышта ҡатнашыусылар бармы?

– Әҫәр ни өсөн «Миҙал» тип атала? (Яҡынса яуаптар: миҙал һорау – ветерандарға йылы һүҙ етмәүен символлаштыра, емерек өйҙә тороуы – йәмғиәттең рухи ярлылығы, кешеләрҙең миһырбанлығы, иғтибар, ихтирам наҡыҫлылығы (недостаточность), кешелек факторының юғалыуы, түрәләрҙең үҙ мәнфәғәтен генә ҡайғыртыуы.)

Күҙалланған һығымта: ғөмүмән әйткәндә, Талха Ғиниәтуллин ҡырыҫ реалистик стилдә эшләүсе әҙип. Художество деталдәр ҙә ошо ысынбарлыҡты күрһәтеү өсөн алынған.

Юғарыла килтерелгән миҫалдарға таянып, кейс технологияһының проблемалы уҡытыуҙа ҙур роль уйнауын күрһәтеп киттем.

Заманса технологиялар ҡулланыу.

2.1. Ниндәйҙер уңыштарға өлгәшеү алдынан, иң алда предметҡа ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу зарур. Был эште, ошо фәһемле хикмәт нигеҙендә ҡорорға кәрәктер: «Бала ваннала йыуыныырға теләмәй. Әсә кеше уны ирекһеҙләп тартҡыламай. «Әйҙә, балам, уйынсыҡтарыңды йыуындырайыҡ», – ти. Ындай маҡсат балаға аңлайышлы һәм ылыҡтырғыс. Һәм бына ул рәхәтләнеп уйынсыҡ балыҡтары менән бергәләп сәпелдәй, йөҙә. « Аҡыллы әсә педагогик алым ҡулланды!

Ә беҙ, уҡытыусылар, замана балаларын нимә менән ҡыҙыҡһындыра алабыҙ? Эйе, яуапты оҙаҡ эҙләргә лә кәрәкмәй, улар – интернет, смартфон, компьютер. Тимәк, уҡытыусылар уларҙы педагогик маҡсаттарға ирешеү өсөн төп ҡорал итеп алырға тейеш!

Артабан һүҙ заманса технологиялар: мобиль ҡушымталар, классдоджо, пликерс программалары тураһында барасаҡ.



Ә хәҙер уларҙы нисек ҡулланыуым тураһында һөйләп китәм.

Смартфондар өсөн өр-яңы ҡушымталар – уҡыусыларҙың предметты өйрәнеүгә мотивация тыуҙырырҙай иң ҡулайлы ысулдарының береһе, тип һанайым. Уларҙы плеймаркет аша телефонға һаҡлап ҡуйырға мөмкин.

– «IQБалаБаш» бәләкәстәргә тирә-яҡ мөхитте уйын формаһында өйрәнергә ярҙам итә. Шулай уҡ ҡушымта ярҙамында башҡортса һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйтергә өйрәнеү мөмкинлеге лә бар. «IQБалаБаш» сағыу һүрәттәр, анимациялар менән биҙәлгән һәм логиканы, хәтерҙе, фекерләү ҡеүәһен үҫтереүгә йүнәлтелгән уйынсыҡтар менән байытылған. Былар барыһы ла тел өйрәнеүҙе мауыҡтырғыс итеп ойоштороуға булышлыҡ итә.

– Башҡорт телен өйрәнергә теләүселәр өсөн булдырылған тағы бер уңайлы ҡушымта «Inofon BASH» («Инофон баш») тип атала. Унда бирелгән һүҙҙәр тематик төркөмдәргә бүленгән, сюжетлы иллюстрациялар, һүҙҙең әйтелеше, яҙылышы һәм һүрәте бирелгән. Ҡушымта һүҙҙәрҙе тиҙ иҫтә ҡалдырырға ярҙам итә, сөнки һәр һүҙ ҡулланылыш даирәһенә, көнкүрештә ҡулланылған осраҡҡа ярашлы һүрәттәр, сюжеттар менән бергә тәҡдим ителә.

– Хәтерҙе нығытыуға, телмәр оҫталығын үҫтереүгә йүнәлтелгән «Әлләсе» мобиль ҡушымтаһы ла халыҡ араһында популярлыҡ яулай бара. Интерфейста ун меңгә яҡын һүҙ бар. Был программаны андроид нигеҙендә ҡоролған телефондарға күсереп була. Уйындың талаптары һәм ҡағиҙәләре ошо уҡ исем менән «Тамыр» телеканалында донъя күргән тапшырыуҙы ҡараусыларға яҡшы таныш.

Әлегә «Әлләсе» мобиль ҡушымтаһын ун меңгә яҡын кеше ҡуллана. Авторҙар билдәләүенсә, ул башҡорт телен яңы ғына өйрәнә башлаусылар өсөн дә, яҡшы белеүселәр өсөн дә берҙәй ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс. Яңы уйын балаларға, үҫмерҙәргә генә түгел, өлкәндәргә лә хуш килгән.

Әлбиттә, был ҡушымталарҙы дәрестә ҡулланыуҙың кире яғы ла бар: бар уҡыусыларҙа ла телефон, интернет мөмкинлектәре булмауы мөмкин һәм дәрестә һәр баланың телефон тотоп ултырыуы ҙа бик килешеп етмәй.

Ҡушымталар телефондар өсөн булһа ла, мин уларҙы үҙемдең телефоным һәм проектор аша бар класҡа ҡулланам. Бер нисә аҙым менән телефонды компьютерға, унан экранға сығарып була.

Ноутбукты телефон менән тоташтырыу алгоритмы:

Компьютерҙың аҫҡы уң яҡ мөйөшөндәге «уведомление» төймәһенә баҫабыҙ.

Унан «Подключение» тигәнде табабыҙ.

Артабан «Проецирование на этот компьтер» тигән яҙыу аша, ошо экранды асабыҙ.

Унда «Доступно везде», «При каждом подключении», «Никогда» тигән мөмкинлектәрҙе һайлап ҡуйып сығабыҙ.

Был биттә шулай уҡ компьютерҙың исеме лә күренә (инглиз хәрефтәре)

Бер шарт мөһим: телефон да, компьютер ҙа бер интернет аша бәйләнергә тейеш!

Телефонда артабанғы алгоритм менән компьютерға ҡушылабыҙ: «Настройки» – «Подключение устройства» – «Беспроводная проекция» – һәм компьютерҙы эҙләү башланасаҡ. Компьютерҙың исеме телефон экранына сыға. Бына бәйләнеш булды!!! Инде алдан һаҡланған ҡушымталарға инергә була.

2.2. Тағы ла балаларҙы дәрескә күңел менән индереп ебәрергә «Классдоджо» исемле программа бар. Был проектҡа 2011 йылда экономика уҡытыусыһы Сэм Чодхари һәм уйындар эшкәртеүсе Лайам Дон нигеҙ һалған. Классдоджо программаһы балаларға баһа ҡуйғанда ҙур ярҙамсы булып тора. Был 5-7 кластар өсөн бигерәк тә ҡыҙыҡлы.

Теркәлеү үткәндән һуң класҡа уҡыусыларҙың исемлеген тултырып алаһың. Эш төрҙәрен яҙып сығаһың, һәм һәр балаға балдар ҡуйып бараһың. Дәрестең аҙағына бер бала 20-гә яҡын балл йыйып алыуы мөмкин. Тимәк, яҡынса баһалау критерийҙары булырға тейеш. Мәҫәлән 20 бал йыйһа – «5» һ. б

Шуныһы: бындай ыңғай баһалар ғына түгел, кире балдар ҙа бар, был мөмкинлек баланы дәрестә тәртипле ултырырға, тыңларға, әүҙем ҡатнашырға мәжбүр итә.



2.3. Һәм шулай отошло программаларҙың береһе – пликерс. Уны Калифорниялағы математика уҡытыусыһы Нолан Эми төҙөгән. Был программа дәрестең аҙағында алған белемдәрҙе тикшереү, баһалау өсөн уңайлы.

Шулай уҡ был сайтҡа компьютер һәм телефонда теркәлергә кәрәк. Бында класс исемлеген тултыраһың, һәм тестарҙы яҙып сығаһың артабан тест битен китапханан табып эшләтеүгә күсәһең. КЬЮАРКОД ярҙамына яуаптарын күрһәтәләр. Кем дөрөҫ яуап бирмәгәнен шунда уҡ күреп була.

Был программа уҡытыусыны күп һанлы дәфтәр тикшереүҙән бушата, яуап һөҙөмтәләрен шунда уҡ һанап биреүе ваҡыт сарыф итмәй.

Заманыбыҙҙың ҙур ҡаҙанышы булған заманса мобиль технологиялар ҙа, программалар ҙа уҡыу сифатын арттыра, үҙ аллы эшләү һәләтен үҫтерә, туған телде өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныуҙы тыуҙыра һәм ул ыңғай һөҙөмтәләр бирә.

Кластан тыш эш – уҡыусыларҙың телмәрен үҫтереүҙә алыштырғыһыҙ сара.

Балаларҙың телмәрен һәм фекерләү ҡеүәһен үҫтереүҙә, бигерәк тә интервью алыуҙар, минеңсә, ыңғай һөҙөмтәләргә килтерә. Балалар бер репортажды төҙөү өҫтөндә эшләгәндә төрлө этаптарын үтеп проект эшен бер фильмға туплайҙар. Билдәле бер темаға һорауҙар әҙерләйҙәр, тәнәфестәрҙә, төштән һуң яуаптар яҙҙыралар, монтаж эшенән һуң, бер ергә фильм итеп туплайҙар.

Интервьюны үҙ эшемдә һөҙөмтәле ҡуллана башлағанда, әле смартфондар юҡ ине, уҡыусылар менән фотоаппарат һәм компьютерҙа эш башлағайныҡ. Фильмды киләһе программалар менән төҙөргә була: Adobe Premiere, Adobe After Effects, VEGAS Movie Studio, Movie Maker (минең өсөн ҡулайлы программа), movavi, YouCut (телефондан эшләү мөмкинлеге). Видеоматериалды эшкәртеү һәм төҙөү өсөн программалар: Windows Move Maker, Pinnacle Studio, Adobe Premier Pro, Adobe After Effect Pro, Boris RED 3D, Maya. Бөгөнгө көндә фильм, презентациялар төҙөү даирәһе тағы ла киңәйҙе.

Дистанцион уҡыу шарттарында шиғырҙар ятлап, әкиәт һөйләп яҙҙырып ебәреү, презентациялар төҙөү уҡыусыларҙы дәрес

эшләүгә, кластан тыш сараларҙа әүҙем ҡатнашырға булышлыҡ итте. Уҡыусыларҙың йыл һайын төрлө кимәлдәге олимпиадаларҙа, иншалар, телмәр оҫталығы конкурстарында еңеүҙәре – ыңғай һөҙөмтәләр. Һәм иң мөһиме: уҡыусылар тулыһынса туған тел буларак башҡорт телен һайланылар.

### Йомғаҡлау

Тел – халыҡтың булмышы, мәҙәниәтенең нигеҙе, әммә уны кешеләр үҙҙәре теләп өйрәнерлек итеп уҡытырға кәрәк. Башҡортса һөйләшеү модала, уҡытыу методикалары ҡыҙыҡлы булһын өсөн, мин үҙ белемемде арттырыу өҫтөндә туҡтауһыҙ эшләйем һәм бала күңелен асырҙай алымдар һәм технологиялар эҙләйем.



***Байышева Айгөл Ғалимйән ҡыҙы,***
*Дыуан районы Мәсәғүт ауылының муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы*

## Туған телде «Карточкалар ярҙамында уҡытыу» методикаһына таянып өйрәтеү

Бөгөнгө көндә рус мөхитендә үҫкән балаға туған телен өйрәтеүе йылдан-йыл ауырлаша бара. Башҡорт телен өйрәнеүгә баланың ҡыҙыҡһыныуы кәмемәһен өсөн, уҡытыусы яңынан-яңы эффектив алымдар эҙләргә мәжбүр.

**Актуаллек.** Ни өсөн элекке уҡытыу алымдары заман балаларына тап килмәй һуң? Беренсенән, хәҙер балалар пассив, улар 1 йәшенән телефон тотоп үҫкән. Уларға уҡытыусының һөйләп аңлатыуы ғына етмәй. Уларҙы эшмәкәрлеккә мәжбүр итеүсе алымдар кәрәк. Икенсенән, уҡыусылар араһында өйҙә уҡырға өйрәнеп килеп, к – и – т –а – п, тип хәрефләп уҡып ултырыусылар; йә булмаһа та – у, ҡа-у-ын, тип; йә, уҡый-уҡый, ә нимә уҡығанын аңламаған, һүҙҙең мәғәнәһе тураһында уйлап та бирмәгән; йә өндәрҙе ишетеү һәләте үҫешмәй диктант ваҡытында теләһә ниндәй хәреф яҙып ултырыусы; йә һүҙҙәрҙе иҫендә ҡалдыра алмай интеккән балалар күбәйҙе. Ошо барыһы өсөн дә актуаль булған мәсьәләрҙе карточкалар ярҙамында хәл итергә мөмкин. Был методика «Карточкалар ярҙамында уҡытыу» тип атала. Ул фән кандидаты, китаптар авторы, үҙ методикаһын булдырып эшләп йөрөгән Юлия Пчелинцеваның «Словолодочники» һәм Америка ғалимы, врач-физиотерапевт Глен Домендың «Тылсымлы карточкалар» методикаһына таянып эшләнелде.

Методиканың ***маҡсаты*** карточкалар ярҙамында:

- балаларҙың һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе, һөйләмдәрҙе, мәғлүмәтте дөрөҫ һәм тиҙ арала иҫтә ҡалдырыуына булышлыҡ итеү;

- һүҙлек байлығын, һөйләү һәм яҙыу телмәрен үҫтереү;
- мәғлүмәтте ишетеп кенә түгел, ә күреп тә иҫтә ҡалдырыу;
- телде өйрәнеүҙе еңел һәм ҡыҙыҡлы процесҡа әйләндереү;
- балаларҙы әүҙем эшмәкәрлеккә этәреү;
- телде өйрәнеүгә һөйөү һәм ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу.

Был методика рус мөхитендә тәрбиәләнгән башҡорт балаларына һәм башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеүселәргә тәғәйенләнә. Ул үрҙә әйтелеп үтелгән авторҙарҙың эштәрен ҡулланып ҡарағандан һуң, башҡорт телен уҡытыуға тура килтерелеп төҙөлдө. Уның яңылығы шунда: һүҙҙәр һәм яңы мәғлүмәт карточкалар ярҙамында өйрәнелә һәм был процесс еңел һәм тиҙ рәүештә бара, һәр уҡыусыны эшләргә мәжбүр итә.

Дәрес мауыҡтырғыс уйын формаһында ҡорола. Белем биреү барышы карточкаларҙы ҡыҫҡа ваҡыт эсендә күрһәтеп таныштырыуҙан башлана. Методиканың таяныу ***нигеҙе:***

- баланың мейеһе эшмәкәрлектә үҫешә;
- уңышҡа өлгәшеү өсөн карточкалар менән эш һәр дәрестә бер нисә минут ойошторола;
- мейе эшмәкәрлегенә хәрәкәт ыңғай тәьҫир итә;
- эш кесе йәштән үк (1 класс) башланһа, уны уҡырға этәрергә лә кәрәкмәйәсәк.

Методиканың өйрәтеү ***принциптары:***

- белем алыу ни тиклем иртәрәк башланһа, шул тиклем һөҙөмтәлерәк;
- баланың һәр уңышы өсөн бергә ихлас ҡыуаныу, маҡтау мөһим;
- балаға ышаныуығыҙҙы, уны шәхес булараҡ хөрмәт итеүегеҙҙе күрһәтеү кәрәк;
- белем алыу процессы балала кинәнеү хисе тыуҙырырға тейеш (был күренеш күҙәтелмәһә, эште туҡтатырға һәм методиканы яҡшылап өйрәнергә, йә үҙ уҡыусығыҙға ҡарата үҙгәртергә кәрәк буласаҡ);
- һәр дәрестә яңы белем (яңы карточкалар) менән тулыландырып барырға;
- эште даими, эҙмә-эҙлекле һәм ойошҡан рәүештә алып барылыуы мөһим;



- баланың мәғлүмәтте һүҙҙе нисек иҫендә ҡалдырыуын баһаларға кәрәкмәй (был унда карточкаларҙан ҡурҡыу тойғоһон уятасаҡ);
- балалар мәғлүмәтте иҫтә ҡалдырыуҙарын үҙҙәре тикшереп ҡараһа яҡшыраҡ (үҙконтроль);
- карточкалар уҡытыусы тарафынан алдан эшләнелә һәм айырым һаҡланыла (картотека булдырыу мөһим);
- уҡыусының ҡыҙыҡһыныуы кәмеүен һиҙеү менән, эште туҡтатырға йә эш төрөн алмаштырырға кәрәк.

Глен Домен фекеренсә, физик хәрәкәт баланың интеллектуаль үҫешенә ыңғай тәьҫир итә (https://o-krohe. ru/razvivayushchie-metodiki/glen-doman/). Белем алыу барышында хәрәкәттәр башҡарыу, мәҫәлән, кәрәкле карточканы эҙләү, табыу, күтәреү, әйләндереү, теҙеү һ. б., мейе эшмәкәрлеген әүҙемләштерә. Шулай уҡ эш төрҙәрен төркөмдәрҙә башҡарып, төркөмдәр буйынса хәрәкәт итеү ҙә яҡшы буласаҡ.

Карточкалар аҡ төҫтә. Унда предметтың ысын һүрәте төшөрөлгән һәм аҫтына ҡыҙыл, йә ҡара төҫтәге ҙур хәрефтәр менән һүҙ яҙылған. Бөтә карточкалар ҙа төҫлө принтерҙа эшләнелә. Карточканы үҙләштереүгә 3-5 секунд ваҡыт бүленә. Уҡытыусы дөрөҫ итеп ҡысҡырып уҡып ишеттерә. Уҡыусы уны ишетә, күрә, ҡабатлай һәм иҫендә ҡалдыра. Шулай итеп, мәғлүмәтте тулы көйөнсә иҫтә ҡалдырырға булышлыҡ итә.

Тәүҙә һүрәтле, һуңынан ғына һүрәтһеҙ карточкаларға күсәбеҙ. Һүрәтһеҙ карточкалар балаға таныш ябай һүҙҙәрҙән башланып китә (атай, әсәй, бесәй һ. б.). Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнгәндә ҡулланаһығыҙ икән, көнөнә 10-12 һүҙҙән артмаһын. Юҡһа балалар йонсоп китеүе бар. Икенсе дәрестә был һүҙҙәр ҡабатлана һәм мотлаҡ яңы һүҙҙәр менән тулыландырыла. Башта һүҙҙәр, һуңынан һүҙбәйләнештәргә, хатта ябай ғына һөйләмдәргә лә күсергә мөмкин.

Балаға оҙаҡ итеп нимәләр аңлатып, унан аҡыллы фекер, йә дөрөҫ яуап көтөп булмай. Сөнки бала өсөн мәғлүмәт аныҡ, дөрөҫ һәм аңлайышлы булырға тейеш. Мәҫәлән, бала һеҙҙән: «Нимә була ул милләт? – тип һорай. Һеҙҙең яуаптар:

- «милләт -ул кешеләр»;
- «төрлө ерҙә йәшәгән кешеләр»;
- төрлө милләт кейемендәге һүрәттәр күрһәтеү;
- төрлө милләт кейемендәге һүрәттәр күрһәтеп: «Бына, ҡара, бында төрлө милләт кешеләре. Һәр кешенең үҙ милләте бар. Был рус. Ул: «Здравствуйте»-ти. Был башҡорт. Ул: «Һаумыһығыҙ»-ти.

Һуңғы яуаптан ғына бала тулы мәғлүмәт ала һәм уны ныҡлы хәтерендә ҡалдырасаҡ, сөнки һәр милләттең үҙ кейеме, үҙ теле барлығына үҙе һығымта яһай.

Карочкалар ярҙамында баланың һүҙлек байлығы ғына түгел, ә интеллекты ла үҫешә. Тормошто аңларға өйрәнеү – интеллектты үҫтереүҙең төп маҡсаты. Ғөмүмән, бала киң белемгә эйә булһын өсөн, факттарҙы хәтерҙә ҡалдырыу мөһим. Карточкалар энциклопедик белем бирә һәм бала мәғлүмәтте тиҙ ҡабул итһен өсөн талаптар:

- карточкалағы һүҙ һәм һүрәт аныҡ булһын;
- һәр карточкала бер генә һүрәт;
- һәр һүрәттең аҫтында бер һүҙ йәки һүҙбәйләнеш;
- ҙурлығы буйынса бәләкәй түгел, 25х8, 30х10, 50х15 размерында;
- таҙа һәм аҡ ҡатырға ҡағыҙҙа;
- һүҙҙәр мотлаҡ ҡыҙыл, тик таратма карточкалар ғына ҡара төҫтә;
- һүрәттәр ҡырҡып йәбештерелә йә төҫлө принтерҙа сығарылып алына;

Карточкала һүҙҙәр генә түгел, тәбиғәт күренештәре лә, хатта тарихи ваҡиғалар ҙа булыуы мөмкин (һүрәттә).


ат


Талҡаҫ күле


Бөйөк Ватан һуғышы



Был методика ярҙамында нимәгә өйрәнергә мөмкин:
- уҡырға;
- телде үҙләштерергә;
- донъяны танып белергә;
- әҫәрҙең йөкмәткеһен үҙләштерергә.

Интеллектуаль үҫеш өсөн карточкалар төрлө йүнәлештә булыу мөһим:
- тел (темалар буйынса һүҙҙәр);
- әҙәбиәт (сюжетлы һүрәттең аҫтында һүҙҙәр йә һөйләмдәр яҙылған);
- биология (хайуандар, ҡоштар, балыҡтар, һ. б.)
- кеше (кәүҙә төҙөлөшө, шәхестәр, хәрәкәттәр һ. б.,)
- география (Башҡортостандың матур урындары, ҡалалары һ. б.)
- тарих (программаға индергән тарихи ваҡиғаларҙан күренештәр, мәҫәлән, төньяҡ амурҙары);
- музыка (йырҙарға күренештәр, музыка ҡоралдары, йырсылар)
- сәнғәт (танылған картиналар, бейеүселәр)
- дөйөм белем (тормош-көнкүреш әйберҙәре, байрамдан күренештәр).

Карточкалар баланың йәш үҙенсәлектәренән сығып файҙаланыла.

Тағы ла шуны әйтеп үтергә кәрәк, балаларҙың һүҙлек запасы үҫешен билдәләп барырға кәрәк: йәшел – тулыһынса иҫтә ҡалдырҙылар, һары – бер нисә кеше яңылыша, ҡыҙыл – үҙләштереп бөтмәнеләр, ҡабатларға кәрәк.

| кластар | Аҙыҡ-түлек | Хайуан-дар | Төҫтәр | Һауыт-һаба | Һандар | Кейем-һалым |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 | | | | | | |
| 2 | | | | | | |

Һүҙҙәрҙе өйрәнеүҙе исем һүҙ төркөмөнән башлайбыҙ. Һуңынан ҡылымдарҙы, сифаттарҙы һ. б. өйрәнәбеҙ. Дәрес башында өйрәнгән һүҙҙәрҙе 15-20 минуттан тикшереп ҡарау мотлаҡ, тик бының өсөн баһа ҡуйырға ярамай. Әгәр ҙә ошо ваҡыт эсендә бала оно-

топ өлгөрә икән, тимәк үҫеш әкрен бара, ҡабатларға, йә эш төрөн алыштырырға кәрәк буласаҡ.

«Карточкалар ярҙамында уҡытыу» методикаһы буйынса һүҙҙәрҙе генә түгел, башҡорт телендәге өндәрҙе лә карочкалар менән өйрәнеп була. Ул беҙҙең үҙенсәлекле өндәргә яраҡлаштырылып төҙөлдө.

Методиканың бер нисә алымы менән танышып китәйек.

**1. «Тамсы» (таҡтала яҙылған) алымы.**

1 класта эш программаһы 3 өлөшкә бүленгән:

- Телдән әҙерлек осоро.
- Әлифба осоро.
- Һөйләү һәм яҙма телмәрҙе үҫтереү осоро.

Яңы йылға тиклем һүҙҙәрҙе өндәргә бүлергә, уларҙы дөрөҫ әйтергә өйрәтәбеҙ. Бында өндәрҙе «Тамсы» тамғаһы менән өйрәнәбеҙ. Бер тамсы – 1 өн. Мәҫәлән, уҡытыусы: «Уй, минең усыма тамсы килеп төштө. Бәләкәй генә тамсы. Әәә, ул беҙгә ә өнөн килтергән икән», – ти. Был алым балаларҙа һүҙ нисә өндән тороуын асыҡларға ярҙам итә һәм диктант яҙа башлағанда уларҙың хәрефте төшөрөп ҡалдырыуынан арындырасаҡ.

**2. «Ҙур тамсы» (өн-хәреф) алымы.**

Хәрефтәрҙән һуң ике өндө белдереүсе хәрефтәр менән танышабыҙ. Бер өн – ул 1 тамсы, ә ике өндө белдереүсе я, ю, е-не ике тамсы ҡушылған ҙур тамсы менән билдәләнә.

Бында уҡыусылар тамсылар ярҙамында һүҙҙә нисә өн бар икәнен асыҡларға өйрәнәләр. Һәр уҡыусының алдында тамсылар ята, төркөмләп эшләгәндә төркөмгә таратыла. Бер уҡыусы электрон, бер уҡыусы тимер таҡтала эшләй.

Шулай итеп, бала бәләкәйҙән үк я, ю, е бер тамға икәнен белеп үҫә. Уларҙы «йарҙам итәм», «йурған» тип яңылыш яҙыуҙан ҡурсалай.

Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрҙең дә үҙ тамғаһы бар. Мәҫәлән, Әәә тип әйткәндә ауыҙ асыҡмы? Һуҙынҡы өндө әйткәндә ошолай ауыҙ асыҡ. (асыҡ ауыҙ тамғаһы).



|  |  |  |  |  |
|---|---|---|---|---|
| һуҙынҡы | тартынҡы | яңғырау | һаңғырау | баҫымлы |

Әлбиттә, бәләкәй балаға хәреф үткәндә: «Ә – һуҙынҡы, ҡ – тартынҡы» – тип ҡабатлауға ҡарағанда дөрөҫ тамғаһын күрһәтеп ҡабатлауы нығыраҡ оҡшай. Практика күрһәтеүенсә, улар ошо процесты уйын формаһында күрәләр, күҙҙәре янып китә.

Уҡытыусы:

– Бал ҡорттары нимә тиҙәр? (Ҙҙҙҙ тиҙәр).

– Ҙҙҙҙ тигәндә ауыҙ асыҡмы? (Юҡ, тел ҡамасаулай) Тимәк ул һуҙынҡымы, тартынҡымы? (ябыҡ ауыҙ билдәһе)

– Ә хәҙер ҡолаҡтарҙы яптыҡ, бал ҡорто булып тауыш бирегеҙ, яңғыраймы? Тимәк, был өн яңғыраумы, һаңғыраумы? (ҡыңғырау һүрәтен күрһәтеләә)

– Йылан нисек ыҫылдай? (Ҫҫҫҫ). Һуҙынҡымы, тартынҡымы? (ябыҡ ауыҙ тамғаһы)

– Яңғыраумы, һаңғыраумы? (каска һүрәте)

Шулай итеп балалар өндәрҙе ишетеү һәләтен үҫтерәләр, бәләкәйҙән фонетик анализ эшләргә өйрәнә. Ҙурыраҡ кластарҙа балалар дәфтәрҙә фонетик анализ эшләргә яратмайҙар, шуға уларҙы ла карточка ярҙамында ғына эшләтергә мөмкин. Был эшкә әүҙемлек кенә өҫтәр.

**3. «Ижекле кәмәләр» (Ижек)**

Ижекләп уҡырға өйрәткән китаптар күп. Бала ижекләп уҡырға өйрәнһә, маҡтайбыҙ икән, дөрөҫ түгел. Сөнки ул, тотош һүҙҙе түгел, ә ижекте генә күрә. Уға ошо һүҙҙе бүлеп күрһәткән һыҙыҡтар ҡамасаулай. Тимәк уны уҡырға түгел, әйтергә өйрәтәбеҙ. Уҡырға өйрәнгәндә балаға кәмәлә ултырған һүҙҙәрҙе уҡырға тәҡдим итеlә. Һәр һүҙ айырым карточкала яҙылған. Хәрефтәр икешәр ижекләп кәмәлә урынлашҡан. Иң тәүҙә тартынҡы, һуңынан һуҙынҡы. Бала һүҙҙе бүлмәй уҡырға өйрәнә (һүрәттә).

**к ә з ә**



Шулай итеп улар һүҙҙәр уҡырға өйрәнәләр. Тик һүҙ уҡый алыу менән тотош текст биреп ҡуйыу ҙа баланың уҡырға теләген кәметәсәк. Сөнки артабан һүҙҙең мәғәнәһен аңлау өҫтөндә эшләр кәрәк.

**5. Мәғәнә.**

Һүҙҙәр, әлбиттә, дәреслектә бар, тик шул һүҙҙәрҙе китаптан түгел, ә карточкаға яҙып килтереп уҡытырға мөмкин. Ни өсөнмө? Беренсенән, балалар һәр һүҙҙе айырым ҡабул итә, уның мәғәнәһе тураһында уйлай. Икенсенән бөтә балаларҙы ла уҡырға мәжбүр итә. Китаптан уҡырға ҡушһағыҙ, ҡайһыһы пеналын, ҡайһыһы танауын соҡоп ултырып ҡала. Ә бында уҡымай ҡалһаң, кәрәкле карточканы күтәрә алмайһың.

Әгәр ҙә бала уҡый, ә һеҙ һүҙҙең тәржемәһен әйтеп бараһығыҙ икән, үҙегеҙгә ҡыйыу рәүештә 2 ҡуя алаһығыҙ. Сөнки ул мәғәнәһен аңлағансы уҡырға тейеш. Әгәр «Кәнфит» һүҙен уҡығас, «мин кәнфит яратам», тип ҡысҡырып ебәрә икән, тимәк ул һүҙҙең мәғәнәһен аңларға өйрәнгән. Шул ваҡытта ғына баланы маҡтаһағыҙ, артабан ул һәр ваҡыт һүҙҙе аңларға тырышасаҡ. Белмәһә үҙе һораясаҡ. Уҡыусығыҙ һүҙҙәрҙе уҡып сыҡҡандан һуң «Айгуль Галимьяновна, а что такое ҡолон?» – тип һорай икән, тимәк ул һүҙҙең мәғәнәһе тураһында уйларға өйрәнгән, башҡа һүҙҙәрҙе аңлап уҡыған, бер һүҙҙе генә белмәй, ә иң мөһиме белергә теләй.

Шулай итеп, карточкалар ярҙамында уҡытыу методикаһы ФГОС талаптарына тап килә, мейе эшмәкәрлеген әүҙем эшләргә мәжбүр итә.

Был эштәрҙең һөҙөмтәһендә уҡыусылар тиҙ генә аңлы уҡыуға күсәсәк, фонематик ишетеү һәләттәре үҫеп, матур итеп диктанттар яҙа башлаясаҡтар. Дөрөҫ уҡыу менән бергә аңлап уҡый алыуға күсәсәктәр.



**6. «Тыңлайым, табам, ҡабатлайым» алымы**

Был алым балаларҙың ишетеү, дөрөҫ уҡыу һәләтен үҫтерергә ярҙам итә.

Уҡытыусы: Балалар, дикторҙы тыңлағыҙ, ишеткән һүҙҙең карточкаһын табып күтәрегеҙ, дөрөҫ әйтегеҙ. Май, һөт, икмәк.

**7. «Мин беләм, тиҙ генә яуап бирәм»**

Ул балаларҙың ишеткәндә аңлап ҡабул итеүҙәрен һәм логик фекерләүен үҫтерергә булышлыҡ итә.

Уҡытыусы: Яуап-карточканы табып күтәрегеҙ, ҡысҡырып әйтегеҙ. Әҙерһегеҙме? Тыңлайбыҙ:

Бесәй ярата. (һөт)

Айыу ярата. (бал)

Март, апрель,... (май)

Шулай итеп, бала һөйләмде аңламаһа, яуап-карточканы таба алмаясағын яҡшы аңлай, шуға күрә ул уҡытыусыны, дикторҙы йә булмаһа иптәштәрен тыңларға, ишеткәнде аңларға тырышырға, яуап карточкаларҙың тәржемәһен иҫтә ҡалдырырға мәжбүр. Барыһы ла карточка күтәргәндә, ул ғына күтәрмәй тороп ҡала алмай бит инде (фото № 4).

Һүҙлек запасын булдырғас, был һүҙҙәрҙе тормошта ҡулланырға өйрәнеүгә күсәбеҙ.

**8. «Мин башҡортса һөйләшәм» алымы**



Бала: «Әсәй миңә ..., ..., .... кәрәк.»
Әсәй: «Бына һиңә …, …, ….»

Бында ҡулланылған һүҙҙәрҙе телмәрҙә ҡулланырға өйрәтеү төп маҡсат булып тора. Тик ул балаларға ауырлыҡ һалмай еңел генә рәүештә әңгәмәләшеүҙе күҙ уңында тота. Уларҙың алдында һүрәтле һәм тулыһынса яҙылмаған диалог менән терәк карточка.

Мәҫәлән, уҡытыусы: «Балалар, күҙ алдығыҙға килтере-

геҙ, һеҙ ҡоймаҡ бешереп ҡарарға булдығыҙ. Әсәйегеҙҙән «Әсәй, миңә...,... кәрәк» тип һорайһығыҙ. Ә әсәй : «Бына һиңә...,...» тип яуап бирә.

**Йомғаҡлау**

Шулай итеп, «Карточкалар ярҙамында уҡытыу» методикаһы буйынса өндән алып һүҙҙәрҙе аңлы ҡабул итеү, һөйләшергә өйрәнеү процессы ҡыҙыҡлы һәм эҙмә-эҙлекле бара. Ул тулыһынса баланың башҡорт телен өйрәнеүен еңел һәм ҡыҙыҡлы итеп башҡара алыуына ҡоролған. Һәр уҡытыусы өсөн актуаль мәсьәлә булып һаналған телмәр үҫтереүҙә ҙур ярҙам буласаҡ.



***Исмәғилева Гөлбаныу Ирек ҡыҙы,***
*Ейәнсура районы муниципаль район дөйөм белем биреү автоном учреждениеһы Иҫәнғол ауылы башҡорт гимназия-интернатының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы*

# «Исем. Сифат. Алмаш. Һан.»

*(1-се линия буйынса уҡыусы 6-сы класс уҡыусылары өсөн башҡорт теленән «Эш дәфтәре»)*

*Башҡорт теленән «Эш дәфтәре»нең актуаллеге.*

Башҡорт телен сифатлы уҡытыу – бөгөн мәғариф системаһында ҡуйылған төп талаптарының береһе. Тел ғилеменең асҡыстарын асыу өсөн дәрестәрҙе ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс, файҙалы итеп үткәрергә тырышабыҙ. Дәрестә өйрәнелгән темалар нығыраҡ үҙләштерелһен өсөн, өйгә эш уйландырырлыҡ һәм индивидуаль булһа, баланы ылыҡтыра, уның яуаплылығын арттыра. «Эш дәфтәре»ндәге биремдәрҙе дәрестәрҙә файҙаланғандан тыш, өйгә эш итеп биреү уңайлы.

*Перспективаһы.* Өйгә эштәрҙе электрон көндәлеккә беркетеп, һәр уҡыусыға шәхсән ебәреү баланы үҙ аллы эшләргә өйрәтә. Уҡытыусы төҙөгән «Эш дәфтәре» уҡыусыларҙың мөмкинлектәренә ҡарап төҙөлә һәм өйгә эште ебәргәндә лә уҡыусының мөмкинлегенә ҡарап уҡытыусы үҙе ебәрә.

*Алдынғы педагогик идея.* Айырым темалар буйынса «Эш дәфтәре» төҙөп, уҡыусыларҙа телгә ҡыҙыҡһыныу уятыу, уларҙың үҙҙәрен дә был эшкә йәлеп итеү (Өйгә темалар буйынса тестар төҙөргә бирергә мөмкин.)

*Педагогик тәжрибәнең объекты.* 6-сы класс өсөн «Башҡорт теле»нән «Эш дәфтәре».

*Педагогик тәжрибәнең предметы*. 6-сы класс өсөн «Башҡорт теле»нән **«Эш дәфтәре» төҙөү.**

*Педагогик тәжрибәнең маҡсаты.* «Эш дәфтәр» ендә бирелгән эштәр ярҙамында уҡыусыларҙа туған телдәренә ҡарата ҡыҙыҡһыныуҙы арттырыу, һәр балаға мөмкинлектәренә ҡарап эшләү форсаты биреү, белемдәрен тормошта ҡулланырға ярҙам итеү.

*Бурыстары.*

1. Башҡорт теленән темаларҙы төплө өйрәнеүҙе һәм аңлы үҙләштереүҙе тәьмин итеү.

2. «Эш дәфтәре»н дәрестәрҙә һәм өйгә эш биргәндә уҡыусыларҙың белемдәрен тикшереү һәм баһалау өсөн ҡулланыу.

3. Уҡыусыларға үҙ мөмкинлектәренән сығып шөғөлләнергә ярҙам итеү.

*Маҡсатҡа ирешеү һәм тәжрибә туплау юлдары.*

1. Методик әсбаптар уҡыу:

– Аҙнағолов Р. Ғ. Мәктәптә башҡорт теле уҡытыу методикаһы. – Өфө : Китап, 2011й. – Дәүләтшина М. С. Башҡорт телен уҡытыу методикаһы : башҡорт теле дәүләт теле итеп уҡытылған мәктәптәр өсөн. 1-се киҫәк, 2010й.

– Дәүләтшина М. С., Ғәбитова З. М. Башҡорт телен уҡытыу методикаһы : башҡорт теле дәүләт теле итеп уҡытылған мәктәптәр өсөн. 2-се киҫәк, 2011 й.

2. Интернет ресурстарҙы, заманса технологияларҙы өйрәнеү, төрлө платформалара эшләү алымдарын эш тәжрибәһендә ҡулланыу.

3. «Йыл уҡытыусыһы» регион-ара конкурста республика кимәлендә үткәрелгән семинарҙарҙа, эксперименталь майҙансыҡта, республика буйынса дәрес эшкәртмәләре конкурстарында эш тәжрибәһе менән уртаҡлашыу.

*Педагогик тәжрибәнең формалашыу һәм барлыҡҡа килеү шарттары.*

Уҡыусылар дәрестә өйрәнелгән темаларҙы, бирелгән мәғлүмәттәрҙе төплө өйрәнһендәр өсөн, «Эш дәфтәре» ен төҙөргә кәрәк. Электрон көндәлек аша өйгә эш биреүгә уңайлы, уҡыусыларҙың һәр ҡайһыһына төбәп ебәрергә мөмкинлек бар.

*Фәнни-методик нигеҙләнеш, теоретик база.*

Методикала предметтар буйынса «Эш дәфтәре» булдырыу тәжрибәһе бар. Федераль белем биреү стандарттары талаптарына



яуап биргән «Эш дәфтәр» ен башланғыс кластарҙы уҡытыу практикаһына индереү 2010 йылдарҙа башланды. «Эш дәфтәр» ҙәре төҙөү буйынса М. С. Дәүләтшина, З. М. Ғәбитованың методик хеҙмәттәрен өйрәнергә мөмкин.

*Педагогик тәжрибәнең яңылығы.*

«Эш дәфтәр» ҙәрен төҙөү һәм уны эш тәжрибәһендә ҡулланыу заман талабы булып тора. Ул уҡытыусының эшен еңеләйтә, сөнки уҡыусыларҙың белемен тикшерергә, дөрөҫ баһаларға ярҙам итә, шулай уҡ һәр бала менән индивидуаль эшләү мөмкинлеге бирә. Уҡыусының фәнгә ҡарата ҡыҙыҡһыныуын арттыра, алған белемде ғәмәли ҡулланырға ярҙам итә.

*Педагогик тәжрибәнең тәғәйенләнеше.*

Был тәжрибә 1-се линия буйынса эшләүсе башҡорт теле уҡытыусыларына тәҡдим ителә.

*Педагогик эш тәжрибәһенең һөҙөмтәһе.*

Уҡыусыларҙың башҡорт телен өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныуҙары арта, ҡағиҙәләрҙе үҙләштерергә тырышалар.

**1-се дәрес. Исем. Түбән кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау.**

*1. Тексты уҡырға, тыныш билдәләрен ҡуйырға. Йөкмәтке буйынса һорауҙар төҙөргә*

Байыҡ боронғо башҡорт бейеүе. Уны тәүҙә оло (йыйындарҙа) тамашаларҙа башҡарғандар. Бейеүҙең һәм шул исемдәге йырҙың барлыҡҡа килеүе сәсән Айҙар Байыҡ исеме менән бәйләнгән. 1812 йылғы һуғыш тамамлана. Французларҙы еңгән еңеүселәр үҙ илдәренә ҡайта. Байыҡ уларҙы данлап йыр һәм бейеү менән ҡаршы ала. Ул ваҡытта уға йөҙ йәштән артыҡ була («Мәктәп календары»нан.)

______________________________________________

______________________________________________

______________________________________________

*2. Текст буйынса эштәр:*

А) Яңғыҙлыҡ исемдәрҙе һайлап яҙырға:

______________________________________________

В) Яһалма исемдәрҙе һайлап яҙырға:

Г) Текста исемдәрҙең күплек ялғауын күрһәтергә.

Ғ) Эйәлек килештәге исемдәрҙе һайлап яҙырға:

*3. Еңеүселәр һүҙен килеш менән үҙгәртергә*

*4. Еңеү һүҙен зат менән үҙгәртергә*

*5. «Исем» темаһы буйынса нимә беләһегеҙ? Фекерҙәрегеҙ менән уртаҡлашырға.*

**2-се дәрес. Исемдәрҙең һан менән үҙгәреше. Күплек ялғауҙарының дөрөҫ яҙылышы.**

*1. Һүҙҙәргә күплек ялғауҙары ҡушырға.*

Кеше –
Бала –
Урман –
Үлән –
3
Эт –
Кофе –
Компьютер –
Рәми –
Мостай –
Киоск –
Лозунг –



*2. Ҡалын хәреф менән бирелгән һүҙҙәрҙе күплектә ҡулланып, һөйләмдәр төҙөргә.*

*3. Түбәндәге һөйләмдәрҙән күплектә бирелгән исемдәрҙе табырға. Уларҙың дөрөҫ яҙылған осрағын + тамғаһы ярҙамында билдәләргә. Ошоға оҡшаш ике һөйләм төҙөргә, дөрөҫ яҙылышын иҫтә ҡалдырырға.*

– Беҙ «Шоңҡар» журналын алдырабыҙ.
– Беҙгә бөгөн «Шоңҡар»ҙар килде.
– Беҙ бөгөн шоңҡарҙар менән осраштыҡ.

*4. Түбәндәге һөйләмдәрҙә нисә Ҡыҙырас, нисә Юлдаш тураһында һүҙ бара? Ошоға оҡшаш өс һөйләм төҙөргә.*

Ҡыҙырастар үҙҙәре лә, уларға етмәҫкә тырышҡан һымаҡ, артҡа ҡалыбыраҡ барҙылар. Ул әленән-әле Юлдаштар яғына асыулы ҡараш ташлап алды. (З. Биишева.)

*5. Кеше, яҡшылыҡ, бала, ғаилә, ата-әсә исемдәрен күплектә ҡулланып, бәйләнешле текст төҙөргә.*

**3-сө дәрес. Исемдәрҙең эйәлек заты.**
**Эйәлек заты ялғауҙарының дөрөҫ яҙылышы.**

*1. Китап, книга һүҙҙәрен эйәлек затында үҙгәртергә һәм һығымта яһарға.* ______

*2.* ______

*3. Шөғөл, төҙөү һүҙҙәрен эйәлек затында үҙгәртергә һәм һығымта яһарға.*

*4. Холоҡ, повесть исемдәрен эйәлек затында үҙгәртергә һәм һығымта яһарға.*

*5. Һөйөклөм, яҡыным, матурым кеүек сифаттар ни өсөн эйәлек заты ялғауҙарын ҡабул итәләр? Ошо һүҙҙәрҙе индереп, һөйләмдәр төҙөргә.*

*6. Исемдәрҙең эйәлек заты менән үҙгәреүе буйынса ниндәй белем алдығыҙ? Һығымта яҙырға.*



**4-се дәрес. Исемдәрҙең хәбәрлек заты.**

*1. Бала, баламын исемдәрен зат менән үҙгәртергә һәм һығымта яһарға.*

*2. Түбәндәге һөйләмдәрҙә ҡалын хәреф менән бирелгән һүҙҙәр ниндәй һөйләм киҫәге булалар? Һығымта яһарға.*

Бәләкәй **бала** урам буйлап йүгерә ине. **Балам** бөгөн генә ҡайтҡайны. Мин йырларға ратҡан **баламын.**

*3. Уҡый, уҡыусымын һүҙҙәрен зат менән үҙгәртергә һәм һығымта яһарға.*

*4. Башҡорт һүҙен хәбәрлек затында үҙгәртергә һәм ниндәй ялғау ҡушылыуы буйынса һығымта яһарға.*

*5. Исемдәрҙең хәбәрлек заты менән үҙгәреүе буйынса нимә белдегеҙ? Һығымта яҙырға.*

**5 – 6-сы дәрестәр. Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше. Килештәрҙең мәғәнәләре.**

Ауыл, урам исемдәрен килештәр менән үҙгәртергә.

*2. Түбәндәге һүҙбәйләнештәрҙә ҡалын хәреф менән бирелгән исемдәрҙең килешен билдәләргә һәм һығымта яһарға.*

**Әсә** һүҙе, **әсәнең** һүҙе, **китап** уҡый, **китапты** уҡый.

*3. Мәҡәлдәрҙәге һүҙҙәргә тейешле килеш ялғауҙарын ҡуйып яҙырға һәм ниндәй килештәрҙең ялғауҙары икәнен күрһәтергә.*

Яҡшы... әйтһәң – һеңдерер, яман... әйтһәң – бөлдөрөр. Яҡшы... эш ҡала, яман... үс ҡала. Яҡшы... яманға һатма. Яҡшы... үҙе үлһә лә, һүҙе үлмәй. Яман... яҡшылыҡ итһәң – аңламаҫ, яҡшы... яҡшылыҡ итһәң – онотмаҫ.

*4. Кешелекте, балалыктың, әсәлекте, урманлыкта исемдәрендә ялғауҙарҙы билдәләргә. Яһалышы буйынса был ниндәй исемдәр?*

*5. Исемдәрҙең ниндәй грамматик категориялары бар? Схемала күрһәтергә. Бирелгән һөйләмдәрҙә күрһәтелгән исемдәрҙе тикшерергә.*

**Юлдаш** та, уға өндәшеп хәл бөтөрөүҙең **файҙаһыҙлығын** аңлап, бынан һуң һүҙһеҙ ишеүендә булды. Ахыр бына яҡында ғына яр буйы ҡамышлыҡтары күренде. (З. Биишева.)

## 7-се дәрес. Исем тураһында үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

*1. Бирелгән һөйләмдән исемдәрҙе табып, түбәндәге эш төрҙәрен башҡарырға:*

А) Составы буйынса тикшерергә һәм яһалыштарын билдәләргә.
Б) Ниндәй һөйләм киҫәге булып килгәндәр?
В) Ниндәй килештә булыуҙарын билдәләргә.



Күсөмдән, һәләтемдән килгәнсә, бөтә нәмәгә мин кешеләрҙән өйрәндем, уларҙан һабаҡ алдым. (М. Кәрим.)

*2. Күсөм исемен килеш менән үҙгәртергә.*

*3. Һабаҡ һүҙен эйәлек затында үҙгәртергә.*

*4. Исемдәрҙең һөйләмдең төрлө киҫәктәре булып килеү осраҡтарына миҫалдар килтерергә.*

## 8-се дәрес. Сифат. Түбән кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

*1. Ҡыш, йәй, баҡса, урам, бала, бәхет, тон исемдәренә ялғауҙар ҡушып, сифаттар яһарға һәм уларҙы индереп һүҙбәйләнештәр төҙөргә.*

*2. Ап –..., һап –..., ҡап –..., ҡып –...., күм –..., йәм –... киҫәксәләре эргәһенә тейешле сифаттарҙы ҡуйып яҙырға һәм уларҙың дөрөҫ яҙылышын иҫтә ҡалдырырға.*

*3. Түбәндәге һөйләмдәрҙә сифаттар һөйләмдең ниндәй киҫәге булып килә?*

Ҡайһы яҡҡа ғына ҡарамайым, алыҫта ҡатлам-ҡатлам күкһел тауҙар тимгелләнә. Шул тауҙарҙың иң бейегенә менеп, тирә-яғым-

ды танһығым ҡанғансы ҡарап торғом килеп китә. Унда менһәм, ауылыма алып килә һәм артабан алып китә торған оло юлды ус төбөндәгеләй күрерҙәй булам. Юҡ, мин уны тауҙар аша ла күрәм. Ул – беҙ төҙөгән киң, таҡыр, ләкин боролмалы-боролмалы мәңгелек юл! (Н. Мусин.)

*4. Бирелгән сифаттарҙың синонимдарын табып яҙырға:*

Ҙур –
Яҡшы –
Батыр –
Уңған –

*5. Ниндәй һүҙ төркөмө сифат тип атала? Уның тураһында нимә беләһегеҙ?*

_______________________________________________
_______________________________________________

### 9-сы дәрес. Сифаттарҙың исемләшеүе.

*1. Мәҡәлдәрҙәге сифаттарҙы үҙҙәре асыҡлаған исемдәр урынына ҡуйып яҙығыҙ.*

1) Яҡшы кеше менән юлдаш булһаң – уңырһың, яман кеше менән юлдаш булһаң – туңырһың. –

_______________________________________________
_______________________________________________

2) Ялҡау кешенең аты ла аҙымһыҙ булыр. –

_______________________________________________

3) Изге кешенең күңеле көҙгө. –

_______________________________________________

*2. Бирелгән һүҙбәйләнеште һәм сифатты килеш менән үҙгәртергә, уларҙы индереп һөйләмдәр төҙөргә һәм һығымта яһарға:* ***матур ҡыҙ*** *һәм* ***матур.***

_______________________________________________
_______________________________________________
_______________________________________________



*3. Түбәндәге мәҡәлдәрҙә сифаттар ниндәй һөйләм киҫәге булып килә?*

Аҡыллыға ишара ла етә. Теле ямандың көнө яман. Һөнәрленең ҡулы алтын, аҡыллының аҡылы алтын.

*4.* ***Матур*** *сифатын эйәлек затында үҙгәртергә, бер нисә һөйләм төҙөргә һәм һығымта яһарға.*

_______________________________________________
_______________________________________________
_______________________________________________
_______________________________________________

*5. Сифаттарҙың исемләшеү осраҡтарына бер нисә һөйләм уйлап яҙырға һәм һөйләмдәргә синтаксик анализ эшләргә.*

_______________________________________________
_______________________________________________
_______________________________________________

### 10-сы дәрес. Сифаттарҙың яһалышы.

*1. Баҡсағыҙҙа үҫкән сәскәләрҙең төҫтәре һәм атамаһынан һүҙбәйләнештәр төҙөп яҙырға, сифаттарҙың яһалышын күрһәтергә.*

**Өлгө:** аҡ (ниндәй? тамыр) рауза,...

*2.* ***Ямғыр, ҡыш, көҙ, йәй, яҙ, буран, мәҙәниәт, иҡтисад, уй, моң, һөнәр, ила, төҙө*** *һүҙҙәренә ялғауҙар ҡушып, сифаттар яһарға, уларҙы индереп бер нисә һөйләм төҙөргә.*

_______________________________________________
_______________________________________________
_______________________________________________
_______________________________________________

*3. Ҡушма сифаттар ҡулланып, иң яҡын дуҫҡа ҡылыҡһырлама яҙырға.*

_______________________________________________
_______________________________________________

*4. Сифаттарҙың яһалышы буйынса белемдәрегеҙҙе дөйөмләштереп, фекерегеҙҙе яҙырға.*

______________________________________________

______________________________________________

______________________________________________

**11-се дәрес. Төп һәм шартлы сифаттар.**

*1. Предметтың төп билдәһен белдергән сифаттар менән һүҙбәйләнеш-тәр төҙөп яҙырға.*

______________________________________________

______________________________________________

*2. Предметтың урынын, ваҡытын, нимәнән яһалыуын белдергән сифаттар менән һүҙбәйләнештәр төҙөп яҙырға.*

______________________________________________

______________________________________________

*3. Һөйләмдәрҙән шартлы сифаттарҙы табырға, мәғәнәләрен аңлартырға.*

1. Улар кәмәне яр ситендәге тирәккә бәйләгәс, ҡыуанып, йүгереп һыртҡа менделәр. 2. Бөтә уҡыусылар ҙа үҙҙәренең былтырғы урындарына ултырҙылар. 3. Әнисә өр-яңы көрән кешмир күлдәк өҫтөнә ап-аҡ алъяпҡыс бәйләп, сәсенә ал ебәк таҫмалар тағып, күптән бында ултыра ине. (З. Биишеванан.)

*4. Алдағы һөйләмдәрҙә бирелгән бөтә сифаттарҙы үҙҙәре асыҡлап килгән һүҙҙәр менән бергә күсереп яҙырға.*

______________________________________________

______________________________________________

______________________________________________

**12-се дәрес. Сифат дәрәжәләре.**
**Сифаттарҙың дөрөҫ яҙылышы.**

*1. Түбәндәге сифаттарҙың дәрәжәһен билдәләргә.*

Аҡ –



Күк –
Зәңгәр –
Ҡара –
Йәшел –
Ҙур –
Йәйге –
Былтырғы –
Яҡшы –
Оҙон –

*2. Ошо сифаттарҙы артыҡлыҡ дәрәжәһенә ҡуйып яҙырға.*

*3. Ошо сифаттарҙы аҙһытыу дәрәжәһендә яҙырға, һығымта яһарға.*

*4. Бирелгән исемдәрҙән сифаттар яһарға һәм сифат + исем ҡалыбындағы һүҙбәйләнештәр төҙөп яҙырға.* **Мәҫәлән, һағыш – һағышлы йыр.**

***Төн, ямғыр, йондоҙ, практика, телевизор, фән, ғилем, эксперимент, моң, кеше.***

______________________________________________

______________________________________________

*5. Урыҫ телендә сифаттар дәрәжә менән үҙгәрәме? Миҫалдар килтерергә, сағыштырырға.*

______________________________________________

______________________________________________

______________________________________________

**13-сө дәрес. Синоним сифаттар.**

*1. Бирелгән сифаттарҙың синонимдарын табырға, һүҙбәйләнештәр төҙөп яҙырға.*

Оло –
Бәләкәй –
Тиҙ –
Яғымлы –

Көслө –

*2. «Синонимдар һүҙлеге»нән үҙегеҙҙең телмәрегеҙҙә һирәк ҡулланылған сифаттарҙы яҙырға, уларҙың синонимдарын табырға.*

______________________________

______________________________

______________________________

*3. Йәйәләр эсендә һөйләмдә ҡулланылған сифаттарға мәғәнәләре буйынса яҡын сифаттарҙы күрһәтеп яҙырға.*

*Йырлап аҡҡан шишмәләр, алкын (.....) йылғалар, һырт бирмәҫ (.....) ҡаялар, мәғрүр (.....) тауҙар, зәңгәрһыу (.....) күлдәр, ҡошҡортҡа бай урмандар, һабантурғайҙар гөрләр аҡландар, ҡымыҙ эсе һеңгән уйсан (.....) далалар, аулаҡ (.....) утрауҙар, эреле-ваҡлы (.....) ауылдар, ҡасабалар һәм ҡалалар – һәммәһе лә Башҡортостандың ҡабатланмаҫ (.....) биҙәге.*

*4. Бирелгән исемдәр алдында ниндәй сифаттар ҡулланырға мөмкин?*

*Мәҫәлән, сәс – оҙон, ҡыҫҡа, ҡара, аҡ, ҡалын, һирәк, шыма, бөҙрә һ. б.*

*Күҙҙәр –*
*Күңел –*
*Уй –*
*Ҡараш –*

*5. Синоним сифаттар ҡулланып, үҙегеҙҙең яҡын кешегеҙҙе төрлө яҡлап тасуирлағыҙ.*

______________________________

______________________________

______________________________

______________________________

## 14-се дәрес. «Сифат» темаһы буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

*Ояла белеү – намыҫтың иң бөйөк, иң күркәм, иң гүзәл сифаты, гәҙәттәрҙең иң һөйкөмлөһө. («Мәктәп календары»нан.)*



*Бирелгән һөйләм буйынса эштәр:*

*1. Һөйләмдә сифаттар ниндәй һөйләм киҫәге булып килгән?*

*2. Яһалыштарын билдәләргә;*

*3. Дәрәжәләрен билдәләргә;*

*4. Кешегә хас булған ниндәй күркәм сифаттарҙы беләһегеҙ? Һанап сығырға.*

______________________________

______________________________

______________________________

______________________________

*5. Насар уйлы кешенең күңел торошон тасуирлап, һөйләмдәр төҙөргә, унда ҡушма сифаттар ҡулланырға. Яҙған фекерегеҙҙе мәҡәл менән йомғаҡлап ҡуйырға..*

______________________________

______________________________

______________________________

______________________________

## 15-се дәрес. Һан тураһында төшөнсә.
## Ябай һәм ҡушма һандар.

*1. Тексты уҡы, күп нөктәләр урынына тейешле ялғауҙар ҡуй. Һандарҙың яһалышын билдәлә.*

Японияла уҡыу йылы 1 апрел... башлана һәм өс семестр... тора. Беренсе семестр 20 июл... тамамлана, унан һуң балалар йәйге каникулға китә. Икенсе семестр 1 сентябр... декабрь аҙағынаса, ә өсөнсө семестр 3 ғинуар... март... тиклем һуҙыла. Бер кластан икенсеһенә күсеү бер аҙналыҡ яҙғы каникул ваҡытында башҡарыла. («Мәктәп календары» нан.)

*2. Ҡушма һандар ҡулланып, мәктәп темаһына ҡағылышлы текст төҙө.*

*3. Ниндәй башҡорт милли аштарын беләһең? Һанап сыҡ. Әсәйҙәрегеҙ менән кәңәшләшеп, уларҙың береһен бешерергә өйрәт. Рецепт яҙғанда, һандарҙы ҡуллан.*

*4. Үҙегеҙ белгән иң ҙур һандарҙы ҡулланып, һүҙбәйләнештәр төҙөп яҙ.*

*5 Түбәндә бирелгән һорауҙарға яуаптар ярҙамында «Минең районым» темаһына тыуған районығыҙ тураһында бәләкәй эҙләнеү эше яҙ.*

1. Һеҙҙең районығыҙ нисәнсе йылда барлыҡҡа килгән? Районығыҙҙа нисә ауыл бар? Нисә кеше йәшәй? Нисә мәктәп бар? Мәктәптәрҙә нисә бала уҡый? Һ. б.

## 16 – сы дәрес. Һан төркөмсәләре. Һандарҙың дөрөҫ яҙылышы.

*1. А) Икегә бүленеүсе ун һан яҙ. Б) Ошо һандарҙы рәт һандарына әйләндер. В) Рәт һандарын индереп, һүҙбәйләнештәр төҙө. Һандарҙы цифрҙар менән яҙ.*



А) ______

Б) ______

В) ______

*2. Текста ҡулланылған һандарҙың төркөмсәләрен күрһәт, дөрөҫ яҙылыштарын иҫтә ҡалдыр.*

Мәғлүм булыуынса, бал ҡорттары ғаилә булып йәшәй. Ғәҙәттә беҙ уны күс тип йөрөтәбеҙ. Шулай итеп, бал ҡорто күсендә бер инә ҡорт, 40-50 самаһы эшсе ҡорт, йөҙ, хатта меңгә яҡын ата (әре) ҡорт була. Инә ҡорттоң уртаса оҙонлоғо 20-25 мм, ә ауырлығы 180-300 мг тирәһе була. Ул күстә, иң оҙон ғүмерлеһе булараҡ, 5-7 йыл йәшәй ала. Әре ҡорттоң кәүҙәһе оҙонлоғо 15-17 мм, ауырлығы 250-260 мг булһа, эшсе ҡорттоң оҙонлоғо 12-14 мм, ә массаһы 100 мг самаһы була. (Й. Әхтәмов.)

*3. А) Башҡортостандың ете мөғжизәһен һанап сыҡ. Б) Үҙең йәшәгән райондың ете мөғжизәһенә нимәләрҙе индерер инең? В) Ете һаны менән бәйле ниндәй һүҙбәйләнештәр бар? Яҙ.*

А) ______

Б) ______

В) ______

*4. Йыйыу һандарының бөтәһен бергә йыйып, ҡыҙыҡлы һөйләм йә шиғыр яҙ.*

*5. Үҙегеҙҙең ғаилә ағзаларының бөтәһенең дә ҡасан тыуыуын яҙып сыҡ. Һандарҙы цифрҙар менән яҙ.*

**17-се дәрес. Үлсәү һүҙҙәре.**

*1. Ҡосаҡ, тотам, йотом, оя, тамсы, ус, төп, йөк, семтем һүҙҙәрен индереп һүҙбәйләнештәр төҙөп яҙ.*

*2. А) Рус һәм башҡа телдәрҙән ингән үлсәү һүҙҙәренә ун миҫал яҙ һәм улар менән һүҙбәйләнештәр төҙ. Б) Бер нисәһен индереп, һөйләмдәр төҙөп яҙ.*

А) 

Б) 

*3. Атай-әсәйҙәрегеҙҙән һорап, түбәндәге эштәрҙе нисек башҡарырға икәнен яҙып кил, унда үлсәү һүҙҙәрен ҡуллан.*

А) *Ҡыҙҙар ойоҡбаш бәйләү серҙәре менән таныштыра:* Күпме йөн кәрәк? Нисә йомғаҡ эшләргә? Үлсәмен нисек самаларға? һ. б.

Б) *Малайҙар ултырғыс эшләргә өйрәтә:* Күпме таҡта кәрәк? Өлөш-тәренә күпме таҡта китә? Таҡталарҙың ҡалынлығы күпме булырға тейеш?һ. б.



*4. Түбәндәге нәмәләрҙән ниндәй аш бешерәләр? Унда ҡулланылған үлсәү һүҙҙәрен тап. Был аштың файҙаһы тураһында белешмә бир.*

– бер баш һуған;
– ярты бәйләм ҡуҙғалаҡ;
– ике стакан һурпа;
– ике тырнаҡ һарымһаҡ;
– бер аш ҡалағы зәйтүн майы.

*5. Тема буйынса алған белемеңде дөйөмләштереп, үлсәү һүҙҙәренең әһәмиәте тураһында үҙ фекереңде яҙ.*

**18-се дәрес. Һан тураһында үтелгәндәрҙе ҡабатлау.**

*1. Мәҡәлдәрҙәге һандарға һорауҙар ҡуй, ниндәй һөйләм киҫәге булып килеүҙәрен билдәлә.*

1. Беләге йыуан берҙе йығыр, белеме йыуан меңде йығыр.
2. Иренсәктең эше ике. 3. Өс таған таймаҫ, яңғыҙ ағас янмаҫ.
4. Ҡурҡаҡ күҙе дүрт була. 5. Биләүҙәге бала бишкә төрләнә.
6. Алты йәшәр юлдан ҡайтһа, алтмыш йәшәр ҡаршы сығыр.
7. Егәрлелең ҡулы ете.
8. Бер ата туғыҙ улды аҫрар, туғыҙ ул бер атаны аҫрамаҫ.
9. Ун ҡат уҡы, бер ҡат яҙ.

*2. Һандар менән өс йомаҡ яҙ. Ул һандарҙың яһалышын күрһәт.*

*3. Бирелгән һандарҙың төркөмсәләрен яһалыштарын билдәлә, һүҙбәйләнештәр төҙө.*

Берәү......................., ике...................., өсләтә............................., дүртенсе....................., биш........................., алтышар......................., етәү............................., һигеҙ бөтөн үндан биш..............................., туғыҙынсы..................., унлап..................., ун бер.........................., ун ике-ун өс................................, ун дүртенсе................................

*4. Көндәлек тормошта йыш ҡулланылған үлсәү һүҙҙәрен яҙ.*

___

*5. Һандарҙың бөтә төркөмсәләрен дә индереп, «Һандар донъяһында» исемле әкиәт йә ҡыҙыҡлы хикәйә яҙ.*

___

**19-сы дәрес. Алмаш тураһында төшөнсә.**

*1. Һөйләмдәрҙә төшөп ҡалған алмаштарҙы ҡуй.*

Ҡылыскүл эргәһендәге бейек түбәне Күкрәктау тип йөрөтәләр. (..............) төньяҡ битләүен ҡуйы ҡарағай урманы ҡаплаған, (........) яртылаш сәсе алынған малай башына оҡшап ҡуя. (............) яҡта ул гел шулай: ағастар тауҙарҙың төньяҡ итәктәренә һыйынып үҫәләр. Әйтерһең, (.................) тауҙарҙы һалҡын елдәрҙән ышыҡлар өсөн (................) итәләр. (М. Кәрим.)

*2. Текстан алмаштарҙы табып, уларҙың ниндәй һүҙ төркөмдәрен алмаштырып килеүҙәрен билдәләп сыҡ.*

Ҡыҙырас менән Ғарифтан һәр көн тип әйтерлек ишетеп килгән был һүҙ һуңғы ваҡытта уға бөтөнләй тынғы бирмәй башлағайны инде. Ул был һүҙҙе үҙенә ҡушылған берәй ҡушаматтыр, тип уйлай



ине. Сөнки быны әйткәндә, Ҡыҙырас менән Ғариф һәр ваҡыт уға эре генә ҡарап алалар ине. (З. Биишева.)

*3. **Ул** алмашына төрлө ялғауҙар ҡуйып, һөйләмдәр төҙөп яҙ һәм уның һөйләмдең ниндәй киҫәге булып килә алыуын билдәлә.*

___

*4. Бирелгән һөйләмдәрҙе урыҫ теленә тәржемә ит. Урыҫ һәм башҡорт телдәрендә алмаштарҙың ҡулланылышында булған үҙенсәлектәрҙе иҫеңдә ҡалдыр.*

1) Ул бик уңған ҡыҙ. Уға бөтәһе лә һоҡланып ҡарай.
2) Ул бик ярҙамсыл малай. Уға бөтәһе лә ярҙам һорап бара.

*5. Һеҙҙең диалектта ҡулланылған алмаштарҙы яҙ. Уларҙы индереп һөйләмдәр төҙө.*

___

**20-се дәрес. Алмаш төркөмсәләре.**

*1. Зат һәм эйәлек алмаштарын индереп, һүҙбәйләнештәр төҙөп яҙ. Улар эргәһендә ниндәй һүҙ төркөмдәре килә?*

___

*2. Һорау алмаштарын ҡулланып, өс өндәү һөйләм төҙөп яҙ.*

___

*3. Текста ҡулланылған алмаштарҙың төркөмсәләрен күрһәт.*

Юҡ, был уларҙың үҙ кәмәһе ине. Ул малайҙарҙы һыуға ауҙарғас, үҙе нисектер ҡайтанан турайып ултырған да, тулҡындар өҫтөндә сайҡалып, һикергеләп йөрөй ине. (М. Кәрим.)

*4. Күп нөктәләр урынына билдәләү алмаштарын ҡуй.*

Ҡалаға атайым да, әсәйем дә, апайым да – ................ баралар.
Ҡалаға.................. : атайым да, әсәйем дә, апайым да баралар.

*5. Өҙөктө уҡып сыҡ. Ниндәй төҙәтмәләр индерер инең. Алмаштарҙың телмәрҙәге роле тураһында фекереңде яҙ.*

Һуғышҡа тиклем Әсләмдәрҙең ауылы бигерәк тә бәләкәй булған. Өлкәндәрҙең һөйләүенә ҡарағанда, ауыл ни бары утыҙ биш өйҙән генә торған. Ауылдың бәләкәйлеге етмәгән, ауылға, кәмһетеп, исемен дә тапҡандар бит әле: Йәтимәк. Ауыл бөтөүгә барғандыр, күрәһең, шул етемлеккә ишара яһалғандыр. Яҡын тирәлә күҙ төртөп, йомош-фәләнгә барып әйләнерлек башҡа ауыл да булманы шикелле. (Д. Бүләков.)

________________________________________
________________________________________
________________________________________
________________________________________

### 21-се дәрес. Алмаштарҙың үҙгәреше.

*1. Мәҡәлдәрҙә ҡулланылған алмаштарҙың ниндәй килештәрҙә булыуын билдәлә.*

1) Үҙең ергә эйелмәһәң, ер һиңә һуҙылмаҫ. 2) Һәр кем үҙе өсөн үҙе яуаплы 3) Кеше ғәйебен һиңә һөйләгән һинекен дә һөйләр. 4) Кем эшләмәй, шул ашамай. 5) Үҙеңдән ҙурға юл бир.

*2.* ***Әллә кем, әллә нәмә*** *тигән алмаштарҙы килештәр менән үҙгәрт.*

________________________________________
________________________________________
________________________________________
________________________________________



*3. Күрһәтеү алмаштарын төрлө килешкә ҡуйып, һүҙбәйләнештәр төҙөп яҙ.*

________________________________________
________________________________________
________________________________________

*4.* ***Һис кем, һис нәмә, бер кем, бер нәмә*** *алмаштарын эйәлек затына ҡуйып, һөйләмдәр төҙөп яҙ.*

________________________________________
________________________________________
________________________________________

*5. Алмаштар ҡулланып,* ***«Иң яҡын кешем»*** *тигән темаға ижади эш эшлә.*

________________________________________
________________________________________
________________________________________
________________________________________

*Аблаева Альбина Әҙһәм ҡыҙы,*
*Стәрлебаш районы Стәрлебаш ауылының*
*башланғыс белем биреү мәктәбенең башҡорт*
*теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы*

# Башҡорт теле һәм әҙәбиәт дәрестәрендә проблемалы уҡытыу технологияһын ҡулланыу

## Аңлатма яҙыу

Уҡытыу-тәрбиә процесында уҡытыусының роле бик ҙур. Әгәр уҡытыусы сағыу шәхес икән, уҡыусылар ҙа үҙҙәренең ижади һәләттәрен аса аласаҡтар. Уҡытыу традицион системаһы уҡыусыларҙы әҙер материал үҙләштереүгә ҡоролған, ә проблемалы уҡытыуҙа киреһенсә, уҡытыусы белемде әҙер бирмәй. Уҡыусылар алдына бурыс ҡуя, уҡыу мәсьәләһен хәл итер өсөн, төрлө саралар табыу теләген уята. Минеңсә, башҡорт теле һәм әҙәбиәт дәрестәре уңышлы, һөҙөмтәле, фәһемле үтһен өсөн, уҡыусыларҙың дәрескә теләк менән килеүе ҙур урын алып тора, шул осраҡта ғына туған телгә ҡыҙыҡһыныуы уяна, сөнки теләп башҡарылған эш белемгә ынтылыш бирә.

Шәхес үҫтереүҙә, тәрбиәләүҙә башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәре роле сикһеҙ. Шулай булғас, башҡорт телен өйрәтеүгә, башҡорт телен өйрәтеүсе уҡытыусыға ҙур талаптар ҡуйыла. Уҡытыусының эшкә мөнәсәбәте, уҡытыу процесын дөрөҫ ойоштороуы, уҡыусыларҙы ҡыҙыҡһындыра алыуы мөһим роль уйнай.

Дәрес тураһында бик күп мәҡәләләр, китаптар яҙылған, әммә дәрес – балаға белем биреүҙең төп формаһы. В. А. Сухомлинский: «Дәрес – ҡыҙыҡһыныусанлыҡ һәм әхлаҡи инаныуҙар факелын тоҡандырыусы осҡон», – тигән. Шул осҡондо тоҡандырыу, телде



ҡыҙыҡһыныу, теләк менән өйрәнһен өсөн уҡытыусыға һәр дәресендә ғәжәпләгеү, һоҡланыу тойғолары уятырлыҡ заманса технологиялар, уҡытыу методтары ҡулланырға тура килә.

**Эштең актуаллеге** – башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә килеп тыуған ситуацияларҙа проблеманы күрә, таба белергә; проблеманы хәл итеү юлдарын эҙләргә өйрәтеү һәләтенә эйә был технология. Шулай уҡ был технология ярҙамында уҡыусыларҙы төрлө яҡлап үҫешкән шәхес итеп тәрбиәләү мөмкинселеге бар.

**Эштең объекты** – уҡыу-уҡытыу процесы.

**Эштең предметы** – проблемалы уҡытыу.

**Эштең төп маҡсаттары:**

1) һөнәри эшмәкәрлектә проблемалы уҡытыу технологияһын эффектлы ҡулланыуына өйрәнеү һәм өйрәтеү.

2) уҡыусыларҙы проблеманы таный һәм сисә белергә өйрәтеү, танып белеү эшмәкәрлеген арттырыу, активлаштырыу һәм интеллектуаль һәләттәрен асыу.

Ошо маҡсаттарҙы тормошҡа ашырыу өсөн түбәндәге **бурыстар** билдәләнде:

- эштең темаһы буйынса төрлө педагогик, ғилми-методик әҙәбиәтте өйрәнеү һәм анализлау;
- белем биреү процессында проблемалы уҡытыу технологияһын ҡулланыу буйынса алдынғы тәжрибәләр менән танышыу;
- уҡыусыларҙың ныҡлы һәм тәрән белем алыуын проблемалы уҡытыу технологияһы аша тәьмин итеү юлдарының эффектлылығын билдәләү;
- эштең һөҙөмтәһен анализлау.

**Гипотеза** – әгәр башҡорт теле дәрестәрендә килеп тыуған мәсьәләләрҙе һәм ситуацияларҙы сисеү юлдарын табып, күнектереп барһаҡ, уҡыусылар тормошта ла төрлө проблемаларҙы хәл итергә өйрәнәләр һәм төрлө яҡлап үҫешкән шәхес итеп тәрбиәләп була.

**Эштең практик әһәмиәте** – был проект эше уҡытыусыларға, стандарт талаптарын бойомға ашырыуҙа, яңыса дәрестәрҙе ойоштороуҙа ҙур ярҙам булырп торасаҡ.

## 2. 1. Проблемалы уҡытыу технологияһының барлыҡҡа килеү тарихы

Проблемалы уҡытыу – яңы педагогик күренеш түгел. Уның элементтарын Сократтың эврестик әңгәмәләрендә, Ж. Ж. Руссоның дәрес хеҙмәттәрендә, К. Д. Ушинскийҙың хеҙмәттәрендә күрергә мөмкин. Ә мәктәп уҡытыу системаһында уны ҡулланыу тураһында М. А. Данилов, М. Н. Скаткин, И. Я. Лернер, М. И. Мәхмүтов кеүек педагогтар яҙып сыҡтылар. М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының педагогия фәндәре кандидаты М. С. Дәүләтшина «Башҡорт телен уҡытыу методикаһында» проблемалы уҡытыуға ярайһы урын бирелгән.

## 2. 2. Нимә һуң ул проблемалы уҡытыу?

Һәр уҡытыусы дәрескә план төҙөгәндә түбәндәге һорауҙарҙы күҙ уңында тоторға тейеш: ни өсөн? (һәр эштең маҡсаты билдәләнә), нисек? (уның тормошҡа ашырыу юлдары асыҡлана), нимәгә өлгәшергә тейеш? (һәр эштә ниндәй һөҙөмтә көтөлә?)

Тормош алға бара, уҡытыу методтары ла үҙгәрә. Нисек итеп уҡыусыны белем алырға өйрәтергә һуң? Эҙләнеү ваҡытында минең иғтибарымды **Елена Леонидовна Мельникованың «Проблемалы дәрес, йәғни белемде уҡыусылар менән нисек асырға?»** тигән китабы бик ҡыҙыҡһындырҙы. Был педагогик эҙләнеүҙәр менән танышҡандан һуң мин үҙемә проблемалы дәрес төҙөү технологияһын үҙләштереү маҡсатын ҡуйҙым.

Дәрестә уҡыусыларҙың танып-белеү эшмәкәрлеген әүҙемләштереүсе, уларҙы уҡытыу субъекты итеп ҡараусы методтарҙың береһе – проблемалы уҡытыу методы. Дәрес барышында ҡуйылған проблеманы хәл итеү уҡыусыларҙың фекерләүен үҫтерә, уларҙы белем алыуға булған теләген арттыра, уҡыу процесына ҡыҙыҡһыныу уята һәм үҙ аллы эшләү күнекмәләре бирә.

Проблемалы уҡытыуҙың төп төшөнсәһе – проблемалы ситуация тыуҙыра белеү. Проблемалы ситуация кешегә ниндәй булһа ла уйланыу йәки ниндәйҙер ҡаршылыҡтар тыуҙыра һәм ул уҡыусының барлыҡҡа килгән ҡаршылыҡтарҙан, ҡыйын ситуацияларҙан сығыу теләге тыуҙырғанда ғына һөҙөмтәле була.



Проблемалы ситуация тыуҙырыуҙың беренсе бурысы – ул интеллектуаль ҡыҙыҡһындырыу. Уҡыу мәсьәләһе ҡуйыр алдынан уҡытыусы проблемалы ситуация тыуҙыра, ярҙамсы һорауҙар бирә, диалог барлыҡҡа килтерә, ә проблемалы ситуация барлыҡҡа килгәндә уҡыусы үҙе ҡыҙыҡһынып, уны сисеү юлдарын эҙләй, яңы белемде үҙләштерә. Дәрестә үткәрелгән эштәр мөмкин тиклем тормошсан булһа, һәр эштә лә актив ҡатнашасаҡтар, телмәр эшмәкәрлегендәге күнекмәләрҙе еңел үҙләштерәсәктәр.

Проблемалы уҡытыуҙың төп йүнәлештәре:

- Проблемалы ситуация булдырыу;
- Проблеманың мөһим өлөштәрен билдәләү;
- Проблеманы хәл итеү юлдарын табыу;
- Башҡарылған эштең дөрөҫлөгөн тикшереү, баһалау.

Бындай алгоритм менән дәрес материалын үҙләштереү уҡыусыларҙа ҡыҙыҡһыныу уята, яңы материал өҫтөндә эшләргә ынтылыш булып тора.

# Бүлек 3. Практик өлөш

## 3. 1. Башҡорт теле һәм әҙәбиәт дәрестәрендә проблемалы технологияларҙы ҡулланыу

Уҡыусылар проблеманы үҙ аллы хәл иткәндә, ҡуйылған мәсьәләнең шартын анализлай белергә тейеш. Артабан проблеманы хәл итеү буйынса тәҡдимдәрҙе, фараздарҙы күҙаллай белергә өйрәтеү мөһим. Тәҡдим ителгән алымдар араһынан иң рациональ булғанын һайлап ала белеү ҙә бик әһәмиәтле. Проблеманы сисеүҙә уҡыусыларҙың үҙаллылыҡ кимәле төрлөсә булырға мөмкин. Ҡайһы берҙә уҡыусылар проблеманы тулыһынса үҙҙәре хәл итәләр, икенсе осраҡта уҡытыусының өҫтәлмә һорауҙары ярҙам итә. Уның үҙенсәлеге шунда: уҡытыусы әҙер ҡағиҙәне бирмәй, уны бер нисә өләшкә бүлә һәм эҙмә-эҙлекле рәүештә уҡыусыларға тәҡдим итә. Эҙләнеү процесының уңышы уҡытыусының һорау бирә белеү оҫталығына бәйле.

Башҡорт теле дәресендә төрлө проблемалы ситуацияларға таянып телмәрҙе яңы һүҙҙәр менән байытыу өҫтөндә эшләргә мөм-

кин. Мәсәлән, берәй һүҙҙең килеп сығышына туҡталып, уға бәйле тарихи мәғлүмәттәргә таяныրға була. Был осраҡта уҡыусы үҙ фекерен фәнни стилдә эҙмә – эҙлекле еткерергә бурыслы. Бындай алым уҡыусының үҙ аллы танып белеү һәләтен үҫтерә, фекерләү процессын активлаштыра. Уҡытыусы үҙ сиратында проблемалы ситуацияны тыуҙырырлыҡ, уҡыусыны ҡыҙыҡһындырып бәхәскә инерлек һораүҙар бирә белергә бурыслы – был бик мөһим. Проблемалы ситуация дәрес башынан алып аҙағына тиклем тема менән бергә килергә тейеш.

Мәсәлән,Ноғман Мусиндың «Етемәк болан балаһы» хикәйәһен үҙләштергәндә һорау бирәм: урмандан болан балаһын өйгә алып ҡайтыу дөрөҫмө? Әллә болан балаһын урманда ҡалдырып китеү дөрөҫөрәк буламы?

Уҡыусылар башта аптырап ҡала: кемдер, дөрөҫ, ти, кемдер, дөрөҫ түгел, ти. Һәр кем үҙенең ҡарашын иҫбатларға тырыша, һөҙөмтәлә бәхәс килеп сыға. Аҙаҡтан дөйөм һығымта яһала. Әйтергә кәрәк, уҡыусыларға тәҡдим ителгән төрлө эш алымдары үтелгән материалды нығытыуға ғына ҡайтып ҡалмай, тасуири уҡыу һәм телмәр ишетеү һәләтен дә үҫтерә.

Һәр дәрестә проблемалы ситуация тыуҙырыу өсөн темаға ярашлы эш башҡарыу уңайлы. **«Ҡушма һүҙҙең яһалышы»** темаһын үткән ваҡытта проблемалы ситуацияға саҡырыу диалогына миҫал. Был осраҡта төрлө һораүҙар аша дөрөҫ яуапҡа сығабыҙ, уҡыу мәсьәләһен асабыҙ.

Таҡтала **Торатау** һүҙе яҡтыртыла. **(презентация)**

– Таҡтала ниндәй һүҙ яҙылған?

– Нимә ул Торатау?

– Ни өсөн был һүҙ баш хәрефтән яҙыла?

– Был тау республикабыҙҙың ҡайһы районында урынлашҡан?

– Ә хәҙер һүҙҙе бергәләп әйтәйек. **(һүҙҙе әйттереү, уны тыңлатыу)**

– Һүҙҙе дәфтәрегеҙгә яҙығыҙ.

– Тағы бер ҡат әйтәйек.

– Торатау һүҙе ғәҙәти һүҙҙәрҙән нимәһе менән айырыла? (уҡыусыларҙың яуаптары – ике һүҙҙән тора)



– Дөрөҫ, был һүҙ ике һүҙҙән тора. (**Тора һәм тау**)

– Афарин! Беренсе һүҙен әйтеп ишеттерегеҙ (**Тора**)

– Тора һүҙенең график һыҙмаһын эшләгеҙ.

– Был һүҙ ниндәй һорауға яуап бирә? (**уҡыусыларҙың яуаптары – ни эшләй?**)

– Тора һүҙе нимәне аңлата? (**предметтың эш-хәрәкәтен**)

– Икенсе һүҙе ниндәй? (**тау**)

– Ниндәй һорауға яуап бирә? (**уҡыусыларҙың яуаптары – нимә?**)

– Тау һүҙе нимәне белдерә? (**предметтың атамаһын**)

– Был фекерегеҙҙе иҫбатлағыҙ. (**яуаптар – тау булғас унда менеп була, күҙ менән күреп була, ҡул менән тотоп була**)

– Хәҙер, Торатау һүҙенә график һыҙмаһын үҙгәртәбеҙ.

– Тимәк, Торатау һүҙе нисек яһалған? (**Уҡыусыларҙың яуаптары – ике һүҙҙе ҡушыу юлы менән, ләкин бер предмет атамаһын аңлата**)

**– Һығымта яһайыҡ:**

– Ҡушма һүҙҙәр нисек яһала? (ике һүҙҙе бергә ҡушыу юлы менән яһала, ләкин бер предметтың атамаһын белдерә)

– Дәреслегегеҙҙең 6-сы битен асып, беҙ сығарған ҡағыҙҙы дәреслектәге ҡағиҙә менән сағыштырығыҙ. (уҡып ишеттереү)

– Ә хәҙер сылбырлап ҡушма һүҙҙәр уйлап әйтәбеҙ.

Һығымта:

Практик эштә уҡыу мәсьәләһе ҡуйыр алдынан проблемалы ситуация тыуҙы һәм беҙ бергәләп уҡыу мәсьәләһен астыҡ.

**Туған башҡорт теле дәресенән тағы миҫал (уҡыу мәсьәләһе ҡуйыр алдынан ҡыйынлыҡ, ауырлыҡ ситуацияһы тыуҙырыу)**

Экранда һөйләм (презентация)

**Илүзә яҡшы уҡый.**

– Һөйләмде уҡығыҙ һәм эйә менән хәбәрен табып аҫтына һыҙығыҙ.

– Һөйләмдең эйәһе? (**яуап бирәләр**)

– Һөйләмдең хәбәре? (**яуап**)

– Һөйләмдең ниндәй һүҙенә һыҙылманы? (**яҡшы**)

– Яҡшы һүҙенә нисек һыҙабыҙ? (**яуап юҡ**)

– Ни өсөн һыҙманығыҙ? (**белмәйбеҙ**)

– Өйрәнәһегеҙ киләме? (**эйе**)

– Шулай булғас, беҙ бөгөн дәрестә һөйләмдә эйә менән хәбәрҙән башҡа булған һүҙҙәрҙе табырға һәм аҫтына дөрөҫ һыҙырға өйрәнербеҙ. Ризаһығыҙмы? тип һығымта яһап ҡуябыҙ.

Бында проблемалы ситуация тыуҙы. Уҡыусылар үҙҙәре уйланалар һәм эҙләнә башлайҙар.

Хәҙерге башҡорт телендә сит телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәр бик күп. Башланғыс класс балаларына сит телдән үҙләштерелгән һүҙҙәргә ялғау ҡушыу ауырлыҡтар тыуҙыра. «Сит телдән үҙләштерелгән һүҙҙәргә ялғау ҡушылыу осраҡтары» темаһы 3 –сө класта үтелә.

Мин уҡыусыларыма **циркуль һәм кухня һүҙенә күплек ялғауы ҡушып яҙырға ҡуштым.**

Кемдер **ЦИРКУЛДАР, ЦИРКУЛЬДӘР, ЦИРКУЛДӘР** тип яҙҙы. Был осраҡта уҡыусыларҙа аптырау барлыҡҡа килә – ниндәй ялғау ҡушыу дөрөҫ булыр икән?

Уҡытыусы:

– Ике һүҙгә күплек ялғауы ҡушып яҙығыҙ.

– Ни өсөн циркуль һүҙенә – дар ялғауы ҡуштығыҙ? (сөнки циркуль һүҙендәге [**л**] өнөн уҡыусы ҡалын әйтә һәм ишетә, был дөрөҫ түгел)

Ә кем нәҙек ялғау ҡуша һәм нәҙеклек айырыу билдәһен төшөрөп ҡалдыра, шул дөрөҫ эшләй, сөнки был уҡыусы циркуль һүҙендә нәҙек тартынҡы ишетелеүен төшөнгән.

Уҡыу мәсьәләһен асҡанда проблемалы ситуация тыуҙырҙым һәм уҡыусылар менән ошондай һығымта яһаныҡ.

**Һығымта:** Нәҙеклек билдәһенә бөткән сит телдән үҙләштерелгән һүҙҙәргә ялғау ҡушҡанда һүҙҙең аҙаҡҡы өнө нәҙек әйтелһә, уға нәҙек ялғау ҡушыла һәм нәҙеклек билдәһе төшөп ҡала **циркуль + – дәр – циркулдәр** (һүҙҙең аҙаҡҡы өнө нәҙек, шуға уға нәҙек ялғау ҡушыла), **кухня + – лар – кухнялар** (һүҙҙең аҙаҡҡы өнө ҡалын, шуға ҡалын ялғау ҡушыла).

**Уҡыу** мәсьәләһе тыуҙырыр алдынан гел генә проблемалы ситуация сыҡмаҫҡа мөмкин (уҡытыусы һорауына уҡыусылар дөрөҫ



яуап бирмәҫкә мөмкин). Был осраҡта өндәү диалогына күсеү мотлаҡ.

– Был уҡыусының яуабы менән ризаһығыҙмы? тип һорау дөрөҫ була һәм артабан уҡыусылар үҙ фекерҙәрен әйтә башлайҙар.

### 3. 2. Проблемалы уҡытыу технологияһының һөҙөмтәләре

Башҡорт теле уҡытыу процесында үҙ аллы эшмәкәрлек һәләттәрен үҫтереүгә булышлыҡ итеүсе проблемалы уҡытыу технологияһын ҡулланыу башҡорт телен уҡытыуҙың сифатын үҫтереүгә яҡшы йоғонто яһай. Проблемалы уҡытыу технологияһын ҡулланыу балаларҙы башҡорт телендә күберәк аралашырға, уҡырға өйрәтергә, һүҙлек эшен, уҡыу һәм яҙыу күнекмәләрен әүҙемләштерергә коммуникатив, регулятив, танып-белеү универсаль уҡыу эшмәкәрлеген үҫтереүгә булышлыҡ итә. Был технологияны дәрестең төрлө этаптарында ҡуйырға мөмкин.

Башҡорт теле һәм әҙәбиәт дәрестәрендә проблемалы технологияларҙы ҡулланып уҡытыу процесында балалар олимпиада, конкурстарҙа яҡшы урындар яулай, уҡыусылар тормошта ла төрлө проблемаларҙы хәл итергә өйрәнәләр һәм төрлө яҡлап үҫешкән шәхес итеп тәрбиәләнеп үҫә. Ошо бар эштәр, уҡыусыларҙың уңыштары минең уҡытыу эшемдең яҡшы һөҙөмтәһен күрһәтә, тип уйлайым.

### Йомғаҡлау

Шулай итеп, проблемалы уҡытыу алымын уңышлы ҡулланыу уҡытыусының дөрөҫ итеп проблемалы ситуация тыуҙыра алыуына, уҡыусыларҙы эшкә йәлеп итерлек шарттар булдырыуына, һәр уҡыусыны бүлдермәйенсә иғтибар менән тыңларға сабырлығы етеүенә һәм хәл ителгән проблема буйынса аныҡ һығымта яһай белеүенә бәйле. Проблемалы уҡытыу алымдарын дәрестә әүҙем ҡулланыу уҡытыусының юғары квалификацияға эйә булыуын талап итә. Алдағы дәрестәремдә ошо теманы дауам итеү һәм үҫтереү уйында ҡалам.

*Ғабдуллина Лениза Мөхәмәтнур ҡыҙы,*
*Баҡалы районы муниципаль районының*
*Иҫке Ҡатай урта дөйөм белем биреү мәктәбе*
*муниципаль дөйөм белем биреү бюджет*
*учреждениеһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте*
*уҡытыусыһы*

## Өйрәнәм. Өйрәтәм.

«Фонетика» һәм «Синтаксис» бүлектәре буйынса әҙерләнгән ҡулланма – оҙайлы педагогик эшмәкәрлек барышында туҡтауһыҙ эҙләнеүҙәр аша барлыҡҡа килгән тәжрибә емеше. Үҙенсәлеге һәм яңылығы ла, оригиналлеге лә шунда: һүрәтләнгән күргәҙмә материалдар бер ҡайҙа ла осрамай, улар фәҡәт авторҙыҡы ғына, әммә оҙаҡ һыналған тәжрибә, белем сифатын күтәреүҙең ыңғай динамикаһын булдырыуға ярҙам итеүсе методик ижад, табыштар. Был педагогик тәжрибәнең эффектив булыуы бер нисә быуын уҡыусылар тарафынан иҫбат ителде.

Был хеҙмәттә күрһәтелгән алымдар 30 йыллыҡ эш тәжрибәһендә ижад ителгәндең бер өлөшө булып тора. Күрһәтелгән барлыҡ төшөнсәләр туған башҡорт теленән урта дөйөм белем биреү мәктәптәренең 5-11-се класс уҡыусыларына тәғәйенләнгән дәреслектәрҙә бирелгән ҡағиҙәләргә таяна. Ғилми әҙәбиәт исемлеге эштең аҙағында күрһәтелгән.

Тел ғилеменән башҡа, әҙәби терминологияны, яҙыусылар һәм шағирҙарҙың тормош һәм ижад юлы, ҡатмарлы йөкмәткеле әҙәби әҫәрҙәр сюжетын аңлатыу буйынса ла күргәҙмә материалдар бар, улар бер папкаға тупланған.

Ҡағиҙә булараҡ, уҡыусыларҙа күҙ хәтере яҡшыраҡ үҫешкән. Шуға күрә балаларға ҡағиҙә ятлап ултырыуға ҡарағанда, фәнни материалды төрлө схемалар, ассоциациялар, һүрәттәр, хатта математик формулалар, халыҡ ижады үрнәктәре формаһында (ҡағиҙәне, мәҫәлән, йыр йә һанашмаҡ итеп) үҙләштереү һәм иҫтә ҡалдырыу күпкә ҡыҙыҡлыраҡ та, отошлораҡ та. Шул уҡ ваҡытта был тәжрибәне яңылыҡлы алымдарға индерергә була.



Методик продукт Федераль дәүләт стандарттарында ҡуйылған талаптар һәм һөҙөмтәләр нигеҙендә төҙөлдө. Шәхескә йүнәлтелгән уҡыу-уҡытыу һәм тәрбиә биреү технологиялары мөһим урын алды. Һаулыҡ һаҡлау нормалары, йәш үҙенсәлектәре иҫәпкә алынды.

Актуаллеге. Бөгөнгө мәктәптә туған тел өйрәнеүҙә балалар күп кенә ауырлыҡтар кисерә. Беренсенән, йылдан-йыл туған тел һәм әҙәбиәт дәрестәренең һаны кәмей. Икенсенән, өйҙә лә, балалар баҡсаһында ла, мәктәптә лә туған телдә аралашыу аҙая, шунлыҡтан баланың үҙ телендә иркен һөйләү телмәре ярлылана бара. Китап уҡырға, туған телдә аралашырға яратмаған, шунлыҡтан үҙ теленең күп һүҙҙәрен аңламаған балаға фәнни төшөнсәләрҙе аңлатыу уҡытыусы өсөн дә ҡыйынлыҡтар тыуҙыра. Был хеҙмәт ана шул мәсьәләләрҙе хәл итеүҙе еңелләштереү юлдарын эҙләү маҡсатында ижад ителде.

Күргәҙмә материалдар уҡыусыла тел ғилемен өйрәнеүгә мотивация булдырыуға, логик фекерләү һәләтен үҫтереүгә булышлыҡ итәсәк. Уҡытыусылар өсөн балаларға белем биреүҙә ярҙам ғына түгел, ә методик ижадҡа этәргес ролен уйнар тигән ышаныс бар.

### Практик өлөш

**Эштең маҡсаты.**

1. Тупланған тәжрибә менән уртаҡлашыу, уны компетентлы коллегалар хөкөмөнә сығарыу, бигерәк тә йәш уҡытыусыларға методик идеялар сифатында, мәктәп уҡыусыларына тел серҙәрен өйрәнеүҙә ярҙам рәүешендә тәҡдим итеү, теләктәштәр табыу.

2. Йәш быуынға туған башҡорт телебеҙҙе өйрәтеүгә, эффектив белем биреү методикаһын байытыуға өлөшөмдө индереү.

3. Башҡорт телен модалы итеү идеяһын хуплау.

**Бурыстар.**

1. Эш тәжрибәмдәге иң отошло алымдар һәм методтарҙы һайлап алыу һәм алдынғы тәжрибә итеп таратырлыҡ материалдарҙы асыҡлау.

2. Туған тел буйынса дәреслектәрҙән «Фонетика» һәм «Синтаксис» бүлектәренән уҡыусыларға хәтерҙә ҡалдырыу өсөн ҡатмарлы, буталсыҡлы һаналған, тел дәрестәрендә йыш ҡулланған төшөнсәләрҙе барлау.

3. Фәнни төшөнсәләрҙе еңелләштереп аңлатыу ысулдарын эҙләү.

4. Методик продуктты Power Point программаһы ярҙамында презентация рәүешенә килтереү, күргәҙмә карточкаларға күсереү.

**Көтөлгән һөҙөмтәләр.**

Тәҡдим ителгән материалдарҙы ҡулланыу аша:

А) **уҡыусының:**

– предметҡа ҡыҙыҡһыныуы, тел дәрестәренә һөйөүе арта;

– үҙен фәнни асыш яһаусы сифатында тикшереп ҡарай, унда ижади шәхес уяна;

– бер формалағы мәғлүмәтте икенсе формаға әйләндерә белергә өйрәнә (тексты-схемаға, схеманы-текстҡа, мәҫәлән);

– синтаксик, фонетик анализдарҙы еңел башҡара ала;

– дәрес ғәҙәти күнегеүҙәр менән шөғөлләнеү генә түгел, ә ҡыҙыҡлы ижади процесҡа әйләнә;

– хәтерендә өйрәнелгән фәнни төшөнсәләр оҙаҡ ваҡыт һаҡлана, сөнки уларҙы йыш ҡулланыу, күҙ алдында тотоуҙан уҡыусы, үҙе лә һиҙмәҫтән, ятлап бөтә;

– фекерләү ҡеүәһен, телмәрен үҫтерә;

– ныҡлы белемгә нигеҙ һалына;

Б) **уҡытыусы:**

– оҡшаш методик табыштар эҙләй, ижад итә (башҡа кешенән ниндәйҙер идеяны өйрәнеп кенә ҡалмай, яңы төшөнсәләргә ҡарата ижади сәм уяна);



– дәрес ваҡыты экономиялана (әҙер күргәҙмә материал буйынса аңлатыуы еңелерәк);

– дистанцион уҡытыуҙы ойоштороу процесын еңелләштереү мөмкинлегенә эйә була;

– коррекцион программалар буйынса ла, дөйөм белем биреү программалары менән эшләү өсөн дә универсаль методика менән ҡоралллана.

**Алдынғы тәжрибәне һынау өсөн маҡсатлы төркөм:**

а) төп һәм урта дөйөм белем биреү учреждениелары уҡыусылары;

б) тәжрибә менән ҡыҙыҡһыныусы педагогтар.

**Эшмәкәрлек йөкмәткеһе:**

Педагогик тәжрибә үрнәктәре Power Point презентацияһында күргәҙмә материал итеп эшләнә. Ул слайдтарҙан тора. Слайдтарҙы карточка рәүешендә баҫтырыу ҙа отошло. Был саҡта карточканың бер яғы грамматик материалды сағылдырһа, икенсе яғында тел ғилеме белгесе портреты һәм уның тураһында ҡыҫҡаса мәғлүмәт булырға мөмкин. Күргәҙмә материал, йыш ҡулланылғанлыҡтан, үҙенән-үҙе, автоматик рәүештә, иҫтә ҡала.

1. Өндәр системаһын «Әпипә» көйөнә йырлап иҫтә ҡалдырыу.

Бының өсөн өндәр, махсус рәүештә, ятлауы еңел булырлыҡ итеп теҙелә: мәҫәлән, бывыгығы (1 һүҙ), дыжызыҙы (1 һүҙ) – яңырау тартынҡылар. Артабан йырлау өсөн куплеттарға бүленә, унан уҡыусылар менән бергәләп йырлана. Өндәрҙе ҡабатлағанда ла, бер өн дә «юғалмай».

Был күргәҙмә материалды хатта башланғыс синыф уҡыусылары ла еңел ҡуллана. Уҡытыусылар өсөн дә уңайлы. Шуныһы тағы ҡыҙыҡ һәм иғтибарға лайыҡ: 11 класты уҡып сығып киткән балалар ҙа ошо «йыр»ҙы хәтерендә тота. Фонетик «Әпипә»—тәғәйенләнеше буйынса универсаль.

2. Юғары кластарҙа (10-11 кл.) фонетик анализ яһағанда йә һәләтле баланы олимпиадаға әҙерләгәндә өндәргә тулыраҡ ҡылыҡһырлама бирергә өйрәтеү зарурлығы тыуа. Ул ваҡытта

«Һуҙынҡы өндәр», «Тартынҡы өндәр» таблицалары ярҙамға килә. Таблицаларҙа өндәр теләһә ниндәй тәртиптә түгел, ә иҫтә ҡалдырыу өсөн уңайлы «һүҙ» итеп урынлаштырылған. Һуҙынҡы өндәр таблицаһында фонетик «Әпипә»лә осрағанса теҙелгән:аоуы; әөү иэ; оөуү. Ошо рәүешле төшөнсәне хәтерҙә тағы ла нығыта.

«Тартынҡы өндәр» таблицаһында ла өндәр теҙмәһе еңел иҫтә ҡалдырыу өсөн уйлап эшләнгән.

3. Һөйләмдәргә синтаксик анализ яһаған ваҡытта күпселек уҡыусылар һөйләм киҫәктәренең һорауҙарын онотоусан, ҡайһы берҙәре уларҙы һүҙ төркөмдәре менән дә бутай. Был хәл башҡорт теле буйынса олимпиадаға килгән һәләтле балалар араһында ла йыш ҡына күҙәтелә. Шундай хәлдә һөйләм киҫәктәренең төп һорауҙарынан төҙөгән халыҡ ижады үрнәге-һанашмаҡтарым уҡыусыларға ҡулланырға уңайлы. Был һанашмаҡтарҙы түбән класс балалары менән уйын ойоштороғанда файҙаланырға ла мөмкин. Юғары һәм урта кластарҙа уҡыусы балалар телмәрендә ошо һанашмаҡтар, оҙаҡ йылдар ҡулланыу сәбәпле, тиҙәйткескә әйләнеп китә.

4. Фәнни төшөнсәләрҙе төрлө ассоциациялар менән иҫтә ҡалдырыу ҙа отошло. Теманы йә айырым төшөнсәне ниндәйҙер предмет йә күренештәр менән сағыштырыу, тәңгәл килтереүҙәр табып аңлатаһың икән, был тыңлаусының хәтерендә шуларға бәйле иҫтә ҡала. Мәҫәлән, өй, йортто-һөйләм, һөйләмде-ғаилә, һөйләм киҫәктәрен ғаилә ағзалары итеп күҙ алдына килтереп була. Эйәне атай менән сағыштырабыҙ, сөнки башҡорт ғаиләһендә төп хужа–ул! Хәбәрҙе әсәй менән аңлатабыҙ, сөнки уның эше һәр саҡ күп, ә хәбәр эште белдерә. Аныҡлаусыны тулҡынлы һыҙыҡ менән билдәләп йөрөткәс, әүеркәле күлдәк итәген хәтерләтә – ҡыҙ менән сағыштырабыҙ. Тултырыусы – малай, джинсы салбар кейгән (уның йөйҙәре айырылып күренеп тора), уға джинсы әйберҙәке кеүек «йөй» яһап һыҙабыҙ. Ә хәл – ул төпсөк бала, тиҙ «арый», шуға күрә бер аҙ һыҙып барғас, «ултырып» ял итә-нөктә ҡуйып алғас, юлын тағы дауам итә. Был алым һөйләм киҫәктәрен еңел иҫтә ҡалдырыр өсөн һәм һөйләм киҫәктәрен һүҙ төркөмдәренән айырыу өсөн бик һәйбәт.



Ябай һәм ҡушма һөйләмдәрҙе өйрәнгәндә, ябай һөйләмде 1 ғаилә йәшәгән йорт (1 «грамматик нигеҙ»: атай+әсәй; атай ғына; әсәй генә булырға мөмкин), ҡушма һөйләмде 2 йәки күберәк ғаилә йәшәгән йорт (һәр фатирҙың үҙ «грамматик нигеҙе» бар) менән сағыштырып була.

Бер һәм ике составлы һөйләмдәрҙе лә ассоциациялар менән аңлатыу еңел. Был темала баш киҫәктәрҙең мөһим роль уйнағанын күҙҙә тотоп, схема рәүешендә генә бирергә мөмкин. Һөйләмдең «атаһы» ла (эйә), «әсәһе» (хәбәре) лә бар икән, ул ике составлы, әгәр «атаһы» ғына йә «әсәһе» генә булһа (тормошта ла шундай күренештәр була бит), бындай конструкцияны бер составлы тип йөрөтәбеҙ.

Әгәр үрҙә һүрәтләнгән схемаға «балалар»ҙы ла (һөйләм киҫәктәрен) ҡушып ебәрһәк, йыйнаҡ һәм тарҡау һөйләмдәр тураһында һүҙ алып барырға мөмкин. Кластағы балаларҙың үҙҙәренең ғаиләләрен миҫалға килтереү теманы тағы ла аңлайышлыраҡ итә.

Уҡыусыларға ла ошондай тәжрибәләр оҡшай. Тәбиғәттән, тормоштан шундай параллель күренештәрҙе, төшөнсәләрҙе табыу ҡыҙыҡ. Предмет-ара бәйләнеште нығытыу өсөн яҡшы алым. Мәҫәлән, күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәр эсендәге ябай һөйләмдәрҙең үҙ-ара бәйләнешен физика дәресендә өйрәнгән ток үткәргес проводтарҙы параллель тоташтырыу, бер-бер артлы тоташтырыу күренеше аша аңлатыу ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра.

Бер һәм ике составлы һөйләмдәр темаһын ҡабатлау ваҡытында уҡыусыға һүрәттәр тәҡдим итергә мөмкин. Һүрәттәргә ҡарап, бала теманы тулыһынса асып бирергә тейеш. Был алым баланың фекерләүен, телмәрен үҫтерә, уйларға, иҫкә төшөрөргә мәжбүр итә. Бер форматтағы мәғлүмәтте икенсе форматҡа әйләндерә белеү һәләтен камиллаштыра, регулятив эшмәкәрлекте көйләй.

5. Ябай һәм ҡушма һөйләмдәрҙә тиң киҫәктәрҙе табыу, айырыу, улар эргәһендә тыныш билдәләрен дөрөҫ ҡуйыу проблемаһы ла йыш осрай. Шуға күрә ошо материалды бер урынға туплап, уҡыусының күҙ алдында йыш тотоу файҙа бирә. Нимә ул тиң киҫәк? Уның билдәләре ниндәй? Тиң киҫәк булыу өсөн һөйләм киҫәктәре ниндәй шарттарға буйһонорға тейеш?Ниндәй һөйләм киҫәктәре

тиң була ала?Улар эргәһендә дөйөмләштереүсе һүҙҙәр нисек яҙыла, ниндәй тыныш билдәләре ҡуйыла? Был мәғлүмәттәрҙе лә бер урында туплап күрһәтеү ошо төшөнсәгә ҡарата системалылыҡ булдыра. Бер ыңғай теркәүестәр тураһында белемдәрҙе лә иҫкә төшөрә.

6. Башҡорт теленән фәнни төшөнсәләрҙе аңлатҡанда, математик формулаларҙы ла ҡулланып була. Ҡатмарлы синтаксик конструкциялар темаһын үткәндә, күп эйәрсәнле ҡушма һөйләм, ҡатнаш ҡушма һөйләмдәрҙе аңлатыу өсөн, бала хәтерендә оҙаҡ һаҡланһын өсөн, математик формулаларға оҡшатып, лингвистик формулалар төҙөү, ҡулланыу тәжрибәһе менән дә уртаҡлашҡы килә. Был формулалар тема буйынса тәрән белем бирмәһә лә (ундай маҡсатта схемалар айырым төҙөлдө), ҡатмарлы синтаксик конструкцияларҙың структураһын аңлатырға һәм аңларға, иҫтә ҡалдырырға мөмкинлек ҡуя.

Һығымта. Был хеҙмәт-дәрестә ҡулланыу өсөн, балаларға эффектив белем биреү өсөн әҙер методик продукт. Ул бөгөнгө заман белем биреү системаһы талаптарына яуап бирә. Уҡыусыларҙың фекер йөрөтөү, интеллектуаль һәм ижади һәләттәрен үҫтереүгә, тормош ҡуйған проблемаларҙы хәл итеүҙә кәрәкле универсаль уҡыу эшмәкәрлеген формалаштырыуҙа әһәмиәте бәхәсһеҙ. Уҡытыуҙың шәхси, предмет һәм метапредмет һөҙөмтәләренә ирешеүҙә ҙур ярҙам күрһәтер, тип ышанғы килә.

Продуктты ҡулланыу, һис шикһеҙ, уҡыусыларҙа телде өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныуҙы арттырыр, уның һөҙөмтәһе белем кимәленең позитив динамикаһында күренәсәк.



***Ғәзизова Әлфиә Рәүф ҡыҙы,***
*Өфө ҡалаһы ҡала округының 58-се Лицейҙың*
*башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы*

# Башҡорт теле дәрестәрендә коммуникатив компетентлыҡ формалаштырыуҙың эффектив алымы булараҡ тематик телмәр үҫтереү карталары

Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына ярашлы башҡорт дәүләт теле уҡытыусыларының маҡсаты – башҡортса аралашыу компетентлығын-йәки коммуникатив компетентлыҡ формалаштырыу. Бөгөнгө көндә Башҡортостан йәмғиәте өсөн был мәсьәлә бик актуаль. Сөнки республика башлығы Радий Фәрит улы Хәбиров тарафынан башҡорт теленә ҙур иғтибар бүленә башланы һәм һуңғы ике йыл эсендә телде үҫтереү һәм заманса ҡулланыу яғынан бик күп эштәр эшләнде.

Уҡытыусыларҙың бурысы – башҡорт телен өйрәнеүҙе яңы кимәлгә күтәреү һәм йәмғиәттең телгә ҡарашын ыңғай яҡҡа бороу. Быны өсөн һәр уҡытыусы заманса технологияларҙы өйрәнеп кенә ҡалмайынса, уларҙың араһынан иң уңышлы, һөҙөмтәләр килтерерлеген һайлап алып эшләргә бурыслы. Уҡыусыларҙа сит телдә һөйләшеү өсөн һүҙлек запасы булдырыу менән бергә грамматик материалды ла аңлайышлы итеп биреү юлдары ла эҙләргә кәрәк.

Ғөмүмән, ниндәй генә тел булмаһын, уны өйрәнеү һәм өйрәтеү ҡатмарлы процесс. Йылдан-йыл тормош менән бергә уҡыусыларҙың дәрес материалын үҙләштереү ысулдары ла үҙгәрә. Балаларға күберәк күргәҙмә материалдар әҙерләргә, видеояҙмалар, төрлө интерактив уйындар уйнатыу кәрәк. Ҡулдарынан смартфондарын төшөрмәгән балаларға белемде системалаштырып бирергә кәрәклеге лә бик мөһим икәне аңлашыла.

Мәғлүмәтте хәтерҙәрендә тиҙ һәм оҙайлы ваҡытҡа ҡалдырһындар өсөн ысулдар эҙләгәндә, интеллект карталар йәки менталь карталар тигән алымға тап булдым. 1960-сы йылдарҙан уҡ өйрәнелгән был алым әлеге көндә айырыуса бик актуаль. Сөнки әлеге заманда балаға ла, өлкән кешегә лә бик күп мәғлүмәтте иҫтә ҡалдырырға, системалаштырырға кәрәк.

Ошо методик эшемдә мин интеллект карталарҙы төҙөү ысулдарын, уларҙы дәрес этаптарында ҡулланыу мөмкинлектәрен, формаларын күрһәтеп китәсәкмен. Башҡорт телен дәүләт теле итеп уҡытҡан уҡытыусыларға был методик ҡулланма бик файҙалы булыр, тип ышанам.

Башҡорт дәүләт телен уҡытыу икенсе кластан, туған тел беренсе кластан уҡытыла. Эш программаларына ярашлы, дәрес темалары тематик төркөмдәргә бүленеп бирелгән. Йыл һайын был тематик төркөмдәр тулыландырыла. Һәр темаға ҡараған һүҙлек кимәле, мәғлүмәт арта. Аҙнаһына бер сәғәт эсендә был темалар бик тиҙ үтелеп бөтә. Бала хәтеренә был темаларға ҡараған һүҙҙәрҙән бик аҙы ғына хәтерендә ҡала. Аффектив алым ҡулланылған дәрестәрҙә генә әйтелгән һүҙҙәр тиерлек: әсәй, өләсәй, матур, китап, ҡара, ҙур, айыу, ҡуян, уйнайым, ашайым һәм башҡа һүҙҙәр. Ә беҙҙең маҡсат – башҡортса телмәр тыуҙырыу. Тимәк, беҙ балаларҙың фекерләү ҡеүәһен, хәтерен үҫтереүсе алымдар ҡулланырға тейешбеҙ. Шундай алымдарҙың береһе – интеллект карталар алымы.

Методик эшемдең маҡсаты дәүләт телен уҡытыу эшен ҡыҙыҡлы, һөҙөмтәле итеп уҡытыуға өҫтәмә алым тәҡдим итеү. Телмәр компетентлығын формалаштырыуҙа ярҙам итерлек материал менән уртаҡлашыу.

Британия психологы Тони Бьюзен – үҙ үҙенде камиллаштырыу-хәтерҙе, фекерләүҙе үҫтереү өлкәһендә бик күп тикшеренеүсе белгес. Ул студент сағынан белем алыу процесында бирелгән мәғлүмәттәрҙе хәтерҙә ҡалдырыу ысулдарын эҙләй. Баш мейеһенең төҙөлөшөн, үҙенсәлектәрен, нейрофизиологияны, нейролингвистиканы өйрәнгәндән һуң, ул үҙенең фекерләү ҡеүәһен үҙгәртергә кәрәк икәнлеген аңлай. Мейеләге нейрондарҙың төҙөлөшөн



күреп иҫе китә. Баҡтиһәң, улар тармаҡланған ағас формаһында икән. Шул формаға нигеҙләнеп ул үҙенең фекерләү карталарын төҙөй ҙә инде.

Интеллект карталарҙың тәбиғилек принцибына таянып төҙөлөүе күләмле мәғлүмәтте иҫтә ҡалдырыуға булышлыҡ итә. Сөнки кеше организмының барлыҡ функциялары, шул иҫәптән фекерләү процесы ла тәбиғи йүнәлештә булырға тейеш.

Интеллект карталар төҙөлөшө буйынса бик ябай. Аҡ ҡағыҙҙың уртаһына билдәле бер теманы яҙабыҙ ҙа, унан төрлө яҡҡа тармаҡландырып, был темаға ҡараған төп йүнәлештәрҙе яҙабыҙ. Һәр йүнәлеш төрлө төҫлө булырға тейеш. Ни тиклем төҫтәр күберәк, шул тиклем мәғлүмәт күберәк иҫтә ҡала. Артабан был төп йүнәлештәрҙән тағы ла тамырҙар ебәреп һүҙҙәр яҙырға кәрәк. Һәр тамыр йәки ботаҡ тик бер һүҙле һәм төрлө төҫлө була. Үҙәк һүҙ төп теманы белдергәс ул ҡалын хәрефтәр менән яҙылырға тейеш.

Бирелгән темаға ҡараған иң кәрәкле һүҙҙәрҙе теркәү процесында ул төрлө ассоциациалар күҙ алдына килтерә, кәрәкле мәғлүмәтте иҫендә ҡалдыра. Карталарҙы төҙөү процесын дәрестә, уҡыусылар менән берлектә ойошторорға мөмкин. Был эш уларҙың когнитив һәләттәрен үҫтерә. Сөнки интеллект карталар төҙөү, уларҙы иҫтә ҡалдырыуҙа баш мейеһенең ике ярымшары ла ҡатнаша. Һүҙҙәр урынына шулай уҡ һүрәттәр ҙә ҡулланырға мөмкин.

Интеллект карталарҙы мин башланғыс кластарҙа башҡорт дәүләт телен уҡытыуҙа уңышлы алым тип таптым. Бәләкәй күләмле карталарҙан башлап башланғыс синыфты тамамлауға уртаса күләмле картаға күсәбеҙ, балаларҙың һүҙлек кимәле лә икенсе класты тамамлауға башҡортса аралашыу өсөн 5-6 һөйләм төҙөрлөк, һорауҙарға яуап бирерлек була.

Карталар менән эш шулай уҡ предмет, метапредмет, шәхси һөҙөмтәләрҙе үҫтереүгә булышлыҡ итә.

Башҡорт теленә, башҡорт халҡына һәм уның мәҙәниәтенә хас формалар ҙа ҡулланып була. Мәҫәлән, кәрәҙ формаһын ҡулланыу. Ете күҙәнәктән торған кәрәҙ формаһының уртаһына үҙәк темаға ҡараған һүрәт йәки һүҙ беркетелә. Сәғәт телдәре йөрөшө буйлап был темаға ҡараған төп йүнәлештәрҙе яҙып, йәки һүрәттәр ҡуйып сығабыҙ.




Уҡыусылар бындай ижади эште үҙҙәре лә ихлас башҡаралар.

Бөйөк халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың шиғырында әйтелгәнсә, беҙ балалар менән халыҡтың сәскә күңеленән бал ҡорттары һымаҡ һүҙҙәр-һнйылар йыябыҙ ҙа матур мәғәнәле текст – хуш еҫле кәрәҙ ҡуябыҙ. Кәрәҙҙең һәр күҙәнәге темаға ярашлы һүрәттәр менән тултырылға мөмкин. Уларҙы подтема тип әйтеп, һәр береһенә ҡараған һүҙҙәрҙе табабыҙ. Кәрәҙҙә бирелгән темаға ярашлы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе иҫтә ҡалдырғас, балалар ваҡыт үтеү менән был темаға ҡараған тексты тиҙ иҫкә төшөрәләр.

Шулай уҡ интеллект карталарҙы онлайн вариантта ла эшләргә мөмкин.

Бының өсөн һәр уҡытыусы https://www. mindmeister. com/ru сайтына шәхси кабинет асып, кәрәкле темаға онлайн карталар эшләй ала. Был сайтта карталар төҙәр өсөн бөтә кәрәкле материалдар ҙа бар.






Интеллект карталар менән төрлө грамматик эштәр башҡарырға мөмкин. Мәҫәлән «Мәктәп» темаһына ҡараған карта:

1. Карталағы һүрәттәргә ҡара, белгән һүҙҙәрҙә әйт.
2. Кемдәрҙе, йәки нимәләрҙе күрәһең?
3. Һәр һүҙ менән һүҙбәйләнеш төҙө.
4. Темаға ярашлы бер нисә һөйләм төҙө.
5. Уҡытыусы һәм уҡыусы менән бәйле телмәр ситуацияһын төҙө.
6. Яратҡан шөғөлөң тураһында һөйләм төҙө.
7. Һеҙҙең кабинетығыҙҙа нимәләр бар?
8. Класташың ниндәй? Һ. б. һорауҙар.

Бәйләнешле телмәр үҫтереү өсөн кәрәҙ формаһында төҙөлгән карталар шулай уҡ уңайлы. Башланғыс кластарҙа эштәр ябайыраҡ булһа, өлкәнерәк кластарҙа грамматик эштәрҙе ҡатмарлыраҡ, әммә уҡыусы эшләй алырлыҡ итеп бирергә мөмкин.

Тематик телмәр үҫтереү карталарын таблицалар ярҙамында ла бирергә мөмкин. Был телмәр үҫтереү карталарында билдәле бер темаға ҡараған яңы һүҙҙәр, төрлө яһалыу юлдары менән төҙөлгән һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр, телмәр ситуациялары, текстар бар. Һүҙҙәр бер нисә һүҙ төркөмөнә ҡарай. Әммә уларҙы уҡыусы айырым түгел, ә контекста иҫтә ҡалдырырға тейеш. Бирелгән телмәр берәмектәрен грамматик тема менән дә бәйләргә була. Текст эсендә яңы һүҙҙең ҡулланылыу формалары, урыны, кимәле күренә һәм бала аңында телмәр берәмектәре системаға һалынып бара.

**ҺҮҘҘӘР** **ҺӨНӘРҘӘР**

аҡса-деньги
аш-һыу-еда
ашнаҡсы-повар
ашханасы-работник столовой
баҡсасы-садовник
балыҡсы-рыбак
бина-здание
бөҙрәхана-парикмахерская
ғалим-ученый
йөрөтөүсе-водитель
йорт-заведение
китапханасы-библиотекарь
ҡайсы-ножницы
ҡорал-инструмент
ҡотҡарыусы-спасатель
оҫта-мастер
өй-дом
өлкә-область
рәсем-рисунок
рәссам-художник
сара-средство
сәс алыусы-парикмахер
табип-врач
тарихсы-историк
тегенсе-швея, портной
тимерсе-кузнец
тире-кожа
төҙөлөш-строительство
төҙөүсе-строитель
туҡыма-ткань
тәржемәсе-переводчик

уҡытыусы-учитель
уҡыусы-ученик
умартасы-пчеловод
урам-улица
үҫеш-рост
хеҙмәткәр-служащий
хикәйә-рассказ
хәүефһеҙлек-безопасность
һаҡланыу-защита
һалдат-солдат
һатыусы-продавец
һатып алыусы покупатель
һөнәр-профессия
һөнәр эйәһе-специалист
шағир-поэт
шиғыр-стихотворение
шәфҡәт туташы-медсестра
энә-игла
эшмәкәрлек-деятельность
эшкәртеүсе-обработчик
эшсе-рабочий
эш хаҡы-зарплата
юл-дорога
яҙыусы-писатель
янғын һүндереүсе -пожарный
ярҙамсы-помощник

ауыр-тяжелый
билдәле-известный
ғилми-научный
дөрөҫ-правильный, верный
ентекле-тщательный
киң-широкий
күп ҡатлы-многоэтажный
ҡатмарлы-сложный
ҡыйыу-смелый
танылған-признанный
тәмле-вкусный
тәүлек әйләнәһенә-круглосуточно
тырыш-старательный
хәрби-военный
эшсән-трудолюбивый
юғары-высокая
яуаплы-ответственный

баҫтырырға-издавать
башҡарырға-выполнять
бешерергә-печь
ҡыҙыҡһындыра-интересует
тегергә-шить
тоторға-ловить
төҙөкләндерергә-благоустраивать
төҙөргә-строить
төшерергә-рисовать
түләргә-платить
тәржемә итергә-переводить
уҡытырға-обучать
үҫтерергә-выращивать
хеҙмәт итергә-служить
хыялланырға-мечтать
һайларға-выбирать
һаҡланырға-беречься
һаҡларға-оберегать, беречь
һалырға-класть, строить
һатырға-продавать
һүндерергә-тушить
эшкә алырға-взять на работу
эшләргә-работать
әҙерләргә-готовить

**ҺҮҘБӘЙЛӘНЕШТӘР** тире эшкәртеүсе, күп һөнәр эйәләре, полиция хеҙмәткәре, йорттар һалыусы һөнәре, эш ҡоралдары, хәрби хеҙмәткәр, хәүефһеҙлек һаҡлау, ғилми институтта эшләй, баҡса үҫтерә, рәссам рәсем төшөрә, билдәле ғалим, заводҡа эшкә алалар, яңы өй төҙөй, эште оҫта башҡара, юлды төҙөкләндерәләр, диңгеҙҙә балыҡ тоталар, ҙур эш хаҡы, тегенсенең ҡоралы, оҫта сәс алыусы

**ҺӨЙЛӘМДӘР**

Минең атайым янғын һүндереүсе.
Һәр һөнәрҙең оҫтаһы бар.
Киләсәктә табип булырға хыялланам.
Яҙыусылар роман, повесть, хикәйәләр баҫтыралар.
Һалдаттар ил сиктәрендә хеҙмәт итәләр.
Әсәйем һатыусы булып эшләй.
Юғары уҡыу йорттарында белемле һөнәр эйәләре әҙерләйҙәр.
Ашнаҡсылар ашханала тәмле аштар бешерәләр.
Төҙөүселәрҙең эштәре ауыр һәм ҡатмарлы.
Һөнәрҙе дөрөҫ һайларға кәрәк.

**ТЕЛМӘР СИТУАЦИЯЛАРЫ**

- Сәләм Светлана!
- Һаумы Дамир!
- Ҡайҙа китеп бараһың?
- Һөнәр һайлау буйынса лекция уҡыйҙар, тыңлағым килә.
- Ә мин һөнәрҙе һайланым инде. Теш врачы булам.
- Яҡшы. Ә мин әлегә һайлай алмайым. Һөнәр киләсәк менән бәйле. Шуға бик яуаплы ҡарайым.
- Эйе, һин аҡыллы ҡыҙ. Афарин Светлана! Һау булып тор!
- Уңыштар!

- Антон, һаумы!
- Һаумыһығыҙ, Вилдан Вәлиевич!
- Кисә һине магазинда күргәйнем, эшләйһеңме әллә?
- Эйе, ата-әсәйемә ярҙам итәм. Юлыма, аҙыҡ-түлеккә етерлек эш хаҡы түләйҙәр.
- Афарин, егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ, тиҙәр. Ата-әсәйеңә рәхмәт, шундай эшсән, тырыш егет үҫтергәндәр.
- Рәхмәт, Вилдан Вәлиевич.
- Лекцияға һуңлама, табип һөнәренә лә тырышып уҡырға кәрәк.
- Эйе, һуңламаҫмын, һау булығыҙ.

**ТЕКСТ** Һөнәр эйәһе булыу

Донъяла меңәрләгән һөнәр бар. Кеше үҙенә яраған һөнәрҙе тик үҙе генә һайлай ала. Бының өсөн ул ҡыҙыҡһынған йүнәлештәрен барларға тейеш. Дөрөҫ һөнәр һайлау өсөн тестар ҙа эшләргә була. Был бик мөһим мәсьәлә. Сөнки кешенең киләсәге уның һөнәре менән бәйле.

Мин …… һөнәрен һайлайым. Сөнки был һөнәр эйәләре …., …., …. кешеләр. Улар кешелеккә, илгә ҙур үҫеш килтерә. Бының өсөн миңә ….юғары уҡыу йортона уҡырға инергә кәрәк. Мин тырышып имтихандарға әҙерләнәм.

**МӘҠӘЛДӘР**

Тирләп эшләһәң, тәмләп ашарһың.
Түккән көсөң буш булмаҫ, эшләгән күңел хуш булмаҫ.
Тырышҡан тапҡан, ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан.
Тырышҡан кеше ас ҡалмаҫ.
Тырышҡан — моратына ирешкән.
Һөнәре бар ҡом өҫтөндә кәмә йөрөтөр.
Һөнәр -һөнәрле ҡулында ғына һөнәр, һөнәрһеҙ ҡулында түмәр.
Һөнәрле кеше — ҡоралды кеше.
Эшең һәм аҡылың барҙа һаулығыңа үлем булмаҫ.
Эш башында маҡтанма.



Һүҙлек бүлеге менән грамматик күнегеүҙәр:

- Микротемаларға айырыу;
- Тамырҙаш һүҙҙәр табыу;
- Синоним, антонимдар табыу;
- Сингармонизм законына ярашлы йыйыу;
- Ижектәргә бүлеү;
- Баҫым ҡуйып сығыу;
- Сифат-исем, рәүеш-ҡылым һ. б. Һүҙбәйләнештәр төҙөү;
- Һәр һүҙгә ассоциациялар табыу;
- Тәржемә итеү;
- Күплек ялғауҙарын ҡушыу;
- Килеш менән үҙгәртеү;
- Эйәлек ялғауҙарын ҡушыу;
- Һүҙбәйләнеш төҙөү;
- Зат, заман менән үҙгәртеү һ. б.

Карталар еңелдән ауырға, интеграция (өлөштәрҙе берләштереү), дифференциация (өлөштәргә тарҡатыу) һәм функционаллек (һүҙҙәрҙе телмәр эшмәкәрлегендә ҡулланыу) принциптарына таянып эшләнә. Унда бирелгән телмәр берәмектәрен дәрестең төрлө этабы, формалары менән бәйләргә мөмкин. Мәҫәлән, яңы тема өйрәнеү дәресендә иғтибар күберәк уҡыусыға таныш түгел һүҙҙәргә, һүҙбәйләнеш, һөйләм төҙөүгә бүленһә, ҡабатлау дәресендә телмәр ситуациялары һәм текст төп урынды яулай. Диалогтарҙы дәрес башында ҡабатлау өсөн дә, белемдәрҙе активлаштырыу маҡсаты менән индерергә була.

Һәр телмәр үҫтереү картаһында телмәр ситуациялары, текстар, мәҡәлдәр билдәле бер тәрбиәүи мәғәнә менән бирелгән. Дәрес барышында уҡытыусы был диалогтар менән эшләһә, йәки уҡыусыларҙан оҡшаш ситуациялар төҙөтһә, тәрбиәүи маҡсатҡа ирешәсәк

Телмәр карталарын төҙөү һәм улар буйынса дәрестән дәрескә эшләү шулай уҡ балаларҙың когнитив һәләттәрен үҫтереүгә булышлыҡ итә: бала һүрәттәргә ҡарап һүҙҙәр таба, һүҙҙәрҙе күрә, ишетә, әйтә, ҡабатлай һәм иҫендә ҡалдыра.

Шулай итеп, тематик телмәр үҫтереү карталары башҡорт теленән кәрәкле һүҙлек запасы булдырыуға, бәйләнешле телмәр

үҫтереүгә булышлыҡ итә. Интеллект карталар башҡорт телен уҡытыуҙа һөҙөмтәләргә ирешеү өсөн уҡытыусыға методик ярҙам булып тора һәм уҡыусыларҙың башҡортса бәйләнешле телмәрен үҫтереүгә үҙ өлөшөн индерер, тип уйлайым.

**Төп өлөш. Тематик интеллект карталар.**




Телмәр үҫтереү өсөн темалар:

Уҡытыусы. Кем? Ниндәй? Нимә эшләй?

Мин – өлгөлө уҡыусы. Класташтарым кем? Минең дуҫ класташым.

Минең шөғөлдәрем. Көн режимым. Эш һөҙөмтәләрем.

Беҙҙең яҡты һәм матур кабинет. Нимәләр бар? Ҡайҙа тора? Ниндәй?

Уҡырға, белем алырға яратам. Китап-белем шишмәһе. Ниндәй китап уҡыйым?

Уҡыу кәрәк-ираҡтары. Пеналымда нимә бар? Төҫтәр.



Мин уҡыған мәктәп. Мәктәп ҡайҙа урынлашҡан? Ниндәй? Мәктәпте тамамлаған танылған кешеләр.

**МӘКТӘБЕМ. МОЯ ШКОЛА.**

**ЯҢЫ ҺҮҘҘӘР**

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| ай-месяц | ҡыңғырау-звонок | белемле-образованный | алырға-получать, ҡала-остается | бөгөн-сегодня |
| алды-перед | ҡәләм-карандаш | иң-самый | ашығырға-торопиться | бөтә-все |
| ашхана-столовая | майҙан-площадка | иркен-просторный | баҫып торорға-стоять | зинһар-пожалуйста |
| баһа-оценка | миҫал-пример | ҡатмарлы-сложный | борсолорға-расстраиваться | иртәгә-завтра |
| белем-знание | мәктәп-школа | насар-плохой | белем алырға-получать знания | кисә-вчера |
| бина-здание | сәғәт-часы,время | тырыш-старательный | белергә-знать, үткәрергә-проводить | унда-там |
| ваҡыт-время | сәхнә-сцена | тәртипле-воспитанный | күрһәтергә-показать | һәм-и |
| дәрес-урок | таҡта-доска | төрлө-разные | ҡуйырға-ставить, поставить | һәр-каждый |
| дәреслек-учебник | тамаша залы-актовый зал | уңышлы-успешный | ойоштororға-организовать | шулай уҡ-так же |
| дәфтәр-тетрадь | тәҙрә-окно | хөрмәтле-уважаемый(ая) | осратырға-встретить | |
| ишек-дверь | урын-место | һәйбәт-хорошо, хороший | планлаштырырға-планировать | |
| ихата-двор | уҡыусы-ученик(ца) | һуңғы-последний | сығыш яһарға-выступать | |
| йыл-год | уҡытыусы-учитель | яҡты-светлый | сисергә-решать что-то | |
| көндәлек-дневник | усаҡ-костер | | тырышырға-стараться | |
| китап-книга, | хата-ошибка | | тултырырға-заполнять | |
| китапхана-библиотека | һорау-вопрос | | уҡырға-учиться, читать | |
| кәштә-полка | һуҡмаҡ-тропа | | ултырырға-сидеть | |
| күнегеү-упражнение | эш-работа | | әҙерләнергә-готовиться к чему-либо | |
| ҡабатлау-повторение | әсбап-пособие | | әҙерләргә-готовить что-то | |
| ҡат-этаж | янында-рядом | | яҙырға-писать, төҙәтергә-исправлять | |
| ҡағиҙә-правило | | | ярышырға-соревноваться | |

**ҺҮҘБӘЙЛӘНЕШТӘР:**

Белем көнө, мәктәп уҡыусылары, уҡыусы көндәлеге, яҡшы баһа, насар баһа, хөрмәтле уҡытыусы,белемле уҡыусы, доклад әҙерләргә, семинарға әҙерләнергә, сәхнәлә сығыш яһарға, уҡырға ваҡыт, һуңғы ҡыңғырау, миҫал сисергә, көндәлек тултыра, китапханала ултыра, мәктәп ишеге, мәктәп алды.

**ҺӨЙЛӘМДӘР**

Мәктәп-белем усағы.
Минең ҡустым ҙур һәм матур мәктәптә белем ала.
Беҙҙең мәктәп бинаһы дүрт ҡатлы.
Башҡорт теле кабинеты яҡты һәм ҙур.
Бөгөн ағайым һуңғы ҡыңғырауға китте.

Дуҫым менән бергә беҙ класта иң тәртипле уҡыусылар.
Класташым мине ашхана янында осратты.
Яҡшы уҡырға теләгән уҡыусы китапхананы ярата.
Насар баһа алһам, әсәйем борсола.
Апайым университетта һәйбәт уҡый, шуға иртәгә семинарҙа сығыш яһай.

**ТЕЛМӘР СИТУАЦИЯЛАРЫ**

| | |
|---|---|
| - Сәләм!<br>- Сәләм!<br>- Азат, ҡайҙа ашығаһың?<br>- Дәрескә. Доклад менән сығыш яһарға кәрәк.<br>- Әҙерләндеңме?<br>- Эйе, презентацияны ла әҙерләнем.<br>- Ярай, уңышлы сығыш һиңә.<br>- Рәхмәт Ринат. Осрашҡанға тиклем!<br>- Хуш! | - Һаумыһығыҙ Зөлфиә Зөфәр ҡыҙы.<br>- Һаумы Айнур. Ниндәй һорау менән килдең?<br>- Кисә эшләгән эшемдең хаталарын төҙәтергә килдем. Ярҙам итегеҙ әле.<br>- Әйҙә, төҙәтәйек. Ултыр.<br>- Рәхмәт Зөлфиә Зөфәр ҡыҙы.<br>- Ярай, ҡағиҙәне ҡабатла. Тырышып уҡы.<br>- Һау булығыҙ.<br>- Һау бул. |

**ТЕКСТ**

Мин Дамир, бишенсе класс уҡыусыһы. Өфө ҡалаһында, 15-се мәктәптә белем алам. Беҙҙең мәктәп ҙур, дүрт ҡатлы. Бөтә кабинеттар ҙа яҡты, иркен. Шулай уҡ мәктәп бинаһында спорт залы, тамаша залы, ашхана һәм китапхана бар. Минең иң яратҡан урыным -китапхана һәм спорт залы.

Мәктәп ихатаһында ҙур спорт майҙаны бар. Унда беҙ төрлө спорт уйындарын уйнайбыҙ, ярыштар ойоштorабыҙ.

Беҙҙең мәктәптә юғары квалификациялы ихтирамлы уҡытыусылар эшләй. Минең яратҡан дәресем-математика. Миңә ҡатмарлы миҫалдар сисергә оҡшай.Уҡытыусылар беҙгә ныҡлы белем бирә. Беҙгә тырышып белем алырға ғына ҡала.

**МӘҠӘЛДӘР**

Белмәү гәйеп түгел, белергә тырышмау – гәйеп.
Белем—энә менән ҡойо ҡаҙыу.
Белмәгәндең беләге тыныс, белгәндең йөрәге тыныс.
Уҡыған ил уҙыр, уҡымаған ил туҙыр.
Уҡыу - белем шишмәһе.

Аҡыл һуң төшә, һуң төшһә лә, мул төшә.
Аҡылдың ҡәҙере әҙәп менән, байлыҡтың ҡәҙере йомартлыҡ менән.
Аҡыллы кеше алдамаҫ та, алдатмаҫ та




Телмәр үҫтереү өсөн темалар:

Ғаиләмдә нисә кеше? Мин нисәнсе бала? Кемдәр бар?

Табын артында. Татыу ғаилә. Әҙәплелек ҡағиҙәләре.

Кем нимә менән шөғөлләнә?

Беҙҙең ғаилә спорт ярата.

Минең шәжәрәм. Туғандар менән аралашам.

Өләсәйем, олатайым менән үҫәм. Мин ихтирамлы, иғтибарлы бала.

Әсәйем эштә саҡта. Мин ярҙамсы.

Өлгөлө ғаиләлә йәшәйем.





**МИНЕҢ ҒАИЛӘМ. МОЯ СЕМЬЯ.**

**ҺҮҘҘӘР**

| | | | |
|---|---|---|---|
| ағай-брат | аҙ-мало | минеке-мой | аҡларға-оправдывать |
| апай-сестра | аҡыллы-умный(ая) | һинеке-твой | аралашырға-общаться |
| атай-папа,ир-ат-мужчина | берҙәм-вместе | уныҡы-его,ее | ашарға-принимать пищу |
| ата-әсә-родители | иғтибарлы-внимательный | беҙҙеке-наш, | ғорурланырға-гордиться |
| бабай-дядя | ихтирамлы-уважительный | һеҙҙеке-ваш, | ихтирам итергә-уважать |
| ғаилә-семья, бала-ребенок, ғүмер-жизнь | йомарт-щедрый | уларҙыҡы-их | иларға-плакать |
| еҙнә-муж старшей сестры | йомшаҡ-мягкая | нисек-как | йоҡларға-спать |
| ейән-внук, ейәнсәр-внучка | йыш ҡына-часто | шуныһы-вот это | йәшәргә-жить |
| еңгә-жена старшего брата | йыраҡ, алыҫ-далеко | үҙең генә-только сам | көтергә-ждать |
| инәй-тетя | кесе-младший | минеңсә-по моему | ҡунаҡ итергә-гостить, угощать |
| килен-жена младшего брата, ҡәйнә-свекровь,теща | күңелле-весело | | оҡшарға-нравиться |
| кейәү-муж сестренки, дочери | күп-много | изге-святая | өмөт итергә-надеяться |
| ҡайны-свекр, тесть | мөһим-важно | мәрхәмәтле-милосердная | төҙөргә-строить |
| ҡартатай-дедушка со стороны папы | наҙлы-нежная | бәхетле-счастливый | тыңларға-слушать |
| ҡартәсәй-бабушка со стороны папы | ныҡлы-крепкая | оҙон-длинная | тырышырға-стараться |
| ҡусты-младший брат | оло-старший | | тыуырға-родиться |
| ҡыҙ-дочь, | татыу-дружный(ая, ые) | | үткәрергә-проводить |
| өй-дом, жилище | туған-родной | | үҫтерергә-воспитывать |
| олатай-дедушка со стороны мамы | тәрбиәле-воспитанный | | һағынырға-скучать |
| өләсәй-бабушка со стороны мамы | уңған-трудолюбивый(ая) | | һоҡланырға-восхищаться |
| өмөт-надежда | үҙ- ара-между собой | | эйә булыу-владеть |
| туғандар-родственники | хаҡлы-законно | | эшләргә-делать,работать |
| ул-сын, шәжәрә-родословная | һирәк-редко | | яҙырға-писать |
| һеңле-сестренка | яғымлы- | | ял итергә-отдыхать |
| һөнәр-профессия | яҡты-светлая | | яратырға-любить |
| әсәй-мама, ҡатын-ҡыҙ-женщина | ял-выходной | | ярҙам итергә-помогать |

**ҺҮҘБӘЙЛӘНЕШТӘР**

ҙур ғаилә, бәләкәй ғаилә, татыу ғаилә, бер туған, ике туған, тәрбиәле бала, ололарҙы ихтирам итеү, бала тыуыуы , ғаилә төҙөү, үҙ-ара аралашыу, һөнәр эйәһе, ғаилә ағзаһы.

**ҺӨЙЛӘМДӘР**

Мин ҙур һәм татыу ғаиләлә йәшәйем.
Минең әсәйем,…,…,… бар.
Ә һинең ғаиләң ниндәй?
Ғаилә ағзаларын ихтирам итергә кәрәк.
Ағайым һәм апайым менән ғорурланам.

Мин ололарҙы һәр саҡ тыңлайым.
Һеңлем менән яҡшы аралашабыҙ.
Бала ата-әсәнең яҡты өмөтө.
Олатайым йоҡларға ярата.
Был машина беҙҙең ғаиләнеке.

Туғандар менән дуҫ йәшәргә тырышалар.
Йыраҡта йәшәгән апайым менән һирәк осрашабыҙ.
Бәләкәй балалар йыш илай.
Баланы иғтибар менән тәрбиәләргә кәрәк.
Өләсәй ейән менән ейәнсәрен көтә.

**ТЕЛМӘР СИТУАЦИЯЛАРЫ**

1.-Сәләм Әлиә!
-Сәләм Артур!
-Һин ял көн нимә эшләйһең ?
-Беҙ ғаилә менән паркка ял итергә барабыҙ.
-Яҡшы. Ғаиләң ҙурмы?
-Эйе, ете кеше, мин өсөнсө бала.
- Ағайың менән апайың бармы?
-Юҡ, ике апайым, ата-әсәйем, олатай-өләсәйем бар.
-Һеҙгә күңелле.Ә беҙҙең ғаиләлә кеше аҙ.
- Нисә кеше?
- Өс. Әсәйем,атайым һәм мин.
- Аҙ булһа ла, берҙәм булығыҙ. Шуныһы мөһим.
-Эйе. Рәхмәт. Ярай, хушлашайыҡ. Һау бул.
-Һау бул! Уңышлы ял һеҙгә!

2. -Һаумы!
-Һаумы! Ҡайҙа бараһың?
-Өләсәйем ҡунаҡ итәм тей.
– Үҙең генәме?
- Юҡ, әсәйем менән һеңлем дә бара.
– Күңелле ял итегеҙ. Осрашҡанға тиклем.
- Рәхмәт. Һау бул.

3. -Һаумы Ринат!
-Һаумыһығыҙ Әлфиә апай!.
-Был кем, ҡустыңмы?Исеме нисек?
-Эйе, Айҙар беҙҙең ғаиләнең иң бәләкәй ағзаһы.
- Уға нисә йәш? Өсмө?
- Өс йәш түгел, ике йәш.
-Һине тыңлаймы? Әллә йыш илаймы?
– Юҡ, иламай, беҙ гел бергә уйнайбыҙ.
-Йоҡларға яратамы?
-Эйе, әсәйем уны йырлап йоҡлата.
-Ярай, иҫән-һау йөрөгөҙ.
-Рәхмәт. Һеҙгә лә яҡшы көн теләйем.
-Һау булығыҙ.

**ТЕКСТ**

Мин ҙур һәм татыу ғаиләлә йәшәйем. Минең атайым, әсәйем, өләсәйем, олатайым, апайым, ҡустым бар. Ата-әсәйем мөһим һөнәр эйәләре, өләсәйем менән олатайым хаҡлы ялда. Апайым университетта уҡый, ҡустым беренсе класта уҡый. Беҙ үҙ-ара ихтирам менән аралашабыҙ. Ял көндәрен бергә күңелле үткәрәбеҙ. Туғандар менән дә дуҫ йәшәйбеҙ. Ике туған ағайым беҙгә йыш ҡунаҡҡа килә. Әсәйемдең ағаһының ҡыҙы ул. Минеңсә ғаиләләр татыу, бер-береһенә ярҙам итеп йәшәргә тейеш. Киләсәктә шәжәрә ағасын төҙөргә теләгем бар.

**МӘҠӘЛДӘР:**

Татыу ғаилә – ил күрке.
Ағаһын күреп, ҡусты үҫер, апаһын күреп, һеңле үҫер.
Баланан бәхетең булһа - ҡарт көнөңдә йәш итер.
Баланан бәхетең булмаһа - иртә йәштән ҡарт итер.
Бала - ата-инәгә алтын бағана.
Ҡыҙ күңелендә — балалы бишек, ир күңелендә — эйәрле ат.
Ата менән әсә-алтын ҡанат.

Әсәй ҡамсыһы мамыҡтан, атай һүҙе тимерҙән.
Ата-бабам баҡҡан ер - киндек ҡаным аҡҡан ер.




Телмәр үҫтереү өсөн темалар:

Әсәй минең иң яҡын кешем. Әсәйем ҡулдары.

Әсәйем – ярҙамсым.

Туғанымды үҫтерешәм.

Әсәйем йырлап йоҡлата. Әсәйем тауышы.

Әсәйем менән бергәләп әкиәт донъяһында.

Әсәйемдең тәмле аштары. Бешерергә өйрәнәм.

Татыу балалар. Әсәйем – өйөбөҙ йәме.

Был картаны әсәйҙәр, өләсәйҙәр тураһында өҫтәмә, тәрәнерәк итеп телмәр үҫтереү өсөн ҡулланырға мөмкин.






Телмәр үҫтереү өсөн темалар:

1. Башҡортостан башлығы. Дәүләт. Флаг, герб, гимн.
2. Башҡорт дәүләт теле. Туған тел.
3. Бай Башҡортостан ере. Файҙалы ҡаҙылмалар.
4. Тыуған ерем тәбиғәте.
5. Донъяға билдәле Башҡортостан. Башҡорт балы.
6. Нефтселәр ере.
7. Башҡортостандың Рәсәйҙәге урыны.

дәй генә форматта эшләмәнем мин ул хәрефтәрҙе. Хәтеремдә, /Ҙҙ/, /ç/ хәрефтәрен билдәләр менән эшләп алыуым. Һандарҙы кеше ҡиәфәтендә сағылдырыуым. Бик күп дидактик таратма әйберҙәрем үҙенсәлекле яҡтары менән балаларҙы йәлеп итте. Сит тел уҡытыусылары менән бер методик берекмәлә булыуым да ярҙамға килде Сит телдәргә өйрәтеүе ниндәйҙер кимәлдә еңелерәк тә күренә. Бар телдәргә өйрәтеүҙең практик йүнәлештәренең береһе – уҡыусыларҙа тел аша мәҙәни булыу компетенцияһын формалаштырыу тора. Страноведческий аспект сит телдәргә өйрәтеүҙең алдынғы формаһы һанала. Ә мәҙәни компетенция – тел аша ниндәйҙер халыҡтың мәҙәниәтен өйрәнеү ул. Тел мәҙәниәте, мәҙәниәтле тел аша, моғайын, тел белгестәре теүәл формалаша алалыр. Сит тел уҡытыу методикаһын барланым. Асыҡ дәрестәр үткәреү, сараларҙы өс телдә үткәреүҙәр яҡшы һөҙөмтәләргә этәрҙе. Ҡатнаш дәрестәр, саралар тел дәрестәрен йәнләндереп ебәрҙе. Семинарҙар, фестивалдәр мәктәптән зональ, республика кимәленә сыҡты. Медицина йүнәлешле класҡа, буласаҡ табиптар башҡорт телен белһә яҡшы тип, минән махсус программа төҙөтөп, башҡорт теле дәресен индерҙеләр. Эш маҡсатлы булғас, һөҙөмтә лә булды. Ике йыл эсендә уҡыусыларыма медицинала кәрәкле тел белеү кимәлен өйрәтә алдым. Шул мәлдә мин, дәрестәремде йөкмәткеле үткәреү өҫтөндә даими эшләй торғас, халыҡ медицинаһы менән үҙем дә ҡыҙыҡһына башланым. Донор, вампир ағастар тураһындағы мәғлүмәттәр уҡыусыларҙа ғына түгел, хатта үҙемдә ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. Файҙалы үсемлектәр аяҡ аҫтында икәне аптыратты. Шулай башланды минең халыҡ педагогикаһы менән дәрестәремде йәнләндереү. Онотолған халыҡ гәүһәрҙәрен барлау – үҙем өсөн яңы асыш булһа, уҡыусыларым өсөн ымһындырғыс дәрестәр теҙмәһе булды. Ҡурай үләне тураһында биология уҡытыусыһы, мәшһүр ҡурайсы Мөхәмәт Усман улы Түлебаев менән республика кимәлендә интегратив дәрес биреп оттом ғына. Музыка инструменты булараҡ файҙалы яҡтарын бала сағымдан атайым һөйләп һеңдергәйне инде. Коллегаларыма дәрес бик оҡшаны. Күпме эҙләнеү эштәре, рефераттар яҙылды. Мәктәптә башлаған «Йыйын», «Һабантуй», «Башҡортостан һылыуы» сараларым район-ҡала кимәлендә лә уңыш яуланы. Район-ҡала башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының берекмә етәксеһе итеп һайлауҙары эшемә тағын да яуаплылыҡ өҫтәне. Күпме уҡытыусыларҙы өйрәтә алдым, эштәренә йүнәлеш бирҙем. Карьера эшләүҙәрендә лә өлөшөм булғанына шатмын. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларын аттестация үткәреү комиссияһы рәйесемен. Район – ҡала Ҡоролтай башҡарма комитеты президиумындамын. Конкурс эштәрендә баһалама ағзаһымын. Педагогика һөҙөмтәлелеген Башҡортостан Республикаһының мәғариф алдынғыһы билдәһе, Рәсәй Федерацияһының Почётлы мәғариф хеҙмәткәре исемен алыуым да дәлилләп ҡуя. Эшемде яратып, бар күңелемде биреп башҡарыуым мине алдынғы яһаны. Педагогик эшемде башлағанда беренсе уҡытыусы көндәлегемә «уҡытыусы тәрән белемле, ихлас күңелле, тотанаҡлы булһа, уҡытҡан фәнен ятатһа, аңлата белһә, балалар уны ярата» («Башҡортостан уҡытыусыһы, 1968, N1») тигән мәғәнәле teләктәрҙе бушҡа теркәмәгәнмен икән. Көндәлектәр 34 йыл мәктәп эшендә бик күп булды. Барыһын һаҡлағанмын. Иң мөһиме – өлкән остаздарымдың теләккәнәштәрен тоттом. Эшем менән мин ҡәнәғәт. Уҡыусыларым менән ғорурмын. Рус мәктәбендә башҡорт телен яңғыратыу – үҙе бер ғүмергә тиң тәрбиәүи эш, рухи мираç шишмәһен яңынан йырып ебәреү булды.

Һәр милләттең иң боронғо белем һәм тәрбиә сығанағы булып халыҡ ижады тороуына инанғанмын. Халыҡ ынйылары баçма әсбаптар аша түгел, ауыҙ-тел маһирлығы менән телдән-телгә тулыланған, быуындарға тапшырылған. Фольклор-йыр-моңдарға күскән тарих, яҙылмай гендарға бирелгән тормош тәжрибәһе, әхлаҡ нормалар, эстетик зауыҡ коды икән. Мин дә шул кодты йөрөтөүселәрҙең бер ағзаһы булам. Оло кешеләрҙең балаһы булараҡ, халыҡ тәжрибәһен алып ҡына түгел, һеңдереп үҫкән шәхес булып формалашҡанмын һәм ошо һутты мин оҫта ғына итеп, үҙемдең педагогик һөнәремдә ҡуллана алдым. Әлбиттә, был бик күп эҙләнеү, сығанаҡтар менән дуç булыу, күп уҡыу, дәрестәр теҙмәһенең һәр сәғәтен уйлап төҙөүҙәрҙән килде. Үҙ ҡаҙанымда ғына ҡайнаманым, төрлө кимәлдәге фәнни-ғәмәли конференци-

яларҙа ҡатнашып, эш алымдарым менән уртаҡлашып, эшемдең һөҙөмтәлелеген иҫбатлайым. Газета – журналдар менән даими бәйләнеш тотам. Үҙ һүҙем, үҙ эш яланым менән даими уртаҡлашам. «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналына дәрес өлгөләрен бик күп ебәрҙем. Журналдың Маҡтау ҡағыҙы – портфолиум түрендә. Эш алымдарым менән күп уҡытыусылар ҡулланғанына иманым камил, теләктәшлек майҙаны булдырылған.

Фольклор үҙенең тәбиғәте менән художестволы ижадтың, сәнғәттең, фәндең төрлө төрҙәрен туплаған ҡатмарлы ла, ҡыҙыҡ та, үҙенсәлекле лә мираҫ-хазинаһы, бик ҙур йомғағы булыуын дауам итә. Унда халыҡтың бар булмышы – теле, сал тарихы, әҙәбиәте, йыр-моңдары моңлана. Им-томдары, халыҡ медицинаһы дауалау үҙенсәлегенең файҙаһын билдәләй. Һынлы сәнғәте, әхлаҡи ҡараштары, йола – фиғелдәре, этнографик үҙенсәлектәре яңы заманса асыштар көтә. Бик борондан аҡһаҡалдар һүҙен тыңлау, ололар кәңәшен йыҡмау, сәсәндәр ижадын әлектереп алып таратыу, йолаларҙы ололау, һанлау – яҙылмаған тәбиғи ҡанундар һаналған. Ошоларҙы иҫәпкә алып, мәктәп программаһында халыҡ ижадына урын бар әле. Заман технологияларының боронғолоҡто ҡыҫымға алыуы бик әсендерә мине. «Халыҡ әйтһә, хаҡ әйтә» әйтеме минең тормош кредоһына әйләнә бара. Телде мәҙәниәт, тарих, халыҡ психологияһынан айырып өйрәнеү мөмкин түгел. Ә туған тел – тәүге нәүбәттә тәрбиәләү сараһының башы, әхлаҡи-патриотик тойғоларҙың үҫеше майҙансығы. **ИНЕШ** Мин методик үҫеш майҙансығы итеп **«Лингвокультурология – рухи мираҫ шишмәһе» тигән теманы алам.** Был дәрестәрҙә беҙ халҡыбыҙҙың рухи ҡиммәттәрен баһалайбыҙ, уҡыусыларҙа толерантлылыҡ тәрбиәләйбеҙ. Милли үҙенсәлек – халҡым йолаларында, көндәлек тормошонда, мәҙәниәттә, әҙәбиәттә, халыҡ ижадында ярылып ята бит. Заман технологиялары ярыша, ҡыуыша, уҙыша. Мин үҙ эшемдә фәнни педагогика менән ҡуша лингвокультурологияны атлатам. Башҡа халыҡтарҙың тел, мәҙәниәт үҙенсәлектәре лә яҡын миңә. Халыҡ-ара тел фестивалендә ҡатнашып, телдәрҙең нәфислегенә һоҡландым. Һәр халыҡтың ата-олатайҙарҙар мираҫы үлемһеҙ.



Дөйөм белем биреүҙең федераль стандарттарында «Туған телдәрҙе өйрәнеү уҡыусыларҙың тел компетентлылығын, коммуникатив телмәр һәләтен үҫтереүгә йүнәлтелгән. Туған телдә уҡыу барышында уларҙың телмәре, мәҙәнилеге, туған тел менән ҡыҙыҡһыныуы, традицияларға һаҡсыл ҡарашы формалаша»-тиелгән. Стандарттарҙа күрһәтелгән был теүәл бурысты үтәүҙә, туған башҡорт теле дәрестәрендә лингвокультурология фәненең аспекттарын ҡулланыу минең өсөн отошло булды. Практик йүнәлештәге эш тәжрибәм менән уртаҡлашам.

**Маҡсат:**

1. Милли тел ғилемендә лингвокультурологик төшөнсәнең йөкмәткеһен, ниндәй йүнәлештә ҡулланылыуын барлау;
2. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә лингвокультурологик йүнәлештә уҡытыуҙың һөҙөмтәлелеген күрһәтеү;
3. Милли тел шәхесен асыҡлау.

**Бурыстар:**

1. Киләсәктә темаға ярашлы хеҙмәттәшлек яланы булдырыу;
2. Башҡорт фольклоры концептосфераһын уҡытыу-тәрбиә эшендә киң йәйелдереү;
3. Яҙыусыларҙың әҙәби концептосфераһына, ғилми эҙләнеүҙәргә ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу.

XXI быуат лингвистикаһы телде аралашыу, танып-белеү ҡоралы итеп кенә түгел, ә билгеле бер милләттең мәҙәниәтен билдәреүсе йүнәлеш булараҡ тикшерә, концепт булараҡ ҡарай. Шуға күрә лә башҡорт телен уҡытыуҙың яңы концепцияһы нигеҙендә тел һәм мәҙәниәт бәйләнеше үҙ урынын ала бара. Мәҙәниәт – күп яҡлы, үҙенсәлекле күренеш. Тел мәҙәниәттә булған әйберҙе атап, сағылдырып ҡына ҡалмай, ә мәҙәниәт эсендә үҫә. Тимәк, тел мәҙәниәттең барлыҡҡа килеү ҡоралы, үҫеше, һаҡсыһы ул.

Быны нигеҙен немец философы, телсеһе Вильгельм Гумбольт, Рәсәй һәм Украина философы, телсеһе Александр Афанасьевич Потебня кеүек ғалимдар һалған.

В. Гумбольт «Милләттең сиктәре – минең донъяға ҡарашымдың сиктәре»-тиһә, башҡорт академиғы Марат Вәли улы Зәй-

нуллин «Тел ҡатмарлы күренеш, ул кешелек йәмғиәтендә бик күп функциялар башҡара. Халыҡтың милли мәҙәниәтен формалаштырыуҙа һәм үҫтереүҙә туған телдең роле баһалап бөткөһөҙ», – тип яҙҙы.

Туған тел аша милли мәҙәниәтте өйрәнеү уҡыусыларҙың аңы формалашыуында ғына түгел, ә уларҙың мәҙәниәткә береүгендә мөһим роль уйнай. Тел һәм мәҙәниәт тығыҙ бәйләнештә йәшәй, йәғни тел халыҡ мәҙәниәтен сағылдыра. Мәҙәниәт аша телгә өйрәтеү бөгөн «башҡорт теле» һәм башҡа гуманитар предметтарҙың бер өлөшө булып тора. Уның маҡсаты – телдәрҙең аралашыу ҡоралы булараҡ, донъяны танып белергә, үҙеңде был тормошта табырға өйрәтеү. Халыҡты булдырған да, йәшәткән дә, үҫтергән дә – тел. Тел – мәҙәниәттең барлыҡҡа килеү

• Ҡоралы
• Үҫеше
• Төҙөлөшө
• Һаҡсыһы

**Мәҙәниәт** – дөйөм кешелек һәм рухи ҡиммәттәрҙе тормошҡа ашырыу сығанағы.

**Һығымта:** туған тел мәҙәниәт менән берлектә

• Милли аңды формалаштыра;
• Тел шәхесен үҫтерә;

**Лингвокультурология** – тел һәм мәҙәниәттең бәйләнешен өйрәнеп, тел шәхесе һәм донъя тел картинаһының төҙөлөшөн сағылдырыусы фән. Лингвокультурологияны фән булараҡ был йәһәттән әүҙемләштереү яғындамын, сөнки лингвокультурология – лингвистика сигендә барлыҡҡа килгән, телдә сағылыш тапҡан һәм нығынып ҡалған халыҡ мәҙәниәтенең күренештәрен тикшереүсе фән. «Был дисциплинар фән өлкәһе, маҡсаты, методтары һәм тикшереү объекты булараҡ, үҙ аллы үҫешә. « /Маслова, 2001:17/. Лингвокультурология уҙған быуаттың 90-сы йылдарында үҙ аллы тармаҡ булараҡ үҫешә башлай. Лингвокультурологияның үҙәгендә кеше шәхесе, уның мәҙәниәте һәм теле тора.

**Лингвокультурология** – ул

• лексик берәмектәр;



• фразеологик берәмектәр
• фольклор өлгөләре;
• телмәр этикеты;
• реалиялар;
• донъя тел картинаһы;
• концептосфера;
• милли тел шәхесе теҙмәһе.

Башҡорт теленең лексик берәмектәре – телдең хәҙерге йәки элек булған лексемалар (һүҙҙәр) йыйылмаһы. Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы башҡа төрки телдәрҙән үҙенсәлекле структуралы берәмектәре менән айырылып торған һүҙҙәр төркөмө системаһынан ғибәрәт. Башҡорт теленең лексикаһын өйрәнеү XVIII быуаттың аҙағында башлана. Екатерина II-нең әмере буйынса бөтә билдәле халыҡтарҙың этнографияһына, фольклорына, теленә ҡағылған материалдарҙы йыйыу буйынса үҙәкләштерелгән эш башлана. Ошондай мәғлүмәттәрҙе еткереү ҙә уҡыусыларҙа ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Эҙләнеү эшенә, рефераттар яҙыуға ла этәргес тема була. Дәрестә күберәк үҙләштерелгән һүҙҙәр шәлкеменән башлайым. Дәрес башында «Мейе штурмы» уйыны отошло. Бер һүҙ атала, мәҫәлән, троллейбус. Һуңғы хәреф /с/ менән икенсе бала һүҙ таба /самолёт/. Әүҙемләшеү, тиҙ уйларға өйрәтеү, һүҙҙәр шәлкемен тиҙерәк тулыландырыу башҡарыла. Бар төркөм эшләй. Һүҙбәйләнештәр теҙмәһе. Һүҙбәйләнештәрҙән һөйләмдәр. Һөйләмдәрҙән текстар төҙөү. Яйлап яҙма күнекмәләргә күсереү. Һөйләргә өйрәттереү әүҙемләшә бара. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өн-хәрефтәрен бик тиҙ һәм дөрөҫ итеп үҙләштереүҙе системаға һалғанмын. Рус, башҡорт алфавиттарын сағыштырам. Специфик өн-хәрефтәргә ҡылыҡһырлама бирәм. Тел күнекмәһендә һәр өндөң әйтелеш үҙенсәлеген ҡабатлатам. Мәҫәлән, /ҙ, ҫ/ өнөнөң әйтелешен формалаштырыу. Телде ике теш араһына ҡыҫабыҙ, өндө баҫым менән һығып сығарабыҙ. Һәр өндөң үҙенсәлеген барлайым, миҫалдар менән дәлилләйем.

Лексиканың бар өлкәләрен барлау мөмкин түгел. Уҡыусыларҙың бар яҡлап һәләттәренә, телде белеү кимәленә ҡарап эш программаһын тәфсилләп төҙөп алыу миңә күп ярҙамға килә.

Һүҙҙәрҙең концептын билдәләү ҙә шәп алым булып сыҡты. Концепт (латин теленән conceptus-төшөнсә) дөйөм төшөнсә, дөйөм күҙаллау. (Ушаков. 2000: 43). Концепт – уй, проект, алдынғы фекер, логик төшөнсә. Л. Х. Сәмситова билдәләүенсә «Концепт-тел менән мәҙәниәтте бәйләп йөрөүсе лингвоменталь берәмек. Концепт аша кешелә туған тел образы һәм уның концептосфераһы барлыҡҡа килә. Концепт аша кешелә туған тел образы һәм уның концептосфераһы барлыҡҡа килә.» /Сәмситова. 2010; 3/

Был йүнәлештә тәүге эш булараҡ Л. Х. Сәмситова тарафынан «Башҡорт тел картинаһында мәҙәниәт концепттары» лингвокультурологик һүҙлеге төҙөлөп, Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан баҫырға тәҡдим ителде һәм 2010 йылда донъя күрҙе. Һүҙлектәр менән мәктәп тәьмин ителгән. Минең дәрестәрҙә әүҙем ҡулланылышта. Әммә, «әҙәбиәт классиктары концептосфераһы» мәсьәләләре үҙ тикшеренеүселәрен көтә. Был йәһәттән материалдар юҡ кимәлендә.

Лингвистик шәхесте дөрөҫ асыу аша бөгөнгө көндөң мөһим проблемаһы – кешене иманына ҡайтарыу, боронғо булмышына йөҙ бороу, төрлө золомдарҙан һаҡлап алып ҡалыуҙы күрәм.

**Лингвокультурологияла милли лингвистик шәхес кем ул?**

- милли телдә аралашҡан халыҡ;
- башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары;
- мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре;
- тел, мәҙәниәт өлкәһен өйрәнеүселәр, яҙыусылар;
- әҙәп-әхлаҡ нормалары менән билдәле шәхестәр:

Беҙҙең дәүерҙә әҙәбиәттә тема үтелер алдынан уның авторына тулы ҡылыҡһырлама бирелде. Хронологик таблицалар ярҙамында авторҙың яҙыу ижадылығы күҙаллана, системалы образ барлыҡҡа килә. Заман балаһына был алым бөтөнләй ҡыҙыҡ түгел. Рус мәктәптәре әсбаптарында текстарҙың авторҙарына ҡыҫҡаса булһа ла ҡылыҡһырламалар хатта төшөп тә ҡалған. Уҡытыусы нисек был эште атҡара? Авторға ҡылыҡһырлама биреп китеүҙе мотлаҡ тип һанайым. Интернетта презентациялар табырға була. Слайдтар эшләү ҙә әүҙемләшә. Күргәҙмәләрҙең дә урынлы булыуын асыҡланым. Ә һуңғы йылдарҙа шағир, яҙыусыларҙы «Милли лингвистик шәхес» форматында уҡыусылар менән таныштырыу үҙемә лә оҡшап китте. Ә был йүнәлешкә нисек килдем? 2016 йылда хозур Бөрйән районында башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының курсын үттем. Курстарҙы бик йөкмәткеле итеп Фәнзил Бүләк улы Санъяров алып барҙы. Курстан тыш, һөйләшеү-әңгәмәләшеүҙәрҙә концептосфера тураһында ла фәнни – ғәмәли әңгәмәләр булды. Мин шул ваҡыттан был йүнәлеш менән төптән ҡыҙыҡһына башланым. Санъяровтың «Ғайса Хөсәйенов концептосфераһы» монографияһын уҡып сыҡтым. Сәмситованың «Культурные концепты в башкирской языковой картине мира» хеҙмәте менән дә таныштым. Башҡа милләттәрҙең дә эштәрен байҡаным.

Художестволы әҙәбиәт ул – ысынбарлыҡтың художестволы сағылышы.

Н. Г. Чернышевский фекеренсә, «Әҙәбиәт – ул тормош дәреслеге». ФГОС талаптары буйынса, белем алыусы кеше художестволы текстың донъяны образдар, ассоциатив саралар менән сағылдырыусы әҫәр булыуын аңлай ала. Яңы төшөнсә менән әйткәндә, әҙәбиәт ул – донъяның художестволы картинаһы. Һәр бер художестволы әҫәр һүҙ оҫтаһының индивидуаль донъя картинаһын тәшкил итә. Шуға күрә мин Башҡортостандың бөйөк яҙыусыларының (халыҡ яратып уҡыған әҫәрҙәр яҙыусылары – яҡташым Яныбай ағай Хамматов, аҙашым Зәйнәб апай Биишева, интернатташым Рәми Ғарипов, Мостай Кәрим, Ноғман Мусин һ. б.) әҫәрҙәрен индивидуаль тел картинаһының маһирҙары тип атайым. Р. Ғариповты милләтселектә ғәйепләһәләр ҙә, уның бар ижад ҡомары дуҫлыкты данлай. Н. Мусин тәбиғәт – Ер-әсә тип оран һалһа, М. Кәрим ижады халыҡсанлығы менән беренсе баҫҡыста тора. З. Биишева мөхәббәт, һөйөү, ярата белеү үҙенсәлектәрен алға ҡуя. Ә Я. Хамматов тарихи сығанаҡтарҙы өҫтөн күреп ижад иткән. Һәр яҙыусының үҙ алтын ҡаҙығы – яратҡан темаһы бар бит. Улар һәр тел шәхесен концептосфера йүнәлешендә тикшерелеү юлдарын көтә. Әҙәбиәт дәрестәрен башҡа дәрестәр менән бәйләп уҡытыу ҙа өҫкә сыҡһын ине. Метапредмет шарттарҙы үтәү әүҙемләшәсәк. Әҫәрҙәрҙе темаһына яраҡлаштырып, башҡа предметтар менән бәйләү дәре-

стәргә фәнни юл аса. Яңы стандарттар талабы: тарих, тел, фольклор хоҡуҡ, география, менталитет һ. б. өлкәләр менән тығыҙ бәйләнеш барлыҡҡа килә. Уҡыусылар мәғлүмәтте киңерәк табырға күнегә. Мәҫәлән, Я. Хамматовтың «Бөртөкләп йыйыла алтын» романынан өҙөктө физика менән дә бәйләп ҡараным. Яҙыусы үҙе алтын прискиһында эшләгән. Самородоктарҙы йыйыу ысулын ғилми яҡтан асыҡ күрһәтә. Боронғо технология төҫмөрләнә. Башҡорттарҙың һауыт-һабаһы, өй йыһаздары ла тарих һөйләй. Заман менән дә бәйләү шәп килеп сыға. Яңылыҡлы алымдар бик күп. Ҡолас йәйеп эшләгенә. Коммуникатив метод – аралашыуға, йәнле телмәргә таяныусы алымдар комплексы. Был метод беренсе планға уҡыусыларҙы һөйләшергә өйрәтеүҙе ҡуя. Ә теоретик белешмәләр телмәр процесында тексты анализлау барышында сығарыла. Ул биш принципка нигеҙләнә: 1) телмәр-фекер активлығы; 2) яңылыҡ; 3) функционаллек; 4) индивидуалләштереү; 5) ситуативлыҡ. Уҡыусыларҙы уҡыу процесында башҡорт телендә тәбиғи рәүештә аралашырға өйрәтеү ауыр, ләкин хәл итерлек проблема. Һөйләү күнекмәләрен формалаштырыу өсөн: 1) һөйләү күнекмәләре өсөн эш төрҙәрен реаль аралашыу процесына яраҡлаштырып төҙөү; 2) юғары уҡыу мотивацияһын тәьмин итеүсе психолого-педагогик шарттар тыуҙырыу (класта йәм тыуҙырыу, парталарҙы уҡыусылар бер-береһенә ҡарап һөйләшерлек итеп урынлаштырыу, уҡыусы һөйләгәнгә эскерһеҙ ҡыҙыҡһыныу күрһәтеү, исем менән өндәшеү, теләктәре буйынса эш төрҙәрен билдәләү, һайлау, дәрестә юмор, шаяртыу тәжрибәһен иҫкә алыу, телмәрҙең эмоциональлеге, ҡәтғи булмаған аралашыу формаһы); 3) әңгәмә ойоштороғанда, уҡыусыларҙың индивидуаллеге, шәхси сифаттарын иҫәпкә алып, уларҙы ҡыҙыҡһындырған темалар аша, һөйләү теләге тыуҙырыу; 4) яңы ситуацияларҙы, билдәле маҡсат менән һөйләм телмәрен үҫтереү; 5) уҡыу материалы йөкмәткеһенең мәғлүмәтлелеге менән мауыҡтыры; 6) уҡыу процесы элементтарын даими яңыртып тороу; 7) дәрестәрҙә бала психикаһын боҙоусы ярышты ҡулланмай, күңелле аралашыуға булышлыҡ итеүсе алымдар ҡулланыу.

Күп яңылыҡлы алымдар боронғо күренештәрҙән икәнен бер нисек тә инҡар итеп булмай. Миҫал өсөн генә бөгөнгө актуаль һаналған проблемалы уҡытыу технологияһын алайыҡ. 1895 йылдан уҡ бындай уҡытыу алымы Чикаго университетында Дж. Дью тарафынан индерелә. Был ғалим тема, йә әҫәр үтә башлау алдынан иң тәүҙә проблема ҡуйыуҙы һәм яуап табыуҙы ҡуйған. Хеҙмәттәшлек педагогикаһы ла боронғо күренеш. Жан Жак Руссо тәҡдим иткән. Ә «Родное слово» – К. Д. Ушинский һәм Л. Н. Толстой өсөн иң мөһиме була. «Дети должны научиться слову прежде всего на своем родном языке. Левое полушарие отвечает за родной язык» – тип иҫкәртеүҙәре XXI быуатта Рәсәй халҡының иң актуаль темаһына әйләнде.

Үҙем тураһында яңылыҡ алып килергә күнеккәнмен. Мин дә бит лингвистик шәхес. Уҡыусылар «Кисәге көнөм нимә бирҙе?» – тигән һорауға ла уҡытыусы миҫалынан яуап бирергә өйрәнә. **Фототарихлы видеояҙмам балаларға бик оҡшай.** Бар булмышым менән мин уларға асыҡ булғас, коммуникатив аралашыу ҙа эскерһеҙгә әйләнә. Шәхсән проблемалары менән дә уҡыусыларым минең менән бүлешә ала. Бик күп уҡыусыларымды упҡын ситенән тартып ала алдым.

**«Йылы һүҙ-йәнгә аҙыҡ»**, – ти халыҡ (яңы технологияла «күңел индукторы», «уйҙар гигиенаһы» тип атарға мөмкиндер). Был юлда

- фәҡәт бер тема өҫтөндә эшләргә ынтылыу;
- тыныс күңел, ярҙамсыллыҡ тойғолары кисереү;
- иң мөһиме – һәр кемдең үҙен уйлатырға, уҡытырға, ҡеүәтләргә өйрәтеүе; (уҡытыусының да үҙ дәресенән ҡәнәғәтлек, ниндәйҙер үҫеш алыуы мөһим минең өсөн, уҡытыусы рефлексияһы тип атайым);
- мотивациялар аша һүҙ көсөнөң мөһимлеге асыҡланып баһаланыуы;
- уҡыусының дәрестәге теманан ҡәнәғәтлек тойғоһо кисереп, рефлексияны күңел асышы менән биреүе төҫмөрләнә.
- Рефлексияны дәрестең башында ла, уртаһында ла, аҙағында ла биреү үҙенсәлеген таптым. Бының өсөн дәрестең эмоциональ биҙәлеше бик урынлы.

Һәр дәресемдә ошондай йылы һүҙҙәр менән башлайым.

– Кәйефтәрегеҙ нисек?
– Ҡояшлы иртә кеүек
Әсәм телен, сәсән телен
Данларға тип беҙ килдек.
Тел асҡысы иман биргән
Һөйөклө тыуған телем.
Үҙ телемдән һеҙгә сәләм,
– Әссәләмәғәләйкүм!
– Вәғәләйкүмәссәләм!

**Отошло яҡтары:**

1. Эмоциональ аффирмация үтәлә.

Ниндәйҙер кимәлдә гимнастика эшләп алыу ҙа була. Телмәр аша аралашыу этикеты теүәл үтәлә. Дәрес тупланған рәүештә башлана.

2. Фонетик, артикулляцион күнекмә башҡарыла.

Башҡорт теле үҙенсәлекле өндәре менән рус теленән айырылып тора. Дәрестәремдә фонетикаға төплө ҡараш тыуҙырам. Рус теле менән сағыштырып, һәр өндөң үҙенсәлеген уҡыусыларға аңлатам. Дөрөҫ уҡыу күнекмәләрен тулыһынса үтәү мөмкинселеге шунан башлана. Артикуляцион – фонетик күнекмәләрҙең һәр дәрес башында мотлаҡ булыуын иҫбатланым. Рус телле уҡыусыларҙың тел ағышын башҡорт теленә башҡаса күсереп булмай (билингвизм күренешенең бер формаһы ла үтәлә.) Талғынлыҡ үҙенсәлеге үтәлә.

3. Светофор төҫө менән юл ҡағиҙәһе ҡабатлана (һәр дәрес иҫкәрмә ролен дә үтәй);

4. Хеҙмәттәшлеккә юл асыла (флешмоб). Хорҙа һәр уҡыусы ҡурҡыуҙан арына. Телдәре көрмәлгәндәр ҙә процеста була. Бер-береһен ишетеп, бер темпта әйтеү һәләте (синхронность) үҫешә.

5. Шиғыр юлдары иҫтәрендә ҡалып (ятлап алғансы ҡабатлайҙар) телмәр ағышы әүҙемләшә.

Йыл дауамында шиғыр шәлкемдәрен үҙгәртә барам. Ҡабатлай килә уҡыусылар ятлап алалар. Ятлатыу күнекмәләре үтәлә. Телдәре байый. Хәтер кеүәһе әүҙемләшә. Элегерәк йырҙар менән башлай инек һәр дәресте. Үҙемдең йыр өйрәтеү методикам да бар ине. Коллегалар менән уртаҡлашҡаным булды. Йыр аша уҡыусыларҙың тойомлау үҙенсәлектәре, күҙ менән күргәнде, күңелдәре менән күреү һәләттәре асыла. Үҙҙәрендә йырлау һәләтен асып, музыка мәктәбенә уҡырға инеүселәр ҙә булды. Музыка – интернациональ көскә эйә икәненә бала күңеле тиҙ төшөнә. Халыҡтарҙың көй, моң менән аралашыуына күпер икәнен дә иҫбатлай. Д. Б. Кобалевский һүҙҙәре менән әйткәндә «һәр кем үҙенә кәрәкте ишетәсәк, үҙ тойғо-хисенән сығып, музыкаль әҫәрҙе ҡабул итәсәк». Һүрәтләү саралары – образ, картина, пейзаж көй аша музыкаль картина итеп тыуҙырыла, күҙҙаллау һәләте үҫешә. Үҙем йырлайым, уҡыусыларҙы ла йырлатам. Ҡумыҙсылар ансамбленә күскәндә был алым бик ярап ҡалды.



**Ҡыҫҡаса дәрестәремдең сиселеш юлдарын артабан барлау:**

- Мәҡәлле һүҙ – аҡыллы һүҙ;
- Йомаҡ ҡояш йомарлап;
- Шәхесте шәхес үҫтерә.

**Эш девизы мәҡәлдән.** Дәрестең тәрбиәүи маҡсатына өлгәшеү үтәсәк материалдың йөкмәткеһенә бәйле. Халыҡтың ауыҙ-тел ижадын туплаған бөтә төр жанрҙар ҙа теманың тәрбиәүи маҡсатын уңышлы башҡарырға ярҙам итә. Башланғыстарҙа «Һандар темаһын» һанашмаҡтар менән үткәрергә яратам. 1-ун, унда – уймаҡ, табала ҡоймаҡ. Уңышлы һайланған һанашмаҡ үтелгән теманы нығытыу (мәҫәлән, был һанашмаҡта аҙыҡ – түлек иҫкә төшөрөлә, уймаҡ һүҙенең мәғәнәһе асыҡлана), тел сарлау ҙа башҡарыла. Ете һаны һәр халыҡта изге һан һанала. Белешмә таптырыу өсөн ҡулланам. Был һан менән мәҡәлдәрҙе эҙләтәм. «Етегән тигән ете йондоҙҙо ете уратып әйтһәм, һауап була» тигән тиҙәйткесте бик бәләкәй саҡта әсәйем өйрәткәйне. Тын юлдары күнекмәһе икәнен белеп ҡалыу менән, уҡыусыларым менән дә уртаҡлаштым. Дәресте ниндәйҙер күнекмәләр менән башлау минең өсөн тәбиғи этап. Ныҡ ҡуҙғып килһәләр, тын юлдарына гимнастика яһатып тынысландырам. Һулпәнлек һиҙһәм, физик күнекмәләр менән әүҙемләштерәм (бында инде ябай ғына халыҡ уйындары ярҙамға килә). Бер милләттең дә мәҡәл-әйтемдәрендә әхлаҡи нормаларҙан

ситләтелгән һүҙҙәр юҡ. Уларҙа этик нормалар тулыһынса һаҡлана. Йөкмәткеле лә, хәтерләү ҙә еңелерәк. Мәҡәл-әйтемдәрҙе дәресемдең төрлө этаптарында йыш һәм уңышлы ҡулланам (эпиграф, яңы теманы асыҡлау, йомғаҡлау). Рефлексия яһау өсөн дә ҡыҙыҡ алым булып сыҡты. Темаға ярашлы мәҡәлдәр тупланмаһын таратам. Индивидуаль, парлы, төркөмдәр менән эшләгәндә лә уңай. Һәр кем үҙенә яҡын мәҡәлде һыҙып ҡуя, эшенең маҡсатын билдәләй, эпиграфы була. Ә төркөмдә эшләгәндә теләктәшлек, бер фекергә килеү тәрбиәләнә.

Мәҫәлән. Төп тема – **«Дуҫлыҡ»**. Мәҡәлдәр тупланмаһы таратыла.

- Башланған эш бөткән эш
- Ауыр эште күмәк ҡул еңгән
- Ятып ҡалғансы, атып ҡал
- Берең өсөн барың тор, барың өсөн берең тор
- Күмәкләгән яу ҡайтарған
- Берҙә түгел-илдә көс
- Берәү бөтәһе өсөн, бөтәһе берәү өсөн
- баш һайын бер аҡыл
- Һыҙылған мәҡәл бөтә класс өсөн һайланған эш девизы.

**Фараз. Күҙаллау.** Ниндәй теманы асыҡлаясаҡбыҙ? Берҙәм девиз **«Берҙә түгел-илдә көс»**. Һайланылған мәҡәлдән сығып проблемалы әңгәмә ойошторола. Уҡыусыларҙың мәҡәлдәр ҡулланыуҙан дәрес йөкмәткеһе иҫтәрендә ҡала, телдәре лә шымара бара. Был алымды үҙем уҡытҡан тағы ла «Краеведение», «Живые родники» дәрестәрендә лә ҡулланам. Уҡыусыларға бик оҡшаны. Мәғәнәүи яҡтан асырға өйрәнәләр. Үҙҙәре лә темаға ярашлы мәҡәлдәр теҙмәһе табалар. Рус теле менән башҡорт теле бәйләнеп бара. Метапредмет өлкәһе лә теүәл үтәлә.

**Ағинәйҙәр тирмәһе** уйыны тәҡдим итәм (йомаҡ ҡойошоу);

Йомаҡтарҙың поэтикаһы, тел үҙенсәлеге тураһында байтаҡ тикшеренеүселәр үҙ фекерен әйткән. Боронғо грек ғалимы Аристотель йомаҡтарҙы «яҡшы төҙөлгән метафора» тип атаһа, рус фольклорсыһы, академик Ю. М. Соколов: «йомаҡ, ғәҙәттә, сеймәлтелгән метафора менән әйтелгән һорау, тип билдәләргә мөмкин», – тигән. Дәресемә уҡыусылар өсөн ят булған йомаҡтарҙы һайлайым. Яуапты тиҙерәк тапһындар өсөн, иллюстратив материалды киң ҡулланам. Шарапов И. Ә. авторлығында сыҡҡан «Йомаҡлы әлифба» дидактик күнегеү ҡулланмаһын әле лә киң файҙаланам. Уҡыусыларға йомаҡ ҡойоу оҡшай. Дәресте төрләндереүгә лә, йәнләндереүгә лә, ҡабатлау һәм нығытыуҙа ла йомаҡтарҙы иркен ҡулланып була. Дәрт, сәм уятыу ҙа бара. Кроссворд формаһында төҙөтөп, теманы асыҡлау уңайлы.

**«Серле йомаҡ-йәнле йоҙаҡ» ул.**

Йомаҡ әйтәм йомарлап
Тыңлаусылар ни тиер,
Ни, тиер, ау, ни тиер,
Ҡайһыбыҙ һуң тиҙ сисер? Иғтибар.

Тәнһеҙ йәшәйем,
Телһеҙ һөйләшәм,
Ҡайғыһыҙ илайым,
Шатлыҡһыҙ көләм,
Берәү ҙә мине күрмәй,
Ә шулай ҙа ишетә. (тауыш)

Нимә ул тауыш? Концепт (Башҡорт теленең һүҙлеге, 328-се бит, Мәскәү «Русский язык», 1993)

- Йән эйәләренең тамағынан сыҡҡан өн.
- Бала тауышы
- Көлгән тауыш
- Ҡалын тауыш
- Мал – тыуар тауышы
- Нәҙек тауыш
- Ҡош тауышы
- Эт өргән тауыш
- Тауыштан таныу (яҙмаға баҫыу, тыңлау).

Заман технологиялары ошо ерҙә бик ярап ҡалды. Төрлө яҙыусыларҙың ижади йыйынтыҡтарын контакт төркөмөндәге ойошма-

ларҙан табырға була. Википедия биттәре лә ҙур өлөшөн индерә. Мин үҙемдең кумирым Рәми Ғарипов тураһында күп йыйынтыҡтар тупланмаһы йыйғанмын. Уҡыусыларға шағирҙарҙы шәхес итеп күрһәтеү тәү маҡсат һанала минең өсөн. Күп шағирҙар менән осрашыуҙар бәхете тейгәнгә күрә, уҡыусыларым менән хәтирәләремде уртаҡлашыуым да дәрестәремдең бәҫен күтәрә, тормошсан һәм халыҡсан итә. Автографлы китаптарҙы күрһәтеүем үҙе бер тарихҡа әйләнә.

Тауыш тип йомаҡтың яуабын тапҡас, Рәми Ғариповтың үҙ тауышы менән яҙҙырылған яҙманы ҡуям. Тиҙ генә яуабын таба алмайҙар, әлбиттә. Төрлө прогнозға йүнәлтелгән һорауҙар ярҙамында тауыштың хужаһын табалар. Интуиция үҙенсәлеге, тауыштарҙы айырырға өйрәнеү һәләте әүҙемләшә. Бәләкәй генә уйын да уйнап алабыҙ. Бер уҡыусы тауыштан класташтарын таный.

Тау ектәре менән сурғыларҙан
Баш ала ла алғыр йылғалар
Бер үҙәнгә төшөп алҡынһалар,
Тау-ташты ла һуғып йығалар
Яңғыҙ йылға, күпме ярһымаһын,
Ҡушылмаһа уға иштәре,
Һаҙамыҡҡа ҡойоп, юлын ослай,
Түңгәктәргә күмә эштәрен.
Тау-таштар күп, дуҫтар, юлыбыҙҙа,
Яңғыҙҙа ла яңғыҙ аҡмайыҡ.
Илгә инселәнгән изге көстө
Һаҡлашайыҡ бергә ап-асыҡ!... **(автор ҡулы менән яҙылған ҡульяҙма бүләккә)**

Авторҙың «Дуҫлыҡ» шиғырына анализды дәрес башында таратылған мәҡәлдәрҙе ҡулланып тиҙ асалар.

**Милли лингвистик шәхес Рәми Ғарипов концептосфераһы асыҡлана:**

- «Рух»
- «Туған тел»
- «Илһөйәрлек»



- «Дуҫлыҡ»
- «Тәбиғәт»

Үҙ фекерҙәрен еткерә алалар, дуҫлыҡтың мәғәнәүи үҙенсәлеген концепт ярҙамында тулыһынса асыҡлайҙар. Дәрестең үткәне һиҙелмәй ҙә ҡала. Уҡыусыларым уйланышып сығып китәләр. «Һин ниндәй дуҫ?»-тигән тест та үткәреп ҡуйһаң, дәрестең рефлексияһы практик үтәлеп тә ҡуя.

**Шәхесте шәхес үҫтерә** «Алма ағасынан алыҫ төшмәй» (фотоһүрәттәр) тулыһынса барлана. Мин дә беренсе һанлы интернат уҡыусыһы. Сәжидә Хәмәтйәр ҡыҙы Зайлалова Рәми Ғариповта шағирлек һәләтен асыусы булһа, миңә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып китеүемдә ҙур роль уйнаған милли шәхес – башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы ине. Был да бит лингвокультурология. Рәми Ғарипов тураһындағы беренсе мәғлүмәттәрҙе лә уҡытыусым ауыҙынан ишеттем. Район – ҡала күләмендәге уҡытыусылар бәйгеһендә мәҡәлдәр менән педагогик һәләтте билдәләргә кәрәк ине. Миңә «Алма ағасынан алыҫ төшмәй» тигән мәҡәл тура килде. Ике шәхестең минең яҙмышымдағы урынын бик төптән күрһәтә алғайным шунда. Авторҙың үҙ ҡулы менән яҙған яҙмаларының да миндә барлығы хайран иткәйне баһалама ағзаларын. Уҡыусыларға яҙмаларҙы дуҫлыҡ бүләге итеп тапшырам.

Лингвокультурологияны киң ҡулланыуымдың һөҙөмтәһе уҡыусыларым эшендә лә киң йәйелдерелә. Уңыштарыбыҙ ҙа күп. «Һаумы, һаумы, әкиәт!», «Һомай һылыуҙары», «Минең тамырҙарым», «Урал батыр», «Исемдәрең матур, кем ҡушҡан?», төрлө йола байрамдарын ата-әсәләр менән үткәреү яҡшы милли күренешкә әйләнгән беҙҙең мәктәптә. Күп милләтле рус мәктәбендә байрамдарҙы телдәр гөлләмәһе шәлкемендә бик сағыу үткәрәбеҙ. Бар телдәрҙе лә халыҡ дуҫлығы, халыҡ берҙәмлеге матурлай, сөнки һәр кеше үҙ халҡының лингвистик шәхесе һанала. Һәр милләттең туған теле – уның мәҙәниәте, тарих көҙгөһө. Шуға ла һәр халыҡ үҙ теленең сафлығы, матурлығы, аһәңлеге, халыҡсанлығы өсөн арымай-талмай эшләй.

Юҡҡамы ни бөйөк рус педагогы Константин Дмитриевич Ушинский «Халыҡтың теле – уның бөтөн рухи тормошоноң иң

яҡшы, бер ҡасан да шиңмәй, мәңге йәшәреп тора торған иң матур сәскәһе. Телдә бөтөн халыҡ һәм уның Ватаны йәнле рәүештә кәүҙәләнә, телдә халыҡтың бөтөн рухи тормошоноң тарихы сағыла» – тимәгән. Филолгия факультеттарында лингвокультурология фәненә иғтибарҙы көсәйтеү яғындамын. Шағир-яҙыусыларҙың ижадын концептосфера тармағына таянып ғилми яҡтан тикшереүселәрҙең артыуына шигем юҡ. «Заман башҡа, заң башҡа», – тиһәләр ҙә, халыҡ ижады үлемһеҙ. Халыҡ әйтһә – хаҡ әйтә. Мәңге һүнмәҫ рухи хазинабыҙ, милләт йәнен һаҡлаусы аһәңебеҙ ул – этнопедагогика, этноэтикет. Быуаттар аша беҙгә мираҫ булып ҡалған халыҡ педагогикаһы хазиналарын йәш быуынды тәрбиәләүҙә файҙаланыу мөмкинлектәре ифрат ҙур. Ҡәҙерен белеп, һөҙөмтәле итеп ҡулланһаҡ, дәрес сифаты күтәрелер, киләсәккә белемле, тәрбиәле, халыҡ өсөн үҙен йәлләмәгән милли шәхестәр тәрбиәләй алырбыҙ. Дәрестәремдә ҡулланылған лингвокультурология – ижади мираҫ шишмәһе ул. Шишмәне ҡоротоп ҡуймайыҡ, урғылтайыҡ!



***Ҡәҙерғолова Ләлә Әнүр ҡыҙы,***
*Федоровка районы муниципаль районының*
*З. Ғ. Ураксин исемендәге Һәйет ауылы төп*
*дөйөм белем биреү мәктәбенең башланғыс*
*кластар уҡытыусыһы*

## Башҡорт теле дәрестәрендә уҡыусыларҙың телмәрен үҫтереү

Балаларҙың телмәрен үҫтереү – дөйөм уҡытыу-тәрбиәләү эшенең айырылғыһыҙ бер өлөшө булып тора. Шуның өсөн дөрөҫ телмәр үҫтереү, баланың туған теленә ҡыҙыҡһыныу уятыу ата-әсәнең һәм уҡытыусыларҙың төп бурысы булып иҫәпләнә.

Был методик ҡулланма башланғыс һәм урта класс уҡыусыларының телмәрен үҫтереүҙе үҙ эсенә ала һәм башҡорт теленән уҡытыу программаларының телмәр үҫтереү бүлегенең эстәлеген дә аса.

Бында бирелгән материалдарҙы дәрестәрҙә, шул уҡ ваҡытта дәрестән тыш сараларҙа ла файҙаланырға мөмкин. Ҡулланмала бирелгән ҡайһы бер эш төрҙәрен әҙәбиәт дәрестәрендә ҡулланырға мөмкин. Уҡытыу урыҫ телендә булған кластарҙа ла ҡулланыу бигерәк отошло булыр.

Һәр уңайлы мөмкинлектән файҙаланып, уҡыусыларҙың бәйләнешле һөйләү һәм яҙыу телмәрен үҫтереүгә ваҡыт бүлһәк, белемле генә түгел, тормошта үҙ юлын таба белгән аҡыллы, интеллектуаль шәхес тәрбиәләрбеҙ.

Хәҙерге тормош, яңы иҡтисади шарттар һәм мөнәсәбәтәттәр һәр кемдән тәрбиәне, юғары мәҙәниәтте, тарихты һәм халыҡ тормошон белеү йәһәтенән мәғлүмәтле булыуҙы талап итә. Шуға күрәлә йәш быуынды даими үҙгәреш һәм конкуренция шарттарында йәшәй алырҙай инициативалы, бөтә яҡлап үҫешкән кеше итеп тәрбиәләү – уҡытыусының һәм ата-әсәләрҙең иң төп бурысы. Уҡыусылар үҙ фекерҙәрен телмәр йөкмәткеһенә, аралашыу шарт-

тарына һәм телмәр ситуацияһына ярашлы аныҡ, йыйнаҡ, тулы итеп һөйләй һәм яҙа белергә, йәғни телмәрен төҙөй белеү һәләтенә эйә булырға тейеш.

Шуға күрә был проблеманы бөгөнгө көндә актуаль тип һанайым һәм үҙемдең методик эшемде ошо үтә лә кәрәкле проблемаға бағышлайым. Методик ҡулланмамдың темаһы: «Башҡорт теле дәрестәрендә уҡыусыларҙың телмәрен үҫтереү».

*Актуаллеге.* Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев үҙенең «Халҡыма хат» шиғырында:

Был донъяла телдең ҡороуҙары
Яманыраҡ дарья ҡороуҙан.
Һиңә быны нисек аңлатырға,
Телле көйө телһеҙ ырыуҙаш?
Аҡылыңдан әллә яҙҙыңмы һин,
Тере көйө телдән яҙырға?

Балаға башҡорт телендә дөрөҫ уҡыу, грамоталы яҙыу, һөйләү һәм аңлау ҙур көс талап итә. Йәмғиәт алға киткән заманда өйҙә күпселек ата-әсәләр үҙҙәренең туған телдәрен белмәйҙәр. Ғаиләлә аралашыу күпселек осраҡта рус телендә алып барыла. Шулай уҡ хәҙерге заманда ҡатнаш ғаиләләр ғәҙәти күренешкә әйләнде. Бындай ғаиләләрҙә аралашыу икенсе телдә алып барыла ла инде. Йылдан-йыл ике телдә аралашыусы ғаиләләр һаны артҡандан арта бара. Шуға ла башҡорт теле дәрестәрендә һөйләү телмәре үҫешкән шәхес тәрбиәләү өсөн мөһим шарт булып тора.

Был шартты үтәү өсөн иң төп проблема, ул:
- балаларыбыҙҙың үҙ телендә һөйләшмәүе;
- ҡайһыларҙың үҙ телендә һөйләшергә белеп тә, оялыуы;
- ата-әсәләрҙең башҡорт теленә етди ҡарамауы.

**Төп өлөш.**

**Теоретик өлөш.**

Йәмғиәттәге үҙгәрештәр, компьютер технологияһының алға китеүе өлкәндәрҙең генә түгел, балаларҙың да аң һәм психологик үҫешенә, телмәренә йоғонто яһамай ҡалмай. Уҡыусыларҙың телмәрендә тупаҫ һүҙҙәрҙән торған лексик берәмектәр, жаргон лексика



әүҙемләшә. Шуға ла мәктәптә, белем биреү менән бер рәттән, коммуникатив маҡсаттарҙы тормошҡа ашырыу төп бурыстарҙан һанала.

Телмәр үҫтереү – тел уҡытыу методикаһының ҡатмарлы өлөшөн тәшкил итә. Был шуның менән аңлатыла: әҙәби телдең нормалар системаһын, законлыҡтарын үҙләштереү һәм телмәрҙә ҡулланырға өйрәнеү конкрет бер лексик-грамматик тема менән генә сикләнмәй, ә программала күрһәтелгән бөтә материалды өйрәнеү барышында бөтә уҡыу йылдарында ла дауам итә.

Коммуникатив ҡараштан сығып, мотлаҡ аралаша белеүҙе формалаштырырға, йәки икенсе төрлө әйткәндә, аралашыу компетенцияһын барлыҡҡа килтерергә кәрәк. Аралашыу компетенцияһы тип әйткәндә телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәре: уҡыу, ишетеү (тыңлау), һөйләү (монолог, диалог), яҙыу – менән файҙалана белеү күҙ уңында тотола.

Телдән һәм яҙма аралашыу бәйләнешле, ләкин һәр береһе 4 төр телмәр эшмәкәрлегендә: һөйләү, тыңлау, уҡыу, яҙыу аша тормошҡа ашырыла. Ысынбарлыҡта аралашҡанда кеше уҡый һәм уҡығанды тикшерә, кәрәкле информацияны һәйбәтерәк хәтерләү һәм иҫенә төшөрөү өсөн яҙып та ала. Был эштәрҙең төрҙәре бер-береһе менән тығыҙ үрелеп бара һәм улар араһында тиҙ генә аныҡ сик ҡуйыуы ҡыйын.

**Мәктәп уҡыусыларының телмәрен үҫтереүҙең нигеҙҙәре.**

Телмәр – телдең йәшәйеше, йәшәү формаһы, ҡулланылышы, телде файҙаланыу процесы.

Телмәр термины ике мәғәнәлә ҡулланыла:
а) телмәр – кешенең аралашыу эшмәкәрлеге һәм
б) телмәр – ошо эшмәкәрлектең һөҙөмтәһе, текст.

Телмәр телдәге өндәрҙе, һүҙҙәрҙе файҙаланып, уйлау, фекерләү, шул фекерҙе әйтеп (яҙып) биреү, йөкмәткене башҡаларға еткереү, хәбәр итеүҙе эсенә ала. Былар эшмәкәрлек һөҙөмтәһендә ниндәй ҙә булһа мәғәнәле йөкмәтке, текст төҙөлә.

Телмәр барлыҡҡа килһен өсөн, аралашыу, фекер әйтеү теләге, ихтыяжы (мотив), аралашыусы каналы (ишетеү, күреү, һөйләү һәм яҙыу), аралашыуҙың конкрет ситуацияһы булырға тейеш.

Телмәр төҙөү – индивидуаль күренеш. Кеше ысынбарлыҡты, ваҡиғаларҙы, предметтарҙы, күренештәрҙе төрлөсә аңлай, улар тураһында төрлөсә фекер йөрөтә. Һәм үҙ фекерҙәрен, уйҙарын, тел сараларын үҙенең маҡсатына, белеменә, кәйефенә, аралашыу шарттарына ярашлы булланып, төрлөсә әйтә (яҙа).

Телмәр – шәхси, психологик күренеш. Телмәрҙе шәхестәр тыуҙыра. Шәхес аралашыу процесында тел сараларын үҙенсә, нисек теләй, шулай файҙалана. Шуға күрә һәр кемдең телмәре үҙенсәлекле була. Берәүҙең телмәре икенсе кешенең телмәренә оҡшамай, уларҙың береһе икенсеһенән айырыла. Телмәрҙең сифаты ла, төһөлөшө һәм йөкмәткеһе лә кешенең йәш үҙенсәлегенә, лингвистик тәжрибәһенә (телдең системаһын, нормаларын белеүгә һәм телмәр күнекмәһенә) ҡарап йөрөй. Телмәр тыңлау һәм һөйләү (һөйләү телмәрендә), яҙыу һәм уҡыу (яҙыу телмәрендә) процесы аша бойомға ашырыла.

Махсус өйрәтеүҙең күп уҡыусылар кәрәкле материалды һайлай белмәй, системаға һала алмай, шуға иншаларҙа фекер әйтеүҙә эҙмә-эҙлеклелек юғала, ҡабатлауҙар, бәйләнешһеҙ һөйләмдәр күҙәтелә. Был факттар текст төҙөү төбөндә ятҡан, коммуникатив аталған принципты махсус эшкәртеү, үҫтереү хаҡында һөйләй. Ниндәй һығымта эшләп була һуң?

Бәйләнешле телмәр бала бәләкәй саҡта диалогтан монологҡа, ваҡиғалы телмәрҙән контекстлы телмәргә үҫешә. Бала был белемдәрҙе аралашыуҙа ғына түгел, ә планлаштырыу, эшмәкәрлек йүнәлтеү функцияһын да ҡуллана.

Мәктәптә уҡыу барышында бәйләнещле телмәр артабан үҫеш ала: ул уҡыусылар тарафынан белем алыу, һаҡлау, таратыу функцияларында ҡулланыла. Бәйләнешле телмәр үҫеше уҡыусыларҙың төрлө стилдәге телмәр типтарын, төрлө әйтеү формаларын, коммуникатив аралашыуҙы үҙләштереүендә күренә.

**Практик өлөш**

Бала күңеле аҡ ҡағыҙ, унда нимә «яҙаһың, һалаһың», шул уның йәшәйеш йөкмәткеһенең, мәғәнәһенең нигеҙен тәшкил итә, ғүмерлеккә уға йәшәү ҡанундары булып хеҙмәт итә, тормошҡа юл күрһәтеүсе маяҡ ролен үтәй. Кеше телдән, телмәрҙән башҡа белем ала алмай, уның аҡыл үҫеше лә артта ҡала. Телмәр ни тиклем үҫешкән, камиллашҡан, тыңлаусы шул тиклем тиҙерәк аңлай. Һөйләү телмәре уҡыусыға йәмғиәт тормошонда әүҙем ҡатнашыуы өсөн генә түгел, мәктәптә уңышлы уҡыр өсөн дә кәрәк.

Һуңғы йылдарҙа телевизор, компьютер күп иғтибарҙы үҙенә йәлеп итә. Әҙәби әҫәрҙәр уҡыусылар һаны бик аҙ, йәш үҫмерҙәр араһында юҡ та тиерлек. Шунлыктан әҙәби һөйләү телмәр кимәле түбән. Был уҡыусыларҙың ғына түгел, ә глобаль заман проблемаһы. Ошонан сығып, мин үҙемдең эшемдең проблемаһын билдәләнем:уҡыусыларҙың һөйләү телмәтен үҫтереү.

Бөгөнгө көндә уҡыусыларҙың һөйләү телмәрен үҫтереү мәсьәләһе – тел һәм әҙәбиәт дәрестәрендә актуаль һанала.

Эшемдең нигеҙендә бөйөк педагог Амонашвилиҙың гуманистик идеялары, Ильиндың уҡытыуҙы тормош менән үрелеп алып барылыуы, Эльконин-Давыдовтың үҫтереү технологиялары, практик уҡытыусыларҙың хеҙмәте, төрлө технологиялары ята.

Һөйләү телмәрен үҫтереүҙә минең педагогик эшмәкәрлегемдең маҡсаты: уҡыусыларҙың башҡорт телендә һөйләшергә өйрәтеүҙә төрлө метод һәм алымдар ҡулланыу.

Методик эштең маҡсаты: башҡорт телен өйрәнеү нигеҙендә уҡыусыларҙың телмәрен үҫтереү.

Бурыстар һәм мәсьәләләр:

- Уҡыусыларҙың башҡорт теле дәрестәрендә телмәр үҫтереү юлдарын асыҡлау, үҫешен тәьмин итергә йүнәлтелгән дидактик материал туплау һәм системалаштырыу.
- Һәр уҡыусыға телде практик үҙләштереүгә шарттар тыуҙырыу.
- Уҡыусының танып белеү эшмәкәрлеген әүҙемләштереү.
- Теоретик нигеҙҙәрен билдәләү, ҡулланыу юлдарын күрһәтеү.
- Хәтерҙе үҫтереү уйындарын ҡулланып, башҡорт теле нормалары буйынса белем һәм күнекмәләр биреү.
- Башҡорт фольклорына таянып уҡыусыларҙың башҡорт теле дәрестәрендә дөрөҫ һөйләшергә, башҡорт әҙәби телен практик файҙаланырға өйрәтеү.

Балаларҙың һөйләү телмәрен үҫтереү – уҡыу процесында төп бурыстарҙың береһе. Беҙҙең төп бурыс балаларҙың тыумыштан килгән зирәклеген артабан үҫтереү, йәки юғалтмау.

Телмәр үҫтереү барышында балаларҙа телгә ҡарата уйындар ярҙамында ҡыҙыҡһыныу уятыу һәм үҫтереү, туған телгә ҡарата ихтирамлы, етди ҡараш тәрбиәләү; матур, әҙәби итеп һөйләшергә өйрәтеү.

Маҡсатҡа ирешеү өсөн түбәндәге мәсьәләләрҙе сисеү кәрәк:

- Тел сараларын дөрөҫ ҡулланып, бер-береңде аңларға һәм үҙ фекереңде асыҡ итеп әйтергә өйрәтеү. Тел саралары, миңеңсә, шунан ғибәрәт: хәрефтәр, өндәр, типик һөйләмдәр, һүҙбәйләнештәр;
- Гуманитар фекерләүҙе үҫтереү;
- Һөйләмдәрҙе бер-береһенә бәйләп телмәр төҙөү һәм билдәле бер фекерҙе, уйҙы әйтә белергә өйрәтеү (белдереү, хәбәр итеү, фекерләү, ҡараш, тасуирлау, хуплау, маҡтау, шелтәләү һ. б.);
- Уҡығанды, һөйләгәнде аңларға өйрәтеү (аудирование);

Был бурыстарҙы уңышлы тормошҡа ашырыу өсөн, әлбиттә, уҡытыусынан дәрестә төрлө методтар һәм алымдар менән ижади эшләү талап ителә.

Шулай итеп, уҡытыусының алдында ҙур проблема килеп баҫа: нисек уҡыусыларҙы телмәр эшмәкәрлеген әүҙемләштерергә һәм шул нигеҙҙә телмәр үҫтерергә.

Бөгөнгө көндә уҡыусыларҙың телмәр күнекмәләрен үҫтереүҙә уларҙың һүҙ менән эшләй белеүе, һүҙбәйләнештәр, һәйләмдәр төҙөй белеүе, бәйләнешле текст менән эшләй белеүе беренсе планда тора.

Башланғыс класс уҡыусыларын диалогик телмәргә өйрәтеү ҡатмарлы һәм оҙайлы процесс. Уҡытыусы балаға һорау бирә, ә уҡыусы 2-3 һүҙҙән торған һөйләм менән яуап бирә. Тәүҙә уҡыусы уҡытыусы артынан ҡабатлаһа, артабан ул үҙ аллы һөйләмдәр төҙөй башлай. Башланғыс класс уҡыусылары өсөн һорауҙар ҡыҫҡа, конкрет була, уларға тулы һөйләмдәр менән яуап биреү талап ителә. Бындай эш һөйләм төҙөлөшөн үҙләштереүгә ярҙам итә. Артабан уҡыусылар диалогты ролдәргә бүлеп тасуири уҡырға, һөйләп ҡарарға өйрәнә.



Уҡыусыларҙың актив һәм пассив һүҙлек запасын байытыуҙа диалогик телмәрҙе кластан класҡа тулыландыра барыу, күнегеүҙәрҙең төрлө, мауыҡтырғыс булыуы отошло була.

Телмәр аша фекерҙе башҡаларға еткереүҙең, аралашыуҙың төрлө формалары бар: әңгәмә, әкиәт, йомаҡ, мәҡәл, йыр, лекция, шиғыр һ. б.. Быларҙың һәр береһе әҙәби телдең йә диалог, йә телдән һәм яҙма монолог формаларын ҡабул итә. Тел программаһында юғарыла һаналған жанрҙарҙың балалар өсөн аңларлыҡ, үҙләштерерлек булғандары ғына һайлап алына һәм уҡыусыларҙың һөйләү менән яҙыу телмәрен үҫтереүҙе күҙ уңында тота. Тәүге дәрестәрҙән үк уҡыусыларҙың телмәренә ҙур иғтибар бүлергә, телмәр хаталарын төҙәтеп, дөрөҫ һөйләүҙәрен талап итеү мөһим. Шул уҡ ваҡытта яйлап ҡына телгә ҡарата ихтирам, дөрөҫ һөйләшеү ихтыяжын тәрбиәләү отошло.

Эш алымдарын үтәүҙә түбәндәге принциптарға таянып эшләү уңышҡа өлгәшеүгә ярҙам итә:

• Коммуникатив йүнәлеш принцибы:

Үҙ-ара аралашыуға өйрәтеү практик маҡсаттарҙың иң мөһиме. Шуға күрә коммуникатив йүнәлеш принцибы төп методик принцип булып тора, сөнки уҡыусыларҙың уҡыуы (һөйләгәндә аңлау, һәйләшеү) һәм яҙыу (шыма уҡыу, дөрөҫ яҙыу) коммуникацияһына йәлеп итеүгә нигеҙләнергә һәм системалы булырға тейеш. Был принципты тормошҡа ашырыу аралашыу өсөн ыңғай шарт булып тора. Шуға күрә һәр дәрестә уҡытыу процесын ошо принципҡа ярашлы рәүештә ҡорорға кәрәк.

• Аңлылыҡ принцибы:

аңлы рәүештә телмәр төҙөргә өйрәтеү һәм һүҙ белдергән хәрәкәтте үтәүҙе автоматик кимәлгә еткереү телде тойорға ярҙам итә.

• Туған телгә таянып өйрәтеү принцибы:

телен башҡа телдәр менән сағыштырып өйрәтеү.

• Уҡытыуҙа тәрбиәүи принцип:

дәресте булған һәр мөмкинселекте Тыуған илгә, уның мәҙәниәтенә һәм тарихына, халыҡ йолаларына һөйөү тәрбиәләү өсөн ҡулланыу, халыҡтар араһындағы дуҫлыҡты нығытыуға йүнәлтеү.

Уҡыусы үҙаллы телде үҙләштерергә өйрәнергә тейеш, шуға күрә уҡытыусы тик уҡытып ҡына ҡалмай, ә балаға уҡырға ярҙам итә.

Телмәр үҫтергәндә уҡытыуҙа уйындар ҡулланыуҙың әһәмиәте бик ҙур.

Шулай уҡ артикуляция өҫтөндә эш, парлы эшләү, төркөм менән эшләү, ситуатив һөйләшеү, проекттар, парлы уйындар.

Уйындар – телмәр үҫтереүҙең башланғыс этабындағы иң мөһим компоненттарҙың береһе. Һәм шулай уҡ монолог, диалог кеүек формаларҙың бәйләнеше төп урын алып тора. Диалогҡа өйрәтеү ике мәсьәләне сисә:

- ишеткәнде кире ҡабатлап әйттереү;
- диалогтағы бер репликаны мәғәнәле, бәйләнешле айырым бер итеп үҫтерә белергә өйрәтеү, микромонолог төҙөү.

Телмәр үҫтереүҙә сюжетлы уйындар ҡулланып эшләү уңышлы һөҙөмтәләр бирә :

- баланың һүҙлек запасын ҡулланып, телде аңлауы;
- уңайһыҙланмайынса бер-береһе менән аралашыуы;
- уйлау ҡеүәһен күтәреү;
- көтөлмәгәндә килеп тыуған телмәр ситуацияларынан еңел сыға белеү;
- Телгә ҡыҙыҡһыныу, өйрәнеү теләктәре уяна;
- балаҙың ижади һәләттәре арта.

**Тиҙәйткестәр әйттереү**

Сифатлы уҡырға өйрәтеү өсөн телмәр ағзаларының һығылмалылығына ирешеү мөһим роль уйнай. Шуға күрә телмәр аппаратын үҫтереү маҡсатында махсус күнегеүҙәр үткәреү отошло була. Тиҙ әйттереү өсөн текстар дәрестең лексик темаһына ярашлы һайланыла. Был осраҡта тиҙәйткестәр телмәр аппаратын үҫтереү менән бер рәттән, уҡыусыларҙың һүҙлек запасын арттыра, телмәрҙе әҙер синтаксик берәмектәр менән байыҡтыра.

Өлкәнерәк кластарҙа уҡыусыларға китап-журналдарҙан тиҙәйткес өсөн текстар эҙләргә, яҙып алырға, үҙҙәренә тиҙәйткестәр ижад итергә ҡушырға мөмкин.

Шундай тиҙәйткестәр ҡулланырға була:



а) Быҙау, быҙау, быҙауҡай,
Быҙау буйлы быҙауҡай,
Быҙаулаған быҙауҡай,
Быҙауҡайҙай быҙауҡай.

б) Өйгә ингән сыпсыҡ,
Осоп йөрөй сыпсыҡ,
Сыҡ-сыҡ, сыҡ-сыҡ,
Сыҡ, сыпсыҡ.
Сыҡ, сыҡ, ҡошсоҡ,
Осоп сыҡ!

в) Алланған алма аша,
Балдары тама-тама.
Аша алһыу алманы,
Балына мана-мана.

**Таҙа әйткестәр әйттереү.** Таҙа әйткестәр дәрестең лексик темаһына ярашлы ҡулланыла. Улар дәрестә өйрәнелгән өн-хәреф менән ижектәр уҡырға, дөрөҫ әйтергә күнектереү маҡсатында ҡулланыла. Тәүге осорҙа уҡытыусы ҡабатлатыу өсөн әҙер таҙа әйткестәр ҡулланһа, әкренләп уҡыусыларҙың үҙҙәрен дә таҙа әйткестәр төҙөүгә йәлеп итергә кәрәк.

Мәҫәлән, өн-хәрефтәрҙең дөрөҫ әйтелешен өйрәнгәндә, түбәндәге таҙа әйткестәрҙе ҡулланырға мөмкин:

**а) Тә-тә-тә** – ултырабыҙ дәрестә.
**Са-са-са** – һөйләшәбеҙ башҡортса.
Ый-ый-ый – уҡыусы шиғыр уҡый.
**Ыш-ыш-ыш** – беҙ шундай тырыш.

**б) Ға-ға-ға** – әйҙә киттек урманға!
**Шә-шә-шә** – урманда еләк бешә!
**Ле-ле-ле** – ауыҙ итәйек әле.
**Ге-ге-ге** – ҡалай тәмле еләге.

**Тренажер менән күнегеүҙәр үткәреү.**

Түбәндәге таблица-тренажер менән уҡыу сифатын, телмәр үҫтереү маҡсатында күп кенә күнегеүҙәр үткәрергә мөмкин:

- бер бағаналағы йәки бер юлдағы тартынҡыларҙы асыҡ итеп, телмәр ағзаларына күсөргәнеш биреп, бер тында уҡыу;

- бер бағаналағы йәки бер юлдағы тартынҡыларҙан һуң һуҙынҡы ҡуйып уҡыу;

- бер бағаналағы йәки бер юлдағы тартынҡыларҙың алдына һуҙынғы ҡушып уҡыу һ. б.

| | 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 | 10 |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 | т | л | р | с | м | н | ҡ | т | һ | б |
| 2 | ҡ | т | н | р | с | һ | б | м | ҙ | ш |
| 3 | р | м | с | ҫ | ф | в | ҙ | ҫ | һ | х |
| 4 | ҫ | ж | м | с | в | п | к | г | ҡ | ғ |
| 5 | ш | щ | с | ж | д | б | п | к | л | т |
| 6 | ғ | р | з | ҙ | г | ч | с | ш | ж | щ |
| 7 | ҡ | ғ | ҫ | ҙ | с | ш | з | ж | х | һ |
| 8 | т | р | з | ҙ | м | н | ң | ғ | п | х |
| 9 | с | ц | ш | ж | ч | щ | б | п | в | ф |

Ошо һәм башҡа эш төрҙәрен халыҡ ижадын өйрәнгәндә лә киң файҙаланып була. Мәҫәлән, мәҡәл һәм әйтемдәрҙе өйрәнгәндә уҡыусыларға ошондай ижади күнегеүҙәрҙе тәҡдим итәбеҙ:

1) Күп нөктәләр урынына кәрәкле һүҙҙәрҙе ҡуйып, мәҡәл һәм әйтемдәрҙе тултырығыҙ: Күрше хаҡы – (тәңре хаҡы). Бесәй моронон ҡаплап ятһа – (көн һыуыта).

Хәҙерге тормошҡа бәйләнгән теләһә ниндәй мәҡәл йә әйтемде тема итеп, кешеләрҙең эшмәкәрлеге, уҡыусылар тормошо тураһында хикәйәләр төҙөтөү. Мәҫәлән: Хеҙмәтенә күр хөрмәте һ. б.

2) Был бүлекте өйрәнгәндә өлкән быуын кешеләренән һорашып халыҡ ижады ҡомартҡылары яҙып килтереү эшен дә йөкмәтергә була. Балалар бигерәк тә таҡмаҡтар яҙып килтерергә ярата.

3) Программаға индерелгән әкиәттәрҙе өйрәнгәс, «Аманат», «Аҡбуҙат» журналдарын, «Йәншишмә» гәзитен балалар менән ентекләп уҡығас, уҡыусылар тарафынан ижад ителгән әкиәттәр



менән танышыуҙы ла ҡулайлы тип таптыҡ. Аҙаҡ уҡыусыларҙа үҙҙәре лә әкиәт ижад итеп ҡарау теләге тыуыр.

4) Берәй ҙурырыраҡ тема, әкиәт, мәҡәл, йомаҡ бүлектәрен йомғаҡлағанда кроссвордтар, башватҡыстар, шарадалар ҡулланыу отошло. Ошондай кроссвордтарҙы һәм ребустарҙы уҡыусыларҙың үҙҙәренән дә төҙөтөргә була. Мәҫәлән, «Юлай» һүҙенә балалар ошондай ребус төҙөнөләр: Юл+ай. «Ҡарай» – ҡар+ай (Һүрәттәр менән дә белдерергә мөмкин).

Был кроссвордтарҙы, башватҡыстарҙы, шарадаларҙы, ребустарҙы сискәндә, уҡыусы быға тиклем алған белеменә таяна, әҙәби һәм ғилми китаптар аҡтара – үҙенсә ғилми тикшеренеү эштәре үткәрә.




**Поэтик әҫәрҙәр аша телмәр үҫтереү**

Уҡыусыларҙың телмәрен үҫтереүҙә шиғырҙар уҡытыу һәм ятлатыу мөһим роль уйнай. Шиғыр өҫтөндә эш баланы уҡығанды иғтибар менән тыңларға, аңларға һәм уны дөрөҫ, тасуири уҡырға өйрәтә. Шиғырҙың формаһы телдең матурлығын һәм әһәңлеген күрһәтә.

Башҡорт теле дәрестәрендә халыҡ ижады өлгөләренән түбәндәге шиғырҙарҙы тәҡдим итергә була. Мәҫәлән,

а) – Бесәй ҡайҙа бараһың?

– Әбейҙәргә барамын.
– Унда һиңә ни тейә?
– Ике ҡалаҡ май тейә.
– Уны ҡайҙа ҡуяրһың?
– Мейес аҫтына ҡуярмын.
– Бысранһа ни эшләрһең?
– Һыуға төшөп йыуармын.
– Төшөп китһәң ни эшләрһең?
– Талға ябышып сығармын.
– Талың ҡупһа ни эшләрһең?
– Аҡырып-баҡырып илармын.

б) – Ҡурай!
– Әү!
– Ҡайҙа үҫтең?
– Урманда.

Был шиғырҙарҙың диологик формала булыуы уның йөкмәткеһен тиҙ үҙләштерергә, хәтерҙәрендә ҡалдырырға ярҙам итә.

Һөйләү телмәрен үҫтереүҙә **диалог** ҙур урын алып тора. Бөтә лексик-грамматик материал диалогтар һәм аралашыу ситуациялары аша үҙләштерелә. Диалог телмәрҙә киң таралған күнегеү – һорау-яуап күнегеүе. Башланғыс кластарҙа диалогтарҙы өйрәнеү буйынса ошондай күнегеүҙәр ойоштророрға була:

1) Терәк һүҙҙәр ярҙамында рәсем буйынса диалог төҙөү.

2) Типик аралашыу ситуацияларына ҡараған микродиалогтар төҙөү.

Мәҫәлән, «Кейем-һалым» магазинында, «Китапханала», «Беҙҙең мәктәп» һ. б.

3) Диалогты дауам итеү.
– Һаумыһығыҙ!
– Һаумыһығыҙ.
– Һеҙ ошо ауыл кешеһеме?
– Эйе, мин бында йәшәйем.
– Әйтегеҙ әле, китапханаға нисек барырға?

4) Класташың менән телефондан һөйләшеү ҡор.



5) Сәхнәләштереп күрһәтегеҙ «Мәктәп баҡсаһында».

6) Яңы дуҫтар менән танышыуға диалог төҙө.

7) Диалогты ролдәргә бүлеп уҡыу.




### Йомғаҡлау

Мәктәпкәсә йәштәге балалар тормошта иң кәрәк була торған күнекмәләрҙең күбеһен уйын аша алалар, ә мәктәпкә килгәс, уйындан етди эшкә күсергә тура килә. Был күсеш киҫкен булмаһын өсөн, дәрестәрҙә уйын һәм мауыҡтырыусанлыҡ бигерәк тә башланғыс кластарҙа ҙур урын алырға тейеш. Уҡыусыларҙың йәш үҙенсәлегенә, дәрестең ҡатмарлылығына һәм эш төрҙәренә ҡарап, ял минуттары йөкмәткеһе һайланыла. Ғәҙәттә, дидактик уйындар, ҡыҙыҡлы эштәр, проблемалы һорауҙар, башватҡыстар, мәсьәләләр, теге йә был теманың асылын, үҙенсәлектәрен характерлаусы әкиәттәр, көләмәстәр, йомаҡтар, мәҡәлдәр, һәр төрлө логик күнегеүҙәр, стилистик күнегеүҙәр – былар бөтәһе лә, уҡыусыларҙың донъяны танып белеүен, фекерләү ҡеүәһен, зирәклеген, телмәрен үҫтереүҙә ҙур роль уйнайҙар.

Шулай итеп, уҡытыусы балаларҙың телмәрен үҫтерерҙәй ниндәй генә алымды дәрестәрҙә ҡулланһа ла, был эш төрө балаларҙы ялҡытмаҫҡа, үҙенә тартып торорға, ҡыҙыҡһындырырға тейеш. Бары шунда ғына ул һәйбәт һөҙөмтә бирә һәм әһәмиәтле була. Был эш төрҙәре уҡыусының ижади фекер йөрөтөү һәләтен үҫтерергә, уның эске донъяһын байытырға ярҙам итә. Дәрестәрҙә юға-

рыла һүҙ алып барылған материалды ҡулланыу класс эшен методик яҡтан төрлөләндерә төшә, йәш быуындың ижади әүҙемлеген үҫтерә һәм иң мөһиме, аңлы, белемле, туған телен, тыуған ерен, илен яратҡан, ғөрөф-ғәҙәттәрен, тарихын ихтирам иткән шәхес тәрбиәләргә булышлыҡ итә.

### *Ҡушымта*

Грамматик уйындар һәм мауыҡтырғыс күнегеүҙәр бер нисә төргә бүленәләр:

Фонетик, лексик, грамматик мәсьәләләр.
Фонетик, лексик, грамматик уйындар.
Мәғлүмәт биреүсе мауыҡтырғыс материалдар.
Шаярыуға ҡоролған һорауҙар.

**Метаграммалар**

Бер хәрефте икенсеһе менән алмаштырып табыла.
Ш менән төрлө төҫлө еңел ҡыуыҡ
Ҡ менән мамыҡ кеүек, үҙе һыуыҡ.
(шар-ҡар)
Ҡ менән йәшелсә, Т менән һауыт-һаба, С менән балыҡ.
(ҡабаҡ, табаҡ, сабаҡ)
Т менән ашамлыҡ, Ҡ менән бороңғо хәрби ҡорал,
Ш менән йәшелсә. (талҡан, ҡалҡан, шалҡан)

**Шарадалар**

Уйын-йомаҡтар шарадалар тип атала.
Бер өлөшө бик тәмле,
Икенсеһе бер йәнлек,
Бергә ҡушһаң: һуғылған,
Түргә йәйеп ҡуйылған.
(бал+аҫ=балаҫ)
Бер өлөшө, ай-һай, әсе,
Икенсеһе төҫ була...
Бергә ҡушып, ҡороп ҡуйғас,
Ҡуян эләгеп ҡуя.



(тоҙ+ аҡ = тоҙаҡ)
Кем күберәк һүҙ яһай ала?
Бер үк һүҙгә төрлө ялғауҙар ҡушып, яңы һүҙҙәр яһарға. Иң күп һүҙ яһаған кеше еңеүсе булып ҡала.
Өлгө: ҡар-ҡарт, ҡармаҡ, ҡарағат, ҡара, ҡаралыҡ, ҡараһыу, ҡартлыҡ, ҡараҡ.

**Һандарҙан һүҙҙәр төҙөү**

5ЕК – бишек 6 н – алтын
К3 – көс 100 Өк– йөҙөк
Т10 – тун Б6 – балтырған

**Кем тиҙерәк, етеҙерәк**

Уҡыусылар өс командаға бүленә. Уҡытыусы һәр командаға бер тема бирә. Ошо темаға уҡыусылар һүҙҙәр уйлай. Кемдең яуаптары, яҙылыштары дөрөҫ, һүҙҙәре күп ошо команда беренселекте яулай һәм бүләккә «биш» билдәһен ота. Мәҫәлән, тема: «Уҡыу әсбаптары», «Йәшелсәләр», «Ғаилә»

Был күнегеүҙе ҡатмарлаштырырға мөмкин. Ошо һүҙҙәр менән һүҙбәйләнештәр, аҙаҡтан һөйләмдәр төҙөтөргә мөмкин.

**Тасуири укыу формалаштырыу өсөн күнегеүҙәр**

Орфоэпик күнегеүҙәр
Пауза менән бүленмәгән һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйттереү.
тора алмай ҡола ат
һары ат арғы урамда
алып кил күрә алмай
иртә үк килә алманы
алғы яҡ алып бар
Бирелгән һүҙҙәрҙән төшөп ҡалған өндәрҙе таптырыу.
Муйнаҡ бирьяҡ тәү тапҡыр
Өләсәй олатай яҡшатлана
Арьяҡ ҡарағас Арғауыл
Яңауыл табағас
н һәм ң хәрефтәре ингән һүҙҙәрҙе сағыштырыу.
тин –таң ен –ең

төн –төң тун-туң
мен-мең мин-миң
ин-иң тин-тиң
ун-уң өн-ө

**Тауыштың көсөн һәм урындарын билдәләп, текстар уҡыу.**

Шиғырҙы тәүҙә эстән, унан һуң уң яҡта бирелгән күрһәтмәләр буйынса уҡығыҙ:

Ҡыуанышып балалар –ҡысҡырып
Урындарына ятты, – гәҙәттәге тауыш менән
Улар менән бесәй ҙә – ҡысҡырыбыраҡ
Йоҡларға ятҡан булды. –аҡрыныраҡ
Мырылдауҙан туҡталып, – бик аҡрын
Юрый күҙҙәрен йомдо, – аҡрын
Өйҙәгеләр йоҡланы, – бышылдап
Шаулап йөрөүсе бөттө. – бик аҡрын

*(Ғ. Сәләм.)*

**Артикуляция гимнастикаһы күнегеүҙәре.**

Һәр күнегеү 5-10 тапҡыр ҡабатланырға мөмкин.

Ирендәр өсөн күнегеүҙәр:

а) «Йылмайыу» – ирендәр асыҡ, йылмайыу күренешендә, тештәр ҡыҫылған;

б) «Торба» – ирендәрҙе борғо кеүек түңәрәкләтеп алға табан һуҙыу;

в) Ирендәрҙе ауыҙ эсенә тартып, тештәр мерән ҡыҫыу;

г) Аҫҡы иренде өҫкө ирен өҫтөнә ҡуйыу.

Тел өсөн күнегеүҙәр:

а) «Сәғәт» – телде уңға – һулға йөрөтөү;

б) «Бәүелсәк» – телде аҫҡа, өҫкә йөрөтөү;

в) «Көрәк» – телде сығарып, көрәк һымаҡ аҫҡы иренгә һалыу;

г) «Аттар» – ат сабыуы тауышы сығарыу;

д) «Энә» – телде алға ныҡ итеп һуҙырға ла, ауыҙҙан энә һымаҡ ослайтып сығарыу;



е) «Ҡалаҡ» – телде киң итеп ауыҙҙан сығарырға, ҡалаҡ һымаҡ уның ситтәрен бөкләргә, сикәләрҙе эскә тартып, һауаны эскә һурырға.

**Дөрөҫ һулыш алыу өсөн түбәндәге күнегеүҙәр.**

Танау аша тәрән итеп тын алыу, оҙаҡ итеп ауыҙ аша һауаны сығарыу. 1. Баҫабыҙ. Бер ҡулды диафрагмаға, икенсе билдән юғары ҡабырғаларға ҡуябыҙ. Баш туры. 1-тәрән һулыш алабыҙ, 1 – һулышты тотҡарлайбыҙ, 1-5 һулышты әкрен генә сығарабыҙ.

Танау менән иҫнәүҙе күнектергәндән һуң, балаларға махсус яйлаштырылған һулыш күнегеүҙәрен өйрәтеүгә күсәбеҙ.

1. «Ҡурай». Ултырып эшләйбеҙ. Ҡулдарҙы йомарлап, ауыҙ алдына ҡуябыҙ – оҙон ҡурайҙы күҙаллайбыҙ. «П-Ф-Ф-ф-ф» тип һулышты көс менән оҙонораҡ итеп этеп сығарабыҙ. Һулыш бөткәс, танау менән иҫнәйбеҙ. (3 ҡабат эшләнә).

2. «Стена сәғәте теле». Аяҡтарҙы елкә киңлегендә айырып баҫабыҙ, ҡулдар билдә. Яҡ –яҡҡа эйелгәндә «даң-доң» тип һулышты сығарабыҙ, турайып баҫҡанда тиҙ генә һулыш алабыҙ (11 ҡабат).

3. «Утын ярыу»

Аяҡтарҙы елкә киңлегендә айырып баҫабыҙ. Ҡулдарҙы баш артында «йоҙаҡлағанда» иҫнәйбеҙ, алға эйелеп һулышты «уах» тип сығарабыҙ (5-6 тапҡыр).

4. «Боксер»

Баҫабыҙ. Ҡулдарҙы йоҙроҡлап, терһәкте бөгөп, күкрәккә ҡуябыҙ. Тиҙ генә иҫнәйбеҙ, ҡулды йоҙроҡлаған килеш киҫкен генә алға этеп «һа» тип һулышты сығарабыҙ (10 ҡабат)

Шулай итеп, башҡорт теле дәрестәрендә уҡыусыларҙың телмәрен үҫтереү өсөн төрлө эш алымдары, яңы, заман информацион технологиялар, компьютер ҡулланыу уҡытыу сифатын күтәрергә ярҙам итә. Уҡыусыларҙың үҙ алдына эшләү һәләтен үҫтерә, үҙ – үҙенә ышаныс, фәнде өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу уята.

Дәрестәрҙә телмәр үҫтереү буйынса эш – күнегеүҙәрҙе уйлап, танып – белеү теләгенән ҡәнәғәтләндерерлек итеп, йәнле, илһамлы, эҙмә – эҙ башҡарып, телмәр мәҙәниәтенә, аралашыу оҫталығына өйрәнәләр. Эффектлы күнегеүҙәр телмәр эшмәкәрлеген әүҙемләштерә. Балалар тыңларға, һөйләргә, яҙырға өйрәнәләр.

***Фәйзуллина Рәйлә Әхиәр ҡыҙы,***
*Хәйбулла районы Сиҙәм ауылының муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы урта дөйөм белем биреү мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы*

## «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте» дәреслегенә эш дәфтәре

*(уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү мәктәптәренең 5-се класы өсөн «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте» дәреслегенә өҫтәлмә ҡулланма)*

Был ҡулланма уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү һәм башҡорт мәктәптәренең 5-се класс уҡыусыларына һәм башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларына тәҡдим ителә.

«Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән» эш дәфтәрҙәре булдырыу мөһим мәсьәлә булып тора, сөнки дәреслектә тел материалдарының тарҡау бирелеүе һәм тәрәнәйтеп өйрәнеүгә мөмкинселек булмау тел уҡытыусыларына өҫтәлмә материалдар эҙләргә йәки төҙөргә кәрәклекте тыуҙыра. Шуға күрә ошондай ҡулланманың булыуы уҡытыусыларҙың эшен еңелләштерә, ә уҡыусыларҙың эш һөҙөмтәләрен күҙәтеп барырға, өлгәшкән уңыштарын күрергә һәм баһаларға мөмкинлек бирә.

Ҡулланманың маҡсаты-дәреслектәрҙә бирелгән тел материалдарын киңәйтеп өйрәнергә, фонетика, лексика, һүҙьяһалыш, орфография, орфоэпия буйынса практик эштәр ярҙамында белемдәрен нығытырға, системаға һалырға ярҙам итеү. Тәҡдим ителгән ҡулланмала бирелгән текстар, ҡыҙыҡлы мәсьәләләр, башватҡыстар, йомаҡ-шиғырҙар һ. б. материалдар тел материалын өйрәнгәндә лә, текст өҫтөндә эшләгәндә лә уҡыусыларҙың фекер эшмәкәрлеген әүҙемләштереүгә, телмәрен үҫтереүгә, дөйөм белем биреү күнекмәләрен формалаштырыуға, туған тел нормаларын үҙләштереүгә йүнәлтелгән.



Текстар төрлө стилдәргә ҡараған өлгөләрҙән булыуы уның өҫтөндәге эштәрҙе төрләндереп бирергә мөмкинлек бирә. Материалдар уҡыусыларҙың танып белеү әүҙемлеген һәм аңлы үҙләштереүен, телмәр эшмәкәрлеген камиллаштырыуын тәьмин итеүҙән тыш баланың шәхес булараҡ үҫешенә йоғонто яһарлыҡ тәрбиәүи әһәмиәткә лә эйә. Текстар менән эшләү уҡыусыларҙың телмәр типтары һәм стилдәр буйынса белемдәрен үҫтерергә, уҡыу грамоталылыҡтарын формалаштырырға ярҙам итә. Алынған материалдар орфоэпик һәм орфографик ҡағиҙәләрҙе нығытыуға булышлыҡ итерлек итеп төҙөлгән. Бында уҡыусыларҙың ижади һәләттәрен үҫтереүгә лә урын бирелгән.

Был ҡулланма 5-се класс уҡыусылары өсөн тәғәйенләнһә лә, уны уҡытыусы уҡыусыларҙы олимпиадаға әҙерләгәндә башҡа класс уҡыусылары өсөн дә файҙалана ала. Шулай уҡ уҡытыусы был эш төрҙәренең бөтәһен дә эшләтмәҫкә лә, ә үҙенә кәрәклеләрен генә һайлап алырға мөмкин.

Ҡушымтала эштәрҙе үтәгәндә ярҙам итерлек таблицалар, аңлатмалар, шулай уҡ ҡыҫҡартылған варианттар тестар тәҡдим ителә. Шулай уҡ ҡулланманы төҙөүҙә файҙаланылған әҙәбиәт исемлеге бирелгән.

Ҡулланмаға 55 эш һәм 7 текст өҫтөндә эш (айырым) бирелеп, бөтәһе 55 биттән тора, шулай уҡ тел материалы буйынса бер нисә тест бирелә. Конкурсҡа тәҡдим ителгән ҡулланма ҡыҫҡартылып бирелде.

Уҡытыусы, кәрәкле эш төрҙәрен һайлап алып, уҡыусылар өсөн айырым ҡағыҙға баҫтырып таратырға ла, шулай уҡ тотош эш дәфтәрен йыл буйына эшләрлек итеп, яҙыу өсөн юлдарҙы һыҙып баҫтырып бирергә лә мөмкин. Ҡулланма 10 йылға яҡын белем биреүҙә уңышлы ҡулланылғандан һуң тәҡдим итә.

### I. Тел-аралашыуҙың иң мөһим сараһы

**1.1 Тел тураһындағы шиғырҙарҙы тасуири уҡы, авторҙарын билдәлә.**

**Телде шағирҙар нимәләр менән сағыштыралар?**

1. Әсәм теле миңә – сәсән теле,
Унан башҡа минең халҡым юҡ:
Йөрәгендә халҡы булмағандың
Кеше булырға ла хаҡы юҡ!
(____________________)

2. Ерҙә кеше һөйәгенән
Убалар үҫкән...
Тел-тере шишмә-үлмәгән,
Бөгөнгә еткән!
(____________________)

3. Моң шишмәһе һандуғастай йырсы ла һин,
Һығылма бил тал сыбыҡтай нәфис тә һин,
Аллы-гөллө сәскәләй наҙлы ла һин,
Эй илһамлы, эй хөрмәтле башҡорт теле.
(____________________)

4. Эй туған тел, эй матур тел, ата-әсәмдең теле!
Донъяла күп нәмә белдем һин туған тел арҡылы.
(____________________)

**1.2. Түбәндәге мәҡәлдәрҙе уҡып сыҡ. Күп нөктәләр урынына кәрәкле**

һүҙҙәрҙе ҡуйып яҙ. Үҙеңә оҡшаған мәҡәлдәрҙе ятлап ал.

... кеше-ярты кеше. Иләк һорарға ла ... кәрәк. Теле барҙың... бар. Донъяла иң ... нәмә лә тел, иң... нәмә лә тел. ... тел таш ярыр. (Тел, әсе, телһеҙ, татлы, сөсө, иле.)

## II. Башланғыс кластарҙа өйрәнгәндәрҙе ҡабатлау

**1. Тексты уҡы. Уйлан. Үҙ фекереңде әйт.**

Йәм-й...шел болонда Ләйсән ...ләсәһе менән ҡаҙ бәпкәләре ҡарай. Рә...әт уларға! К...н салт аяҙ. ...ары сәскәгә оҡшап ҡына торған бәпкәләргә ата ҡаҙ бейей-бейей ниҙ...р һөйләй. Ләйсән дә өләсәһенә ниҙер әйтергә теләй, ләкин...



Ләйсән башҡортса белмәй. Ул ҡалала үҫте, өйҙәрендә гел русса һөйләште. Балалар баҡсаһында ла ҡыҙҙар менән русса ғына аралашты.

Бына йәй к...н... ул ...ләсәләренә килде. Ләкин ул ...ләсәһенә бер нәмә лә һөйләй алмай. Ләйсән-башҡортса, ...ләсәһе русса белмәй. Ана күрше ...ыҙы, өс йәшлек Г...зәл, уның ...ләсәһе менән рәхәтләнеп һөйләшә.

Т...ле булып та «телһеҙ» ҡалған Ләйсән....

*(А. Хәлилов)*

1. Тексҡа исем бир. ____________________
2. Төп фекерен билдәлә. ____________________
3. План төҙө. ____________________
4. Текстың аҙағын уйлап яҙ____________________
5. Төшөп ҡалған хәрефтәрҙе ҡуй.
6. Өндәү һөйләмде яҙып ал. ____________________
7. Ҡыҙҙарҙың исемдәрен русса яҙ. ____________________

## II. Фонетика һәм графика

**Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре.**

**1. Бирелгән һүҙҙәрҙе дөрөҫ уҡығыҙ, тәржемә итегеҙ, уларҙы ҡулланып бер нисә һөйләм яҙығыҙ.**

Ҡор, өкө, кәлмәргән, шыршы, бүҙәнә, сәпсек, энәлек, турғай, ҡаҙ, ҡарама, шоңҡар, усаҡ, һуйыр, тауыҡ, йүкә.

**2. Кәрәкле хәрефтәрҙе ҡуй.**

...аҡлау, ...әкил, ...атан, ...әлимә, ...азифа, ...әлит, Сала...ат, та..., ha... лыҡ, та...ыш, ...афа, ...әзир, да...а, тә...ге, сә...кә, а...ыл.

**3. Ҡалын һуҙынҡылы һүҙҙәрҙе беренсе бағанаға, нәҙек һуҙынҡылы һүҙҙәрҙе икенсе бағанаға айырып яҙ. *Кесерткән, билсән, йыуа, балан һүҙҙәре менән һүҙбәйләнештәр яҙ. Шайтантау, бөрлөгән, еләк, Урғаҙа һүҙҙәре менән һөйләмдәр яҙ.***

Һаҡмар, бөрлөгән, Таналыҡ, еләк, ҡарағат, Ғәлиәхмәт, Иҫәнгилде, муйыл, сейә, ҡаҡы, Суҡраҡ, кесерткән, билсән, йыуа, ба-

лан, Быҙаулыҡ, Ҡашҡар, әрем, балтырған, көртмәле, Шайтантау, ҡымыҙлыҡ, Урал, Урғаҙа, миләш.

**4. Һүҙҙәрҙе алфавит буйынса теҙеп яҙ. Ҡалын хәреф менән бирелгән һүҙҙәрҙе индереп, һөйләмдәр төҙө. Мәғәнәләрен «Аңлатмалы һүҙлектән»кара**

Ойоҡ, олтораҡ, ***ойом,*** өлөш, ҡулъяулыҡ, ҡошсоҡ, йәйғор, йырсы, ирек, иләк, журнал, бейеү, бешкәк, газета, гөл, арпа, асҡыс, айыу, ***дөгө,*** дан, дегет, усаҡ, урман, тир, теремек, туҙан, семәр, рәхмәт, парад, почта, мал, мачта, муйыл, көршәк, картуф, күбек, жираф, зинһар, зирәк, ***нагыш,*** нәҙер, ***һуҡмаҡ,*** һан, һоҫҡо, фабрика, фанера, шатлыҡ, ***шишмә,*** юл, юйғыс, япраҡ, ярыш, вазифа, ваза, валсыҡ.

**5. Һүрәттәрҙә төшөрөлгән предметтарҙың исемдәрен әйт. Бөтәһендә лә ниндәй өн бар? Исемдәрҙең тәүге хәрефтәренән ниндәй һүҙ яһалды?**



**6. Тексты уҡы. Хаталарын төҙәтеп күсер. Нисә хата ебәрелгәнен йәйә эсенә яҙып ҡуй.**

**Тәбиғәт ҡомартҡылары.**

Башкортостаныбыз тәбигәт комарткыларына, йәгни тәбигәтте фән буларак өйрәнеү мөмкинлеге булган әхәмиәтле урындарга бик бай.



Әбйәлил районында республикабызга гына түгел. Ә бөтә Рәсәйгә билдәле булган зур күл бар. Ул-Мулдаҡ, йәғни Тозлокүл. Унын шифалы баткагы бар. Хыуы нык тозло булганга күрә күлдә балык юк, кош-корт та уга якын килмәй. Тирә-ягында иллегә якын үсемлек төрө исәпләнә. («Мәктәп календарынан».)

**7. Бирелгән һүҙҙәрҙең ҡайһылары башҡорт теленә рус теленән килеп ингән, ҡайһылары башҡорт теленең һүҙҙәре. Уларҙы айырып яҙ. Ниндәй үҙгәрештәр кисергәндәр? Аңлатып ҡара.**

Карауат, тараҡ, бойҙай, арыш, өй, кишер, бүрәнә, таба, кәбеҫтә, ҡаҙан, торба, туҡмас, ҡалаҡ, көрпә, картуф, өҫтәл, эшләпә, сөгөлдөр, мейес, бумала, эҫкерт, сөгөн, таяҡ, урындыҡ, ситса, бирсәткә.

**8. Һүҙҙәрҙең, һүҙбәйләнештәрҙең транскрипцияһын төҙө.**

Бабай, таба, еләге эре икән, ҡуян, Ямантау, юрған, Йүрүҙән, ҡара ҡарға, аяҙ көн, күп әйтә, Тау батыр, оло инәй, тейен, тәмле ҡалас.

***Өлгө: тәмле ҡалас [тәмлэғалас]***

**14. Ҡобайырҙы иптәшең менән ролләп уҡы. Төшөп ҡалған хәрефтәрҙе ҡуй. Һандарҙың аҫтына һыҙып сыҡ. Аңлашылмаған һүҙҙәрҙе яҙ, һүҙлек ярҙамында тәржемә ит. Ҡалын хәреф менән бирелгән һүҙҙәргә өлгөләгесә фонетик анализ яһа. Үҙең дә ҡобайыр уйлап ҡара.**

***Бер тигәс тә ни яман?***
***(ҡобайыр)***
Һай-й-й!
Бер тигәндә ни ***яман***?
Рухы ...үнгән ил яман.
Ике тигәндә ни яман?

***Теле*** үлгән ил яман.
Өс тигәндә ни яман?
Сәсәне юҡ ил яман.

Д...рт тигәндә ни яман?
Дәртһеҙ к...ше – шул яман.
Биш тигәндә ни яман?
***Батыры*** юҡ ил яман.
Алты тиг... ндә ни яман?
Аҙға к...нгән күп яман.
Һай-й-й!

*(Р. Солтангәрәева)*

***Фонетик тикшереү тәртибе.***

1. **Һүҙҙе яҙыу, әйтелешен күрһәтеү.**
2. **Һүҙҙә нисә хәреф, нисә өн һәм нисә ижек барлығын әйтеү (яҙыу)**
3. **Хәрефте, эргәһендә ул биргән өндө яҙыу. Был өндәргә ҡылыҡһырлама биреү. (Ҡушымтаны ҡара)**

**Өлгө:** ҡояш [ҡойаш ] – 4 хәреф, 5 өн, ике ижек.
ҡ[ҡ] – тартынҡы, һаңғырау
о[о] – һуҙынҡы, ҡалын, иренләшкән
я[й] – тартынҡы, талғын
 [а] – һуҙынҡы, ҡалын
ш[ш] – тартынҡы, һаңғырау

## III. Лексика

**1. К. Бакировтың шиғырын иғтибар менән уҡып сыҡ.**

**Туған телгә сәйәхәт.**

Фәйрүзәкәй-ҡала ҡыҙы,
Тыуып үҫкән ауылда.
Онотмай һаман ҡайта ул
Йәйге каникулында...



Унда йәшәй өләсәһе-
Һағына, һөйә белгән.
Шул һөнәрмән ярҙамында
Бала эшкә өйрәнгән!
Юлға сыҡһа, эй шатлана,
Кинәнә еңел һулап,
Ситлектән алып һауаға
Осоролған ҡош һымаҡ.
Бесәйе лә, **маһмайы** ла-
Күп уның таныштары.
Тәҙрә башына оялап,
Көтә **карлуғастары**.
Һандуғастар һайрағанда,
Моңло була кистәре,
Әйтерһең, **сәхнәлә** йырлай
Опера артистары.
Хуш еҫтәрен таратырға
Гөлдәре сәскә ата,
Еҫле гөлдәй туған теле
Ҡалмай эйәреп ҡайта
Бында һалҡын шишмәләр бар
Һыуһыныңды ҡандырған.
Йылғаһы бар эҫе көндә
Сумып бер йөҙә торған.
Фәйрүзәгә ҡояш юлдаш,
**Әкиәт** юлдаш төндә,
Аҡыл, зиһенен байыта
**Өләсәй** мәктәбендә.

*(К. Бакиров.)*

1. Төп фекерен сағылдырған юлдарҙы һыҙып билдәлә.
2. Шиғырҙы хикәйә итеп яҙ
3. Ҡалын хәреф менән бирелгән һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен аңлат.
4. Шиғырҙан сағыштырыуҙарға миҫалдар яҙ.

5. 1-се һәм 2-се һөйләмдәрҙең эйә менән хәбәрен тап, һыҙ.

6. *Еңел* һүҙенә фонетик тикшереү яһа.

**2. Бер үк һүҙҙәрҙең ниндәй мәғәнәләрҙә ҡулланылғанын әйт. Ҡалын хәрефле һүҙбәйләнештәрҙе индереп, һөйләмдәр яҙ.**

Кеше башы, юл башы, тау башы, йыл башы, әкиәттең башы;сәғәт теле, бесәйҙең теле, гармун теле, башҡорт теле;баланың теше, бысҡы теше, тырма теше;тау бите, ҡыҙҙың бите, китап бите;кешенең тамағы, йылға тамағы.

**3. «Башҡорт теленең синонимдар һүҙлеген»кулланып, был һүҙҙәрҙең синонимик рәттәрен төҙөгөҙ.**

Дан ____________________

Өлгө ____________________

Саф ____________________

Сәңгелдәк ____________________

Асыулана ____________________

Йүгереү ____________________

**4. Мәкәлдәрҙе иғтибар менән уҡы. Антонимдарҙы тап, аҫтына һыҙ.**

Уңған кеше эш ырата, ялҡау кеше төш юрата. Батыр бер үлә, ҡурҡаҡ ҡырҡ үлә. Аҡыллы ҡуйҙым тиер, аҡылһыҙ еңдем тиер. Яманлыкты күрмәгән, яҡшылыҡты аңламаҫ. Дуҫ һөйөнһөн, дошман көйөнһөн. Бөгөнгө эшеңде иртәгәгә ҡалдырма. Башлаған эш-бөткән эш. Йәй эшләһәң, ҡыш ашарһың. ҡыҙ бала – үҙе баҙыҡ, ир бала-алтын ҡаҙыҡ. Аулаҡта-батыр, яуҙа-бахыр. Асыу-ағыу, йотһаң-дарыу. Фәрештә булһа-ҡанатлы, шайтан булһа-ҡойроҡло.

**5. Шиғырҙарҙан омонимдарҙы табып, уларҙың мәғәнәләрен, ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарауын асыҡлағыҙ.**

1. Аҡ аҫтында болоттар-
Көҙгө Ыҡ көҙгө һымаҡ.

2. Өҫтәлдәрҙә ике алма,
Береһен ал, береһен алма. *(Ф. Сәйфуллина)*



3. Ептең төҫөн һайламайса сигеү сикмә,
Моратыңа ирешмәйсә артҡа сикмә. *(Н. Иҙелбай)*

4. Ҡурҡаҡ хатта тубыҡтан һай һыуға батыр,
Утты-һыуҙы кисеп сығыр һәр саҡ батыр. *(Н. Иҙелбай)*

5. Ә буяуҙар төрлө-төрлө
Төҫлө төймәләр төҫлө. *(М. Кәримов)*

6. Иланы шул тиҫкәре
Уйын ҡыҙған саҡ ҡына.
Ауыҙына бүренең
Инмәй ҡалды саҡ ҡына. *(Ф. Рәхимғолова)*

**6. Һөйләмдәрҙе иғтибар менән уҡы. Аҫтына һыҙылған һүҙбәйләнештәрҙең мәғәнәләрен аңлат. Был һүҙбәйләнештәр нимә тип атала?**

1. Хәсән аҡһаҡал был шәжәрәне <u>күҙ ҡараһындай</u> һаҡлаған. (Ә. Вахитов.)

2. Скрипкалары шундай матур, <u>күҙҙең яуын алып тора,</u> ти. («Әминбәк»)

3. Иптәштәре, уның уянғанын көтөп, <u>керпек ҡаҡмай,</u> янында һаҡлап ултырғандар. («Ҡамыр батыр»)

4. Сәлмән тотонған бер эшен <u>ҡарап туйғыһыҙ итеп эшләр</u> булған. (Әкиәттән.)

5. Береһе эшләгәндә, икенсеһе ҡул ҡаушырып, ауыҙ асып ҡарап тороусан булғандар. (Әкиәттән.)

6. <u>Ут-һыуҙар кисеп</u> ҡайтҡан һалдат тап бына шулай булырға тейеш тә! (Н. Мусин)

7. Минең <u>танау төшкәнен</u> әсәйем дә абайланы, күрәһең. (Н. Мусин.)

**7. Фразеологик берәмектәрҙе ҡулланып, берәй хикәйә яҙып ҡара.**

Бушты бушҡа ауҙарып, ел артынан ҡыуып, баш ҡатыу, туҙға яҙмағанды һөйләү, һә тигәнсе эшләү, күҙ асып йомғансы, бер аяғы бында, икенсеһе тегендә, теле телгә йоҡмай, күҙе дүрт булыу, ер тишегенә инеп китерҙәй.

**8. Фразеологик берәмектәрҙе ҡулланып, һөйләмдәр яҙ. Уларҙың рус телендәге варианттарын тап. Бының өсөн «Русса-башҡортса фразеологизмдар һүҙлеген»ҡулланырға мөмкин.**

Аяҡ салыу, бушты бушҡа ауҙарыу, ҡолаҡҡа киртеп ҡуйыу, унан елдәр иҫкән, ең һыҙғанып эшләү.

**9. Был мәкәлдәрҙе тәржемә ит.**

Что посеешь, то и пожнешь. ______________________________

Цыплят по осени считают. ______________________________

Друзья познаются в беде. ______________________________

В здоровом теле-здоровый дух. ___________________________

## IV. Һүҙьяһалыш һәм орфография

**1. Тексты тасуири уҡып сыҡ. Бирелгән эштәрҙе үтә.**

### Елле ел

Борон-борон заманда булған, ти, бер Ел. Ул ҡайҙа барып һуғылырға белмәйенсә йөрөгән, ти, унда-бында сабып. Кешеләрҙең әле береһенә, әле икенсеһенә ҡағылып, уларҙы тамам аптыратып бөтөргән, ти, был.

Шунан уны бер аҡыллы ҡарт тотоп алды ла:»Был Ел, елгә елеп, әрәм булып йөрөмәһен әле», – тип бер орлоҡҡа әүелдерҙе лә ташланы, ти, тегене. «Исмаһам, – тип уйланы ти, аҡыллы ҡарт, – һинән берәй файҙалы нәмә үҫеп сыҡһын».

Берҙән-бер көндө был Ер-орлоҡ шытып сыға башланы, ти. Күп тә тормай, ул тармаҡ-тармаҡ булып бер ағас шикелле үҫеп китте, ти. Һәр тармағы һайын бер һүҙ икән.

Кешеләр, ғәжәпләнеп, һәр һүҙҙе тотоп ҡарайҙар икән, ә бөтә һүҙҙәр ҙә бер үк тамырҙан үҫеп сыҡҡандар, ти.

Шунан алып кешеләр **мәғәнәләре яғынан бер-береһенә яҡын һүҙҙәрҙең бөтәһе өсөн дә уртаҡ өлөшөн тамыр, ә бындай һүҙҙәрҙе тамырҙаш һүҙҙәр** тип атағандар, ти.



Шулай итеп, ҡоронан-ҡороға елеп йөрөгән елғыуар Ел кешеләргә елле генә бер файҙа килтергән, ти.




1. Ел тамырынан яһалған һүҙҙәрҙе түңәрәктәргә тултырып яҙ.
2. Был һүҙҙәрҙең бер нисәүһе менән һөйләмдәр төҙө.
3. Был һүҙҙәрҙең ҡайһылары исемгә, сифатҡа, ҡылымға ҡарай? Уларҙы төркөмләп яҙ.
4. ***Елкән*** һүҙенә фонетик тикшереү эшлә.
5. ***Елпеүес*** һүҙенең мәғәнәһен аңлат. Руссаға тәржемә ит.
6. Көслө ел булғанда ниндәй хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәргә кәрәк? Балалар өсөн ҡағиҙәләр төҙөп яҙ.

**2. Бирелгән һүҙҙәрҙең ҡайһыһы артыҡ? Был артыҡ һүҙҙе һыҙып ташла.**

**Уны нимәгә ҡарап билдәләнең?**

1. Балыҡ, балыҡсы, балаҡ, балыҡлы.
2. Белем, белешеү, беләү, белемһеҙ.
3. Баллы, балта, балсы, балланыу.
4. Ашамлыҡ, ашығыу, ашау, ашһыҙ.
5. Бысратыу, бысҡы, бысыу, бысыусы.
6. Алтынсы, алтын, алтылыҡ, алты.

**3. Был һүҙҙәрҙе төҙөлөшө буйынса анализла. Улар менән һөйләмдәр уйлап яҙ.**

Тимерселәрҙе, белемленең, тараҡ, ҡырҡҡыс, йылҡысылыҡты, бүлмәлә, һөйөнөс

**4. Ҡушма һүҙҙәр яһап яҙ. Дөрөҫ яҙылыштарын аңлатығыҙ.**

1. Ҡушыу юлы менән: Аҡ + түш, бал + ҡалаҡ, аҡ + тамыр, төн + яҡ, Ай + һылыу, ҡул = яҙма, Биш + бүләк, таба + ағас, бил + бау.
2. Парлау юлы менән: бала (саға), сәй (шәкәр), тирә (яҡ), тора (бара), тай (тулаҡ), ата (баба), ҡатын (ҡыҙ), йорт (ҡура).
3. Ҡабатлау юлы менән: буй (буй), өҙөк (өҙөк), юл (юл), йырлай (йырлай), яҙа (яҙа).
4. Ҡыҫҡартыу юлы менән:Башҡорт дәүләт университеты, Башҡортостан Республикаһы, Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһе.
5. Бәйләү юлы менән: (ҡарабаш) (турғай), (ер) (еләге), (ҡара) (ҡарға), (таш) (күмер), (тимер) (юл).

**5. Ребустарҙы сис. Килеп сыҡҡан һүҙҙәрҙе һәм мәҡәлде яҙып ҡуй.**

6) ***Б***  ***ЛЕ***  ***Ç 1***  ***о = е***  ***ҺЕҘ***

***.123 45***  ***ҙ=Р***  ***к = Ç***



**6. Рус теленән ингән һүҙҙәргә ялғауҙар ҡуш. «Башҡортса-русса орфографик һүҙлек» ярҙамында тикшер. Хаталанһаң, ҡағиҙәне ҡабатла, нығыт.**

1. Эйәлек килеш ялғауы ҡуш.

Нефть –
апрель
июнь –
пристань –
июль –
вермишель –
картечь –
гуашь –
лагерь –
сентябрь –
декабрь –
секретарь –

***Ҡушымта***

**1. Белешмә материал.**

***Диалог*** – ике йәки бер нисә кешенең һөйләшеүе.

***Монолог*** – бер кешенең телмәре.

***Йәнләндереү*** – тәбиғәт күренештәрен йәки йәнһеҙ әйберҙәрҙе кешегә хас сифаттарҙа йәнле итеп тасуирлау.

***Сағыштырыу*** – бер күренеш йәки әйберҙе уның менән ниндәйҙер уртаҡ сифаттары булған икенсе нәмәгә сағыштырып ҡарап күргәҙмәлелек йәки тәьҫир көсөн арттырыу. Мәҫәлән, йөҙө айҙай яҡты, сәскә төҫлө.

***Стилдәр:***

***1. Йәнле һөйләү стиле.***

***2. Китап стиле:***

*– Матур әҙәбиәт стиле.*
*– Фәнни стиль.*
*– Публицистик стиль.*
*– Рәсми стиль.*

***Хаттар стиле.***

***Телмәр тибы** өс төргә бүленә: хикәйәләү, тасуирлау, хөкөмләү (фекер йөрөтөү)*

Хикәйәләү-теге йәки был ваҡиға тураһында хәбәр итеү, һөйләү, яҙыу.

Тасуирлау-берәй предметты, урынды, тәбиғәт күренештәрен, кешене, хайуандарҙы тасуирлап яҙыу, һөйләү.

***Хөкөмләү (фекер йөрөтөү)** – бирелгән берәй тема буйынса фекер йөрөтөп, ул фекерҙе дәлилләп, иҫбатлап, һығымта яһап яҙыу, һөйләү.*

*Тезис (төп фекер), иҫбатлау, һығымта.*

***Тексттың төп фекере (идея)** – был текст менән нимә әйтергә, нимәгә өндәргә теләгән фекер. Төп фекер текст исемендә, берәй һөйләмдә бирелергә лә мөмкин. Әммә күп осраҡта уны «эҙләп»табырға кәрәк була.*

***Тексттың темаһы*** текста кем йәки нимә тураһында һөйләнеләүен белдерә.

***Текст*** – мәғәнәүи һәм грамматик яҡтан бер бөтөн булып бәйләнгән, дөйөм бер уртаҡ теманы асыуға ҡоролған һөйләмдәр йыйылмаһы. Грамматик яҡтан һөйләмдәр билдәле тәртиптә бирелә.

**2. Өндәр.**

**Һуҙынҡылар:**

| | ҡалын | нәҙек |
|---|---|---|
| иренләшмәгән | а, ы | ә, и, э (е) |
| иренләшкән | О, у | Ө, ү |

**Тартынҡылар:**

| | | |
|---|---|---|
| яңғырау | Б, д, г, ғ, ҙ, з, ж, в | |
| һаңғырау | П, т, к, ҡ, ҫ, с, ш, ф | Ч, ц, щ, х, һ |
| Талғын (сонор) | Й, р, л, н, ң, м, в (уы) | |



**3. Стилдәр тураһында.**

| № | Стилдәр | Маҡсаты | Үҙенсәлектәре | Ҡулланылышы |
|---|---|---|---|---|
| 1 | Йәнле һөйләү стиле. | Аралашыу, фекер алышыу | – алдан әҙерләнмәй<br>– диалог<br>– ябай телмәр саралары ҡулланыла,<br>ҡабатлауҙар,<br>өндәшеүҙәр,<br>кәм һөйләмдәр күп була | Һөйләшкәндә, аралашҡанда |
| 2 | Матур әҙәбиәт стиле. | Кешенең тойғоларына, уйҙарына образдар аша йоғонто яһау | – яҙыусы алдан уйлай, ижад итә;<br>– һүрәтләй, тасуирлай;<br>– һүрәтләү саралары ҡуллана һ. б. | Хикәйә, повесть, роман, драма, поэмалар, шиғырҙар һ. б. яҙыла. |
| 3 | Фәнни стиль. | Предмет күренештәр тураһында хәбәр итеү, фәнни нигеҙҙә иҫбатлау. | – алдан уйланыла;<br>– монолог<br>– терминдар;<br>– ҡушма һөйләмдәр;<br>– сәбәп – һөҙөмтә теркәүестәре;<br>– исемдәр, ҡылымдар күп; | Дәреслектәр, һүҙлектәр, энциклопедиялар, ғилми мәҡәләләр яҙыла. |
| 4 | Публицистик стиль. | – хәбәр итә, өгөт– нәсихәт алып бара | – алдан уйланыла,;<br>– дөйөм ҡулланылышлы һүҙҙәр,<br>– хис– тойғоло һөйләмдәр,<br>– риторик өндәүҙәр,<br>һорауҙар һ. б. | Гәзит– журнал мәҡәләләре, очерктар, фельетондар яҙыла. |
| 5 | Рәсми стиль. | Белешмә (информация) биреү. | – – эске монолог<br>– нығынған һүҙҙәр,<br>һүҙбәйләнештәр,<br>– ҡәтғи телмәр;<br>– тәртибе бар. | Закон, устав, протокол, ғариза, акт, расписка, аңлатма яҙыу, ҡағиҙәләр, договор һ. б. |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 6 | Хаттар стиле. | Хәбәр итеү, аралашыу | – традицион нығынған формаһы бар:үҙенсәлеклебашы, төп өлөшө, аҙағы була | Хат, көндәлектәр, иҫтәлектәр |

**4. Һүҙьяһалыш. Һүҙ составы.**

| ЯЛҒАУҘАР | |
|---|---|
| **ҮҘГӘРТЕҮСЕ ЯЛҒАУҘАР** | **ЯҺАУСЫ ЯЛҒАУҘАР** |
| КҮПЛЕК ЯЛҒАУҘАРЫ: – тар, – тәр, – ҙар, – ҙәр, – лар, – ләр, дар, – дәр;<br>КИЛЕШ ЯЛҒАУҘАРЫ: – дың, – дең, – ға, – гә, – ҙа, – ҙә, – тан, – тән, – дан –, дән, .....;<br>ЭЙӘЛЕК ЯЛҒАУҘАРЫ: – й, – й–һың, – й–ым;<br>ХӘБӘРЛЕК ЯЛҒАУҘАРЫ: – мын, – һың, – быҙ, – һығыҙ һ. б.<br>Ҡылымдың<br>Зат, һан: – нем, – ығыҙ<br>Заман: – ған, – гән, – ҡан, – кән.<br>Һөйкәлеш: – һа, – маҡсы, – мәксе.<br>Юҡлыҡ ф-һы: – ма, – мә һ. б. | ИСЕМ: – сы, – сө, – се, – со; – лыҡ, – лек, – лөк, – лоҡ; – сан, – сән;-ғос, – гөс, – ғыс, – гес; – ҡос, – көс, – ҡыс, – кес;<br>– ос, – өс, – кес, – саҡ, – ҡыр, – сәк<br>– ҡай, – кәй, – саҡ;<br>– һыу, – һыл, – ыраҡ, – ерәк,<br>СИФАТ: – ло, – лө, – лы, – ле; – ке, – ҡы;<br>Рәүеш: – ын, – өн, – һен, |



| **һүҙәр** | **Һүҙәрҙе яһау юлдары** | **миҫалдар** |
|---|---|---|
| **ТАМЫР** | Тамырҙан ғына тора | Эш, ауыл, бал, ағай, күл |
| **ЯҺАЛМА** | Тамырға яһаусы ялғау ҡушыла | Ауыл-даш, ҡыш-ын, быс-ҡы |
| **ҠУШМА** | 1. һүҙәрҙе ҡушыу юлы менән | 1. аҡҡош, арьяҡ, бирьяҡ, Аҡморон |
| | 2. һүҙәрҙе парлау юлы менән | 2. ҡатын-ҡыҙ, ир-егет, дуҫ-иш |
| | 3. һүҙәрҙе ҡабатлау юлы менән | 3. саҡ-саҡ, көлә-көлә |
| | 4. һүҙәрҙе бәйләү юлы менән | 4. Хәйбулла районы, Башҡорт дәүләт университеты |
| | 5. Һүҙәрҙе ҡыҫҡартыу юлы менән | 5. БДУ, БР, колхоз |

**Тестар**

**«Фонетика»темаһы буйынса тест һорауҙары**

1. Фонетика нимәне өйрәнә?

а) хәрефтәрҙе
б) телмәр өндәрен
в) һүҙәрҙе
г) һөйләмде

2. Яңғырау тартынҡылар ғына булған төркөмдө билдәлә:

а) м, в, к, д, й, з
б) д, б, в, з, с.
в) ч, һ, н, к, г,
г) б, д, з, в, г, ғ,

3. Тау һүҙендәге аҫтына һыҙылған хәреф ниндәй өндө белдерә ?

а) тартынҡы
б) һуҙынҡы

4. «Аҡъял» һүҙендә нисә хәреф, нисә өн?

а) 5 хәреф, 4 өн
б) 5 өн, 5хәреф
в) 5 хәреф, 6 өн

5. Ҡайһы рәттәге хәрефтәр ике өндө белдерә?

а) а, я, е, и, ү
б) ё, е, ю, я
в) у, о, а, ә, ө
г) я, ю, и, ы

**«Лексика»темаһы буйынса тест һорауҙары**

1. Телдең һүҙ байлығын нимә өйрәнә?
а) фонетика
б) лексика
в) морфология

2. Ниндәй һүҙҙәргә синонимдар тип әйтәбеҙ?
а) мәғәнәләре ҡапма-ҡаршы һүҙҙәр
б) мәғәнәләре төрлө, яҙылыштары йәки әйтелештәре бер үк һүҙҙәр
в) мәғәнәләре яҡын йәки оҡшаш һүҙҙәр

3. «Төҙ» һүҙенең антонимын тап:
а) тура
б) кире
в) ҡыйыш

4. « Бала»һүҙенең синонимын тап:
а) һеңле
б) бәләкәй
в) сабый
5. «Көҙгө-көҙгө» был һүҙҙәр нимә тип атала?
а) антоним б) омоним в) синоним



***Шәрәфетдинова Дамира Миннислам ҡыҙы,***
*Нуриман районы муниципаль районы*
*Иҫке Күл ауылының башҡорт теле һәм*
*әҙәбиәте уҡытыусыһы*

# Башҡорт телен эре блоклап (терәк конспекттар) уҡытыу алымдары

«Аң-белем үҫешен һәм белемде бер кемгә лә биреп ҡуйып булмай. Өйрәнергә теләгәндәр быға үҙенең эшмәкәрлеге, үҙенең көсө менән ирешергә тейеш», – тигән А. Дистервег.

Эйе, һуңғы йылдарҙа уҡысыларҙың белемде үҙаллы алырға тырышыуҙары, төрлө мәғлүмәт тупларға ынтылыуҙары дәрестәрҙе үҙенсәлекле итеп, ижадҡа, эҙләнеүгә урын ҡалырлыҡ итеп үткәреүҙе талап итә.

Хәҙерге мәктәптәрҙә балаларҙың белем алыу активлығын үҫтереүгә арналған төрлө уҡытыу технологиялары, системалары барлыҡҡа килде. Ғалимдарҙың билдәләүенсә, Рәсәй Федерацияһы мәктәптәрендә 50-нән ашыу система, технология теге йәки был кимәлдә ҡулланыла.

**Тел уҡытыусыһы алдында түбәндәге проблемаларҙы хәл итеү тора:**

1. Аҙ ваҡыт эсендә грамматик темаларҙы, өлөштәргә бүлгеләмәйенсә, бер бөтөн итеп аңлатыу.
2. Уҡыусыларҙың уҡыу һәм танып белеү эшмәкәрлеге менән етәкселек итеү.
3. Үҙаллы белем алыуға, ижадҡа ынтылыш, иң мөһиме, башҡорт рухлы шәхес тәрбиәләү.

Бына ошо үтә мөһим мәсьәләләрҙе хәл иткәндә дәрестәрҙе эре блок менән биреү һөҙөмтәле.

Педагог-ғалим П. М. Эрдниев тәкдим иткән эреләтелгән блок системаһы ижади эҙләнеүҙәргә, үҙ аллы фекер йөрөтөргә киң мөмкинлектәр аса.

Блок – дәрестәрҙә В. Э. Штейнбергтың һыҙмаларын ҡулланыу ҙа теманы аңлатыуҙы, үҙләштереүҙе күпкә еңелләштерә, тема, уның айырым өлөштәре ус төбөндә кеүек күренә, бер бөтөн булып күҙ алдына баҫа.

Уҡытыусы-методист Ю. С. Меженконың терәк схемаларын ҡулланыу ҙа отошло. Бында терәк конспекттың бер нисә схеманан тороуы мөмкин. Һәр билдә, ҡыҫҡартып яҙыуҙар аңлатыла. Схема артыҡ һүҙҙәр ҡулланмайынса уҡыла.

В. Ф. Шаталов системаһына нигеҙләнгән эре блок системаһы башҡорт телен уҡытыуҙа бик ҡулайлы. Был методик алымдар материалды өлөштәргә бүлмәйенсә, уны тотош блоктарға берләштереп өйрәтеүҙе талап итә. Терәк конспекттар грамматик материалды эре блоктарға берләштереү өлгөләрен бирә.

Дәресте блок системаһы менән үткәреү теманы тарҡатмай, бөтә мәғлүмәтте бер епкә теҙеүҙе талап итә, фекер ағышын бер йүнәлештә тота. Күп тапкыр бер үк нәмәне ҡабатлау мәжбүрилеге бөтә, үтелгән теманы иҫкә төшөрөү өсөн ваҡыт аҙ талап ителә, сөнки фекер ағышы дәрес буйы өҙөлмәй, үтелгән темалар ҙа үҙенән-үҙе ҡабатлана бара. Шунлыҡтан айырым параграф ҡына үтелмәй, ә бөтә тема үтелә. Уҡытыусы бында лекция, терәк конспекттар, үҙаллы эш, практик күнегеүҙәр башҡара, һуңынан контроль эштәр үткәрә.

Блок-дәрестәрҙә фекерләүгә, һөйләү һәм яҙыу телмәрен үҫтереүгә иғтибар күп бүленә, сөнки балаларға үҙ фекерҙәрен әйтеү, уның дөрөҫлөгөн яҡлау мөмкинлеге тыуа, ә был үҙ сиратында телмәр теүәллеген, байлығын талап итә.

**Яңылығы:**

1. материалды өлөштәргә бүлмәйенсә, уны тотош блоктарға берләштереп өйрәнә;
2. терәк конспекттар менән грамматик материалды эре блоктарға берләштереү өлгөләрен бирә;



3. дәрестәрҙең һөҙөмтәлеген арттыра;
4. балаларҙың үҙаллы һәм ижади эшләүенә алып килә;
5. теория менән практиканың берҙәмлеген тәьмин итә;
6. уҡыусы менән уҡытыусының хеҙмәттәшлегенә нигеҙләнә.

**Теоретик йүнәлеше:**

1. теманы өйрәнеүгә теләк уятыу.
2. танып белеү эшмәкәрлеген үҫтереү.
3. үҙ аллы мәғлүмәт табырға өйрәтеү.
4. эшкә индивидуаль һәм коллектив яуаплылыҡ уятыу.
5. башлаған эште аҙағына тиклем еткерә, эш һөҙөмтәһен документаль күрһәтә белеү.
6. проблемалы өлкәне эҙләп табыу.
7. тема буйынса кәрәкле әҙәбиәт уҡыу, күргәҙмә эштәрҙе ҡарау, төрлө сығанаҡтар менән танышыу.
8. эште башҡарыу этаптарын асыҡлау.

**Практик йүнәлеше, әһәмиәте:**

1. грамматик теманың бөтә үҙенсәлектәрен бер ергә туплай һәм бер юлы күрергә мөмкинлек бирә.
2. блокты яңы теманы аңлатҡанда, ныҒытҡанда, ҡабатлағанда ла ҡулланырға мөмкин.
3. материалды эре блоктар менән өйрәнеүгә юл аса.
4. ваҡытты экономияларға ярҙам итә.
5. практик эштәргә күберәк ваҡыт ҡала.
6. үҙ аллы белем алыуҙа таяныс ролен үтәй.

**Конкурс эшенең төрө:** II номинация «Мәктәптә туған телдән белем биреүҙә иң яҡшы методика һәм практика ҡулланыу» («Лучшая методика и практика обучения родному языку в школе»).

Был конкурс материалы мәктәптә 5-11 класта уҡытҡан туған тел (башҡорт теле) уҡытыусыларына тәғәйенләнә.

Әгәр ҙә традицион уҡыу процесының минималь берәмеге булып дәрес һаналһа, блок технологияһын ҡулланғанда был берәмекте дәрестәр циклы тәшкил итә.

Быңдай циклдың ойоштороолошо менән танышып китәйек.

Күп осраҡта циклға кәмендә 5-6 дәрес ойоша.

Тел дәрестәрендә балаларҙың материалды аңлы үҙләштереүенә булышлыҡ итеү, ижади һәләтен үҫтереү өсөн улар менән бергәләп терәк конспекттар төҙөйбөҙ.

Тәүге дәрес яңы материалды өйрәнеүгә бағышлана. Ҡағиҙә булараҡ, был дәрестә уҡыусылар дәрес конспектын ҡабул итәләр: теманы һөйләп аңлатыу ваҡытында уҡ таҡтаға терәк конспектты яҙа барыу, ә уҡыусылар шунда уҡ дәфтәренәнә күсерә барһалар отошло. Баланың конспекты уҡытыусыныҡына оҡшарға тейеш тигән талап ҡуйылмай: уҡыусы конспектты үҙенсә төҙөй һәм байыта ала.

Ошо дәрестә үк тәүге ныҡытыу үткәрелә: конспектҡа таянып, яңы теманы ҡабатлап сығабыҙ, уҡыусылар үҙҙәренән темаға бәйле миҫалдар килтерә. Өйгә терәк конспект менән дәреслектә бирелгән теоретик материалды сағыштырырға бирергә, конспектты миҫалдар менән тулыландырырға, дауам итергә бирергә мөмкин.

**Практик өлөш**

**Эре блок менән уҡытыуҙың маҡсаты һәм бурыстары:**

1. уҡыусының интеллектуаль үҫешен тәьмин итеү;
2. уның фекерләү, уйлау һәләтен үҫтереү;
3. үҙ эшенә баһа бирергә өйрәтеү;
4. үҙ аллы фекерләү һәләтенә, аҡыл үҫешенә ирешеү.

**Блок менән уҡытыуҙа көтөлгән һөҙөмтәләр:**

1. уҡыусыларҙың белемгә, ижади активлыҡҡа булған ытылыштары үҫә;
2. тел өйрәнеүгә ҡарата мөнәсәбәттәре ыңғай яҡҡа үҙгәрә;
3. блок методын эҙлекле һәм системалы ҡулланыу уҡыусыларҙың белемдәрен камиллаштырыуҙы тәьмин итә;
4. мәғлүмәтте аңлы рәүештә ҡабул итәләр;
5. белем алыу өҫтөндә үҙ аллы эшләй беләләр.

Быны һөҙөмтәһе булып яҡшы билдәләргә эшләнгән контроль эштәр, тестар, уңышлы тапшырылған имтихандар, олимпиадала



алған урындарыбыҙ һәм әлеге ваҡытта белем алыусы студенттарыбыҙ тора.

Терәк конспекттар төҙөүҙе V кластан башлайбыҙ һәм XI класҡа тиклем дауам итәбеҙ.

Был алым менән уҡыта башларҙан алда балаларҙы өйрәнеү мотлаҡ. Ауыл мәктәптәрендә әҙерлек кимәле төрлө булған балалар уҡый. Шунлыҡтан тәүҙә уҡыусыларҙың яңы теманы ҡабул итә алыу һәләттәрен өйрәнергә һәм класс бик йомшаҡ, көсһөҙ булмаһа, терәк конспекттар ҡулланып уҡытыуҙы башлап ебәрәрергә мөмкин. Терәк конспекттар ҡулланыу уҡыусыларҙа күҙәтеүсәнлек, логик фекерләү үҫтереүгә, темаларҙы блоклап биреүгә булышлыҡ итә. Ә был үҙ нәүбәтендә ижади эшләргә, бәйләнешле телмәр үҫтереүгә ҙур мөмкинлектәр бирә, яҙма эштәрҙең төрлө төрҙәрен үткәрергә һәм тәрбиә маҡсатын үтәүгә күп ваҡыт ҡалдыра. Ошо системаны 5-6-сы кластарҙа үҙ аллы һүҙ төркөмдәрен, ярҙамсы һүҙ төркөмдәрен өйрәнгәндә, 7-се синыфта һүҙбәйләнештәрҙе, бер составлы һөйләмдәрҙе, һөйләм киҫәктәрен үҙләштергәндә, 8 синыфта теҙмә, эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙе үткәндә ҡулланырға мөмкин.

«Морфология» бүлеген терәк конспекттар менән аңлатыу бик ҡулай. Айырыуса, берҙәм дәүләт стандарттарына күсеү шарттарында был технология менән уҡытыу уңышлы.

Уҡыусылар башланғыс кластарҙа үҙаллы һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәре тураһында бер ни тиклем белем алған булалар, һәм уларҙың белемдәренә таянып, яңы теманы бергәләп үҙләштерергә була. Әҙер терәк конспекттар ҡулланмайбыҙ, уҡыусылар менән бергәләп эҙләнәбеҙ, таҡтала һыҙабыҙ, шунан һуң ғына алдан әҙерләп ҡуйылған терәк конспект таҡтаға эленә йәки медиапроекторҙа күрһәтелә һәм һығымта яһала. Уҡыусылар бер-береһенә һөйләйҙәр, дәфтәргә яҙып алалар. Схемалар өсөн айырым дәфтәрҙәр торорға мөмкин.

Һүҙ төркөмдәрен өйрәнер алдынан төҙөлгән блок ошо принципҡа таяна:

1. Мәғәнә.
2. Һорау.

3. Морфологик үҙенсәлектәре.

4. Синтаксик роле.

V класта «Ҡылым» темаһын үтелгәндәрҙе ҡабатлауҙан башлайбыҙ. Тәүҙә һүҙҙәр яҙыла һәм был һүҙҙәрҙең нимәләр менән үҙгәреүен иҫкә төшөрөлә. Миҫалдарҙы уҡыусылар үҙҙәре үҙгәртә. Бында уҡытыусы проблемалы ситуация тыуҙыра. Уҡыусы эҙләнә, таба, иҫбат итә, миҫалдар менән нығыта. Йәнә шуны ла әйтергә мөмкин: программа материалының күсәгилешлелек принцибына нигеҙләнеп төҙөлөүен күҙ уңында тотоп, «Ҡылымдарҙың яһалышы» темаһын да ошо уҡ дәрестә аңлатып була. Сөнки быға тиклем «Һүҙьяһалыш. Орфография. Телмәр мәҙәниәте», «Исемдәрҙең яһалыу юлдары», «Сифаттарҙың яһалыу юлдары»н өйрәнгән уҡыусылар өсөн «Ҡылымдарҙың яһалышы»н танып белеү күпкә еңелерәк буласаҡ. Терәк конспекты төҙөгәндә уҡыусылар:

1. башланғыс кластарҙа алған белемдәрен иҫкә төшөрәләр;

2. дәреслектә бирелгән материалды терәк конспект менән сағыштырып, үҙ белемдәрен тикшерәләр;

3. терәк конспекты ярҙамында ҡағиҙә сығаралар;

4. дәреслектәге материалды уҡығандан һуң, үҙ аллы терәк конспекты төҙөй алалар.

Был эштәр һәр дәрестә эшләнергә тейеш. Бындай эштәр башҡарыу уҡыусыларға үҙ аллы эшләргә йүнәлеш бирә. Ошо эштәрҙән һуң әҙер блок күрһәтелә. Был ваҡытта улар бер-береһенең эше менән сағыштыра һәм етешһеҙлектәрен төҙәтә ала.

Ошонан һуң күнегеүҙәр эшләйбеҙ, ижади һәм ҡабатлау эштәре башҡарабыҙ. Ауырлыҡ килеп тыуғанда, тиҙ генә терәк конспектынан ҡарап алырға мөмкин. Дәреслектә бирелгән теоретик материал менән терәк конспектын үҙ аллы сағыштырып ҡарайбыҙ.

«Ҡылым һөйкәлештәре» темаһы менән улар әлегә таныш түгел. Был тема бер нисә параграфта бирелгән. Параграфта күрһәтелгән темаларҙың эске бәйләнешен иҫәпкә алып, теманы бер дәрестә терәк конспект ярҙамында аңлатыу отошло. Һөйкәлештәрҙең затлы форма булыуына иғтибарҙы йүнәлтергә кәрәк.

Ҡылым һөйкәлештәренә терәк-конспекты төҙөү



Бында ла уҡытыусы теманы әҙер килеш бирмәй, ә уҡыусыларға уйланырға урын ҡалдыра. Мәҫәлән, барлыҡ-юҡлыҡ категорияһын яҙмай, ә уҡыусыларға ҡағиҙәне уҡып үҙҙәренә тулыландырырға ҡуша ала. Уҡыусылар ҡағиҙә уҡырға бик ҡыҙыҡһынып бармай. Ә ошондай эш бирһәң, кем беренсерәк табып тулыландыра, тип ярыш формаһын да ҡулланһаң, уларҙың эҙләп табыуға теләге көсәйә. Ә өйгә эш итеп уҡыусыларға һәр һөйкәлеш буйынса бәләкәй блоктар төҙөргә ҡушыу ҙа баланы китап менән эшләргә өйрәтә.

VI класта «Ҡылым төркөмсәләре» темаһы уҡыусылар өсөн яңы тема булып һанала, сөнки башланғыс кластарҙа был турала һүҙ булмай. Шуның өсөн аңлатыуҙы ҡылым һөйкәлештәренән башларға һәм «Ҡылым төркөмсәләре»нең затһыҙ форма булыуын һәм дүрт төргә бүленеүен сағыштырып өйрәнергә, V кластағы терәк конспектты йәки дәреслектәге конспектты ҡулланырға мөмкин. Төркөмсәләр тураһындағы төшөнсәне ябай ғына аңлатырға була. Башта «Ҡылым һөйкәлештәре» яҙылған карточкалар ярҙамында уҡыусылар һөйкәлештәргә терәк-конспекты төҙөй. Ә икенсе рәткә уҡытыусы ярҙамында «Ҡылым төркөмсәләре» темаһына терәк конспекты төҙөлә. Һәм беренсеһе затлы, ә икенсеһе затһыҙ булыуы асыҡлана. Шулай уҡ был конспектта хәбәр һөйкәлеше менән сифат ҡылымдың оҡшаш һәм айырмалы яҡтары билдәләнә. Синтаксик роле тураһында ла мәғлүмәт бирелә, миҫалдар менән нығытыла. Ҡылым төркөмсәләренә терәк-конспект төҙөү уҡыусыларға ҡушыла. Бында һәр уҡыусы үҙ аллы эшләй. Ә тикшереүҙе төрлөсә үткәрергә була. Таҡтала, медиапроекторҙа, һәр балаға әҙер конспект биреп, йәки бер уҡыусы икенсеһенең эшен тикшерә, төҙәтә, тулылындыра һәм үҙҙәренең эше менән сағыштыра ала.

Блоклап уҡытыу, айырыуса, үтелгәндәрҙе ҡабатлағанда уңайлы.

«Ҡылым» темаһын өйрәнеүҙе 10 класта ла дауам итәбеҙ. Теманы өйрәнгәндә уҡыусылар терәк конспектын үҙҙәре тултыра, ә уҡытыусы таҡтаға уҡыусылар әйткәнде билдәләп кенә бара, йәки карточкалар ярҙамында уҡыусылыр үҙҙәре төҙөй. Шулай уҡ компьютер ярҙамында ла эшләргә мөмкин. Миҫалдарҙы ла уҡыусылар үҙ аллы яҙалар.

Был системаның үҙенсәлекле, файҙалы яғы байтаҡ:

- уҡыусылар теоретик материалды тәрәнерәк үҙләштерә;
- улар материалды тотошлай күҙ алдына килтерә һәм уның
- элементтарын айырым-айырым тикшереү кәрәкмәй, күнегеүҙәр һәм ижади эштәр үтәүгә күберәк ваҡыт ҡала;
- уҡыусыларҙың телде практик файҙаланыу һәләте күҙгә
- күренеп үҫә;
- телгә ҡарата ҡыҙыҡһыныуы арта.

Олимпиадаларға әҙерләнгәндә уңайлы. Улар тестар эшләгәндә китаптан эҙләмәйҙәр, ә конспекттары менән эшләйҙәр. Сөнки бындай эре блоктар бер нисә параграфта бирелгән төшөнсәләрҙе берләштерә, уларҙың эске бәйләнешен сағылдыра, уҡыусылар үҙләштерегә тейеш булған мәғлүмәттәрҙе йыйнаҡ итеп бер урынға туплай. Шунлыҡтан уҡыусыларға эҙләп табыуҙы еңелләштерә. Былай эшләү бик күп ваҡытты ла экономиялай.

Шулай итеп, дәрестә схемалар ҡулланыуҙың ыңғай яҡтары күп. Уйланыу, эҙләнеү процесында логик фекерләү ҡеүәһе үҫешһә, бала үҙ фекерен яҡларға өйрәнһә, миҫалдар эҙләгәндә уҡыусыларға матур әҙәбиәт өлгөләренә, ваҡытлы матбуғатҡа күп мөрәжәғәт итергә тура килә, һөҙөмтәлә туған телдең байлығы менән һоҡланыу, ғорурланыу хисе, китап уҡыуға ҡыҙыҡһыныу тойғолары тәрбиәләнә.

Һүҙемде В. А. Сухомлинскийҙың «Әгәр уҡытыусылар формаһы буйынса ла, йөкмәткеһе буйынса ла ҡыҙыҡлы дәрестәр үткәрәләр икән, ул саҡта мәктәп рухи йәшәү сығанағына әүереләсәк», – тигән һүҙҙәре менән тамалайһым килә. Иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт.



*Ҡушымта*







Исем
Предметтың атамаһын
Кем? Нимә?
Һан
берлек
күплек
Килеш
Тап Кем?
Эй. Кемдең?
Төб. Кемгә?
Төш. Кемде?
Ур.-в. Кемдә?
Сығ. Кемдән?
Эйәлек заты
I з. – һөйләүсе
нимәм?
II з. – тыңлаусы
нимәң?
III з. – ситтәге зат
нимәһе?
Хәбәрлек заты
(хәбәр функцияһы)
I з. Кеммен?
II з. Кемһең?
III з. Ул кем?
Синтаксик роле
эйә
аныҡлаусы
тултырыусы
хәл
хәбәр
Яһалышы
тамыр
яһалма
ҡушма


Сифат
Предметтың билдәһен
Ниндәй? Ҡайһы?
Сифат дәрәжәләре
Төп дәрәжә
Артыҡлыҡ дәрәжәһе
Аҙһытыу дәрәжәһе
Сағыштырыу дәрәжәһе
Синтаксик роле
аныҡлаусы
эйә
хәбәр
Яһалышы
тамыр
яһалма
ҡушма




Һан
Предметтың иҫәбен
Нисә? Күпме?
Төркөмсәләре
Төп һандар
Рәт һандары
Сама һандары
Йыйыу һаны
Бүлем һаны
Кәсер һаны
Үлсәү һаны
Яһалышы
ябай
ҡушма
Синтаксик роле
эйә
аныҡлаусы
тултырыусы
хәл
хәбәр


Алмаш
Исем, сифат, һан, рәүеште алмаштыра
Үҙенең һорауы юҡ
Алмаш төркөсәләре
Зат а.-мин,һин,ул, беҙ, һеҙ,улар
Күрһәтеү-был,теге, ул, ошо,шул,бындай,былай
Һорау-кемһ нимә? Ҡасан? Нисек?
Билдәләү-һәр, үҙ,һәр кем, һәрбер
Билдәһеҙлек-әллә кем, әллә нимә
Юҡлыҡ-һис кем,һис нәмә, һис ни
Эйәлек-минең, һинең, уның
Синтаксик роле
эйә
аныҡлаусы
тултырыусы
хәл
хәбәр
Мәғәнәһе дөйөм була


Ҡылым
Затлы ҡылымдар
Яһалышы
Затһыҙ ҡылымдыр
Бойороҡ һөйкәлеше
Хәбәр һөйкәлеше
Теләк һөйкәлеше
Шарт һөйкәлеше
тамыр
яһалма
ҡушма
Исем ҡылым
Уртаҡ ҡылым
Сифат ҡылым
Хәл ҡылым
Синтаксик роле
эйә
аныҡлаусы
тултырыусы
хәл
хәбәр
Ҡылым йүнәлештәре
Ҡылым күләмдәре
Ҡылым рәүешлеге


Һөйкәлештәр
бойороҡ
хәбәр
теләк
шарт
Ниэшлә? –һен?
Ниэшлә – не? – й? –р? – әсәк?
Ниэшлә – ге? – мәксе ? – әһе?
Ниэшләһә?
һан: берлек, күплек
һан: берлек, күплек
һан: берлек, күплек
һан: берлек, күплек
Зат: Iз., II з., IIIз.
Зат: Iз., II з., IIIз.
Зат: Iз., II з., IIIз.
Зат: Iз., II з., IIIз.
Барлыҡ Юҡлыҡ – мә, – ма.
Барлыҡ Юҡлыҡ – мә, – ма.
Барлыҡ Юҡлыҡ – мә, – ма.
Заман:
үтк. - ҙе, - гән
хәҙ. - ә, - а, - й
кил. - ер, - әсәк




Ҡылым төркөмсәләре
Исем ҡылым
Уртаҡ ҡылым
Сифат ҡылым
Хәл ҡылым
Нимә эшлә - ү?
Нимә эшлә - ргә?
Ниндәй? Ниэшлә – гән? - әүсе? – ләр? – әсәк?
Ни рәүешле? Ниэшлә–әп,– гәс, – гәнсе? Ниңә? Ни сәбәпле? Ҡасанға тиклем?
Барлыҡ Юҡлыҡ – мә, – ма.
Барлыҡ Юҡлыҡ – мәскә, – маска.
Барлыҡ Юҡлыҡ – мә, – ма - мәҫ, - маҫ.
Төрө
1.-п,-ып,-еп,-оп,-әп
2.-ғас,-гәс,-ҡас,-кәс
3.-ҡанса,-кәнсә.
Исем һәм сифат ҡылымдар исемде алмаштырып килгәндә, исемдәр кеүек үк, һан, килеш, эйәлек заты менән үҙгәрә.
Заман:
үтк. - гән, - ған
хәҙ. – ыусы, - еүсе
кил. - ер, - әсәк
Барлыҡ Юҡлыҡ – мә, – ма –мәй,–май -мәйенсә, -майынса.


Рәүеш
Эш-хәлдең билдәһен
Нисек? Ҡасан? Ҡайҙа? Күпме?
Рәүеш төркөмсәләре
Төп Нисек?
Ваҡыт Ҡасан?
Урын Ҡайҙа?
Оҡшашлыҡ Нисек?
Күләм-дәрәжә Күпме?
Сәбәп-маҡсат Ниңә?
Рәүеш дәрәжәләре
Синтаксик роле
төп
сағыштырыу
артыҡлыҡ
эйә
тултырыусы
хәбәр
Яһалышы
тамыр
яһалма
ҡушма


Теркәүес
Синтаксик бәйләнеш булдыра
Теҙеүсе теркәүестәр
Йыйыу
Ҡаршы ҡуйыу
Бүлеү
Аныҡлау
Эйәртеүле теркәүестәр
Сәбәп
Һөҙөмтә
Шарт
Кирелек


Бәйләүес
Синтаксик бәйләнеш булдыра
Бәйләүестәрҙең бүленеше
сәбәп
маҡсат
йүнәлеш
ваҡыт
кәсәйтеү
рәүеш
оҡшатыу
Бәйләүестәрҙең төркөмсәләре
төп йәки эйәлек килеште талап итеүсе
Төбәү килеште талап итеүсе
Сығанаҡ килеште һораусылар




Киҫәксә
Төрлө мәғәнә биҙәге өҫтәй
Киҫәксәләрҙең бүленеше
көсәйтеү, раҫлау
сикләү
икеләнеү
һорау


Мөнәсәбәт(модаль) һүҙҙәр
һөйләүсенең үҙе әйткән фекергә ҡарата мөнәсәбәтен белдерә
Төркөмсәләре
Раҫлау, инкар итеү
Тейешле, кәрәкле
Мөмкинлек
Самалау, икеләнеү
Иғтибарлыҡ, өндәшеү
һөйләм киҫәге булып килә алмаусы(инеш һүҙҙәр)
һөйләм киҫәге булып килә алыусы


Ымлык
Хис-тойғоно белдерә
Морфологик һәм фонетик структураһы яғынан төркөмдәргә б!ленә
Бер һуҙынҡы өндән тороусы
һуҙынҡы - тартынҡы
һуҙынҡы – тартынҡы – тартынҡы
һуҙынҡы – тартынҡы – һуҙынҡы


Окшатыу һүҙәре
Өнәкшаш
һынәкшаш
Яһалышы
тамыр
яһалма




Саҡырыу һүҙәре
Хайуандарҙы саҡырыу өсөн
Малдарҙы ҡыуыу һүҙәре
Хайуандарҙы туҡтатыу, һөслөтеү өсөн

*Якупова Лилия Наил ҡыҙы,*
*Иглин районы муниципаль районы*
*Меңйетәр ауылы мәктәбенең*
*башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы*

# Әҙәбиәт дәресендә уҡыусыларҙың эмоциональ интеллекты үҫеше һәм формалашыуының эш системаһы

Педагогик проект темаһының актуаллеге бөгөнгө белем биреүҙең яңырыуы менән аңлатыла. Төп маҡсат – уҡыусыларҙың эмоциональ интеллектын үҫтереү өсөн башҡорт әҙәбиәте дәресенә яраҡлы уҡытыу алымдарын, технологияларҙы, методтарҙы һайлап алып ҡулланыу, уҡыу-уҡытыу эшмәкәрлеген ижади ойоштороу, уҡыусыларҙы тикшеренеү һәм ижади эше менән ҡыҙыҡһындырыу, фәнни-ғәмәли конференцияларҙа, конкурстарҙа, олимпиадаларҙа, театрлаштырылған тамашала ҡатнашып эмоциональ интеллектты үҫтереү.

Йәмғиәтебеҙ үҙгәрештәрҙе контролдә тотоуға, ижади һәм тәнҡитле фекер йөрөтөүгә, үҙ фекерен аныҡ һәм ышаныслы яҡлауға һәләтле уҡыусылар тәрбиәләүҙе талап итә. Ошо талаптарҙан сығып ҡарағанда, алған белемде киләсәктә ҡулланырға өйрәтеү, уҡыусының эмоциональ интеллектын үҫтереү, һөйләү культураһын тәрбиәләү – тел уҡытыуға ҡуйылған төп талаптар.

Һәр уҡытыусы ошо маҡсатта үҙенең дәрестәрен яҡшы сифатлы, һөҙөмтәле итеп үткәрергә, төрлө методик алымдарҙы файҙаланырға, уҡыусыларға төплө белем бирергә тырыша. Мин дә уҡыусыларҙың уйлау һәләтен үҫтереүҙән тыш эмоциональ интеллектын үҫтереү өҫтөндә эшләү өсөн, яңы алымдар ҡулланырға булдым. «Туған тел һәм әҙәбиәт дәрестәрендә белем һәм тәрбиә биреүҙең яңы алымдарын ҡулланыу» тигән методик темамдан сығып, «Әҙәбиәт дәресендә уҡыусыларҙың эмоциональ интеллекты үҫеше һәм формалашыуының эш системаһы» тигән проект өҫтөндә эшләй башланым.



Психолог Даниэль Гоулман эшенә нигеҙләнеп, дәрестә эмоциональ интеллектты үҫтереүҙә 5 эш йүнәлешен тәҡдим итәм.

1. Шәхси, социаль сфера күҙлегенән предметтың йөкмәткеһен һайлау.
2. Уҡыусының әҙәби әҫәрҙе уҡығанда эмоциональ кисерешен асыҡлау.
3. Белем биреү тәжрибәһен барлыҡҡа килтереү.
4. Тотош белем биреү процесында ИКТ ҡулланыу.
5. Дәрестән тыш эшмәкәрлектә эмоциональ интеллектты үҫтереү.

Һөҙөмтәләр:

- уҡыусыларҙың ижади эштәргә ҡарашы яҡшыра;
- уҡыусыларҙың эш һөҙөмтәләре яҡшыра (олимпиадаларҙа призлы урындар яулау, конкурстарҙа еңеү, уҡыу күрһәткестәре яҡшырҙы, белем сифаты күтәрелде);
- компьютер ҡулланып, уҡыусылар үҙ аллы дәрескә презентациялар, ижади эштәр, тест, викторина һорауҙары әҙерләп алып килә.
- уҡыусыларҙың үҙ аллы ижад итеүе, эҙләнеү-тикшеренеү эше яйға һалынды. Район, республика кимәлендәге төрлө ғилми-практик конференцияларҙа, интернет-олимпиадаларҙа әүҙем ҡатнаша башланы. Фәнни-тикшеренеү эше менән шөғөлләнеүсе уҡыусылар дәрестә үҙҙәрен ышаныслы, әүҙем тоталар, грамоталы һорау бирергә өйрәнәләр, уларҙың аң даирәһе, ҡараштары киңәйә.

Был проектты башҡорт теле һәм туған тел уҡытыусыларына тәҡдим итәм, уларҙың профессиональ һәм ижади үҫеше өсөн әҙер тәжрибә.

### Аңлатма яҙыу

**Тема:** әҙәбиәт дәресендә уҡыусыларҙың эмоциональ интеллекты үҫеше һәм формалашыуының эш системаһы.

**Маҡсат:** әҙәбиәт дәресендә уҡыусыларҙың эмоциональ интеллектын үҫтереүҙә эш системаһын билдәләү, яңы алымдар ҡулланыуҙың һөҙөмтәлелеген иҫбатлау.

**Бурыстар:**
- Уҡыусыларҙың эмоциональ интеллектын үҫтереү өсөн башҡорт әҙәбиәте дәресенә яраҡлы уҡытыу алымдарын, технологияларҙы, методтарҙы һайлап алыу һәм дәрестә ҡулланыу өсөн яраҡлаштырыу;
- Уҡыу-уҡытыу эшмәкәрлеген ижади ойошторол, уҡыусыларҙың эмоциональ интеллектын үҫтереү;
- Уҡыусыларҙың тикшеренеү һәм ижади эше менән ҡыҙыҡһыныуын асыҡлау;
- Фәнни-ғәмәли конференцияларҙа, конкурстарҙа, олимпиадаларҙа, театрлаштырылған тамашала ҡатнашып, уҡыусыларҙың эмоциональ интеллектын үҫтереү.

**Гипотеза:** әҙәбиәт дәресендә яңы алымдар, технологиялар ҡулланып, ҡыҙыҡһыныуҙы арттырғанда, уҡыусыларҙың эмоциональ интеллектын үҫтереп була.

**Бурыстарҙы үтәү өсөн түбәндәге принциптар:**

Дидактик принциптар: аңлылыҡ, эҙмә-эҙлеклелек;

Методик принциптар: коммуникативлыҡ, комплекслылыҡ;

Лингвистик принциптар: системалылыҡ, функционаллек.

**Проекттың базаһы:** Башҡортостан Республикаһы муниципаль район Иглин районы Меңйетәр ауылы урта мәктәбе.

**Проекттың ҡатнашыусылары:** Иглин районы Меңйетәр ауылы урта мәктәбенең 5 – 11 класс уҡыусылары.

**Проекттың норматив-хоҡуҡ һәм уҡыу-методик ҡулланмалар менән тәьмин ителеше:**
- «Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы,
- Рәсәй Федерацияһынының «Мәғәриф тураһында» Законы,
- «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы,
- Рәсәй Федерацияһынының «Мәғәриф тураһында» Законы,
- Мәктәп уставы, программаһы.



**Көтөлгән һөҙөмтәләр.**
- Яҡшыны ямандан айыра беләләр, матурлыҡты яраталар;
- Мәҙәниәт менән ҡыҙыҡһыналар һәм үҙ теленең, халҡының, тарихының, тыуған төйәгенең ҡәҙерен беләләләр;
- Уҡыусылар тормоштағы төрлө ситуацияларҙа дөрөҫ йүнәлеш табалар;
- Фекерҙәрен телдән һәм яҙма рәүештә дөрөҫ белдерәләр;
- Белем алыу өҫтөндә үҙ аллы эшләй беләләр;
- Ижади мөмкинлекләре тулыраҡ асыла, алған белемдәрен тәрәнәйтеү инициативаһы үҫә.

## Практик яҡтан яҡтыртыу

Мәғлүмәт донъяһына кереп сумған балаға кәрәкле фактарҙы дөрөҫ һайлап алыу һәм үҙ эшендә дөрөҫ файҙалана алыу күпмелер дәрәжәлә ҡыйынлыҡтар тыуҙырырға мөмкин. Шуға уҡыусыларҙың эмоциональ интеллектын үҫтереү, уларға ярҙам итеү, йәмғиәттә йәшәргә әҙерләү мәсьәләләре алдыбыҙға килеп баҫа. Уҡыусыларҙа эмоциональ интеллект үҫтереү мотлаҡ кәрәк һәм был актуаль. ЭИ үҫтереүҙә әҙәбиәт дәресе ҙур роль уйнай. Әҫәрҙе өйрәнгәндә геройҙың тормошо менән генә танышып ҡалмай, уҡыусылар уның менән бергә йәшәй, кешелекле булырға өйрәнә, үҙ эмоциональ тойғоларын байыта.

Нимә ул эмоциональ интеллект (EQ)? Эмоциональ интеллект – ул үҙеңдең, тирә-яҡтағыларҙың эмоцияларын аңлау һәм контролдә тотоу, үҙ-ара йоғонто яһау һәләте. (Һүрәт №1)

Психолог Дэниель Гоулман үҫеш ысулының 5 компонентын айырып күрһәткән. (Һүрәт №2)

Даниэль Гоулман эшенә нигеҙләнеп, дәрестә эмоциональ интеллектты үҫтереүҙә ошондай эш йүнәлештәрен тәҡдим итәм.

(Һүрәт №3)

**1. Шәхси, социаль сфера күҙлегенән предметтың йөкмәткеһен һайлау**

Был йүнәлештә милли төбәк компонентын ҡулланып, районда тыуып үҫкән күренекле шәхестәр һәм тыуған төйәк тураһында белем тупларға тәҡдим итәм.

Мәҫәлән, беҙ уҡыусылар менән әҙәбиәт дәресендә Иглин районында тыуып үҫкән һәм ижад иткән билдәле шәхестәр ижадын өйрәнәбеҙ, һәүәҫкәр шағир-композитор йырҙарын тыңлайбыҙ. Ошонда уҡыусылар эмоциональ хәл, тойғо, хис менән таныша, уларҙа тик позитив эмоция, тыуған яҡҡа һөйөү, күренекле шәхестәр менән ғорурланыу хисе уяна. Бөйөк Ватан һуғыш, тылда хеҙмәт иткән ҡатын-ҡыҙҙарҙың ауыр яҙмышы тураһында шиғырҙар уҡыһа, уҡыусыла һуғышҡа ҡарата нәфрәт тойғоһо барлыҡҡа килә. Ошо эмоция аша тыуған яҡты һаҡлауҙы, ҡатын-ҡыҙға хөрмәт күрһәтеүҙе тәрбиәләй. Уҡыусылар менән бергә үҙҙәренең ҡарт олаталары, тылда хеҙмәт иткән өләсәләре тураһында видеороликтар төшөрәбеҙ. Быны өсөн улар иҫке фотолар, медаль-ордендар ҡарап, иҫтәлектәрҙе өйрәнә, шул алған эмоцияны ҡалғандарға еткерергә тырыша, камераға һөйләй. Һәр бер уҡыусының ошолай һөйләй алыуы, эҙләнеүе, иғтибарға лайыҡ. Бына ошонда Даниэль Гоулмандың бер компоненты – социаль хәстәрлек: кешеләрҙең тойғоларына ҡолаҡ һала, уларҙың позицияһын аңлай һәм проблемаларына актив мәрхәмәтлелек күрһәтеү. Был эмоциялар уңышлы шәхесте үҫтереүҙә мотлаҡ кәрәк.

**2. Уҡыусының әҙәби әҫәрҙе уҡығанда эмоциональ кисерешен асыҡлау**

***Материалды эмоциональ биреү.*** Уҡыусыны нисек китап менән әүрәтергә була? Уҡыусыла үҙ теләге менән әҫәрҙе аңлап уҡыуҙы, уй-кисерештәрҙе тойомлауҙы, эмоциональ аңлауҙы ойошторорға кәрәк.

Эмоциональ ситуацияны тасуири уҡыу ярҙамында барлыҡҡа килтерергә мөмкин (уҡытыусы, алдан әҙерләнгән уҡыусы, аудиояҙма). Материалды эмоциональ биргәндә махсус әҙерләнгән музыкаль әҫәрҙең йоғонтоһо бар. Шиғырҙы уҡығанда ла, ижади эш эшләгәндә лә кәйефте күтәрер өсөн ҡамасауламай.

***Текстың эсенә инеп китеү.***

Эмпатия һәм кисерештәр нигеҙендәге рефлексив уҡыу – тексты эмоциональ үҙләштереүҙә иң отошлоһо. Ул персонаждың эске донъяһын аңлауға ғына ҡоролмай, информацияның төптә ятҡан



мәғәнәһен аңлата. Текстың эсенә кереп китергә әҙәби әҫәр буйынса төшөрөлгән фильм ярҙам итә, авторҙың ниәтен, әҫәрҙең темаһын, идеяһын аңлата. Мәҫәлән, Ш. Бабич шиғырҙарын уҡып өйрәнгәндә, шағирҙың яҙмышы һәм тарихи ваҡиғаны аңлатырға кәрәк. «Бабич», «Етегән», «Беренсе республика», «Һеңлекәш», оҙон көйҙәрҙең клиптарын, спектаклдәрҙән өҙөктәр ҡарағас, дәрес йәнләнеп китә, уҡыусыларҙа эмоциональ тойғо уяна, әҙәби әҫәрҙе уҡырға теләге тыуа.

Әҙәби әҫәрҙе икенсе төр ижади эш (һынлы сәнғәт, музыка, скульптура) менән сағыштырып ҡарау уҡыусының ассоциатив фекерләүен, эстетик зирәклеген арттыра.

***Ассоциатив фекерләү һәм хыялды ҡушыу***

Һүҙҙән – тойғоға. Бындай алымдар уҡыусыларға бик оҡшай, алдан әҙерлек кәрәкмәй. Бындай эш дәрестә бер образ өсөн бик күп эмоциялар, борсолоуҙар барлыҡҡа килтерә. Миҫал өсөн, «Үҙ хисеңде буя» эшендә уҡыусының эске кисерешен, геройға ҡарата булған хис-тойғоһон, ситуацияны буяу. Төҫтәр беҙгә ассоциация аша тәьҫир итә. Төҫтәр аша уй-кисерештәреңде күрһәтеп, һөйләргә мөмкин. Мәҫәлән, Фәрзәнә Аҡбулатованың «Атай икмәге» әҫәрен уҡығанда уҡыусы күберәк ҡараңғы төҫтәрҙе ҡулланасаҡ. Әнүәр Бикчәнтәевтың «Бакенщиктар илаҡ булмай» әҫәрендә төрлө төҫтәр булыуы мөмкин. Шулай уҡ дәфтәрҙә һүрәт аша әҫәрҙең идеяһын төшөрөргә була. Әлбиттә, эш еңел түгел, бында фантазия, креативлыҡ талап ителә, иң мөһиме – әлеге ваҡытта эмоциональ кисереште күрһәтә белеү.

***Алған белем һәм тәьҫорат нигеҙендә ижади эш***

Эссе, хат, үҙҙәре яҙған шиғырҙар, сценарийҙар – барыһы ла ижади эш. Кино һәм спектаклдәргә юғары кластарҙа рецензия яҙырға була.

**3. Белем биреү тәжрибәһен барлыҡҡа килтереү**

Минең эш тәжрибәмдә төрлө уҡыу һәм мәҙәни реурстар бар, уларҙы актив ҡулланам. Мәҫәлән: ауылдағы, район үҙәгендәге музейҙарға, китапханаларға барыу, унда дәрестәр уҙғарыу. Уҡы-

усылар унда тыуған яҡ тураһында мәғлүмәт ала, ҡыҙыҡһына, эш процесына инеп китә.

Театр сәнғәте эшмәкәрлеген ойоштороу уҡыусыла эмоциональ интеллектты үҫтереүҙә әһәмиәте ҙур. Балала ижади мөмкинлектәр үҫтерелә. Бала персонаждар яҙмышы өсөн борсола, үҙен улар урынына ҡуйып ҡарай, яҡшылыҡты яманлыҡтан айыра, матурлыҡты күрергә, изгелекте аңларға ынтыла.

Мәҫәлән, мин театр сәнғәте эшмәкәрлеген «Аҡ тирмә» өлгөлө фольклор коллективы менән эшләгәндә ҡулланам. Балалар менән төрлө йола байрамдарын уҙғарабыҙ. «Урал батыр» район конкурсында сценарийҙы сәхнәләштерәбеҙ. М. Кәримдең «Ай тотолған төндә» трагедияһынан, «Айгөл иле» драмаһынан өҙөк ҡуйҙыҡ. «Һаумы, һаумы, әкиәт!» конкурсына әҙерләнгәндә лә ролгә кереп һөйләү отошло. Шиғырҙы яттан һөйләү конкурстарына әҙерләнгәндә әҫәрҙе эстән тойоп, күңелең аша үткәрергә өйрәнәбеҙ. Шул ваҡытта ғына яҡшы һөҙөмтәгә өлгәшергә була. Бигерәк тә әҫәрҙә диалог булһа, отошло, сөнки бала ролгә кереп, тауышты үҙгәртергә өйрәнә. Уҡыусыларым һәр йыл һайын район һәм республика күләмендә уҙғарылған төрлө конкурстарҙа урындар яулай. Бында Даниэл Гоулмандың үҙ-үҙеңде контролдә тотоу компоненты тура килә: еңеүгә ынтылыш, инициативлыҡ, оптимизм. Мөмкинлектәре сикләнгән балаларҙы ла сәхнәләштереүҙә ҡатнаштырам. Уларға бәләкәс кенә роль бирһәң дә, ҡыуаналар, еренә еткереп үтәйҙәр. Шулай итеп, театр сәнғәте эшмәкәрлеген ойоштороу уҡыусыла эмоциональ интеллектты үҫтереүҙә әһәмиәте ҙур.

Шәхси сайтымда байтаҡ сценарийҙар һәм видеояҙмалар бар, танышырға була.

**4. Тотош белем биреү процесында ИКТ ҡулланыу**

ИКТ ресурсы уҡыусыға асылырға ярҙам итә. Информацион технологиялар уҡыусыларға традицион булмаған информацияға инеү юлын аса, үҙ-аллы эштең файҙаһын күтәрә, ижад итеүҙең бөтөнләй икенсе мөмкинселектәрен бирә. Үҙемдең эшемдә төрлө әҙер мультимедий продукттарын, белем биреүсе компьютер программаларын, интернет селтәренән алған мәғлүмәтте, электрон-дәреслектәрҙе дәрестә һәм дәрестән тыш эштә ҡулланам. Экрандағы платформалар уҡыусыларға мәғлүмәтте эҙләргә, критик фекерләүҙе үҫтереүгә мөмкинселек бирә. Дистанцион уҡыу ваҡытында ла «Я Класс» платформаһы аша төрлө тестарҙан тыш, уҡыусыларға индивидуаль темаларға инша яҙҙырһам, ЗУМ аша төрлө әҙер мультимедий продукттарын, белем биреүсе компьютер программаларын, үҙем эшләгән презентацияларҙы ҡулланам.

Шәхси сайтым: http://yakupova. eduportfolio. ru

**5. Дәрестән тыш эшмәкәрлектә эмоциональ интеллектты үҫтереү.**

Төрлө йүнәлештә эшләү (түңәрәктәр, секциялар, оҫталыҡ класы, ижади проекттар, эҙләнеп-тикшеренеү эштәре, шәжәрә төҙөү) тәҡдим ителә.

Уҡыусылар менән фәнни-тикшеренеү эштәре ойошторғанда фәнни һәм популяр әҙәбиәт менән эшләргә өйрәтеү, тейешле материалдар тупларға һәм эшкәртергә кәрәк. Мәҫәлән, беҙ уҡыусылар менән тыуған яҡты өйрәнеү музейында, китапханала булған информацияны ҡулланып, яҡташтар, күренекле кешеләр, халыҡтың шөғөлө, тыуған яҡ тарихы тураһында тикшеренеү эштәрен эшләйбеҙ. Башҡорт тарихы йылында бындай эштәрҙең булыуы бик тә актуаль, тип уйлайым. «Меңйетәр, Һарт-Лабау, Үктәй ауылдары тарихы», «Яҡташтарҙың ижадында тыуған яҡҡа һөйөү темаһы», «Исемегеҙ мәңге хәтерҙә». Шул эштәргә сценарийҙар яҙып, сәхнәләштерәбеҙ. «Миҙхәт Исхаковтың XX партсъезд исемендәге колхозда юйылмаҫлыҡ эҙе», «Зинәтулла Булашев – БАССР-ҙың совнарком председателе». Иглин халҡының шөғөлө тураһында «Иглин һуғаны», «Һарт-Лабау ауылында лента һуғыу» йолаларын сәхнәләштерәбеҙ. Шәжәрәне өйрәнеү буйынса ла эҙләнеү эштәре башҡарыла. Эҙләнеп-тикшеренеү эштәребеҙ район һәм республика конкурстарында урындар ала. Был йүнәлешкә Даниэл Гоулмандың мөнәсәбәттәр менән идара итеү компоненты тура килә: рухланыу, йоғонто яһау, үҙ-үҙеңде камиллаштырыуҙа ярҙам итеү, командалағы эш һәм хеҙмәттәшлек булдырыу.

Уҡыусыларҙың байтаҡ ҡына эҙләнеп-тикшеренеү эштәрен бергә туплап, Үктәй ауыл советына арналған «Эй тыуған ер, һин ғәзизһең миңә» исемле китабым баҫылып сыҡты.

**Йомғаҡлау**

Уҡыусыларҙың эмоциональ интеллектын үҫтереү буйынса бер нисә йыл эшләү барышында бер ни тиклем яҡшы һөҙөмтәләр ҙә күҙәтелә:

- уҡыусыларҙың ижади эштәргә ҡарашы яҡшыра;
- уҡыусыларҙың эш һөҙөмтәләре яҡшыра (олимпиадаларҙа призлы урындар яулау, конкурстарҙа еңеү, уҡыу күрһәткестәре яҡшырҙы, белем сифаты күтәрелде);
- компьютер ҡулланып, уҡыусылар үҙ аллы дәрескә презентациялар, ижади эштәр, тест, викторина һорауҙары әҙерләп алып килә.
- уҡыусыларҙың үҙ аллы ижад итеүе, эҙләнеү-тикшеренеү эше яйға һалынды. Район, республика кимәлендәге төрлө ғилми-практик конференцияларҙа, интернет-олимпиадаларҙа әүҙем ҡатнаша башланылар. Фәнни-тикшеренеү эше менән шөғөлләнеүсе уҡыусылар дәрестә үҙҙәрен ышаныслы, әүҙем тоталар, грамоталы һорау бирергә өйрәнәләр, уларҙың аң даирәһе, ҡараштары киңәйә.

Был проектты башҡорт теле һәм туған тел уҡытыусыларына тәҡдим итәм, уларҙың профессиональ һәм ижади үҫеше өсөн әҙер тәжрибә. Был проект буйынса тел уҡытыусыларының методик берекмә йыйылышында, сығыш яһаным, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының район семинарында асыҡ дәрес күрһәттем.

Дәрестәрҙә юғарыла һүҙ алып барылған материалды ҡулланыу класс эшен методик яҡтан төрләләндерә, йәш быуындың эмоциональ интеллектын үҫтерә, китап уҡыу теләген әүҙемләштерә, берен-бере аңлау, кешенең тойғоһон иғтибарға алып, уны ҡайғыртыу, үҙ-ара мөнәсәбәтте ҡора белеү тураһында һөйләй. Аңлы, белемле, туған телен, тыуған ерен, илен яратҡан, ғөрөф-ғәҙәттәрен, тарихын ихтирам иткән шәхес тәрбиәләргә булышлыҡ итә.



***Ҡушымта №1***

**Эмоциональ интеллект (ЭИ) –**
**тойғо менән аҡыл араһындағы баланс**

**ЭИ**

Үҙ-үлende танып белеү – үҙ эмоциянды берҙәй тип таныу һәләте

Үҙеңде янға һалыу – импульсынды, үҙ кисерешенде контролдә тотоу һәләте

Мотивация – маҡсатҡа ынтылыу һәм ирешеү

Эмпатия – ҡарар ҡабул иткәндә кешенең тойғоһон иғтибарға алып, уны ҡайғыртыу

Социаль күнекмәләр – кешеләр менән бәйләнеш төҙөү һәләте

**Үҫеш ысулының 5 компоненты (Психолог Дэниель Гоулман)**

**Шәхсән күнекмә:**
үҙебеҙ менән идара итеүҙе билдәләүсе һәләт.

**Үҙаң:**
эмоциональ үҙаң;
үҙеңде баһалау;
үҙ-үҙеңә ышаныс.

**Социаль хәстәрлек:**
хәстәрлек;
эшлекле хәбәрҙәр булыу;
иғтибарлылыҡ.

**Үҙ-үҙеңде контролдә тотоу:**
эмоцияларҙы тыйыу;
эскерһеҙлек;
яраҡлашыу;
еңеүгә ынтылыш;
инициативлыҡ;
оптимизм;
социаль күнекмә.

**Мөнәсәбәттәр менән идара итеү:**
рухланыу;
йоғонто;
үҙ-үҙеңде камиллаштырыуҙа ярҙам;
үҙгәрештәргә ярҙам;
конфликттарҙы яйға һалыу;
шәхси үҙ ара мөнәсәбәтте нығытыу;
командалағы эш һәм хеҙмәттәшлек.

## Дәрестә һәм дәрестән тыш эшмәкәрлектә эмоциональ интеллектты үҫтереүҙә эш йүнәлеше

- Шәхси, социаль сфера күҙлегенән предметтың йөкмәткеһен һайлау.
- Уҡыусының әҙәби әҫәрҙе уҡығанда эмоциональ кисерешен асыҡлау.
- Белем биреү тәжрибәһен барлыҡҡа килтереү.
- Тотош белем биреү процесында ИКТ ҡулланыу.
- Дәрестән тыш эшмәкәрлектә эмоциональ интеллектты үҫтереү.

**Үҫеш юлы:**

1. Кешенең төп эмоциональ хәле, тойғоһо, хисе менән танышыу, ЭИ үҙ-үҙеңде тикшереү.
2. Кәйефте, тойғоно, хисте аңлау, еткереү үҫешен формалаштыра белеү.
3. Үҙ-үҙеңде аңлау, контролдә тотоу үҙенсәлеген үҫтереү.
4. Эмоциональ хәбәрҙар булыуҙы үҫтереү.

**Эмоциональ интеллект үҫеше:**

1. Уҡытыу һәм тәрбиәләү процесын билдәләү.
2. Дәрес һәм дәрестән тыш эшмәкәрлекте интеграциялау.
3. Уҡыусыларҙың шәхси үҙенсәлеген иҫәпкә алыу.



*Шәрәфетдинова Зөлфиә Тәлгәт ҡыҙы,*
*Стәрлетамаҡ ҡалаһы*
*Жәлил Кейекбаев исемендәге 3-сө гимназияның*
*башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы*

## Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә тәржемә эше аша күп телле шәхес тәрбиәләү

**Теманың актуаллеге:** башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә оригинал һәм тәржемәнән өҙөктәрҙе уҡыу һәм сағыштырма анализ биреү барышында уҡыусылар төп нөсхәнең байыраҡ, күркәмерәк булыуын аңлай. Сөнки оригиналды белеү халыҡтың йәшәү ҡиммәттәрен, донъяға ҡарашын, фәлсәфәһен төшөнөүгә булышлыҡ итә. Тәржемәлә башҡорт теленең бөтә матурлығы, һығылмалылығы, нәзәкәте тулыһынса асылып бөтмәй. Шуға күрә уҡыусыларҙы тәржемә эшенә өйрәткәндә һәр һүҙгә, һәр фекергә һаҡсыл булырға кәрәклеген аңлатыу мөһим.

Теманың актуаллеге уҡыусыларҙа ихтирамлыҡ, толерантлыҡ хистәре тәрбиәләү менән дә билдәләнелә. Сөнки әҙәби тәржемә – халыҡ, мәҙәниәт һәм тел картиналары диалогы. Был диалогтың маҡсаты булып халыҡтар араһында үҙ-ара аңлашыуҙы үҫтереү, милләт-ара ихтирамды нығытыу тора. Икенсе халыҡтың мәҙәниәте, әҙәбиәте менән танышыу – халыҡтар араһындағы татыулыҡҡа илтеүсе төп аҙымдарҙың береһе.

**Маҡсат**: оригинал һәм тәржемә телен сағыштырып өйрәнеү аша башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәренә ыңғай мотивация тыуҙырыу.

**Бурыстар:**

- тәржемә эшенең торошон өйрәнеү һәм анализлау;
- мәҙәни айырмалыҡтарҙы асыҡлау маҡсатында художестволы әҫәрҙәрҙең оригиналын һәм тәржемәһен сағыштырыу;
- уҡыусыларҙың әҙәби әҫәрҙәр уҡыуға ҡыҙыҡһыныуын үҫтереү.

**Өйрәнеү объекты:** башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә күп телле шәхес тәрбиәләү.

**Өйрәнеү предметы:** күп телле шәхес тәрбиәләүҙә әҙәби тәржемәгә өйрәтеүҙең төп алымдары.

**Дидактик принциптар:**

1. *Фәннилек принцибы* тәржемә итеүҙең лингвистик нигеҙҙәре һәм талаптары менән таныштырыуҙы үҙ эсенә ала. Уҡыусыларға тәржемә итеүҙең төп ҡанунлыҡтарын, алымдарын һәм моделдәрен фәнни яҡтан аңлайышлы итеп еткереү мөһим.

2. *Тарихилыҡ принцибы.* Тәржемә эшенең барлыҡҡа килеүе бик боронғо осорға барып тоташа. Һәр осорҙа ла ул әһәмиәтен юғалтмай, киреһенсә, үҫешә, нығына, бөтә сфераларҙа ла киң ҡулланылыш ала бара.

3. *Системалы үҙләштереү принцибы.* Телдәге һәр бер күренеш үҙ-ара тығыҙ бәйләнгән. Шуға күрә художестволы тексты бер телдән икенсе телгә ауҙарғанда мөһим булған лексик һәм грамматик ҡағиҙәләрҙе системалы, эҙмә-эҙлекле аңлатырға кәрәк.

4. *Аңлы үҙләштереү принцибы* уҡыусыларҙан тәржемә эшенең ҡағиҙәләрен, талаптарын, моделдәрен аңлап һәм миҫалдар менән иҫбатлай алырлыҡ итеп үҙләштереүҙе билдәләй.

5. *Аңлайышлы өйрәтеү принцибы.* Практик һәм ижади эштәр, төрлө жанрҙағы художестволы текстар уҡыусыларҙың аң кимәленә, йәш үҙенсәлектәренә ярашлы рәүештә һайланыла. Ул саманан тыш ҡатмарлы булырға тейеш түгел.

6. *Уҡыусыларҙың шәхси үҙенсәлектәрен иҫәпкә алыу принцибы.* Һәр баланың үҙенә генә хас характер һыҙаттары, ҡыҙыҡһыныуҙары, һәләттәре бар. Шуға күрә эш барышында уҡыусыларҙың психологияһын яҡшы белергә һәм шәхси үҙенсәлектәрен иҫәпкә алырға кәрәк.

7. *Теорияны практика менән бәйләп уҡытыу принцибы.* Уҡыусылар тәржемә теорияһы менән генә танышып ҡалмай, ә уның тормоштағы әһәмиәтен дә күрә, төшөнә һәм аңлай белә, үҙҙәрен тәржемәсе ролендә һынап ҡарай, төрлө практик эштәр башҡара. Үҙ белемдәрен мәктәптә генә түгел, ә унан башҡа урындарҙа ла ҡуллана алыу мөмкинлеген аңлайҙар.



**Методик принциптар:**

1. *Коммуникативлыҡ принцибы* уҡыусыларҙы телмәр эшмәкәрлегенә йәлеп итеүгә йүнәлтелгән. Тәржемә барышында уҡыусылар бер телдән икенсе телгә еңел күсеү күнекмәһенә эйә була. Телмәр этикетын һаҡлап, башҡа милләт кешеләре менән аралаша белергә өйрәнә. Шулай уҡ художестволы текстарҙы тәржемә иткәндә башҡа телле халыҡтың тарихына, йәшәү рәүешенә, мәҙәниәтенә ихтирам тойғоһо тәрбиәләнә.

2. *Функционаллек принцибы.* Һүҙҙәрҙе һәм грамматик формаларҙы икенсе телгә ауҙарғанда дөрөҫ ҡулланыу мөһим. Тәржемә уңышлы килеп сыҡһын өсөн, һөйләм конструкцияһын, һөйләмдә һүҙҙәр тәртибен дә дөрөҫ бирергә кәрәк.

3. *Ҡыҙыҡтырыу принцибы* балаларҙың иғтибарын, хәтерен, үҙ аллы танып белеү һәләтен үҫтерә. Тәржемә иткәндә төп иғтибар тел һәм телмәр сараларына, тел күренештәренә йүнәлтелә. Һүҙгә ҡарата һиҙгерлек тойғоһо уятыла.

4. *Уҡыусыларҙың танып белеү һәләтен үҫтереү принцибы.* Художестволы тексты сит телгә «күсереп ултыртҡанда» балалар аңында телдәрҙең донъяуи картинаһы формалаша. Улар текстарҙы һүҙмә-һүҙ тәржемә итеп булмағанлыҡты аңлайҙар. Күп кенә башҡорт һүҙҙәренең рус телендә эквиваленты юҡлығын күрәләр, ҡайһы бер фразеологизмдар, мәҡәл-әйтемдәр рус һәм башҡорт телдәрендә бөтөнләй тап килмәй. Тимәк, һәр халыҡ донъяны үҙенсә танып белә һәм был уның тел байлығында асыҡ сағыла.

**Эшмәкәрлектең төп нигеҙҙәре:**

1. *Психологик нигеҙҙәре.* Уратып алған донъяны танып белеү һиҙеү-тойоуҙарҙан башлана. Художестволы тексты тәржемә иткәндә уҡыусы һәр һүҙҙе, төшөнсәне, мәғәнәне зиһененә һеңдерә бара. Уларҙы икенсе телгә күсергәндә баланың фекерләү һәләте асыла, телмәре үҫешә. Шуға күрә тәржемә текстарының күләменә, йөкмәткеһенә, баланың йәш үҙенсәлектәренә тап килеү-килмәүенә етди иғтибар биреү мөһим.

2. *Педагогик нигеҙҙәре.* Уҡыусылар эшмәкәрлеген ойоштороу (уҡыусыларҙың белемен һәм күнекмәһен камиллаштырыу;

сағыштырыу; дөйөмләштереү һәм системаға һалыу һ. б.) педагогика фәненә нигеҙләнә. Башҡа телдә һөйләшеүсе халыҡҡа, уның тарихына, ғөрөф-ғәҙәттәренә ихтирам тойғоһо тәрбиәләү тәржемә эше менән йәнәш алып барыла.

3. *Методологик нигеҙҙәре.* Эште ойоштороғанда уҡытыусы төп иғтибарҙы нимәгә йүнәлтергә, эште ниҙән башларға, нисек өйрәтергә икәнен күҙ уңында тоторға тейеш. Уҡыусыларҙы ниндәй эш төрҙәре, ниндәй алымдар менән ҡыҙыҡһындырыу, бала күңеленә нисек юл һалып булыуын билдәләү мөһим.

4. *Лингвистик нигеҙҙәре.* Тәржемә барышында уҡыусылар лингвистиканың барлыҡ кимәлдәре (фонетика, лексика, морфология, синтаксис һ. б.) буйынса туплаған бөтә теоретик белемдәрен ҡуллана, практик күнекмә ала. Рус телендә лә, башҡорт телендәге кеүек тел кимәлдәренең үҙ-ара бәйләнгән булыуын күрә. Төрлө тел күренештәрен ике телдә лә сағыштырып, ҡыҙыҡлы һәм фәһемле һығымталарға килә.

**Көтөлгән һөҙөмтәләр:**

1. Предметты өйрәнеүгә һәм художестволы әҙәбиәтте уҡыуға мотивацияның көсәйеүе.
2. Уҡыусыларҙың тәржемә эшенә ҡыҙыҡһыныуы артыуы.
3. Әҙәби тәржемә менән шөғөлләнеүсе балаларҙың һаны ишәйеүе.
4. Башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытыу процесында белем сифатының үҫеше.

**Эшмәкәрлектең йөкмәткеһе**

Башҡорт халҡы быуаттар төпкөлөнән үк башҡа милләттәр менән тығыҙ аралашып, ғәрәп, ҡаҙаҡ һәм рус халыҡтары менән сәйәси һәм сауҙа-иҡтисади бәйләнештәр булдырып йәшәгән. Бындай аралашыу һәм дуҫлыҡ ептәре башҡа халыҡтарҙың мәҙәниәте, сәнғәте, әҙәбиәте менән танышыуға ла юл асҡан. Әммә сит халыҡтың әҙәби ҡомартҡыларын уҡыу, белеү һәм өйрәнеү өсөн йә шул телде белергә, йә әҫәрҙең тәржемәһен табырға кәрәк булған.

Ырыу-ҡәбиләнең яҙыу-һыҙыу эштәрен яйға һалғанда, сит дәүләт вәкилдәре менән һөйләшеү алып барғанда ырыу башлыҡтары ике телде лә яҡшы белгән кешеләргә мөрәжәғәт иткән. Боронғо осорҙа тәржемәселәрҙе тылмас тип атап йөрөткәндәр. Улар күп кенә башҡорт тарихи романдарында ла осрай.

Быуаттар үтеү менән, башҡорт әҙиптәре араһында талантлы тәржемәселәр үҫеп сыға. XIX быуаттың II яртыһында билдәле мәғрифәтсе шағир Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев А. С. Пушкиндың «Бәхетһеҙ ғашиҡ», «Шатлыҡ хыялы», «Делибаш» шиғырҙарын, «Баҡсаһарай фонтаны» поэмаһын, ғәрәптәрҙең ер йөҙөндә киң билдәлелек алған «Мең дә бер кисә» китабынан «Торба, балаҫ һәм алма хикәйәте»н тәржемә итә.

XIX быуат аҙағында башҡорт фольклорын өйрәнеүсе Александр Григорьевич Бессонов (1848-1917), башҡорт халыҡ әкиәттәрен рус теленә тәржемәләп, ҡулъяҙма йыйынтыҡ туплай. Оҙаҡ йылдар буйы туплаған йыйынтығы өсөн ул 1909 йылда Рус география йәмғиәтенең кесе алтын миҙалына лайыҡ була.

Арҙаҡлы ғалим, билдәле яҙыусы Ж. Ғ. Кейекбаев рус һәм Көнбайыш әҙәбиәте өлгөләрен башҡорт теленә һәм үҙенең ҡайһы бер әҫәрҙәрен рус теленә ауҙара. Бөйөк немец шағирҙары Гейне һәм Гётеның, рус яҙыусылары Я. Городской, Б. Верховскийҙың шиғырҙарын, И. А. Крыловтың «Суртан» мәҫәлен, Ф. Вольфтың «Профессор Мамлок» драмаһын башҡорт уҡыусыһына тәржемәләп еткерә.

Башҡорт тәржемәһе өлкәһендә һүнмәҫ нур ҡалдырған шәхестәребеҙҙең тағы береһе – Рәми Ғарипов. Ул, бөтә донъя классик поэзияһының иң яҡшы өлгөләрен башҡорт теленә тәржемә итеү хәстәрлеген күреп, ҙур бер антология төҙөй. Уны «Минең антологиям» тип атай.

Әҙәби әҫәрҙе тәржемәләүгә Марсель Ғәфүров (1933-2013), Дамир Шәрәфетдинов (1965-2020), Әмир Әминев, Айҙар Хөсәйенов, Фәрит Әхмәҙиев, Факил Мырҙаҡаев, Салауат Кәримов кеүек һүҙ маһирҙары ла тос өлөш индерә. Төрки телдәрҙәге шиғырҙарҙы рус теленә тәржемә итеүселәрҙең «Аҡ торна» Халыҡ-ара конкурсы, «Бельские просторы» журналы ойошторған поэтик тәржемә буйынса республика конкурсы ла фәһемле һәм һөҙөмтәле эш булып тора.

Ике һәм күп телле һүҙлектәрҙең төҙөлөүе, төрлө учреждениеларҙың алтаҡталарында яҙыуҙарҙың русса һәм башҡортса булы-

уы, «Аҡбуҙат» журналында әҫәрҙәрҙең алмашлап ике телдә бирелеүе тәржемә өлкәһендә ҙур ғына аҙым булды.

Тәржемә – үтә яуаплы һәм ҡатмарлы хеҙмәт. Ике теллелек шарттарында ул тағы ла киңерәк үҫешергә, тел оҫталарын, һүҙ маһирҙарын табырға тейеш. Был эшкә мәктәп уҡыусыларын ылыҡтырыу ҙа бик фәһемле һәм һөҙөмтәле булыр ине. Был турала Р. Аҙнағолов: «Тәржемәгә өйрәтеү эше баланың ижади һәләтен үҫтереүгә ярҙам итәсәк. Балала һүҙ тойғоһо, тел тойғоһо тәрбиәләү тәржемә эштәре аша хәл ителә. Был осраҡта ул һүҙҙең мәғәнәһенә иғтибар итә. Бер үк һүҙҙең башҡорт телендәге мәғәнә биҙәктәрен рус телендәге варианты менән сағыштыра, һүҙҙең мәғәнәүи һәм тасуирилыҡ көсөн тойорға өйрәнә, ике телле һүҙлектәргә мөнәсәбәте, ҡыҙыҡһыныуы арта», – тип яҙҙы. [15, 10].

Дәрестәрҙә уҡыусылар әҫәрҙең төп нөсхәһен һәм тәржемәһен сағыштырып, ундағы уңышлы яҡтарҙы һәм етешһеҙлектәрҙе табалар. Художестволы текстарҙы үҙ аллы тәржемә иткәндә ҡайһы бер һүҙҙәрҙең рус теленә тәржемәһе булмауын күрәләр. Мәҫәлән, *моң, ҡурай, еләҙ* һүҙҙәренең русса эквиваленты юҡ. Шулай уҡ рус телендәге күп кенә йор һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе, афористик жанр өлгөләрен башҡортсаға һүҙмә-һүҙ ауҙарып булмай. Мәҫәлән, ***карманные деньги*** һүҙбәйләнешен ***ҡул аҡсаһы*** тип тәржемә итәбеҙ. Сөнки башҡорттарҙың кейеменә бер ҡасан да кеҫә тегелмәгән. «Улар бил ҡайышына янсыҡ, ҡалта йәки ҡаптырма таҡҡан. Ә кеҫә тураһында һүҙ булыуы ла мөмкин түгел, сөнки еләҙ, сәкмән, кәзәкейҙәре оҙон, тубыҡтан аҫтараҡ булғанлыҡтан, салғый күтәреп, кеҫәгә тығылып тороу мәшәҡәтле булыр ине» [16, 3]. Шуға күрә башҡорт телендә ***кеҫә аҡсаһы*** һүҙбәйләнеше бөтөнләй ҡулланылмай (***карман*** – төрки һүҙе, ‘аҡса янсығы’ тигәнде аңлата. Рус теленә үҙләштерелгәндән һуң, ул кейемдең бер детален атау өсөн ҡулланыла башлай. Шулай итеп, ***карман*** һүҙе кеҫә мәғәнәһен ала). Тимәк, тәржемә эшен башҡарғанда, уҡыусылар халыҡтың мәҙәниәте, көнкүреш әйберҙәре, холоҡ-фиғеле тураһында ла тулы мәғлүмәт алалар.

Үҙ заманында башҡорт фольклорының йөҙөк ҡашы булған «Урал батыр» эпосы, күренекле яҙыусы Ж. Кейекбаевтың «Туғандар һәм таныштар» әҫәре, З. Биишеваның «Яҡтыға» трилогияһы, Һ. Дәүләтшинаның «Ырғыҙ» романы руссаға тәржемә ителде. Әммә уларҙың сифаты, тәржемәләге кәмселектәр тураһында бәхәсләшергә мөмкин. Сөнки әҙәби әҫәрҙе икенсе телгә ауҙарғанда һүҙмә-һүҙ тәржемә итеү түгел, ә уның эске моңона, рухына, шул халыҡтың тормош тәжрибәһенә, әхлаҡ нормаларына иғтибар итеү кәрәк. Мәҫәлән, «Урал батыр» эпосындағы:

***Яҡшылыҡ булһын атығыҙ,***
***Кеше булһын затығыҙ, –***
тигән юлдар рус теленә:
***Пусть станет добро лишь вашим конем,***
***Пусть имя будет вам – человек, –***
тип ауҙарылған [13]. Ә бит башҡорт телендә ***ат*** һүҙенең, *«йорт хайуаны»* тигән мәғәнәнән тыш, *«кешегә ҡушылған исем»*, *«яҡшы йәки яман яҡ менән алынған дан»* тигән мәғәнәләре лә бар. Элек-электән башҡорт халҡында сит кешенән «Исемең кем?» тип түгел, ә «Атың кем? Ырыуың ни?» тип һорау ғәҙәткә ингән булған.

Ҡала шарттарында уҡыусы балалар «Урал батыр» эпосын тәржемәлә уҡый икән, тимәк, улар башҡорт теленең күп кенә тел гәүһәрҙәрен танып белеүҙән ситтә ҡала тигән һүҙ был. Нисек етте шулай тәржемә итеүҙән рус уҡыусыһы алдында башҡорт ауыҙ-тел ижадының абруйы төшөүе ихтимал. Шунлыҡтан йәш быуынға башҡорт фольклоры ҡомартҡыларын һәм әҙәби әҫәрҙәрҙе оригиналда уҡыу күпкә отошлораҡ һәм әһәмиәтлерәк икәнлеген аңлатыу зарур.

Мәктәптә уҡыусыларҙың яратып уҡыған әҫәрҙәренең береһе – Ж. Кейекбаевтың «Туғандар һәм таныштар» романы. Уның руссаға тәржемәһенә иғтибар иткәндә лә ҡытыршылыҡтар ярылып ята. Мәҫәлән, *Күп кешеләр, иртән таң һарыһынан тороп, эшкә тотоноу өсөн, ырҙын өҫтөндә ҡуна ятып ҡалдылар; ҡайһы берәүҙәр ғаиләләре менән,* ***оҙон бил арбаларға*** *тейәлеп, эңерләтеп кенә ауылға ҡайтып инделәр (Многосемейные, усадив свои семьи на* ***длинные рыдваны****, с наступлением сумерек отправились домой* (М. Ғәфүров тәржемәһе) һөйләмендә ***оҙон бил арбалар рыдваны*** тип тәржемә ителгән. С. Ожеговтың «Рус теленең аңлат-

малы һүҙлеге»ндә ***рыдван*** һүҙенең мәғәнәһе ***ҙур юл каретаһы*** тип бирелгән. Ә башҡорт халҡы бер ҡасан да каретаға ултырып йөрөмәгән. Был һөйләмдә ***оҙон бил арбалар*** һүҙбәйләнешен дроги тип тәржемә иткәндә урынлы булыр ине.

Бер үк һүҙҙең контексҡа бәйле төрлөсә тәржемә ителеү осраҡтарын күрһәткән күнегеүҙәрҙе башҡарыу ҙа әһәмиәткә эйә. Мәҫәлән, уҡыусыларға составында ***күк*** һүҙе булған һөйләмдәр бирелә һәм уларҙы руссаға тәржемә итергә ҡушыла.

| № | Башҡортса | Русса |
|---|---|---|
| 1. | Ә унда, алыҫта, алтын ҡояш, **зәңгәр күк**, йәшел тау балҡып ята ине (З. Биишева). | |
| 2. | Йәшендәр асыулы ялтылдай, ер тетрәтеп **күк күкрәй** (З. Биишева). | |
| 3. | Түбән сифатлы икмәк әскелтем тәм бирә, **күк еҫе** аңҡыта. | |
| 4. | Салауат кейгән **күк еләнен**,<br>Уҡ-һаҙағы уның билендә.<br>(«Салауатҡа дан йыры») | |
| 5. | Беҙҙең генә уйнап-көлгән ерҙә<br>**Күк үләндәр** үҫмәй күп ятыр.<br>(Һ. Дәүләтшина). | |
| 6. | **Күк әремде** ҡайнатып,<br>сүмесләп эсеү ҙә файҙа бирмәне.<br>Емеш ауырыны ла ауырыны.<br>(З. Биишева). | |
| 7. | Ҡапҡан һалдым Ҡараташҡа<br>**Күк бүрене** алам тип. («Суҡ муйыл») | |
| 8. | Башҡорттар китте һуғышҡа,<br>Оҙатып ҡалды **күк Урал**.<br>(Ҡ. Даян) | |
| 9. | Аҡ тирәк, **күк тирәк**,<br>Беҙҙән һеҙгә кем кәрәк?<br>(«Аҡ тирәк, күк тирәк» уйыны) | |
| 10. | **Күк ат** ҡына ектем, ай, тәртәгә,<br>Ҡалғандары ҡалды кәртәлә.<br>(«Бейеш»). | |
| 11. | – Был ҡылыстың ҡынына ниңә арыҫлан менән **күк күгәрсен** төшөрөлгән? (З. Биишева). | |
| 12. | Сәрбиямал **күм-күк** булып күгәренеп, илап шешенеп бөткән Бибеште һөйрәкләп тигәндәй ҡырандасҡа сығарып ултыртты.<br>(З. Биишева) | |

Миҫалдарҙағы күк һүҙен һөйләмдәрҙән айырып алғанда түбәндәге һүҙбәйләнештәр килеп сығыр ине.

| | |
|---|---|
| **зәңгәр күк** – голубое небо<br>**күк күкрәй** – грохочет гром<br>**күк еҫе** – запах плесени<br>**күк елән** – синий елян<br>**күк үлән** – зеленая трава<br>**күк әрем** – горькая полынь | **күк бүре** – серый волк<br>**күк Урал** – седой Урал<br>**күк тирәк** – черный тополь<br>**күк ат** – сивая лошадь<br>**күк күгәрсен** – сизый голубь<br>**күм-күк** – посиневший |

Тәржемә эшен башҡарып, уҡыусылар бер үк һүҙҙең төрлө тәржемәләре булыуын аңлай. Был күренеш һәр бер халыҡтың уратып алған донъяға ҡарашы төрлөсә булыуын күрһәтә. Мәҫәлән, башҡорт телендә күк һүҙе үләнгә ҡарата ҡулланылғанда ***йәшел***, атҡа ҡарата ***аҡ*** мәғәнәһен белдерә.

Уҡыусылар менән ошондай күнегеүҙәрҙе башҡарыу уларҙы эшкә активлаштыра, ҡыҙыҡһыныу даирәһен киңәйтә, коллектив эсендә үҙ фекерен туплап әйтә белергә өйрәтә. Әлбиттә, һүҙлек менән эшләү күнекмәләре булдырыла. Ә иң мөһиме – һүҙҙе контекста дөрөҫ итеп ҡулланыу һәләте үҫешә.

Ниндәй генә телде алма, уның һүҙлек байлығы халыҡтың йәшәү рәүеше, тарихы һәм менталитеты менән тығыҙ бәйләнгән. Тәржемә эше аша уҡыусы һәр телдең үҙенә генә хас милли үҙенсәлеген билдәләй. Тел артында халыҡтың рухиәте, тормош тәжрибәһе ятҡанлығын күрергә өйрәнә.



***Әминева Лилиә Искәндәр ҡыҙы,***
*Рәми Ғарипов исемендәге 1-се*
*Башҡорт республика гимназия-интернатының*
*башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы*

## Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә монологик һөйләү телмәрен үҫтереү

Билдәле булыуынса, XX быуаттың 90-сы йылдары илебеҙ тарихында ҡырҡа үҙгәрештәр заманы булараҡ үҙ урынын алды. Йәш быуынды әхлаҡи, рухи һәм патриотик яҡтан ныҡлы шәхес, һау – сәләмәт балалар тәрбиәләүгә өҫтөнлөк биргән рухи байлыҡтарыбыҙ замана талаптарына яраҡһыҙ булып сыҡты. Күп кенә изге йолаларыбыҙ заман солғанышында юғалып ҡалды. Үҙ телен, тарихын, илен, халҡын һанламаған быуын барлыҡҡа килде. Ошо урында Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың һүҙҙәренә туҡталғы килә: «Кеше үҙ халҡының үткәненә, хәҙергеһенә һәм киләсәгенә баш эйергә тейеш. Үткән һәм киләсәк – кешелектең ике ҡанаты ул». Әлбиттә, юғалғанды кире ҡайтарыу күп көс, оҫталыҡ талап иткән процесс. Был эште башҡарыуҙа уҡыу йорттарының, уҡытыусыларҙың һәм тәрбиәселәрҙең эшмәкәрлеге баһалап бөткөһөҙ. Уҡыу – уҡытыу эшмәкәрлеген милли йүнәлештә алып барған уҡыу йорттары алдында уҡыусының ижади һәләтен үҫтереү, күңел донъяһын тейешле йүнәлештә тәрбиәләү, әхлаҡлы, белемле, үҙ халҡының үткәне һәм хәҙергеһе менән ҡыҙыҡһынған, уны хөрмәт иткән, команда менән берлектә еңеү өсөн көрәшкән, башҡаларҙы күҙәтеп, кәрәкле һығымта яһай белгән, үҙ – үҙен тәрбиәләгән шәхес үҫтереү бурысы ҡуйыла. Был бурыстар менән бер ыңғай уҡыусыларҙың логик фекерләү, һөйләү һәм уҡыу һәләтен үҫтереү, йәш быуында әүҙем тормош позицияһын булдырыу, тапшырылған эште намыҫ менән башҡарып сыға белеү кеүек талаптар ҙа тормошҡа ашырыла. Билдәле булыуынса,

бөгөнгө көндә ил киңлегендә федераль дәүләт белем биреү стандарттары (ФГОС) индерелә. Был стандарттарға ярашлы белем биреү программаһы дөйөм бурыстарға нигеҙләнеп башҡарыла. Улар:

1. Фәннилек, күргәҙмәлелек;
2. Системалылыҡ, дауамлылыҡ, күсәгилешлек;
3. Материалды аңлы рәүештә үҙ аллы үҙләштерә белеү;
4. уҡыусының шәхси үҙенсәлектәрен иҫәпкә алыу.

Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына ярашлы рәүештә дәрестең дүрт йүнәлеше билдәләнә:

1. Телмәр үҫеше (коммуникация, фәнни-популяр, нәфис әҙәбиәт);
2. Шәхестең социаль яҡтан үҫеше (сығыш яһау, үҙ – үҙенә баһа биреү);
3. Художестволы-эстетик үҫеш (музыка, ижад, художестволы ижад);
4. Интеллектуаль үҫеш (эҙмә-эҙлекле фекер үҫеше).

Яңы талаптар тәрбиә маҡсаттарын да үҙгәрә. Был осраҡта тәрбиә һәм белем биреү үҙ-ара бәйле ике өлөшкә нигеҙләнеп башҡарыла:

1. Уҡытыусы һәм балаларҙың уртаҡ эшмәкәрлеге;
2. Балаларҙың үҙаллы эше.

*Әҙәбиәт һәм тел дәрестәрендә монологик телмәрҙе үҫтереү проблемаларын өйрәнеү.*

Ни өсөн мин үҙемдең педагогик концепцияның темаһын «Тел һәм әҙәбиәт дәрестәрендә монологик телмәрҙе үҫтереү» тип алдым? Балаларҙың телмәрен үҫтереү, минең ҡарашҡа, бөгөнгө уҡытыу системаһында төп маҡсаттарҙың береһе булырға тейеш. Нигеҙле итеп һөйләй белеү, тимәк, фекерләй белеү тигән һүҙ. Фекерен башҡаларға еткererлек итеп телмәрен төҙөй белгән кеше йәмғиәттә үҙен юғалтмаясаҡ, уның тулы ағзаһы буласаҡ, үҙ урынын таба аласаҡ. Бына ни өсөн уҡыусыларҙың фекерләй белеүенә генә түгел, ә телмәрен конструктив рәүештә төҙөй белеүенә лә ныҡлы иғтибар бирер кәрәк. Был осраҡта мин проблемалы уҡытыу технологияһын ҡулланам.



Минең төп маҡсатым: уҡыусыны үҙләштерелгән материалға таянып, үҙ фекерен ҡыйыу рәүештә башҡаларға еткерә, уны яҡлай белергә өйрәтеү.

Проблемалы уҡытыуҙың төп маҡсаты – уҡыусыларҙың өйрәнеү, танып белеү эшмәкәрлеген арттырыу, активлаштырыу, интеллектуаль һәләттәрен асыу. Проблемалы уҡытыуҙың төп йүнәлештәре:

1. Проблемалы ситуация булдырыу;
2. Проблеманың мөһим өлөштәрен билдәләү;
3. Проблеманы хәл итеү юлдарын табыу;
4. Башҡарылған эштең дөрөҫлөгөн тикшереү, баһалау.

Бындай алгоритм менән дәрес материалын үҙләштереү уҡыусыларҙа ҡыҙыҡһыныу уята, яңы материал өҫтөндә эшләргә ынтылыш булып тора. Дәрес темаһынан сығып фәнни эш тә яҙырға мөмкин. Монологик телмәр үҫтереү алымын әҙәбиәт дәресендә генә ҡулланырға була икән тип уйларға ярамай. Башҡорт теле дәресендә төрлө проблемалы ситуацияларға таянып телмәрҙе яңы һүҙҙәр менән байытыу өҫтөндә эшләргә мөмкин. Мәҫәлән, берәй һүҙҙең килеп сығышына туҡталып, уға бәйле тарихи мәғлүмәттәргә таянырға була. Был осраҡта уҡыусы үҙ фекерен фәнни стилдә эҙмә – эҙлекле еткерергә бурыслы. Бындай алым уҡыусының үҙ аллы танып белеү һәләтен үҫтерә, фекерләү процессын активлаштыра. Уҡытыусы үҙ сиратында проблемалы ситуацияны тыуҙырырлыҡ, уҡыусыны ҡыҙыҡһындырып бәхәскә инерлек һорауҙар бирә белергә бурыслы – был бик мөһим. Проблемалы ситуация дәрес башынан алып аҙағына тиклем тема менән бергә үрелеп килергә тейеш.

*Монологик телмәрҙе өйрәнеүҙә инновацион алымдар.*

Мәғариф өлкәһендә әленән әле төрлө реформалар, үҙгәрештәр булып тора. Әлбиттә, ниндәй генә яңылыҡ булмаһын, уның нигеҙендә традицион алымдар ята. Билдәләнгән темаға ҡарата үҙ педагогик тәжрибәмдән сығып яңы методтар булдырғанмындыр, тип уйламайым, әммә бөгөнгө заман балаларының психологик аспекттарын, донъяға булған ҡараштарын иҫәпкә алып, уҡытыусы тарафынан һәр алымға ниндәй ҙә булһа үҙгәреш индерелә.

Билдәле булыуынса, балаларҙың һөйләү телмәре бер кимәлдә булмай. Ул төрлөсә үҫешә. Быны сәбәптәре күп һәм төрлө. Был осраҡта баланың ғаиләлә ниндәй тәрбиә алыуы, уның аралашыу даирәһе ҙур роль уйнай. Имтихандарҙы тест формаһында биреү ҙә телмәрҙе ярлыландыра. Күп осраҡта уҡыусы үҙенең күргән – белгәнен образлы итеп һүрәтләп бирә белмәй. Ошо күренештәрҙе иҫәпкә алып, уҡыусыларҙың монологик телмәр үҫтереү методикаһының принциптары, уҡытыусының эш алымдары билдәләнә. Монологик һөйләү телмәре бер кешенең телмәре булып тора, йәғни тыңлаусы менән һөйләүсе араһында контакт диалогтағы кеүек ныҡлы түгел. Монологик һөйләү телмәре мәғлүмәтте киңерәк, тулыраҡ тапшырырға мөмкинлек бирә. Һөйләүсе телмәрен алдан әҙерләп, терәк һүҙҙәргә йәки планға, ҡайһы берҙә тулы текстҡа таянып еткерә.

Монологик һөйләү телмәре – бәйләнешле телмәр. Был телмәрҙе ҡулланғанда һөйләйәсәк ситуацияны төшөнөү, уға ҡағылышлы материалдарҙы туплау, бер системаға һалыу талап ителә. Монологик һөйләү телмәренең төп маҡсаты: эҙмә – эҙлекле итеп телмәр төҙөү, телмәргә контроль яһау.

Монологик һөйләү телмәрен үҫтереү буйынса түбәндәге күнегеүҙәр тәҡдим ителә:

1. ишеткән, уҡыған, үҙ башынан үткән ваҡиғаларҙы һөйләү (план, терәк һүҙҙәр ярҙамында һәм уларҙан башҡа);
2. йөкмәткене ҡыҫҡартып, тулы һәм өҫтәлмәләр менән байытып һөйләү;
3. үҙ телмәреңдә модаллекте бирә белеү;
4. һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе синонимдары менән алмаштырып һөйләү;
5. тексттың өлөштәре араһындағы бәйләнеште бирә белеү;
6. иҫбатлауҙар, дәлилләүҙәр килтерә белеү;
7. телмәргә һығымта яһау һ. б.[1]

Монологик һөйләү телмәрен үҫтереү өҫтөндә эшләгәндә проблемалы ситуацияларҙың барлыҡ шарттарын да үтәргә тырышам,

1 5-9 сы кластарҙа башҡорт телен уҡытыу методикаһы / Аҙнағолов Р.Ғ., Исламова Ф.Ғ., Тикеев Д.С. һ.б./Аҙнағолов редакцияһында.– Өфө: «Китап»,1996. 255-се бит.



сөнки ошо осраҡта ғына уңышлы әңгәмә килеп сыға. Әйтергә кәрәк, уҡыусыларға тәҡдим ителгән төрлө эш алымдары үтелгән материалды нығытыуға ғына ҡайтып ҡалмай, тасуири уҡыу һәм телмәр ишетеү һәләтен дә үҫтерә. Монологик һөйләү телмәрен үҫтереү өҫтөндә эшләгәндә педагогика, психология һәм логика фәндәрен бергә ҡарайым. Тел, телмәр һәм фекерләү кешенең донъяға булған ҡарашын тулыһынса сағылдыра, йәғни ул ижтимағи күренеш. Шунлыҡтан әҙәбиәт дәрестәрендә күберәк уҡыусыларға сығыш яһарға мөмкинселек биреү төп бурыс булып тора. Шулай уҡ әҙәбиәт дәрестәре уҡыусыларҙы әхлаҡи яҡтан тәрбиәләү сараһы ла. Уҡытыу процесы ике яҡлы, йәғни уҡытыусы һәм уҡыусы хеҙмәттәшлек итә. Бер яҡлы ғына аралашыуҙы булдырырға ярамай. Уҡытыусы үҙ хеҙмәтенең һөҙөмтәһен күрергә тейеш.

*Күрһәтелгән проблеманы хәл итеүҙә минең педагогик эшмәкәрлегем:*

*Уҡыусыларҙа монологик һөйләү телмәренең үҫеш этаптары.*

Башҡорт теле, әҙәбиәте дәрестәрендә монологик телмәрҙе үҫтереү маҡсатында традицион алымдарға мөрәжәғәт итәм, шул уҡ ваҡытта бөгөнгө тормош талаптарынан сығып түбәндәге маҡсаттарҙы һәм бурыстарҙы билдәләйем:

1. үҙләштерелгән материалдарҙан сығып дәрестең проблемаһын, маҡсатын уҡыусы тарафынан үҙ аллы билдәләү;
2. маҡсатты ҡабул итеү (быға тиклем алынған белемде анализлау, уҡыу технологияһын һайлау);
3. алынған белемде, мәғлүмәтте нығытыу;
4. бирелгән темаға ижади проект эшләү.

Әлбиттә, уҡыу – уҡытыу технологияларының уңышы объектив һәм субъектив факторҙарға бәйләнгән. Төп факторҙар булып уҡыусыларҙың һаулығы, психологик үҙенсәлектәре тора. Шунлыҡтан дәрес үткәреүҙе планлаштырғанда һәр ваҡыт түбәндәгеләрҙе иҫәпкә алам:

- уҡыусыларҙың шәхси үҙенсәлектәре;
- уҡыусыларҙың минимал ваҡытын һәм көсөн сарыф итеп оптималь һөҙөмтәләргә ирешеү;
- психологик комфорт булдырыу.

Тағы ла шуны иҫәпкә алыр кәрәк: уҡыусыларҙың кластан тыш эштәрҙә ҡатнашыуы монологик телмәр үҫтереүҙә ҙур роль уйнай. Кластан тыш эштәрҙең йөкмәткеһе, ғәҙәттә, уҡыу-уҡытыу программаһына нигеҙләнеп башҡарыла. Дәрестә үтелгән материалды бындай сараларҙа дауам итеп, уҡыусыларҙың белемдәрен тәрәнәйтеү – бик отошло момент. Был осраҡта уҡыусыларҙың логик фекерләүен, телмәр мәҙәниәтен үҫтереү, рухи яҡтан үҫешен төрлө мауыҡтырғыс күнегеүҙәр, ҡыҙыҡлы грамматик мәсьәләләр, лекция, әңгәмә, уйындар ярҙамында теоретик белем алыу, уны тормошта практик ҡулланыу күнекмәһен биреү – төп маҡсат булып тора.

Ошоларҙан сығып дәрестән тыш эшмәкәрлек түбәндәге йүнәлештәрҙә ойошторола:

1. Дәрестән тыш эшмәкәрлектең практик булыуы (доклад, реферат әҙерләү, фәнни – ғәмәли эштәр яҙыу, радиотапшырыуҙарға материалдар йыйыу, мәктәп газетаһын сығарыу);

2. Дәрестән тыш эшмәкәрлекте төрләндереп үткәреү (төрлө темаларға арналған кисәләр, диспуттар, конференциялар, аҙналыҡтар үткәреү, ғалимдар, йәмәғәт эшмәкәрҙәре менән осрашыуҙар ойоштороу, походтарға, экскурсияларға йөрөү, мәғлүмәттәрҙе туплап фәнни эштәр яҙыу, төрлө спорт ярыштары менән бәйләп милли байрамдар үткәреү һ. б.);

3. Үткәрелгән эштәрҙә уҡыусыларҙың үҙ ирке менән ҡатнашыуы, уларҙың ҡыҙыҡһыныуын булдырыу, һәләттәренә ҡарап эштәрҙе бүлеп биреү.

4. Кластан тыш эштәрҙә предмет – ара бәйләнеш булдырыу. Шуны ла әйтеп үтеү кәрәк: беҙҙең гимназия – интернатта һәр кластан тыш сараның темаһы һәм маҡсаты уҡыусылар менән берлектә билдәләнә. Бындай алым, әлбиттә, эште аҙағына тиклем һөҙөмтәле итеп алып барып еткерергә мөмкинселек бирә. Беренсенән, проблемалы өлкә эҙләп табыла, уны асыу саралары билдәләнә. Икенсенән, тема асыҡлана (ни өсөн был тема алына, шуға аңлатма бирелә). Өсөнсөнән, эшләнәсәк эштең йөкмәткеһе, уның буйынса ниндәй мәғлүмәттәр барлығы ҡарала, эштең башҡарыу этаптары асыҡлана. Бындай алым баланың үҙ аллы фекерләү



һәләтен үҫтерә, үҙ эшенә баһа бирергә өйрәтә, ә был һәр уҡытыусы өсөн төп маҡсат булып тора.

*Ҡулланылған технологияның һөҙөмтәләре.*

Монологик һөйләү телмәре үҫтереү өҫтөндә эшләүҙең һөҙөмтәләре булып түбәндәге күрһәткестәр билдәләнә:

Көтөлгән һөҙөмтәләр:

- Уҡылған текстың эстәлеген тулы һөйләмдәр аша тапшыра;
- Әҙәби әҫәргә тулы анализ яһай белә;
- Әҫәрҙә күтәрелгән проблемалы ситуацияны үҙ аллы асыҡлай;
- Уҡыусы үҙ фекеренең тулылығына, дөрөҫлөгөнә инанып, уны тыңлаусыға еткерә;
- Бирелгән темаға урынлы бәхәстәр ҡора белә;
- Телмәре бай, йөкмәткеле;
- Аралашыу һәм телмәр мәҙәниәтенә эйә;
- Оппонентына һорауҙар бирә белә;
- Монологик һөйләү телмәре менән яҙма телмәр бергә үҫешә.

Тәнҡитле фекерләү технологияһының практик өлөшө:

Мин үҙемдең дәрестәремдә «Пирамида» алымын ҡулланам. Был алымдың үҙенсәлеге шунда – текстарҙы хикәйәгә, рецензияға әйләндерергә мөмкинлек бирә. Ул бөтә йәштәге уҡыусылар өсөн универсал. Был алым ҡулланылған дәрес түбәндәгесә төҙөлә:

– текст менән танышыу;

– уҡыусыларҙың яҙма яуаптары – пирамида төҙөүе;

– пирамиданың һәр юлын тулыландырыу – тексты әҙерләү;

– тулы текст яҙыу.

Тексты уҡып сыҡҡас, уҡыусыларҙан әҫәрҙә барған хәл – ваҡиғаларҙы бер һүҙ менән генә әйттерергә һәм уны пирамиданың түбәге баҫҡысына яҙҙырырға.

1-се баҫҡыс: һүҙ яҙҙырыу.

2-се баҫҡыс: ике һүҙ менән поэманың үҙенсәлеген яҙыу.

3-сө баҫҡыс: өс һүҙ менән хәл – ваҡиғаның урынын һәм ваҡытын билдәләү.

4-се баҫҡыс: дүрт һүҙ менән төп ваҡиғаларҙы әйтеп биреү.

5-се баҫҡыс: биш һүҙ образдар һәм үҙенсәлектәре тураһында.

6-сы баҫҡыс: алты һүҙ менән уҡыу барышында барлыҡҡа килгән хис – тойғоларҙы белдереү.

7-се баҫҡыс: ете һүҙ менән беренсе баҫҡыстағы һүҙҙе тулыландырыу.

8-се баҫҡыс: һигеҙ һүҙ ярҙамында әҫәр тураһында үҙеңдең фекереңде еткереү.

Был эште таҡтала, дәфтәрҙә, индивидуаль һәм төркөмдә, статистик парҙар менән дә эшләргә була.

Алымдың ыңғай яғы шунда: пирамидалағы яуаптарға яңы һүҙҙәр өҫтәп, фекерҙе тулыландырырға була. Иң яҡшыһы күргәҙмәлелек өсөн икенсе төҫлө пастаны ҡулланыу отошло, сөнки эштең барышы асыҡ күренеп тора.

Дәфтәрҙә текст өлгөһө килеп сыға, уға таянып инша, рецензия, мәҡәлә яҙырға мөмкин.

Миҫал өсөн Р. Бикбаевтың «Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ» поэмаһын алайыҡ.

1-се юл: һыу.

2-се юл: лирик – трагик поэма.

3-сө юл:Ағиҙел, беҙҙең көндәр.

4-се юл: герой эсәр һыу эҙләй.

5-се юл: Белорет, Бөрйән яҡтары, Иштуған, Шаһтау яҙмышы, ҡалалар.

6-сы юл: һоҡланыу, аптырау, борсолоу, уйланыу, рәнйеү, оран һалыу.

7-се юл: һыу – хайуандар, үҫемлектәр, кешеләр өсөн йәшәү сығанағы.

8-се юл: шағир кешеләрҙең һыуға ғына түгел, рухи һыуһауын да күрһәтә.

Бирем дәгесә ошо баҫҡыстарҙы тулыландырайыҡ. Эштең һөҙөмтәһе итеп өс төркөм ижади эш башҡара.

1-се төркөм: һыу проблемаһына инша яҙа.

2-се төркөм: экология темаһына мәҡәлә яҙыу.

3-сө төркөм: экология һәм айырыуса һаҡланған тәбиғәт биләмәләренә арналған презентация эшләй.



2-се алым:

Әҫәр өҫтөндә эшләгәндә һүҙлек эшенә туҡталам, сөнки һүҙлек эше ижади эштәрҙең үҙ аллы бер төрө. Аңлатмалы һүҙлектәр, башҡортса – русса мәҡәлдәр һәм әйтемдәр һүҙлеге, фразеологик берәмектәр һүҙлектәрен ҡулланам.

«Һыу» концептын ҡарау.

Һыу һүҙенә аңлатма биреү.

– Ниндәй һыуҙар була?

Һыу төрҙәре: йылға һыуы, диңгеҙ һыуы, ағын һыу, шишмә һыуы, минераль һыу.

Ныҕынған һүҙбәйләнештәр: һыу мейе, ауыҙ һыуы ҡойолдо, һыу кеүек эсә, һыу эскеһеҙ итеү.

«Урал батыр» эпосында һыу концептын асырға мөмкин.

Һеҙҙең алдығыҙҙа Рауил Бикбаевтың «Һыуһаным-һыуҙар бирегеҙ!» поэмаһынан өҙөк. *(слайдта бирелә)*.

«Урал!
Үҙе Боҙ диңгеҙҙең һыуын эсә,
Ә ҡойроғо ҡойона Аралда.
Быуаттарҙың баш өҫтөнән ҡарап,
Мәғрүр тора бында ҡаялар.

*(хрестоматия, 136-сы бит).*

Өҙөктө уҡып уҡыусылар дәрес проблемаһын билдәләйҙәр. Быны өсөн һорауҙар бирелә:

– Шағир ниндәй проблеманы күтәрә?

– Был проблема ҡайһы юлдарҙа сағылыш таба?

Яуаптар:

Йәмлеме Ағиҙел буйҙары?

Тәмлеме Ағиҙел һыуҙары?

Проблема: Экология мәсьәләһе, планетала һыу проблемаһы.

(Проблема билдәләнгәс, бурыстар әйтелә.)

– Тимәк беҙҙең алда ниндәй бурыстар ҡуйыла?

Бурыс: Кешенең тәбиғәткә яһаған йоғонтоһон билдәләү.

Бурыс билдәләнде, тимәк, алдыбыҙға ниндәй маҡсат ҡуябыҙ?

Маҡсат: Һыуҙың кеше тормошонда тотҡан урыны тураһында һөйләшеү, һыуға һаҡсыл ҡараш булдырыу.

Хәҙер төркөмдәргә бүленәбеҙ. Һәр төркөмгә эш бүленеп бирелә. Төркөмләп эшләү һәр уҡыусының һәләтен асырға, телмәренең үсеш кимәлен билдәләргә мөмкинлек бирә. Бирелгән темаға өҫтәлмә материалдар табып, сығыш яһау.

1-се төркөм: һыуҙың химиялағы роле тураһында һөйләй.

2-се төркөм: биологияға мөрәжәғәт итә.

3-сө төркөм: география менән бәйле.

4-се төркөм: ауыҙ – тел ижадында һыу образы темаһына сығыш яһай.

Әлбиттә, уҡыу – уҡытыу технологияһының уңышы объектив һәм субъектив факторҙарға бәйләнгән. Төп факторҙар булып уҡыусыларҙың һаулығы, психологик үҙенсәлектәре тора. Шунлыҡтан дәрес үткәреүҙе планлаштырғанда һәр ваҡыт түбәндәгеләрҙе иҫәпкә алам:

- уҡыусыларҙың шәхси үҙенсәлектәре;
- уҡыусыларҙың минималь ваҡытын һәм көсөн сарыф итеп оптималь һөҙөмтәләргә ирешеү;
- психологик комфорт булдырыу.

*Йомғаҡлау.*

Дәрес структураһының һәр бүленешен урынлы ҡулланыу зарур. Был алым уҡытыусының да, уҡыусының да эшмәкәрлеген дөрөҫ ойошторорға мөмкинселек бирәсәк. Монологик телмәр үҫтереүгә иғтибар биргәндә уҡытыуҙың дөйөм принциптарына нигеҙләнеү кәрәк. Телмәр үҫтереүҙең төп принциптарынан ситкә тайпылырға ярамай. Был осраҡта фекерләү, тел һәм телмәр эшмәкәрлегенең берҙәмлеге, уларҙың үҙ – ара, лексик, грамматик, пунктуацион, стилистик эштәр менән бәйләнешен күрһәтергә мөмкин. Тел фекерләүҙең туранан – тура сағылышы булып тора. Кеше уйҙарын, фекерҙәрен тел сараларын ҡулланып, телмәр аша еткерә. Телмәр төҙөү – эшмәкәрлектең бер төрө булараҡ – үҙе бер – нисә элементтан тора. Мәҫәлән, уҡыусы инша яҙыр өсөн тема һайлап ала, ә тема алыр өсөн, йөкмәткене күҙ алдына килтерер кәрәк. Темаға ярашлы телдең лексик – грамматик формаларын аңлап, йөкмәткене яҙа белергә тейеш. Шулай итеп, монологик һөйләү телмәрен үҫтереү тел өлкәһендә ҙур урын биләй.



***Әбхәлимова Зилә Салауат ҡыҙы,***
*Республика политехник лицей-интернатының*
*башҡорт теле һәм әҙәбиәтеуҡытыусыһы*

## Әҙәби әҫәрҙәрҙе өйрәнгәндә сағыштырыу алымының эҙләнеү эшендәге роле

*Теманың актуаллеге һәм перспективаһы.*
*Уҡыу процесындағы роле.*

Әҙәби әҫәр үҙенең әхлаҡи – эстетик, рухи йөкмәткеһе менән уҡыусының белеменә, эске тойғоһона, ихтыяр көсөнә ҙур йоғонто яһай. Үҙенең асылы менән мәктәп уҡыусыһын тәрбиәләй, шәхес итеп формалаштыра. Мәктәп уҡыусыһы ябай тыңлаусы категорияһынан бөйөк сәнғәттең ҡатмарлы төрө булған нәфис әҙәбиәт донъяһын аңлап уҡыусы категорияһына яйлап күсә бара. Көн һайын ҡулланған ябай һүҙҙәр яҙыусы һәм шағир ҡулында образдар тыуҙырыусы сара һәм бер оло мәғәнәгә эйә булыуы йәш уҡыусыны уйланырға мәжбүр итә.

Методик әҙәбиәт әҙәби әҫәрҙәрҙе сюжетлы – мәғлүмәти яҡтан ғына тикшереүҙе талап итә. Ә шул ваҡытта уҡыусының иғтибарын һүҙҙең асылына, тәбиғәтенә, авторҙың үҙ геройҙарына, тирә-яҡ мөхиткә, рухи мәсьәләләргә йүнәлтергә кәрәклеге көнүҙәк булып ҡала.

Бик күп анализ алымдарының нигеҙендә сағыштырыу процесы ята. «Һәр нәмә сағыштырыуҙа беленә» тигән афоризм тормошта ла, әҙәбиәттә лә, фәндә лә киң ҡулланыла. Кешеләр, бер әйберҙе икенсеһе менән сағыштырып, уларҙың сифатын һәм әһәмиәтен билдәләй; бер кешене икенсеһе менән сағыштырып, уның холҡон-фиғелен баһалай.

Яҙыусылар әҫәрҙәрендә сағыштырыу алымы киң ҡулланыла. Прозала ике герой йә сағыштырылып, йә ҡапма – ҡаршы ҡуйылып күрһәтелә.

**Перспективаһы.** Әҫәр геройҙарҙын, күренештәрен сағыштырып, уҡыусылар уларға баһа бирергә, үҙ фекерҙәрен дәлилләргә өйрәнә һәм һөҙөмтәлә сағыштырма характеристика төҙөү күнекмәһенә эйә була. Әҫәрҙе сағыштырыу алымы менән өйрәнеү ҙур мөмкинселектәр аса. Был алым предметтарҙы һәм күренештәрҙе төрлө яҡлап өйрнергә, уларҙың төп асылын аңларға, сағыштырылған предметтарҙың төп билдәләрен асыҡларға булышлыҡ итә, проблемалы ситуация тыуҙыра. Сағыштырыуҙың төрлө алымдары ярҙамында әҫәргә төплө анализ үткәрелә, уның идеяһы асыла һәм әҫәргә яңыса ҡараш булдырыла һәм уҡыусыларҙа ижади ҡараш үҫтерелә.

**Алдынғы педагогик идея** – әҫәрҙәрҙе сағыштырыу алымы менән тикшереп, уҡыусыларҙа башҡорт, рус һәм туғандаш халыҡтар әҙәбиәтенә һөйөү уятыу, эҙләнеү эшенә ылыҡтырыу.

**Педагогик тәжрибәнең объекты.** Әҙәби әҫәрҙе анализлау.

**Педагогик тәжрибәнең предметы.** Әҙәби әҫәрҙе сағыштырыу алымы менән анализлау.

**Педагогик тәжрибәнең маҡсаты.** Башҡорт, рус, туғандаш халыҡтар әҙәбиәтенең оҡшаш яҡтарын табып, автор ҡарашын билдәләп, сағыштырыу алымының бөтә төрҙәрен ҡулланып, эмоциональ яҡтан бай һәм интеллектуаль үҫешкән, үҙен һәм шул ваҡытта тирә-йүндәге донъяға тәнҡит күҙлегенән ҡарарға өйрәнгән, үҙ фекерен яҡлай белгән шәхес тәрбиәләү.

**Бурыстары:**

- әҫәрҙәрҙе сағыштырыу алымы менән анализлау һөҙөмтәһендә китапҡа һөйөү, эҙләнеү эшенә ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыуын иҫбатлау;
- сағыштырыу алымын төплө өйрәнеү;
- башҡорт әҙәбиәте дәрестәрендә әҫәрҙе төплө анализлау төрө булған сағыштырыу алымын ҡулланыу.

**Маҡсатҡа ирешеү һәм тәжрибә туплау юлдары.**

1. Темаға ярашлы методик әҙәбиәт уҡыу (В. М. Жирмунский, А. Н. Веселовский, М. Ғ. Ғималова, М. Х. Иҙелбаев, Г. Б. Хөсәйенов, Б. Б. Ғафаров, Р. Ғ. Аҙнағолов, И. И. Вәлеев, И. Ғ. Шарапов, М. Б. Юлмөхәмәтов, Ф. Ш. Сынбулатова);



2. Санкт-Петербург ҡалаһында урынлашҡан «Центр дополнительного образования – «Альфа-Диалог» автономиялы ойошма үткәргән «Школа диалога народов России: литература и жизнь» уҡыусыларҙың ижади конкурсында ҡатнашыу (Санкт-Петербург, 2017 йыл);
3. «Башҡорт һәм туған телдәрҙе өйрәнеүҙең хәҙерге проблемалары» III Бөтә Рәсәй (халыҡ-ара ҡатнашлыҡта) фәнни-методик конференцияһында ҡатнашыу (Өфө, 2018 йыл);
4. «Телдәргә өйрәтеү методикаһын камиилаштырыу: алдынғы тәжрибә майҙансығы» IV Халыҡ-ара фәнни-методик онлайн конференцияһында ҡатнашыу (Ҡазан, 2019 йыл);
5. «Филология өлкәһендә әҙәби әҫәрҙе анализлау» республика семинарында ҡатнашыу (Өфө, 2018 йыл);
6. Республика һәм ҡала кимәлендә үткәрелгән семинарҙарҙа оҫталыҡ класы күрһәтеү (Өфө, Стәрлетамаҡ, Күмертау, 2017-2019 йыл);
7. Халыҡ-ара кимәлендәге видеоконференция рәүешендә оҫталыҡ класы күрһәтеү (Күмертау, 2019 йыл).

## Педагогик тәжриәбенең формалашыу һәм барлыҡҡа килеү шарттары

Һуңғы ваҡытта коллегаларымдан йыш ишеткән «Хәҙерге заман балалары китап уҡымай, китап яратмай» тигән һүҙҙәренә ҡаршы килеп, «Хәҙерге балалар китап ярата, уҡый!», – тип өндәшәм. Йәш быуын вәкилдәре, әлбиттә, күберәк фәнтәзи китаптар уҡый. Бының менән уларҙа китап уҡыуға һөйөү генә уяна. Ә беҙҙең, әҙәбиәт уҡытыусыларының, төп бурысыбыҙ – үҙебеҙҙең классик, хәҙерге әҙәбиәткә ихтирам уятыу юлдарын эҙләү. Уҡыусыларым араһында башҡорт телендәге әҙәби әҫәрҙәрҙе йотлоғоп уҡыусылар күбәйеүе, быйылғы уҡыу йылынан туған рус әҙәбиәте предметын алып барыу – рус һәм башҡорт яҙыусыларының әҫәрҙәрен сағыштырып өйрәнеүгә шарттар тыуҙырҙы. Ике телдәге әҫәрҙәре сағыштырыу менән уҡыусыларҙың классик әҙәбиәтте уҡыуға мотивация булдырылды, эҙләнеү эшен башҡарыуға этәргес көс булды.

**Фәнни-методик нигеҙләнеш, теоретик база.**

Рус әҙәбиәте методикаһына сағыштырыу алымы төшөнсәһен иң тәүгеләрҙән булып В. М. Жирмунский һәм А. Н. Веселовский индерә. А. Н. Веселовский әҙәби әҫәрҙе өйрәнеү бурыстарын тарихи сағыштырыу менән бәйләй. В. М. Жирмунский «Сағыштырыу әҙәби үҫештең дөйөм билдәләрен һәм милли әҙәбиәттең үҙенсәлеген берләштерә», – тигән фекер еткерә. Әҙәби әҫәрҙе анализлағанда сағыштырыу алымын А. Д. Алферов, Ц. П. Балталон, Ф. И. Буслаев, В. И. Водовозов, В. П. Острогорский, В. Я. Стоюнин, В. П. Шереметьевский һәм башҡа ғалимдар, өйрәнгән. Башҡорт ғалимдары һәм методистары М. Ғ. Ғималова, М. Х. Иҙелбаев, Г. Б. Хөсәйенов, Б. Б. Ғафаров, Р. Ғ. Аҙнағолов, И. И. Вәлеев, И. Ғ. Шарапов, М. Б. Юлмөхәмәтов, Ф. Ш. Сынбулатова сағыштырыу алымы тураһында хеҙмәттәр баҫтырған.

Б. Б Ғафаров «Әҙәбиәттән яҙма эштәр» методик ҡулланмаһында әҙәбиәт дәрестәрендә уҡыусыларҙың телмәрен байытыу, яҙма эштәргә әҙерләү юлдарын тикшерә. Әҙәби әҫәрҙәрҙе өйрәнгәндә сағыштырыу алымының телмәр үҫтеүҙәге роленә иғтибар бүлә. Башҡорт әҙәбиәтендә бер үк темаға яҙылған шиғырҙарҙы сағыштырып, шағирҙың поэтик оҫталығын тәрәнерәк асыу юлын күрһәтә.

**Педагогик тәжрибәнең яңылығы.** Күренекле методистарҙың хеҙмәтен өйрәнеү, уларҙың тәжрибәһен ҡулланыу сағыштырыу алымына шәхси ҡараш булдырылды. Әҙәби әҫәрҙе сағыштырыу алымы менән анализлау уҡыусыларҙы эҙләнеү эшенә ҡыҙыҡһыныу уята алыу – педагогик тәжрибәнең яңылығы булып тора.

**Педагогик тәжрибәнең тәғәйенләнеше.** Был педагогик тәжрибә йәш уҡытыусыларға рус һәм башҡорт әҙәбиәте уҡытҡанда ҡулланыу өсөн тәҡдим ителә.

**Педагогик тәжрибәлә осраған ауырлыҡтар.**

1. Был алым менән эшләгән уҡытыусыға оҡшаш хәл-ваҡиғаларҙы, образдарҙы табыу өсөн ике әҫәрҙе ентекләп уҡып сығыу мотлаҡ;
2. Сағыштырыуҙарҙың төрө уҡыусыларҙың йәш үҙенсәлеген иҫәпкә алып һайланыла;



3. Ҡайһы бер әҫәрҙәрең тулы тексы китапханала булмау сәбәпле, әҫәрҙе уҡып сығыуыға оҙаҡ ваҡыт талап ителә.

**Педагогик тәжрибәнең технологияһы.**

Әҙәби әҫәрҙе анализлау – хәҙерге заман әҙәбиәт дәресенең нигеҙе. Нәфис әҙәбиәт донъяһына инеү өсөн яңы һәм уңайлы методтар һәм алымдар уйлап табыу методиканың төп бурысы булып тора. Был осраҡта сағыштырыу алымы ҙур мөмкинселектәр аса. Төрлө ил һәм осор әҙәбиәтен, төрлө шағир һәм яҙыусыларҙың ижадын сағыштырып, уларҙың үҙ-ара бәйләнешен табыу әҙәбиәт ғилеменең асылын билдәләй. Рус теле йәки туғандаш халыҡтар әҙәби әҫәрҙәрҙең уртаҡ идея – тематикаһын табыу, жанр һәм стилдәрен сағыштырыу әҫәрҙе төплө аңларға булышлыҡ итә. Айырым бер әҙәби әҫәр, жанр, стиль, йүнәлеш, ҡайһы бер яҙыусылар ижадының төп үҙенсәлеге әҙәби сағыштырыу предметын тәшкил итә. Әҙәби әҫәрҙәрҙе сағыштырыу алымы менән анализлауҙың төп аспекты түбәндәгеләр тора: әҫәрҙең яҙылыу ваҡыты, унда һүрәтләнгән ваҡиғалар, автор ҡарашы, сюжет һәм композицияларҙың оҡшашлығы, тел-һүрәтләү саралары.

Сағыштырыу алымының төрҙәре:

1. Әҙәби әҫәрҙәге ваҡиғаларҙы тормоштағы булған хәл-ваҡиғалар менән сағыштырыу;
2. Әҫәрҙә бирелгән образ менән прототибын сағыштырыу. (Был осраҡта художестволы образ үҙенең прототибының күсермәһе түгел, ә яҙыусы тарафынан дөйөмләштерелгән образ икәнлеге иҫәпкә алынырға тейеш);
3. Эпизодтарҙы, күренештәрҙе сағыштырыу;
4. Яҙыусының ҡараламаһы менән әҫәрҙең төп нөхсәһе менән сағыштырыу;
5. Образдарҙы сағыштырыу;
6. Идеяның төп мәғәнәһен асыу өсөн бер үк темаға яҙылған әҫәрҙәрҙе сағыштырыу;
7. Әҫәргә, образға, эпизодтарға бирелгән баһаламаларҙы (тәнҡитте) сағыштырыу;
8. Әҙәби әҫәрҙе бүтән төр сәнғәт төрҙәре менән сағыштырыу (был сағыштырыу эстетик мәҙәниәтте үҫтерә).

9. Әлбиттә, сағыштырыуҙар был төр менән генә сикләнмәй. Уҡытыусының ҡарамағынан сығып төрлө сағыштырыуҙар табырға мөмкин.

**Сағыштырыуҙарға миҫалдар.**

Билдәле булыуынса, әҙәбиәттә «мәңгелек темалар» тигән төшөнсә бар. Ватан, әсә, туған тел, мөхәббәт, дуҫлыҡ, хеҙмәт кеүек темаларҙы бер әҙип тә ситләтеп үтмәй, һәм һәр береһе уларҙы үҙенсә, ҡабатланмаҫ поэтик саралар ярҙамында аса.

Башҡорт позияһында бер үк темаға яҙылған шиғырҙар бихисап. Сағыштырыу алымын ҡулланыуҙы Хәким Ғиләжевтең «Башҡорт теле» шиғыры һәм Хәсән Назарҙың шул уҡ исемдәге шиғырҙарын сағыштырып китәйек.

Был ике шиғырҙы өйрәнеп бөткәс, уларҙы йөкмәткеһе һәм поэтик эшләнеше күҙлегенән ҡарау отошлораҡ. Шиғырҙарҙы тасуири уҡыу ойошторолғандан һуң, әҫәрҙәрҙең идея-тематик йөкмәткеһе аңлатмалы уҡыу менән асыла. Ҡобайыр стилен ҡулланып, Хәким Ғиләжев башҡорт теленең ниндәй сифаттарын аса? (Башҡорт теленең ҡобайыр жанры кеүек мең йыллыҡ тарихы бар икәнлеген күрһәтә, «Урал батыр»эпосы менән ауаздаш), Хәсән Назар ҙа үҙ шиғырында башҡорт теленең боронғо тел икәнлеген ниндәй юлдарҙа күрһәтә (Башҡорт теле! Быуаттарҙы Үтеп тә, сарланып та, Яҙҙыртаһың минән шиғыр!). Хәким Ғиләжев башҡорт телен моңло, йырлы, сәсән тел тиһә, Хәсән Назар ҙа ҡурай моңолай, тәбиғи, ысын тел тип күрһәтә. Башҡорт теленең әсе, фажиғәле юл үткәнлеген ике шағир ҙа әйтеп китә. Хәким Ғиләжев «Мең киҫелеп үҫкән тел», тиһә, Хәсән Назар «Тарихында Бер кемгә лә юҡ ләғнәте. Тик үҙенсә иретмәктә Көсәнмәне кем лөғәте». Әгәр Хәким Ғиләжев шиғырын ҡобайыр формаһы аша туған телдең сифаттарын acha, Хәсән Назар публицистик баһалау менән телгә характеристика бирә.

Идеяның төп мәғәнәһен асыу өсөн бер үк темаға яҙылған әҫәрҙәрҙе сағыштырыу төрөнә миҫал итеп Зәйнәб Биишеваның «Дуҫ булайыҡ» һәм Мостай Кәримдең «Өс таған» повестарын сағыштырыу урынлы булыр. Ике әҫәрҙә лә дуҫлыҡ темаһы яҡтыртыла. Бала саҡтағы эскерһеҙ, ихлас дуҫлыҡ ике әҫәрҙә лә бик күп



ҡаршылыҡтарға осрай һәм шул ҡаршылыҡтарҙы еңеп сыға. «Дуҫ булайыҡ» әҫәрендә Брагин тураһында легенда булһа, «Өс таған» әҫәрендә Кирәмәт тауы тураһында легенда малайҙарҙың тормошона тылсым өҫтәй. «Дуҫ булайыҡ» әҫәрендә Талҡаҫ күле дуҫлыҡты һынау урыны булһа, Мостай Кәримдең «Өс таған» әҫәрендә Ҡылыскүл малайҙарҙы яраштыра. Ҡыҙырастың алдашыуы һәм Вәзирҙең урлашыуы дуҫлыҡты емерә. Малайҙарҙың ярашыуына ике әҫәрҙә лә өләсәй кәңәштәре ярҙам итә.

Ике әҫәр ҙә был тормошта юғалған дуҫлыҡты кире ҡайтарыу, ышаныс яулау ауыр икәнлеген күрһәтә. Дуҫтарһыҙ ауырлыҡтарҙы еңеп сығыуы ҡыйынға тура киләсәк, дуҫтарҙың ҡәҙерен белергә, ауырлыҡтар килгәндә ярҙам ҡулы һуҙырға саҡыра, класташтар менән дуҫ, татыу йәшәргә өндәй.

Мостай Кәримдең «Өс таған» повесында малайҙарҙың характер үҫешен күҙәтеү өсөн уларҙың әҫәр барышында нисек үҙгәреүен сағыштырыу ярҙамында күрһәтергә мөмкин.

Әҫәр башында Яҡуп рогатканан ата, йөҙә, ишкәк ишә, ағас башына үрмәләй, ҡаянан ҡаяға һикерә белмәй. Ҡыйыуһыҙ. Яҡшы уҡый. Тасуири уҡый. Тыйнаҡ. Әҫәр аҙағында үҙенең фекерен ҡыйыу рәүештә яҡлай. Тиҫтерҙәре араһында абруйы арта.

Әҫәр башында Вәзир мәргән ата, шәп йөҙә, оҫта балыҡсы. Ишкәк ишә белә. Ағас башына етеҙ үрмәләй. Ҡыйыу. Уртаса уҡый. Матур яҙа. Йор һүҙ ле, шаян, хәйләкәр. Әҫәр аҙағында Вәзир үҙ хатаһын таный. Уны намыҫлы эш менән төҙәтә. Отрядҡа яңынан ҡабул ителә.

Әҙәби геройҙарҙың нимәгәлер мөнәсәбәтен, ҡарашын асыҡлағанда ла сағыштырыуҙы талап иткән һорауҙар ҡуйыу урынлы.

Мәҫәлән, Ноғман Мусиндың «Шайтан ҡуласаһы» әҫәрендә бер үк йәмғиәттә һәм шарттарҙа, ғаиләлә йәшәп тә, ни өсөн Мохтасар менән Рәсүл ҡапма-ҡаршы холоҡло кешеләр булып үҫә? тигән һорау ҙа уҡыусыларҙы уйланырға мәжбүр итә. Уҡыусылар үҙенсә дәлилләп яуап бирә. Ғөмүмән, кешеләр бер төрлө булмай. Был хәҡиҡәт. Ноғман Мусин әҫәрендә Мохтасар һәм Рәсүл Мохтасар – изгелекле, ярҙамсыл, көслө рухлы, яуаплы, алдынғы эшсе. Рәсүл –

яуыз уйлы, эскерле, хыянатсы. Ике бер туғандың тормошон һүрәтләү аша урман, уны һаҡлау темаһы аса автор.

**Башҡорт әҙәбиәтен рус әҙәбиәте менән сағыштырыу.** Зәйнәб Биишеваның «Кәмһетелгәндәр» романы менән Максим Горькийҙың «Детство» повесын сағыштырыуға асыҡ миҫал булып тора (1-се ҡушымта). Уларҙың яҙылыу осоро, оҡшаш яҙмыштарын сағыштырып, бик ҡыҙыҡлы факттарға юлығылды.

Константин Паустовскийҙың «Бакенщик» һәм Әнүәр Бикчәнтәевтың «Бакенщиктар илаҡ булмай» хикәйәләрен сағыштырып, ике әҫәр ҙә лә бакенщиктарҙың хеҙмәте һәм балаларҙы тәрбиәләүҙәге ролен күрһәтергә мөмкин. Константин Паустовскийҙың «Бакенщик» хикәйәһендә ҡарт бакенщик Семен тормошоноң мәғәнәһен балаларҙы үҙе белгән нәмәләргә: усаҡ яғыу, ағас ҡырҡыу кеүек эштәргә өйрәтеүҙә күрә. Эшкә килгән пионерҙарға Тыуған илде яратырға кәрәклеген аңлата. Әнүәр Бикчәнтәевтың «Бакенщиктар илаҡ булмай» хикәйәһендә лә бакенщиктың улын көслө ихтыярлы итеп тәрбиәләүен, күп нәмәләргә өйрәтеүен күрәбеҙ. Ошондай тәрбиә алған малай ҡаршылыҡтарҙан ҡурҡмай, еңеп сыға. Ике әҫәрҙә лә быуындар бәйләнешен бар.

**Туғандаш халыҡтар әҙәбиәте менән сағыштырыу.**

Сыңғыҙ Айтматовтың «Аҡ пароход» повесы менән Ноғман Мусин «Һуңғы солоҡ» романын сағыштырабыҙ. Ике әҫәрҙә лә милли ерлек, социаль ҡаршылыҡтар ярылып ята. Образдар оҡшашлығы түбәндәгенән ғибарәт: ете йәшлек малай (әҫәрҙә исеме күрһәтелмәй) – үҫмер Рәсүл, Солоҡ – Мөгөҙлө инә болан, Момун ҡарт – Ҡарамыш ҡарт, Озоркул – Рәсүлдең атаһы.

Яҙмыш тарафынан ҡыйырһытылған, яңғыҙлыҡтан ыҙа сиккән, саф күңелле, аҡ фекер донъяһында йәшәгән балалар һүрәтләнә. «Аҡ пароход» повесында Мөгөҙлө инә болан тураһындағы әкиәт әҫәрҙең асылын билдәләһә, «Һуңғы солоҡ» романында быуындан-быуынға тапшырылып килгән, үҙенең тарихы булған Солоҡ образы аша башҡорт халҡы, уның яҙмышы символлаштырыла. Башҡорт халҡының да, Солоҡтоң да тамырҙары бик тәрәнгә киткән, улар икеһе лә күпте күргән, күпте кисергән. Солоҡ һәм Ҡарамыш ҡарт образдары үҙ-ара ауаздаш. Ҡарамыш ҡарт – Солоҡтоң хужаһы. Икеһенә лә күпте күрергә, күпте кисерергә тура килгән. Рәсүлдең берҙән-бер яҡын кешеһе.





Момун ҡарт – аҡыллы, күпте кисергән, бөтәһенә яҡшылыҡ эшләй. Өйҙә тыныслыҡ булдырыр өсөн тырыша. Малайҙың берҙән бер яҡын кешеһе. Момун ҡарт Мөгөҙлө инә болана тураһында әкиәт һөйләй.

Малайҙың да, Рәсүлдең дә уҡыуға ынтылышын күрһәтеп, авторҙар киләсәктә улар бынамын тигән шәхес булыуына өмөт бағлай. Ләкин был өмөттәр өҙөлә, юҡҡа сыға. Момун ҡарт Мөгөҙлө инә болонон үлтерә, Рәсүлдең атаһы нәҫел Солоғон һата. Өмөттәр аҡланмай, йәғни быуындар бәйләнеше өҙөлөүе, үткәндәрҙе, тарихыңды, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе онотоу киләсәккә ҙур фажиғәгә алып килеүен иҫкәртә.

**Педагогик эш тәжриәбеһенең һөҙөмтәһе.**

Әҙәби әҫәрҙе сағыштырыу алымы менән тикшереү, уҡыусыларҙы китапҡа һөйөү уятыу эш барышында ҙур ғына һөҙөмтәләр бирә. Китап уҡыусылар рәте артҡандан арта. Лицейҙа һәм ҡала кимәлендә үткәрелгән «Иң яҡшы китап уҡыусы» конкурсында, төрлө интеллектуаль конкурстарҙа, фәнни-ғәмәли конференцияларында призлы урындар яулайҙар.

*1-се ҡушымта*

**«Телдәргә өйрәтеү методикаһын камиилаштырыу: алдынғы тәжрибә майҙансығы» IV Халыҡ-ара фәнни-методик онлайн конференцияһындағы сығыш (Ҡазан, 2019 йыл)**

**Сопоставительный анализ литературных произведений**

Одна из важнейших задач изучения любой учебной дисциплины – развитие учащихся. Условием достижения положительного результата является развитие мышления учащихся, обучение их познавательным универсальным учебным действиям. Выделяют такие УУД: сравнение, анализ, абстрагирование, обобщение, син-

тез, классификация, расширенный поиск информации и другие. На уроках литературы часто применяю прием сравнения. «Все познается в сравнении» – эта расхожая фраза передает глубокий смысл процесса познания. Предметом сравнительно – исторического изучения могут быть отдельные литературные произведения, жанры, стили и направления, особенности творчества отдельных писателей. Есть несколько видов сопоставлений: 1. Сопоставление содержания произведения с жизненными событиями. 2. Сопоставление образа с прототипом. 3. Сопоставление эпизодов, сцен, явлений. 4. Сопоставление образов. 6. Сопоставление произведений, близких по теме, которое способствует более глубокому постижению идейного смысла. 5. Сопоставление литературы с другими видами искусства. [1.58]

Сравнение произведений или отдельных элементов художественных текстов разных писателей в средних классах обычно проводится для подчеркивания общности нравственной коллизии, художественной ситуации, сходства героев произведения и их различия. В своей статье хочу показать сравнение двух произведений: «Детство» Максима Горького и «Униженные» народной писательницы Башкортостана Зайнаб Биишевой. Повесть «Детство» и роман «Униженные» имеют сходство. Прежде всего, надо отметить совпадения в судьбах маленьких героев, детские годы которых, начиная с ранней поры, трагичны. И Алеша, и Емеш теряют родителей, становятся сиротами. Авторы сосредоточивают внимание на переживаниях, чувствах, реакциях детей, вызванных в основном разными обстоятельствами жизни, чаще всего неблагоприятными и даже горестными. С первых страниц повести «Детство» мы наблюдаем жизнь вместе с главным героем, и с первых страниц читатель ощущает трагедию семьи. Алеша Пешков рано потерял отца.

В романе «Униженные» трагедией для семьи бедняка Байгильде Иръегитова становится смерть его жены Сагуры, матери четверых их детей – девочек Бибеш, Янеш, Емеш и их брата Иштугана.

У обоих произведениях природа как бы оплакивает горе людей. Похороны отца Алеши были в дождливый день. «Скользкая,



липкая земля, в яме, куда опустили гроб отца, было много воды». В романе «Униженные» в день смерти Сагуры начался дождь с грозой, хотя до этого долгое время стоял нестерпимой зной. «Впервые за лето редкие крупные капли, горькие, как слезы Сагуры, начали избивать рассохшуюся пыльную землю, пролились на исстрадавшуюся землю».

Смерть родных людей круто изменила всю жизнь маленьких Алеши и Емеш. Им обоим пришлось пережить все тяготы сиротской жизни: Алеше пришлось испытать на себе жестокость дядей, деда, отчима, а Емеш – мачехи, женившись на ней, отец отдаляется от детей. Совпадает в произведениях и то, что перемены в судьбах маленьких героев связаны с переездом. Алеша переезжает к дедушке и бабушке, а семья Байгильде агая перебирается в аул Илсегул, к его второй жене, мачехе детей. С потерей родного дома, который сгорает дотла, дети теряют прежнее ощущение стабильности жизни, полноты семьи, родного гнезда.

Новые люди, новые впечатления. Алеша начал жить у родных людей, но это вовсе его не радует, для них Алеша остался «пермяком». У него товарищей не было, ребята к нему относились враждебно, он был совсем одиноким. Когда Алеша выходил на улицу, мальчики кричали «Бырь пришел!».

Перемену, связанную с переездом, особенно остро ощущают дети Байгильде. Пусть они жили бедно, но жили они в своем родном доме, у них были любящие отец и мать, друзья, с которыми они росли. В новом месте мачеха и дети богатых прозвали Емеш и Янеш «приблудышами», «чужаками», «цыганским отродьем».

Забор в обоих произведениях – это отделяющий элемент двух миров: бедности от богатства, счастье от несчастья. Алеша наблюдал через забор дом Овсянниковых. Ему казалось, что в этом доме течет особенная, таинственная жизнь, похожая на сказку. Ему нравилось наблюдать через щель на то, как хорошо, весело и дружно играют трое детей в незнакомые игры, нравились их костюмы, хорошая заботливость друг о друге. Они никогда не ссорились. Это особенно восхищало Алешу.

А Емеш и ее подружки, наблюдая через забор двор старшины Собхана, видят, как протекает своим чередом праздная жизнь богатых. У девочек взгляды были прикованы к дочери бая, которая играла на крыльце с большой, как настоящий ребенок, фарфоровой куклой. Завороженные чудной картиной, они не могли отвести глаз. От этой картины Емеш стало очень грустно. Тот мир, через забор, для Алеши и Емеш был неведомым красочным миром. А их действительность была обыденной, серой, наполненной трудом.

У Горького видим, что Алеша летом в саду устроил себе полуигрушечный, но иной, чем в семье деда, «мирок». Набирал много цветных стекол и осколков посуды, вмазывал их глиной в щели между кирпичами, когда в яму смотрело солнце, все это радужно разгоралось. В романе Зайнаб Биишевой девочки строили маленький домик из разных досок, убирали его кусками тканей, приглашали друг друга в «гости». В обоих произведениях в своих играх дети стараются опоэтизировать жизнь и быт взрослых, их отношения.

В отличие от Емеш, детство Алеши протекает в городе. У него дни проходили или дома, или во дворе. Двор для него – продолжение дома. Зимними днями Алеша сидел дома. Наблюдал зимний город через окно. Вот как описаны впечатления героя: «Стертые вьюгами долгих зим, омытые бесконечными дождями осени, слинявшие дома нашей улицы напудрены пылью. Людей немного, двигаются они не спеша… Душная теплота поднимается ко мне… Скучно: скучно как-то особенно, почти невыносимо; грудь наливается жидким, теплым свинцом, он давит изнутри, распирает грудь, ребра; мне кажется, что я вздуваюсь, как пузырь, и мне тесно в маленькой комнатке, под гробообразным потолком».

Ограничены общения с природой у героев Зайнаб Биишевой зимой: не имея теплой одежды, Емеш с осени была вынуждена находиться дома, выполнять тяжелую работу.

Но тяжелые условия жизни не ожесточили детей, у них сохранились человеческие отношения к обиженным, угнетенным. Алеше грустно и неприятно видеть, как местные мальчишки издеваются над Игошей, блаженным (сумасшедшим) человеком,



дразнят, бьют его камнями, обижают бедного человека. Вот его признание: «… я не мог терпеть, когда ребята издевались над пьяными нищими и блаженным Игошей Смерть в Кармане». Слабый Игоша не может постоять за себя.

В романе «Униженные» выведен образ юродивого Ульябая. «Он учился и в Бухаре, и в Самарканде; все хотелось ему постигнуть тайный смысл бытия, возвыситься до понимания деяний Аллаха; но, как ни старался, так и ничего и не познал – лишь рассудок потерял». И всегда, как только он покажется на улице, так его тут же обступают безжалостные мальчишки. Они неотступно ходили за ним по пятам, дразнили, а те, что позлее, даже науськивали на него собак». У Емеш это вызывало сострадание. Она ни за что не смогла бы дразнить его, как другие дети.

Символичны финалы произведений. «И пошел я в люди», – этими последними словами «Детства» как бы открылась дверь в дальнейшую жизнь Алексея Пешкова, открылась в огромный мир. Роман «Униженные» завершается трагической картиной гибели сестры Янеш у обрыва Ика во время обстрела врагами, дело происходит в Первую мировую войну. Иштуган и Айхылу поднимают и несут убитую осколком ядра Янеш. Этим эпизодом автор наглядно показывает несовместимость войны и детства, противоестественность войны. Сама природа оплакивает смерть ни в чем неповинного ребенка: «Черная туча, что на исходе дня поднялась над Девичьей горой и только краешком задела тогда Ильсегул, теперь возвратилась назад и в наступавшим сумраке, пробиваемым только молниями, с грохотом разразилась проливным дождем. Казалось, природа, разделяя горе и радость людей, спешила омыть и очистить от грязи лик земли».

Читая эти два произведения, чувствуем, что эти книги близки каждому человеку, они вечны. В этих книгах авторы говорят о ценности человеческой жизни, о ее назначении – о том, что будет всегда волновать человека. По норме: детство – волшебный мир, где должны сбываться мечты, желания маленького человека. Люди понимают эту истину только во взрослом возрасте.

# ЙӨКМӘТКЕ


*Абдуллина А. Х.*

**Туған телдә һайлау осоронда башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡыуға ылыҡтырыу алымдары ............... 3**

*Байышева А. Ғ.*

**Туған телдә «Карточкалар ярҙамында уҡытыу» методикаһына таянып өйрәтеү ........................................ 13**

*Исмәғилева Г. И.*

**«Исем. Сифат. Алмаш. Һан.» ............................................. 23**

*Аблаева А. Ә.*

**Башҡорт теле һәм әҙәбиәт дәрестәрендә проблемалы уҡытыу технологияһын ҡулланыу ................................. 46**

*Ғабдуллина Л. М.*

**Өйрәнәм. Өйрәтәм. .............................................................. 54**

*Ғәзизова Ә. Р.*

**Башҡорт теле дәрестәрендә коммуникатив компетентлыҡ формалаштырыуҙың эффектив алымы булараҡ тематик телмәр үҫтереү карталары................. 61**

*Собханғолова З. К.*

**«Лингвокультурология – рухи мираҫ шишмәһе» ......... 75**

*Ҡәҙерғолова Л. Ә.*

**Башҡорт теле дәрестәрендә уҡыусыларҙың телмәрен үҫтереү ................................................................ 93**

*Фәйзуллина Р. Ә.*

**«Башҡорт теле һәм әҙәбиәте» дәреслегенә эш дәфтәре ...................................................... 110**

*Шәрәфетдинова Д. М.*

**Башҡорт телен эре блоклап (терәк конспекттар) уҡытыу алымдары ....................................................... 129**

*Якупова Л. Н.*

**Әҙәбиәт дәресендә уҡыусыларҙың эмоциональ интеллекты үҫеше һәм формалашыуының эш системаһы ....................................................................... 146**

*Шәрәфетдинова З. Т.*

**Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә тәржемә эше аша күп телле шәхес тәрбиәләү .............................. 157**

*Әминева Л. И.*

**Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә монологик һөйләү телмәрен үҫтереү.................................................... 167**

*Әбхәлимова З. С.*

**Әҙәби әҫәрҙәрҙе өйрәнгәндә сағыштырыу алымының эҙләнеү эшендәге роле ................................. 177**

2010 йылдың 29 декабрендәге 436-ФЗ һанлы
Федераль ҡанунға ярашлы 0+
В соответствии с Федеральным законом
от 29 декабря 2010 года №436-ФЗ 0+

# ВОЛШЕБНЫЙ БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК

Урта дөйөм белем биреү ойошмаларында башҡорт телен
өйрәнеү буйынса методик эшкәртмәләр

Автор проекта – Аюпов Р. Р., председатель Ассоциации учителей
башкирского, русского (родного) и других родных языков и литератур
Республики Башкортостан

За достоверность информации и содержание статьи
ответственность несут авторы

Подписано в печать ??. 08. 2021 г.
Формат издания 60х84/16
Гарнитура Times New Roman
Тираж ?00 экз.
Заказ № ???

Отпечатано в издательстве «Самрау»
450022, Уфа, ул. Губайдуллина, 19/5
Тел. +7 (347) 287-48-43